# Ағиҙел

Өфө,
апрель
2011

4(1056)

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Мөхәмәт БАҒЫШАЕВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат ҠӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Ноғман МУСИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Әмир ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Ләйсән Марапанова *(өлкән мөхәррир)*,
Харис Сәғитов (баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары),
Гүзәлиә Тутаева, Әлфиә Махиянова *(корректорҙар)*,
Рәйсә Ҡамалетдинова, Ләйсән Ишембәтова *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 авгусында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС-37206.

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 01.04. 2011. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 4 276 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0048.11.

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel.pressarb.ru.

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке
Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты»
дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии
Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**© «Ағиҙел», 2011 (4,1056)**

## БЫЛ ҺАНДА:


ШИҒРИӘТ

**Тойғон.** Осрашыу. П о э м а . ............................................................5
**Риф Мифтахов.** “Эҙләмә серҙе, шағир, тик күк йөҙөнән...”
Ш и ғ ы р ҙ а р . ..................................................................................15
**Ғәлим Дәүләди.** Нөгөш шишмәләре. Ш и ғ ы р ҙ а р . ......................20

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Әнүәр Ғибәҙәтов.** Ҡасҡы. П о в е с т ь . ...........................................25
**Ғайса Хөсәйенов.** Мәлдәр, әмәлдәр, ғәмәлдәр.
П а р с а л а р ,  б а р с а л а р . ..........................................................65

ЖУРНАЛ УҠЫУСЫЛАР ИЖАДЫ

**Хәҙисә Юдаева.** Мираҫ; **Хәлиҙә Шәйәхмәтова.** Хыял; **Әлфиә Садиҡова.** Көҙгө моң; **Нәйлә Әйүпова.** Бәхет өсөн ни кәрәк?
Ш и ғ ы р ҙ а р . ..................................................................................95

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Рәшиҙә Ғиззәтуллина.** “Урал батыр” эпосында йога тәғлимәте. ..99

*Башҡортостан яҙыусыларының сираттағы съезы алдынан*

“Әҙәбиәт тормош дәреслегеме бөгөн?”
И н ш а л а р  б ә й г е һ е н ә  й о м ғ а ҡ л а у . ..................................118

БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

**Ләлә Бейешева.** “Мин көсөмдө аҡтығына тиклем бирер инем ғәзиз халҡыма” *(Әкрәм Бейештең тыуыуына 85 йыл)*. ............136

ӘҘӘБИ МИРАҪ

**Мәжит Ғафури.** Уҡыйыҡ, шәкерттәр! Ш и ғ ы р ҙ а р . ..................142

ПУБЛИЦИСТИКА

**Ризван Хажиев.** Әйле башҡорттары: кисә, бөгөн, иртәгә. ..........145
**Әлим Зарипов.** Табын иле. ............................................................157

РУХИ ХАЗИНАЛАР

**Фәнирә Ғайсина.** Юлға бәйле ырым-ышаныуҙар, тыйыуҙар. .....167

ЯҘМЫШТАН ҺЫҘМЫШ ЮҠ

**Мәғсүм Гәрәев.** Ҡаты һынауҙар аша. ..........................................171

САТИРА ҺӘМ ЮМОР

**Мар. Сәлим.** Ю м о р е с к а л а р . ..................................................179

*Союзыбыҙҙа – яңы ағзалар*

“АҒИҘЕЛ”ГӘ ХАТТАР КИЛӘ

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПОЭЗИЯ

**Туйгун.** Встреча. *Поэма.* **Р. Мифтахов**, **Галим Давледи.** *Стихи.*

ПРОЗА

**А. Гибадатов.** Беглец. *Повесть.*
**Г. Хусаинов.** Мгновения. *Миниатюры.*

ТВОРЧЕСТВО НАШИХ ЧИТАТЕЛЕЙ

**Х. Юдаева, Х. Шаяхметова, А. Садикова, Н. Аюпова.** *Стихи.*

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

**Р. Гиззатуллина.** Йога в эпосе «Урал-батыр».

*Встречая съезд писателей Башкортостана*

Является ли литература учебником жизни? *Итоги конкурса школьных сочинений.*

НАШ КАЛЕНДАРЬ

**Л. Биишева.** «Я все силы отдам родному народу…»
*(85 лет со дня рождения Акрама Биишева).*

ЛИТЕРАТУРНОЕ НАСЛЕДИЕ

**М. Гафури.** Давайте, учиться! *Стихи.*

ПУБЛИЦИСТИКА

**Р. Хажиев**. Айлинские башкиры: вчера, сегодня, завтра.
**А. Зарипов.** Табынский край.

ДУХОВНЫЕ СОКРОВИЩА

**Ф. Гайсина.** Поверья, запреты, связанные с дорогой.

ЭТО – СУДЬБА

**М. Гареев.** Сквозь суровые испытания.

САТИРА И ЮМОР

**Мар. Салим.** Юморески.

*В Союзе писателей – новые члены*

ПИСЬМА В «АГИДЕЛЬ»

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА…

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары —292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтерия — 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.



**ТОЙҒОН**

# ОСРАШЫУ

**ПОЭМА**

*Һаңъырауҙар баҙарымы? Ғәжәп!..*
*Була микән шундай баҙар ҙа?*
*Хәтәр булмаһа ла, хәтирәләр*
*Әйҙәй тағы әллә ҡайҙарға.*
*Иҫкә төштө алыҫ бер сәфәрем,*
*Бер хикәйәт кеүек ул сәфәр.*
*Бер уйлаһаң — күҙҙе йоморлоҡ ул,*
*Бер уйлаһаң — күҙҙән ут сәсрәр —*
*Шулай тыуҙы минең был әҫәр.*

** *

*Үткән быуат...*
*Һикһәненсе йылдар...*
*Алматы...*
*Йәй...*
*Бында мин ҡунаҡ.*
*Йола шулай ҡуша: ҡунаҡ кеше*
*Булырға бит тейеш бик тыйнаҡ.*
*Тыйнаҡлығым баштан ашмаһа ла,*
*Төшөрмәнем түбән — кендеккә.*
*Яҙа баҫһаң, һораясаҡ улар:*
*— Ҡайһы милләт улы? Кемдеке?*

---

*Тойғон (Риф Ғәлим улы Тойғонов) 1946 йылда Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ районының Аҡсура ауылында тыуған. Өфөлә — БДУ-ны, Мәскәүҙә Әҙәбиәт институтының Юғары әҙәби курстарын тамамлай. Республика ваҡытлы матбуғат баҫмалары редакцияларында, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия һәм Өфө «Нур» татар дәүләт драма театрҙарында, Яҙыусылар берлеге идараһы аппаратында эшләй.*

*Байтаҡ шиғри йыйынтыҡтар авторы.*

*Башҡортлоғом,— ғорурлыҡтан бигерәк,*
*Булды миңә намыҫ өлгөһө.*
*Алматыға аяҡ баҫҡас, шуға*
*Уйҙарҙың да тыуҙы төрлөһө.*
*Дөйөм илдә* йәшәү бәхете бит*
*Төштө ул саҡ беҙҙең өлөшкә.*
*Алматының үҙен оҡшаттым мин*
*Туй күлдәге кейгән кәләшкә.*
*Бер уйлаһаң, ошо донъя йәннәт*
*Баҡсаһымы әллә Алланың?*
*“Алма” һүҙен алған баш ҡаланың*
*Алмалары бешә алланып...*

*Һүҙ ҡеүәһе етмәй кеүек бында*
*Барыһын да ихлас яҙырға.*
*Һоҡланыуым мине алып керҙе*
*Күҙҙең яуын алған баҙарға.*
*Баҙар — баҙар инде...*
*Уның да бит*
*Үҙ тәртибе, даны, үҙ сәме.*
*Алыш-биреш иткән ерҙә, хәйер,*
*Башҡасараҡ тормош үлсәме.*
*Был үлсәмгә башҡорт һыя алмай —*
*Әүәҫлек юҡ ундай сауҙаға.*
*Гөрләй баҙар...*
*Ығы-зығылары*
*Алып ҡына китмәй ҡайҙарға...*
*Бөтәһе лә таныш.*
*Ана, бер ҡарт:*
*— Алма ал! — тип мине саҡыра.*
*Ҡул арбаһы һөйрәп килгәндәре:*
*— Юлдан кит! — тип үсал ҡысҡыра.*
*Яҙғы ташҡын ише ҡайнай баҙар,*
*Мин төпкәрәк үтәм юл биреп.*
*Хәйер һораусыһы еңдән тарта —*
*Күҙҙәремә ҡарай тилмереп.*
*Ситтән килеүемде тойомлайҙыр —*
*Ҡыланышы шуны һиҙҙерә.*
*Аңлап ҡара: тормоштомо кеше,*
*Кешенеме тормош биҙҙерә?*
*Кешеләргә бәйле был һорауға*
*Ҡайтасаҡмын әле йыш ура.*
*Яман кәсеп өсөн баҙар ҡулай,*
*Ауыҙ асып торһаң — эш харап!*

*СССР күҙ уңында тотола.

*Тик йыуатыу өсөн әйтәйемме:*
*— Бөтәһе,— тип,— Хоҙай иркендә.*
*Ҡыҙа баҙар...*
*Ләкин был мәхшәргә*
*Ҡолаҡ һалмай кеүек бер кем дә.*
*Һәр кем мәшғүл үҙ хәстәре менән —*
*Үҙ ҡануны сауҙа эшенең.*
*Юғары аң кимәленә әммә*
*Еталмаған сағы кешенең.*
*Юҡ, кешенең түгел, кешелектең!*
*— Ҡасан етер?*
*— Тимәк, юл урау...*
*Баҙарҙағы бер әҙәмде генә*
*Уйға һалһа ине был һорау.*
*Тик һалмай шул.*
*Кемгә файҙаһы бар*
*Тәнҡитләүҙән анау ҡояшты.*
*Шул ҡояштай балҡып, олпат ағай*
*Урыҫсалап миңә һүҙ ҡушты:*
*— Ҡайҙан килдең? Нимә кәрәк, туған?*
*(Оҡшамаған үҙе ҡаҙаҡҡа.)*
*Шикләндем мин башта: әләктермәк*
*Буламы, тип, әллә тоҙаҡҡа.*
*Һорауына һорау өҫтәгәс мин,*
*Ялғанғандай булды һүҙебеҙ:*
*— Башҡортҡа бик оҡшап тораһығыҙ,*
*Яҡташ түгелме һуң үҙегеҙ?*
*— Юҡ, уйғыр мин,— тине ул, йылмайып, —*
*Уртаҡлыҡ күп беҙҙең хал(ы)ҡтарҙа.*
*Әле килеп, ошо хәҡиҡәтте*
*Иҫбатларға сәбәп юҡтыр ҙа...*
*Әлбиттә, юҡ.*
*Шуға:*
*— Эйе,— тиеп*
*Ҡеүәтләнем, ихлас баш ҡағып.*
*Ҡыланышы уның үтә тыныс —*
*Бармай кеүек һис тә ашығып.*
*— Һин кемделер көтәһеңме әллә? —*
*Һүҙ яңыртты ҡабат танышым.*
*— Юҡ! Юҡ! — тиеп кире ҡаҡҡан булдым,*
*Тик яһалма сыҡты тауышым.*
*Яуабымды иғтибарға алып,*
*Күҙ һирперлек түгел һағайып.*
*Кейгән кейеменә ҡарағанда,*
*Ул баҙарҙа эшләй, моғайын.*
*Юрауымды үҙе дөрөҫләне,*
*Ит сабыусы икән ул бында.*

Ә исеме — Кәрим...
— Күп юғалтыу
Күсерҙем,— ти, — тормош юлында...
Бүлгеләнгән һәм таралған халыҡ
Фажиғәһе биләй уйымды.
Үлемгә сик ҡуйып булмағандай,
Һис туҡтатып булмай тыуымды.
Ни әйтһәм дә, яңылышырмын һымаҡ,
Ауыҙ йомоу шуға хәйерле.
Һәр милләттең әммә күңелендә
Аҡбуҙаты булһын эйәрле.
Кәрим дә бит быны аңлар йәштә —
Һыбай елер саҡы үтмәгән.
“Эргәмдән ник һаман китмәй”,— тиһәм,
Һөйләр һүҙе уның бөтмәгән.
— Алтмышынсы йылдар башында,— ти,—
Хеҙмәт иттем һеҙҙең Өфөлә.
Хәтеремдә урамдарҙа үҫкән
Йүкәләрҙең сәскә еҫе лә...
Бына нисек икән?!
Аптырауҙан
Ҡалдым кеүек бер аҙ юғалып.
Күҙ алдында шул саҡ бер туташтың
Нурлы йөҙө китте сағылып.
Ҡаш һикертә үҙе...
Тәнен һатып,
Аҡса эшләйҙер ул, ахыры.
Бөйөктәре булған был донъяның
Нисек булмаһын, ти, бахыры.
Был — хәҡиҡәт.
Кәрим әйткәнсә, тим,
Иҫбатлауҙың юҡтыр кәрәге.
Үкенесле: кешеләрҙең иман
Үрендә тик ҡала һирәге.
Ә үндайҙар күпме икән бында?
(Күҙ уңында тотам баҙарҙы.)
Хас ҡырмыҫҡа иләүеме ни ул —
Солғап ала тағы уйҙарҙы.
Ошо баҙар үҙе — оят белмәй
Алдашыуҙың тупаҫ өлгөһө.
Отоу-отолоуҙан кемдер илай,
Ә кемдеңдер килә көлгөһө...
Кәрим өсөн былар — ғәҙәти хәл,
Иҫе китеп бармай, бошоноп.
Был тормошҡа бәйле һорауҙарҙан
Мәңге булмаҫ миңә бушанып.
Йыш һиҙҙерә үҙен йәшәйештә —

*Тиҙ уңалмай йөрәк яраһы.*
*Ғүмер буйы эҙләр яуаптарҙа*
*Ағынан күп унда ҡараһы.*
*Иғтибарҙы биләп, шау-шыу ҡупты —*
*Ҡарамайһың нисек әйләнеп.*
*Бер урыҫы:*
*— На похмель дай! — тиеп*
*Кешеләргә йөрөй бәйләнеп.*
*Баҙарға хас йәмһеҙ күренеш был —*
*Кәрим уны ҡыуып ебәрҙе.*
*Үҙе әйтә:*
*— Йыш тапыйһың бында*
*Ошоға тиң золом-йәберҙе.*
*Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ, тигәнгә*
*Ни өҫтәргә хуплап тағы ла?*
*Кем буталмаҫ улар араһында —*
*Баҙар буйлап халыҡ ағыла.*
*Шул ағымға ҡушылырға теләп,*
*Хушлашмаҡсы булдым үҙем дә.*
*— Ашыҡма! — тип ҡырт киҫкәндә Кәрим,*
*Ялбарыу ҙа тойҙом һүҙендә.*
*Әле уның ял ваҡыты икән,*
*Сәй эсергә ихлас саҡырҙы.*
*Шул саҡ кемдер беҙгә ҡаршы яҡтан:*
*— Тот ҡараҡты! — тиеп аҡырҙы.*
*Ҡысҡырыш һәм һүгенеүҙәр ҡатыш*
*Гөрләп алды баҙар бер мәлгә.*
*— Боҙолдо халыҡ, — тип һөйләнеп, Кәрим*
*Алып керҙе мине бүлмәгә.*
*Тамаҡ ялғар урын икән бында —*
*Тынып ҡалды ҡолаҡ шау-шыуҙан.*
*Тик барыбер үҙем уңайһыҙлыҡ*
*Кисерҙем мин һаман ҡаушауҙан.*
*Сәй әҙерләй Кәрим...*
*Тәм-томдарын*
*Килештереп теҙә өҫтәлгә.*
*Ә мин хужа күңелен күрер өсөн*
*Тейешмендер бер һүҙ өҫтәргә...*
*— Бында еләҫ икән, — тигән булдым,—*
*Баҙарҙа бит тынсыу, эҫе лә...*
*Сәйен һоноп, Кәрим һорап ҡуйҙы:*
*— Үҙгәргәндер инде Өфө лә?*
*— Йыл үҫәһен ай үҫә ул хәҙер,*
*Сағыштырып, — тинем, — әйткәндә.*
*Уның беҙҙә һалдат булыуына*
*Ике тиҫтә ваҡыт үткән дә...*
*Йәшлегенең шул осорон әле*

*Иҫкә алғандай ул һағынып.*
*Шуғалыр ҙа алсаҡ ҡарашында*
*Моңһоулыҡ бит ҡалды сағылып.*
*Йыуатыпмы үҙен әйтте Кәрим:*
*— Яҙмыш илтмәҫ ирҙе ҡайҙарға?!*
*Беҙҙең баҙар ҡырыҫлығы менән*
*Оҡшамаған һеҙҙең баҙарға.*
*Аңлашыла шуға бая һинең*
*Иҫең китеп ҡарап йөрөүең.*
*Ҡешеләргә бәйле был мәхшәрҙе*
*Беренсегә, ахыры, күреүең...*
*Һүҙ аралаш үҙе ҡыҫтап ҡуя*
*Тәм-томдарҙан ауыҙ итергә.*
*Уй төйнәйем: бында күргәндәрҙе*
*Нисегерәк ҡулай әйтергә?*
*Танышымдың ихласлығы беҙҙең*
*Һөйләшеүгә бирә еңеллек.*
*— Ҡешеләге битарафлыҡ мине*
*Ғәжәп итте,— тинем,— иң элек.*
*Көлөп ҡуйҙы Кәрим.*
*— Сөнки, — ти ул, —*
*Үҙ яғына һәр кем ҡайыра.*
*Шуға бәйле уртаҡ һорауҙарҙан*
*Һүҙҙәребеҙ яйлап ҡуйыра.*
*— Тормошта ла, хәйер, шундай уҡ хәл:*
*Әҙәм ҡулы кәкре үҙенә.*
*Шулай тигән саҡта Кәримдең дә*
*Борсолоуы сыҡты йөҙөнә.*
*Ҡеүәтләнем мин дә:*
*— Бер-беренә*
*Һаңғырауҙар улар, биллаһи.*
*Ә шулай ҙа — инҡар итеп булмай —*
*Һәр кем өсөн тормош илаһи.*
*Кәрим хуплай:*
*— Эйе, һаңғырауҙар!*
*Мәғәнә бар, дөрөҫ аңлаһаң.*
*Шуға бәйле бер әкиәт һиңә*
*Һөйләр инем, әгәр тыңлаһаң...*
*Ризалыҡты биреп баш ҡағыуға,*
*Һүҙгә күсте Кәрим яй ғына:*
*— Ҡашғар тигән батшалыҡтың борон*
*Бер ҡалаһы булған бай ғына.*
*Әммә унда тик һаңғырау халыҡ*
*Йәшәгән, ти, быуын-быуынға.*
*Ишетмәгәс, бергә аралашыу*
*Тура килгән шуға ҡыйынға.*

*Шул арҡала бик йыш низағ ҡупҡан —*
*Йыш татыған халҡы йәберҙе.*
*Һәр береһе үҙе нисек теләй,*
*Шулай ҡабул иткән хәбәрҙе.*
*...Ошо ҡала кешеһенең бер мал*
*Өс кәзәһе, имеш, юғалған.*
*Ҙур ҡайғыға тарып, шуларҙы ул*
*Эҙләп табыр өсөн юл алған.*
*Йөрөй торғас, килеп сыҡҡан был ир*
*Ер эшкәрткән әҙәм янына.*
*Өс кәзәһе юғалыуын һөйләп:*
*— Күрһәң әйт! — тип уға ялына.*
*Тегенеһе туҙынып, ти, киткән:*
*— Нисек булһын инде һинеке?!*
*Анау арыҡ тәңгәленә тиклем*
*Биләмә-ер тотош минеке!*
*Атайымдан мираҫ. Күрше шаһит*
*Һинең ҡыҫылышың юғына...*
*Ошолай ул һөйләгәндә бик йыш*
*Ҡул һелтәгән арыҡ яғына.*
*Был ир иһә, уның ҡыланышын*
*Аңлағанға күрә үҙенсә,*
*Шул арыҡҡа табан елдәй етеҙ*
*Елдергән, ти, әйтһәк беҙҙеңсә.*
*Ысынлап та, арыҡ буйында ул*
*Өс кәзәһен табып һөйөнгән.*
*Береһенең әммә шунда аҡһаҡ*
*Булыуын, ти, күреп көйөнгән*
*Һәм уйлаған: "Нисек табыр инем,*
*Осратмаһам теге әҙәмде.*
*Шуға ла мин уға, рәхмәт әйтеп,*
*Бүләк итәм аҡһаҡ кәзәмде".*
*Кәзәләрен ҡыуып килтергән дә*
*Ер эшкәрткән әҙәм янына,*
*Уйлағанын әйткән. Тегенеһе*
*Туҙынып, ти, киткән яңынан:*
*— Күрмәнем мин һинең кәзәләрҙе,*
*Йәнгә тейеп, бушты һөйләнмә.*
*Береһенең ҡаза күреүендә*
*Ғәйебем юҡ, миңә бәйләнмә!*
*Был ир иһә үҙенекен тылҡый:*
*— Ебәрмәйек инде күпкә һүҙ.*
*Бүләк өсөн аҡһаҡ кәзә еткән,*
*Ҡәнәғәт бул шуға үпкәһеҙ.*
*Ҡысҡырыша торғас, көрмәкләшеп*
*Киткәндәр, ти, улар асыуҙан.*

*Былдай мәлдә нимә тотҡарлаған*
*Ҡәзәләрҙе ҡурҡып ҡасыуҙан?*
*Оло юлдан шул саҡ бер һыбайлы*
*Үтеп барған туҙан уйнатып.*
*Уны күреү ике һаңғырауҙы*
*Ебәргән, ти, ҡапыл айнытып.*
*— Ғәҙел баһа беҙгә бир һин! — тиеп*
*Һыбайлыға улар йүгергән.*
*Ҡәзәле ир иң беренсе булып*
*Үҙ хәсрәтен һөйләп өлгөргән*
*Һәм һораған аҙаҡ: "Бүләк өсөн*
*Аҡһаҡ кәзә уға таман да?*
*Башҡаһына юҡҡа өмөт итә —*
*Йөрәк әрней шуға һаман да..."*
*Ер эшкәрткән ир ҙә ҡыҙып киткән,*
*Асыуынан үҙен тыялмай:*
*— Ҡәзәмде һин аҡһаҡ иткәнһең, тип*
*Бәйләнә бит миңә оялмай!*
*Һөйләнеп ул шулай һыбайлының*
*Йүгәненә килеп тотонған.*
*Аңғармаҫтан теге ҡурҡып киткән —*
*Уғрылыҡта, гүйә, тотолған.*
*— Ат минеке! Юҡ, бирмәйем һиңә,*
*Ал ҡулыңды! — тигән һыбайлы.*
*Өсәүләшеп дөмбәҫләшеү өсөн*
*Бәхәс ҡупҡан тағы уңайлы.*
*Береһе лә әммә йоҙ(о)роҡтан*
*Тарымаған бәлә-ҡазаға.*
*Аңдарына килгәс, юлланғандар*
*Ғәҙеллек, ти, эҙләп ҡазыйға...*

*...Ишек шаҡыу булде Ҡәрим һүҙен.*
*Килеп керҙе ҡаҙаҡ йәйелеп*
*Һәм, йылмая биреп, икебеҙҙе*
*Сәләмләне бер аҙ эйелеп.*
*Хужаһының әмерен ул үтәп,*
*Килгән икән ғәҙәт буйынса.*
*Ит сабыусы өсөн былдай йомош*
*Ғәжәп түгел, минең уйымса.*
*Һүҙ бөреккәс, ҡаҙаҡ сығып китте,*
*Тәкдим иткән сәйҙән баш тартып.*
*— Ашығалыр,— тинем, уңайһыҙлыҡ*
*Кисереүен уның йомшартып.*
*"Бармы әле ваҡыт?"— тиеп, ахыры,*
*Сәғәтенә Ҡәрим күҙ һалды.*

*Өҙөлөп ҡалған әкиәтте миңә*
*Һөйләр өсөн ҡабат һүҙ алды.*

*...Оло хөрмәт менән ҡаршылап, ти,*
*Өсөһөн дә ҡазый ҙурлаған.*
*Һәр береһе үҙен хаҡлы һанап,*
*Бер-береһен улар хурлаған.*
*Тыңлап ултырған да әйткән ҡазый:*
*– Бер үк хәбәр һөйләй һәммәгеҙ.*
*Яңы Ай тыуғанын күргәс, тимәк,*
*Ғәйет еткән, юҡҡа көймәгеҙ!*
*Үҙҙәренсә аңлап, быларҙың да*
*Ҡыуаныстан ауыҙ йырылған.*
*"Ярашырға ҡуша беҙгә",– тиеп*
*Ҡул бирешеп улар ай(ы)рылған.*
*Ҡатынына хәбәр иткән ҡазый:*
*– Иртәгә бит ғәйет – бул әҙер!*
*Ә уныһы:*
*– Шатлығымдан,– тигән,–*
*Ҡанатланып осам мин хәҙер!*
*Ҡыҙына ла сискән шатлығын ул:*
*– Ебәк күлдәк ал,– ти,– атайың.*
*Был бит – минең бик күптәнге хыял,*
*Баҙар юллап йөрөп ҡайтайым...*
*Хас әсәһе, эй, ҡыуанып ҡыҙый*
*Һүҙ ҡушҡан, ти, аҙаҡ колона:*
*– Атам-әсәм риза: мин кейәүгә*
*Сығам тиҙҙән батша улына.*
*Ә ҡол ҡатын уға рәхмәт әйткән,*
*Күкрәгенә ҡуйып ике ҡул:*
*– Ҡырҡ йыл көттөм сарсап был хәбәрҙе,*
*Мин ирекле, тимәк, түгел ҡол!*

*– Бына шулай,– тиеп әкиәтен*
*Тамамланы Кәрим, сәй ҡойоп.*
*Ишараһын яҡшы аңланым мин,*
*Һоҡланыуға бәйле хис тойоп.*
*Күсерештә әммә сама булһын,*
*Күп кәрәкмәй кәйеф боҙорға.*
*– Һеҙ һөйләгән һаңғыраулыҡ,– тинем,–*
*Күскән кеүек хәҙер баҙарға!*
*Шул юҫыҡта һүҙҙәр дауам итте,*
*Ихлас хушлаштыҡ беҙ һуңынан.*
*– Мине бында табырһың,– ти Кәрим,–*
*Килә ҡалһаң әгәр яңынан...*
*...Алматыға ҡабат юл төшмәне –*

*Йүгереп барыр ара түгел дә.*
*Утыҙ йыллап ошо осрашыуҙың*
*Иҫтәлеге йөрөй күңелдә.*
*Бына тағы уны иҫкә алдым,*
*Уртаҡ уйҙар аша үткәреп.*
*Заман инде егерме беренсе*
*Быуат йөгөн бара күтәреп.*
*Ҡаҙағстан хәҙер — айырым дәүләт,*
*Кем уйлаған шулай булыр тип.*
*СССР-ға бәйле төрлө һорау*
*Күңелемде ала болартып.*
*Ғәжәпме ни шуға милләтемдең*
*Киләсәге ҡуйһа һағайтып.*
*Рәсәй үҙе көн күрә бит бөгөн*
*Мут баҙарҙа нефть, газ һатып.*
*Аяныс хәл...*
*Быны аңлап ҡара:*
*Ғүмер итмәһәк тә ҡоллоҡта,*
*Ниңә беҙҙән ер байлығы һатып*
*Алыусы ил йәшәй муллыҡта?*
*Ә беҙ һаман артта һөйрәләбеҙ,*
*Ҡаҙна талау бара ярышып.*
*Тик фашлау юҡ. Киреһенсә, улар*
*Бер-береһен яҡлай тырышып.*
*Берҙе һөйләп, икенсене эшләү —*
*Аптыратмай хәҙер бер кемде.*
*Шуға ла, тим, нисек иҫләмәйһең*
*Әкиәтен уйғыр Кәримдең?*
*Ул һөйләгән һаңғыраулыҡ әле*
*Күскән кеүек тоям Ватанға.*
*Хәрәм байлыҡ арта...*
*Һис хөрмәт юҡ*
*Күкрәк көсө менән тапҡанға.*
*Йөрәк һыҙлап, оҡшатамын илде*
*Алматыла күргән баҙарға.*
*Өс тиҫтә йыл үткәс, насип булды*
*Ошо хаҡта әрнеп яҙырға...*
*Бөйөк Рәсәй... Рәсәй — бөйөк баҙар...*
*Күпме барыр былай ҡаңғырыу?*
*Бер-береһен байҙар аңлай ҙа бит,*
*Күпселегә илдең — һаңғырау...*

2010 йыл.



**Риф**
**МИФТАХОВ**

## *“ӘҘЛӘМӘ СЕРҘЕ, ШАҒИР, ТИК КҮК ЙӨҘӨНӘН...”*

### *Урал төнө*

*Бына тағы Уралыбыҙ күген*
*Мөъжизәле бер төн ҡапланы:*
*Көмөш тәңкәләрҙән йондоҙ теҙгәс,*
*Етегәнде — башҡорт ҡыҙҙарының*
*Һылыулығы итеп алҡаны*
*Тағып ҡуйҙы. Күктең уртаһында*
*Ай балҡытты — Ер күк ҡалҡаны.*
*Ишетелде шишмә сылтырауы,*
*Тамырҙары ҡаяларҙы ярған*
*Ҡарағайҙың ҡыңғыр шаулауы.*
*Шул саҡ күлдә сабаҡ супылданы,*
*Әллә таңды көтмәй бер ҡош һайраны...*
*Был донъяның ошо мөъжизәһе*
*Уйҙарыма уйҙар ялғаны,*
*Һәм уларҙы Тәңре аңланы:*
*Көнсығыштан Ҡояш ҡараны —*
*Ҡешелектең йәшәү алмаһы...*

---

*Риф Мифтахов (1939) Ишембай районы Кинйәбулат ауылынан. Китап нәшриәтендә, республика гәзит-журналдарында эшләй. Тиҫтәнән ашыу китап авторы.*

*Егет булып алға атланым,*
*Донъя йөгөн елгә таратып.*
*Урал төнө, гүйә, башҡорт балы,*
*Тән-йәнемде нурлай, таралып,*
*Ҡилә Ергә яңы таң атып...*

## Шағир

*Шағир, шағир... Төнөн арнау яҙҙың*
*Тик бышылдап Айға, йондоҙға.*
*Ғашиҡ булдың күпме һылыуҙарға,*
*Тик әйтмәнең быны бер ҡыҙға.*

*Ана, тағы улар серле көлә:*
*“Ҡара, — тиҙәр, — һаман тыйылмай”.*
*Юҡ, ташламам: күңел — күк йондоҙо,*
*Ә күҙҙәрем — ике ғашиҡ Ай.*

*Ижадсының уты, нуры һүнә,*
*Йәшен һанап, йәнен тыйыуҙан.*
*Ваҡыт тәҡдиренән сығалмаһа,*
*Шағир туҡтай шағир булыуҙан.*

## Илһам сәғәте

*Ҡиске, төнгө һәм иртәнге*
*Ҡоштарҙың йәне һымаҡ,*
*Әҙәм йәне лә был мәлдә*
*Моңлораҡ, һағышлыраҡ.*

*Бар оҡшашлыҡ: минең дә бит*
*Ғәҙәт-ҡылыҡ күптәнге:*
*Ҡағыҙҙағы күңел моңом*
*Ҡиске, төнгө, иртәнге.*

*Белеп булмай, бәлки, Хоҙай*
*Илаһи Йыһан көсөн*
*Бар иткәндер ижадсыға*
*Илһам сәғәте өсөн.*

## Хазина

*Аяҡ йөрөп, зиһен аңлап,*
*Күҙҙәр күреп туйманы.*
*Йәндә һынап баһаланым*
*Кешеләрҙе, донъяны.*

*Һәр заманға яраҡлашып*
*Тормош юлын ҡтмәнем.*
*Иманыма — выжданыма*
*Мин хыянат итмәнем.*

*Ҡҫрһәм дә тар күңелдәрҙән*
*Йәшәүҙең төрлө мәлен,*
*Ҡешеләрҙән ваз кисмәнем,*
*Донъянан төңөлмәнем.*

*Нәфсе-шайтан ҡоторһа ла,*
*Байлығым ҙур — ырыҫым.*
*Күңел күгемдең һаҡсыһы*
*Йән Аллаһы — намыҫым.*

*Халәтемдең, һәләтемдең*
*Асылы — Иман булды.*
*Һатылмаҫ хазина менән*
*Үтермен һуңғы юлды.*

## Алмағастар

(Аҡманай дәфтәренән)

*Алмағастар тағы сәскә атты,*
*Ҡыр-урмандар — бәлзәм йәнеңә.*
*Бал ҡорттары — ерҙең ҡот-ырыҫы*
*Морон төрткән шәрбәт тәменә.*

*Баҡса уртаһында баҫып торам,*
*Арыналмай йәнем бер уйҙан:*
*Яҙҙың, йәйҙең, көҙҙөң — миҙгелдәрҙең*
*Ҡайһыһында икән мин булмам?*

*Булмаһам да, ергә ерек ергән*
*Баҡсам ҡалыр — ергә иҫтәлек.*
*Алмағастар ап-аҡ сәскә атыр*
*“Теге донъя” ларҙа иҫләрлек.*

***

*Һайрағыҙсы ҡҙәктәрҙе өҙөп,*
*Әүәлгесә таңын, һандуғастар.*
*Булыр микән ҡуныр талдарығыҙ,*
*Тыуыр микән һеҙҙе тыңлаусылар?*

Килде ергә яңы заманалар:
“Төймә телле” йәнһеҙ автоматтар.
Тик шуларҙы ғына белгән йәндәр
Һандуғастың телен аңламаҫтар.

Юҡ, үҙгәрер әҙәм балалары:
Аҡһа шишмә, үҫһә гөл, ағастар.
Ҡояш ҡалҡһа, ай-йондоҙҙар баҡһа
Һәм һайраһа Ерҙә һандуғастар.

***

Майҙың төнө ятҡас ҡыр-урманға,
Һағыштарға эсем тулғанға,
Бер ынтылып ҡуйҙым гармуныма,
Үҙем белгән бер көй уйнарға.

Тик тыйылдым: күрше-тирә яғым
Әллә нимә мөмкин уйларға...
Аяҡтарым шул мәл алып китте
Таныш юлдан урман буйларға.

Барған һайын тойҙом төн шәүләһен,
Шик-шөбһәле, шомло тындарын...
Көн эсендә хәсрәттәре үтте
Көн өҫтөндә бөтә булғандың.

Тормош, һиндә күрмеш гел бәрелеш,
Һикәлтәләр аша юл тотһаң.
Ваҡ бәлә бит бер ни тормағандай,
Ҙур ҡазаға килеп юлыҡһаң...

Уй бушатып, мин яңырып ҡайттым,
Июнь төнөн, таңын күреүҙән...
Үрелергә ҡурҡам ишегемә,
Һандуғастың йырын бүлеүҙән.

## Ике ҡанат

Бер ҡанатлы булып тыуа кеше
Һәр бер ерҙә, һәммә осорға.
Мөхәббәтен тапһа, яҙған уға
Ике ҡанат менән осорға.

Эй, йәш дуҫым, рухың күкте ҡосһон,
Яҙмыш итһен ике ҡанатлы:

*Тик шул саҡта йөҙөң нурлы булыр,*
*Йәнең хисле,*
*көслө,*
*талантлы.*

*Бар кешелек, һары бәпкәләрҙәй,*
*Сыҡҡан, осҡан ике ҡанаттан.*
*Һәр бер телдә бәхет һүҙен әйтеү*
*Парлашыуҙан ерҙә башланған.*

*Пар ҡанатың эҙләп талпын күккә,*
*Тик һин уны ерҙә табырһың.*
*Бәхет эҙләп осҡан йәш йөрәгең*
*Мөхәббәтен табып табынһын.*

*Фиҙа булһын йәнең мөхәббәткә,*
*Уның аша юл табыла ҙур бәхеткә.*

***

*Әҙәм уҡымаç биш томға*
*Салбарҙар туҙҙырғансы,*
*Биш ағас ултыртһаңсы ла*
*Биш бала тыуҙырһаңсы.*

***

*Тоҙһоҙ бутҡа ашатһа ла,*
*Рәхмәт йәшәй күңелдә.*
*Тоҙһоҙ һүҙҙәр һөйләүсегә*
*Асыу бөтмәй бөгөн дә.*

***

*Аҡыл, талант һәм тәрбиә етмәгәндә,*
*Тәкәббер һәм көнләшеүсән була бәндә.*

***

*Уçаллығы — әсе һуған: үс-асыуын ҡандыра.*
*Тик самаһыҙ әсе һуған үҙ ҡабығын яндыра.*

***

*Тик дан көтмә алға барғанда,*
*Көнләшеү бар һәр бер заманда.*

***

*Аҡыллы теләй һәр саҡ өйрәнергә,*
*Ахмаҡ — бары кеше өйрәтергә.*



**Ғәлим**
**ДӘҮЛӘДИ**

## Нөгөш шишмәләре

*Дуҫтар миңә:*
*— Үҙең эскән һыуҙың*
*Иң тәмлеһен әйтсе? — тиһәләр,*
*Мин яуаплар инем:*
*— Нөгөш һыуы,*
*Уны йылға иткән шишмәләр.*
*Нөгөшөмә күпме шишмә ҡоя,*
*Юҡтыр кеүек хатта иҫәбе! —*
*Иң яратҡан көйҙөң моңо кеүек,*
*Телдәремдән төшмәй икәүһе.*
*Тау-апайҙың игеҙ ҡыҙҙарылай,*
*Баллышишмә,*
*Һөтлөшишмәләр*
*Һөйләй-һөйләй серен, көлә-көлә*
*Йүгерешеп тауҙан төшәләр.*
*Сылтыр... сылтыр...*
*Бер үк йыр уларҙа,*
*Ташында ла күкрәп гөл үҫә.*

---

*Ғәлим Дәүләди (1936) Мәләүез районы Һәргәй ауылынан. БДУ-ны тамамлай. Мәскәүҙә Әҙәбиәт институтының Юғары әҙәби курстарында уҡый. Башҡортостан китап нәшриәтендә мөхәррир булып эшләй. Сергей Чекмарев исемендәге премия лауреаты. Ике тиҫтәнән ашыу китап авторы.*

*Ҡәләмдәшебеҙҙе 75 йәше менән тәбрикләйбеҙ!*

Һайрап бөткәс шунда хәл алырға
Һандуғастар төшөп һыу эсә.
Уйҙар ташып, йөрәк янып барһа,
Мин дә гелән шунда ашыҡтым.
Мин уларға, әллә йырын тыңлап,
Әллә һыуын эсеп, ғашиҡмын!
Баллышишмә,
Һөтлөшишмә ағып,
Тәмләткәс ни Нөгөш йылғаһын,
Йә, әйтегеҙ, дуҫтар, уның һыуы
Нисек итеп татлы булмаһын!

## Йүрүҙән ярында

Таң ал шаршауын асыуға
Һиҫкәнеп ырғып торам.
Ысыҡлы үләндәр ярып
Йүрүҙәнкәйгә барам.
Һүнер-һүнмәҫ буҙарына
Шәфәктең алһыу нуры.
Көйәнтәләй арауыҡтан
Эркелә таңым йыры.
Иртәнге моң ҡош теләндә,
Сутылдай һандуғасым.
Кәкүк саҡыра аҡланда,
Тибрәтеп яр ағасын.
Ҡояш ҡалҡа... Дәү ҡарағай
Салауаттың йәштәше.
“Кемегеҙ батыр һалдаты?” —
Миңә тауҙар өндәште. —
Кемегеҙ һаҡлай йөрәктә
Батырҙың яҡты эҙен?
Кемегеҙ тоя һалдаттай
Тыуған ерендә үҙен?..
Үҙәндән осто офоҡҡа
“Кемегеҙ?” тигән оран.
Бөркөттәй саңҡыуын тыңлап,
Ярҙа уйланып торам.
Иртәнге саф ысыҡтарҙа
Йылҡылдай тәүге нурҙар.
Ырыҫ яулап яңғырағандай
Батыр хаҡында йырҙар.

***

Шәйехзада Бабичҡа

*Йылайырға етер саҡта*
*ҡарағай ҙа ҡарағай...*
*Йөрәгемде һағыш саҡты,*
*матурлыҡҡа ҡарамай.*

*Баҫтым кеҫек мин Бабичтың*
*ташҡа тамған ҡанына.*
*Ҡаптым кеҫек ҡанэскестең*
*шашҡан аты тынына.*

*Ҡулдарымдан һөйрәгәндәй*
*йылан төҫлө арҡаны.*
*Ҡамсы уты көйрәткәндәй*
*ҡапыл минең арҡамды...*

*Теләй иблес, килеп ҡолас,*
*йырға хәнйәр ҡаҙарға.*
*Тик Бабичтың ғорур йәне*
*оса яҡты яҙҙарға.*

## ***Был кем ере?***

*Ер хаҡында бәхәс сығып тора,*
*сал тарихтың сәсеп туҙанын.*
*Һүңгән ҡуҙҙар йәнә дөрләй ҙәһә,*
*шунан нисек тыныс уҙайым?*
*Ата-бабам минең ҡайҙа тыуһа,*
*ҡайҙа ҡыуһа толпар атҡайын,*
*ғүмер баҡый шул ер һаҡлар булған*
*исемен дә уның, башҡайын.*
*Ер еткән ул минең Уралымда*
*көтөүлеккә, бесән сабырға.*
*Солоҡ умартаһын яҙ күтәреп,*
*урман яҡта балын табырға.*
*Ерем еткән нигеҙ ҡорор өсөн*
*ир ҡорона ингән егеткә.*
*Ерем еткән иген игергә лә*
*бүрәнәһен биргән өйлөккә...*
*Ерем еткән донъя көткәндәргә,*
*ауылдаштар менән ярышып.*
*Майҙандары еткән*
*бәйгеләрҙә*

*уҙышырға атта сабышып.*
*Ҡот килтергән башҡорт атҡайҙары*
*етеҙ-егәрлeнең йортона.*
*Яуҙан еңеп ҡайтҡан уҙамандар*
*дан эйәрен һалған һыртына!*
*Яҡлар булған яугир Яйыҡ буйын,*
*Ағиҙелен, Нөгөш, Димкәйен.*
*Башын һалған Рәсәй сиген һаҡлап,*
*күкрәк менән ҡаплап илкәйен.*
*Уҙамандар ирек даулап ҡупһа, —*
*үсле батша — баяр ҡырҙырған.*
*Ҡоротмаҡсы булған тоҡомомдо,*
*ҡанға һуғарылған һәр ыҙан.*
*Ғәзиз ерем! Һағыштарың һөйләп,*
*умырзая ҡалҡа яҙ һайын.*
*Ҡыҙыл сәскә*
*ялан ҡаплап үҫә,*
*батырҙарҙың алып ал ҡанын...*
*Был — кем ере? Батыршалар ере,*
*Ҡараһаҡал уны һаҡлаған.*
*Салауаттар, Муса Мортазиндар*
*килмешәккә бүлеп һатмаған.*
*Ғүмер баҡый ошо ер улдары*
*ҡалҡан булып ҡалҡҡан Рәсәйгә.*
*Аманатын ташҡа уйып яҙған,*
*дан йырлаған татыу йәшәүгә...*
*Урал тауҙарында ҡупҡан болот*
*йәшен уғын кемгә йөрөтә?*
*Илем-телем, ерем имен ҡалыр,*
*көрәш рухым янһа йөрәктә!*

## ***Һинең рәсем***

*Автобуста мин тәҙрәгә баҡтым:*
*ҡыш төшөргән аҡтан рәсемен.*
*Ҡапыл кемгә ниҙер өндәштеләр —*
*тел осома килде исемең.*

*Ап-аҡ ҡына нәфис сәскә булып*
*биҙәнең һин ғүмер баҡсамды.*
*Ай-йондоҙҙар хәтерләйҙәр микән*
*һинең миңә серең асҡанды?*

*Тәҙрәнән күҙем алмайынса*
*уйланам да һаман уйланам.*
*Иртән күңел күтәренке ине,*
*ниңә әле кисен моңланам?*

*Тағы бер көн мәңгелеккә уҙа*
*һинән башҡа, һинән алыҫта.*
*Ғүмеркәйҙәр шулай үҙыр микән*
*бер-береңде күмеп һағышҡа?*

*Автобустың аҡ тәҙрәһе аша*
*мин күҙ һирптем кеүек һыныңа.*
*Төшөп ҡалырға ла онотҡанмын,*
*киттем, ахыры, йәшлек янына...*

***

*Мин аҙашмам әле был урманда,*
*йән дуҫтарым барын сағында.*
*Мин уларға баҡһам, тоғро ҡалып,*
*Йөҙөмдә гел шатлыҡ сағыла.*

*Мин аҙашмам әле был урманда,*
*унда — мин тип йәнен атҡаны.*
*Ошо яҡҡа килһәм, һиҙелмәй ҙә*
*таң атҡаны, ҡояш батҡаны.*

*Аҙашмамын ҡара урмандарҙа,*
*ҡара эсле йәндәр булһа ла.*
*Был донъялар һөйөү, нәфрәт менән*
*боронғонан килеп тыуһа ла...*

*“Мин аҙашмам!” тиеп һөрән һалам,*
*сөнки күпте татып таныным.*
*Яҡшылыҡты күрҙем, яманлыҡты,*
*саф ҡалдыңмы, минең иманым?*

*Үҙ-үҙемдән шуны һораным.*
*Мин һорауһыҙ бер көн торманым...*



Әнүәр
ҒИБӘҘӘТОВ

# ҠАСҠЫ

Повесть

## Урманда

Йәйге селлә үтеп, көндәр көҙгә тартты. Күҙ күреме киңлектәргә йәйелгән Көньяҡ Урал тауҙарының аралаш урмандары, улар араһында ҡуйы томан ҡосағындағы беленер-беленмәҫ һерәйешеп торған үркәсле, ҡая-ташлы һырттар йоҡонан уянмағандар әле. Таяҡ ташламы хәтлем генә ҙурлыҡтағы түңәрәк аҡлан ситенән, үҙ көйөнә сылтырап, үҙән буйлап аҫҡа, тау итәгенә, йүгергән йылғыр йылғаның иртәнге нескә моңо ғына шомло тынлыҡҡа йән өрөргә тырыша. Көнбайыштан иҫкән талғын ҡыуан елдәрҙән япраҡтарына һары төшә башлаған көпшәле-балтырғанлы бейек үлән дә, тәбиғәттәге өнһөҙ бушлыҡты тултырырға теләгәндәй, һирәк-һаяҡ ҡыштырлашып ҡуя.

Тиҙ ата йәйге таң. Бөгөн дә аҡлан кинәт яҡтырҙы. Йылы ҡояш нурҙары, епшек томан ҡатламын йота-йота, башта ағас остарын, тағы бер күҙ асып йомған арала, йомро, тигеҙ ялансыҡты ла яҡтыртты. Шуны ғына көтөп ятты, тиерһең – шырлыҡтан һикерәңләп үр ҡуяны килеп сыҡты. Аҡлан уртаһындағы ҡыуышҡа ҡарай өс-дүрт тапҡыр ырғыны ла, моронон күтәрә биреп, саф һауаны еҫкәй-еҫкәй борғолап торҙо. Сит еҫ һиҙеп ҡалдымы, әллә: “Һаҡ булығыҙ, бында әҙәм заты!” – тигәндәй, ҡойроғон бәүелтә-бәүелтә ағас ботағында шыҡырыҡлап ултырған һайыҫҡанды тыңлапмы, кире урман ышығына йәшеренеүҙе хуп тапты. Һәр ерҙә: һомғол ҡарағайҙар араһында, аҡлан ситендәге ҡыуаҡлыҡтарҙа ҡоштарҙың пырылдашыуҙары көсәйҙе.

Ҡыуыш эсендәге ҡараңғылыҡтан ялбыр баш күренде. Киң яңаҡлы, сырайһыҙ

---

*Әнүәр Ғибәҙәтов (1948) Учалы районының Науруҙ ауылында тыуған. БДУ-ны тамамлай. Райондың «Ураҡ һәм сүкеш» гәзитендә хәбәрсе булып эшләй, Науруҙ, Иҫке Байрамғол, Илсе, Уральск мәктәптәрендә уҡыта, директор урынбаҫары вазифаларын башҡара. Артабан «Байрамғол» совхозының үҙәк мәҙәниәт йортона директор итеп күсерелә, төҙөлөштә эшләп ала. «Учалы — алтын бишегем" (1999), “Заманды кешеләр тыуҙыра" (2004), “Оло юлға үлән үҫмәй" (2006), “Земля наша заветная" (2007), “Сәфәрем — тыуған төйәгем" (2008, Әҡлимә Сафина менән берлектә) һ.б. документаль китаптар авторы. Уральскийҙа йәшәй.*

шыма, ыуыҙ һаҡал баҫҡан йөҙөндәге һоро күҙҙәр, оҙон ҡара сәс ҡаплаған киң маңлай аҫтынан осҡондар сәсеп, тирә-яҡты байҡай һалдылар.

Имгәкләп килеп сыҡты ҡыуыш хужаһы ҡоролмаһынан, аяғүрә баҫты. Эре һөйәкле киң күкрәге, көрәктәй ҡулдары, тарамыштары ҡабарышып торған йыуан беләктәре был кешенең йәш һәм ифрат көслө булыуын күрһәтә.

Урман шишмәләре араһында һирәк осрай торған сағыштырмаса киң, мул һыулы йылғаның ҡырсынташлы һөҙәк ярына килеп сүгәләне егет. Ағын ситендәге тымыҡ ҡара һыуҙа үҙен күреп, танымаған һымаҡ аптырап, уға тексәйҙе:

– Йә, Ғәлимйән, нисек йәшәйбеҙ был яғына? Ауылға юл ябыҡ, ҡайтһаң, шундуҡ тотоп алып төрмәгә тығасаҡтар. Ситлеккә әләгәм тип ҡасманың да урманға!

Урғылып, күңелен баҫып алған тәрән һағыш йөрәк ҡылдарын өҙгөләне егеттең. Күҙҙәренә йәш эркелде, күкрәгенә таш булып тығылған ауыр төйөр, үкһетеп, ҙур кәүҙәһен һелкетте. “Эй Аллам, был тормошта яңы ғына йәшәй башланың тип торғанда, ниңә быңдай хәлгә ҡалдың һуң әле? Әллә яҙмышҡа буйһонорға, ҡасмаҫҡа булғанмы урманға? Нимә көтә һине алда? Яңғыҙлыҡҡа сыҙарһыңмы, түҙә алырһыңмы бында бер үҙең? Аҙашып, йә иһә йыртҡыс хайуандар тырнағынан харап булыусылар тураһында аҙ ишеттеңме?! Егермең дә тулмаған, шулай өҙөлөрмө ғүмерең? Ҡәбер ҡаҙып ерләүсе лә булмаясаҡ үҙеңде, кәүҙәңде ҡырағай йәнлектәр йолҡҡолап бөтәсәк...” Сыуалсыҡ ауыр уйҙары буталыша башында.

– Юҡ, юҡ! Мин үлмәйәсәкмен! Тешем-тырнағым менән йәбешеп ятасаҡмын тормошҡа! Урманда һәләк булыу – ихтыярһыҙҙар өлөшө. Ә мин – көслө! Көн һайын тере ҡалыр өсөн көрәшәсәкмен, сөнки иртәгәһен тыуасаҡ ҡояшты тағы күргем – йәшәгем килә минең!

Егеттең ҡалын тауышы, көслө ауаз булып, ҡаршылағы текә ҡаяла яңғыраны.

Ә йылғаның унда эше юҡ. Хозур тәбиғәт ҡосағында – инде бар донъяны тигеҙ ҡыҙҙырырға тотонған ҡояштың йомшаҡ нурҙарында ирәүәнләнеп уйнаҡлашҡан шаян тулҡындар, ҡасҡыны үсекләгәндәй, күберсеп, бер-береһен ҡыуышыуҙарын белә. Йылға ярҙары буйлап теҙелешкән тал-муйылдарҙан, улар ышығында иркәләнеп үҫкән ҡарағат, әберсә, энәде, гөлйемеш, баландан таралған хушбуй еҫтәре, егетте иҫертергә теләгәндәй, былай ҙа татлы һауаға тарала ла тарала... Йыуан, ялбыр ботаҡтарын ян-яҡҡа тарбанлатып, йылға аша бер-береһенә ынтылышып ултырған ерек ағастары араһынан әле бында, әле тегендә ялтырап ҡалған йылғаның үҙенән дә зиһен айныҡтыс сафлыҡ, күңелгә дәрт биреүсе сихри көс бөркөлә. Биленә тиклем сисенде Ғәлимйән, сағылышынан ҡотолорға теләгәндәй, һыу өҫтөн ике яҡҡа ярып ебәрҙе. Ул ҙур устар ҡалҡытҡан тулҡындар араһына инеп сумды. Ах та ух килеп, йыуынып алды. Сатнама һыуыҡ шишмә һыуы ауыр кисерештәрен йыуып төшөрҙөмө шул саҡ – йәнен күкрәгенән сығып барған йөрәге менән яңынан тоташтырҙымы, – тәненә еңеллек йүгерҙе.

Көндөҙ ут яҡмай ҡасҡы, төтөн ялбыратып, кеше күҙенә салыныуҙан шөрләй. Кемдәр йөрөмәҫ урманда! Утҡа ҡарай ынтылырҙар, эҙенә төшөрҙәр. Усағын төндә генә, унынһын да ҡуйы ағас араһында тоҡандыра. Үҙен ят күҙҙәрҙән һаҡлағандай тоя шулай итһә.

Ҡараңғылыҡ ышығында бешергән һарыҡ итен туйғансы ашап, мәтрүшкә сәйен эсеүгә, аҡландағы томан таралды. Тик юғарылағылары – айырым-айырым түңәрәк болоттарға оҡшағандары, әле һаман ҡыраларҙа эленеп ҡалды. Ана, сиңерткә бөгөн дә үҙенең йырын яңыртты – урман, йоҡоһонан тамам уянып, иртәнге ысыҡта йыуынып, көндөҙгө һауаны һуларға тотондо.

– Берҙән-бер  сараң ошонда – тау-таш араһында, урманда көн күреү. Башҡаса юлың юҡ һинең. Тик шуны башыңа ярып һалып ҡуй, Ғәлимйән: көсөк һымаҡ шыңшып йөрөһәң – бөттөң! Ауыҙыңа берәү ҙә аҙыҡ килтереп ҡаптырмаҫ та, бер кем дә ҡурсалап тормаҫ. Бөгөндән, хәҙер үк ҡышҡылыҡҡа әҙерләнә башларға тейешһең! Бәлки, тормош үҙгәрер, ауылға ла ҡайтырһың бер саҡ... – Тауышын күтәреп, ныҡ итеп әйтте ошо маҡсатын үҙенә.

Ҡыйыу уйҙары дәрт бирҙе ҡасҡыға. Күн ҡындағы хәнйәрен биленә таҡты, аҙығын тиренән тегелгән ҙур тоҡсайына тултырып иңбашына элде, еүеш ерҙә ятып тутыға башлаған балтаһын биленә ҡыҫтырҙы, көрәген ҡулына алды ла ҡаяға ҡарай атланы.

Урманға ҡасып килгәс тә яҡын-тирәне байҡап сыҡҡайны инде. Инде үҙ биләмәләре иҫәбенә индереп өйрәнгән был ҙур тауҙың суғырмаҡлы битләүендә мәмерйәгә оҡшаған ҡыуышлыҡты шул саҡта күргәйне. Оҡшатҡайны уны шул ваҡытта уҡ, тик, йылғаға яҡын булһын тип, ҡыуышын түбәндә, әлеге аҡланда, ҡыуышлағайны. Аунашып ятҡан ҡоро ҡарағайҙарҙы бер-береһенә һөйәп, уларҙы тал сыбығы менән ишеп нығытты. Тыштан кәҫ менән уратып алды. Ҡалайтһын, иләҫ-миләҫ йөрөгәнендә алдағы көндәрен уйларлыҡ инеме? Кеше күҙенә күренмәү, ашарға аҙыҡ табыу ине бар уйы. Өс айҙан ашты урманда ғүмер кисереүенә, артынан ҡыуғын төшмәне лә... Шулай булғас, яҙмышы үҙ ҡулында түгелме хәҙер?!

Үткән көндәрен ҡасҡы, йыуан ҡарағайға хәнйәре менән киртеп, билдәләп бара. Айҙың утыҙ көндәнме, утыҙ беренәнме бөткәнен ҡул арты быуындарынан иҫәпләп сығара. Һуҡ бармаҡ бөгәле – ғинуар, утыҙ бер көндән тора, йәнәштәге бөгәл аралары – февраль, ҡыҫҡа ай, егерме туғыҙ көндән тора. Кәсибә йылында февраль егерме һигеҙ көндән. Хәйер, уныһына ғына ҡалһа... Ун ике айҙы шулай иҫәпләп барасаҡ ул. Түҙһә, йәшәй алһа шулай оҙаҡ.

Көслө ямғырҙарҙа, ҡышҡы һыуыҡтарҙа ҡыуышының йүнле торлаҡ була алмаҫын инде аңланы Ғәлимйән. Яҡшылап, йылытып эшләнгән ныҡса йәшәү урыны ҡороп алырға тейеш ул. Кем белә лә, кем әйтә бында күпме йәшәрен.

Шуларҙы уйлап килде тауға. Иң саңырына үрмәләп менеп, урманды юғарынан оҙаҡ күҙәтеп ултырҙы. Ауылдар бик алыҫта булғанға, кеше аяғы баҫмаған был урындарға. Йәш ҡыҙҙар һымаҡ тәбиғәт, саф. Тау артында – тау, ер менән күк тоташҡан сиктәргә ҡәҙәр һуҙылғандар. Бер төрлө һәлмәк ғүмер кисергән, күңелдә шөбһә тыуҙырған олпат ҡара ҡаялар, сикһеҙ киңлектәргә йәйелгән ҡарурман алдында егет үҙен бер бәләкәй генә, көсһөҙ йән эйәһендәй тойҙо.

– Эй Уралым – күк урман! Яраҡлашып булырмы һиңә, ҡуйыныңа алырһыңмы мине?..

Урманда йәшәгәне бирле үҙендә күп үҙгәрештәр тойҙо ҡасҡы. Ҡулдары етеҙләнде, аяҡтары һығылмаланды, күҙҙәре осҡорланды, ҡолаҡтары һағайҙы хәҙер. Саҡ ҡына ел елкенһә лә, үлән бәүелһә лә һиҙә. Ҡараңғы төштөмө, хатта бөжәктәрҙең, үҙ йүндәрен күреп, тегендә-бында осошорға тотоноуҙарын да айыра. Һалҡынға ла, эҫегә лә, йәбешкәк еүеш һауаға ла, ҡоро елдәргә лә күнекте уның тәне. Төндәрен ҡыуышы тирәләй янып-ялтырашҡан ҡарышлауыҡтарға тиклем ап-асыҡ күрә. Ниндәй арып йоҡлап китһә лә, саҡ ҡына тауышҡа сыусап уяна, һикереп тора. Ауыр хәлдәге кешенең мейеһе ял итмәй, тиҙәр. Шулайҙыр. Бына ошо бар таҫылы, көсө, йылғырлығы етерме урманда йәшәр өсөн?

Мәмерйәне тәбиғәт әҙәм йәшәрлек итеп әҙерләп ҡуйған һымаҡ: иҙәне тоташ тигеҙ таш, стеналарының киңлеге биш-алты метр самаһы, төпкә ҡарай унан да күберәккә өңөлгән. Түшәме лә үҙе тура баҫып йөрөрлөк бейеклектә. Бура төкәтеп ауыҙын ҡапла ла – әйҙә йәшә! Киләсәктә торор урынын һәр яҡтан килешмәле табып, күңеле күтәрелде ҡасҡындың.

*...Иртә лә томан, кис тә томан,*
*Был томанҡайҙарға ла ни булған?*
*Тауға ла менеп, ташҡа баҫып,*
*Һин ҡарарһың, йәнем, мин булмам...*

Ҡолаҡ төбөндә атаһының көслө, моңло йыры яңғыраны. Йылдың-йылы уның менән бергә колхозға бесән сабышты, утын ҡырҡышты. Быуындары шулай ныҡынды. Урман уға таныш, тик, күмәкләшеп эшкә йөрөүҙәре – бер нәмә, ә бына урман менән йөҙмә-йөҙ ҡалыуы, бында япа-яңғыҙ йәшәүе бөтөнләй икенсе хәл икән. Ана шул яңғыҙлыҡ эс-бауырын һурып сығарғандай, ана шуныһы һыҡтата...

Эйе, урман таныш Ғәлимйәнгә. Килеп төшәләр ҙә колхозсылар, усаҡ яғып ебәрәләр. Аттарын тышап, әйберҙәрен урынлаштырғансы, сәйҙәре ҡайнап сыға. Ул көндө бесән сапмайҙар, кешеләр үҙҙәренә ҡыуыш ҡоралар. Атаһы уны күп нәмәгә өйрәтте урманда: төтөн туп-тура һауаға күтәрелә икән – аяҙға, томан ергә яттымы, киреһенсә, көндәр йонсоуға тартасаҡ. Кейек аулау серҙәренә, ағастарға ҡарап төньяҡты билдәләүҙе, ҡоштар тауышын айырыуҙы, тағы әллә күпме нәмәләрҙе ул атаһынан өйрәнеп ҡалды. Фани донъяла оҙаҡ йәшәмәҫен һиҙеп йөрөнөмө? Белгәнемде улыма ҡалдырайым, тип ашыҡтымы? Әллә тормоштоң ғөлләһе шулай белгәненде балаларыңа төшөндөрә барыумы?

“Урманым – бер ҡат туным”, – тиергә ярата торғайны атаһы. Ниңә шулай тине икән? Урман тун була тиме? Ниндәй һыуыҡтарҙа ла бында ышыҡ, асыҡ урындарға ҡарағанда күпкә йылыраҡ булғанға әйткәндер шулай тип. Эйе, эйе, урман кешеләрен Урал ашатып-йылытмаймы һуң! Халыҡ һүҙен ҡабатлаған – яратҡан атаһы урманды!

Бесән сапҡанда, ҡайһылыр арала ҡурайҙар ҡырҡып ала атаһы. Бешкәнерәктәрен һайлай ҙа, тишектәр яһап, тартып та ебәрә. Уйнаған көйөн үҙе йырлап бөтөрөп ҡуя шунан:

*... Урал ғына тауҙың, ай, башында*
*Урай-урай үҫкән бер ҡурай.*
*Шул ҡурайҙы алып бер тартты ниһәм,*
*Ҡайғы-хәсрәт баҫыла бер талай...*

Ҡурай уйнарға ул да өйрәнәсәк! Атаһының төҫө итеп. Унан ҡалған ҡомартҡы һымаҡ булһын ҡурай.

“Бөгөн томан тауға уралды, ысыҡ мул төштө, көн аяҙ, хатта эҫе булмаҡсы, – тип уйланы егет. Атаһы әйтә килгән һүҙҙәр иҫенә төштө: – хистәргә бирелеп ултырыуы һәйбәт тә ул, шундай сыуаҡ, матур көндө бушҡа уҙғарыу ярамаҫ һиңә!”

– Башта бура бурарға кәрәк! – тип һөйләнде ҡасҡы ярһып. – Мәмерйәнең иҙәнен, стеналарын, түшәмен бүрәнә менән йылытып була ла. Бынамын тигән өй килеп сығасаҡ!

Мәмерйә өңөрө тирәләй үҫкән бер йыуанлыҡтағы шыйҙан ҡарағайҙарҙы һайлап, билгеләп сыҡты Ғәлимйән. Ағас йығам тип бер-ике һелтәнгәйне, балта тауышы, көслө яңғырау булып, ҡаршы тауҙарҙа ҡаҡсылды. Ҡурҡышынан ҡысҡырып уҡ ебәрҙе егет, быуындары ҡалтыранды.

– Нишләүең был! Һунарсы-маҙар ишетеп ҡалһа, бөттө бит башың! Хәҙер килеп баҫасаҡтар!

Шулай тип әрләне үҙен. Күкрәген тишеп сығырҙай итеп дөпөлдәгән йөрәген тыйырға тырышты, ҡулдары менән баҫып-баҫып түшен ыуғыланы. Ағасҡа һөйәлеп хәтһеҙ торҙо шулай. Әллә нәмәһе һыҙлай эстә...

– Тыныслан! – тип бойорҙо ул үҙ-үҙенә. – Уйлап эш ит был яғына!

Күктәге һирәк болоттарҙы күҙәтә торғас, бер ипкә килде ҡасҡы. Уларға, болоттарға, ҡайҙа йөҙһәләр ҙә, барыбер. Ғәмһеҙ улар. Тукта, бәлки, уларҙың да

берәй маҡсаты барҙыр? Ана, ҡарале, берәүһе мылтыҡ тотоп йүгереп барған һалдатҡа оҡшап ҡалды түгелме?

Һуғыш булырын халыҡ иртә яҙҙан уҡ һөйләне, тик унын шулай тиҙ башланырына ғына ышанманы. Ғәлимйән иһә яу ҡупҡанлығын һарыҡ урларға барғанында белде. Дөм-ҡараңғы төн ине. Тып-тын. Тынсыу. Ауылға килеп еткәс тә бындағы шомло үҙгәреште тойҙо ул. Күңеле менән һиҙҙе. Ир-атлы ауыл, төн булыуға ҡарамаҫтан, бындай булмай. Ирҙәр юҡ ауылда! Ситән буйында, уңайын килтерәм тип, оҙаҡ ҡына ятты. Шул саҡ асыҡ тәҙрәнән йоҡлай алмай аҙаплан-ған әсә сеңе ишетелде: "Эй Хоҙайым, ҡайҙан килеп сыҡты был һуғышы... һау ғына йөрө инде, балам... Ҡәһәр төшһөн Гитлерына!.."

Шул мәлдә барыһын да аңланы Ғәлимйән.

Һуңғараҡ ҡаса-боҫа күренселәргә барып сыҡҡыланы. Урман ҡырҡыусыларҙың үҙҙәре эштә саҡта ҡарауһыҙ ҡалған ат арбаларындағы аҙыҡ-түлектең ярпыйорполоғона аптырағайны: ашарҙарына урмансыларҙың ҡатыҡ, аҙыраҡ арыш икмәге, тағы ла бер аҙ ваҡ картуфтан башҡа нәмә тапманы. "Тимәк, фронтҡа китеп тора аҙыҡ", – тип уйланы ул. Үҙенә иң кәрәкле нәмә – тоҙҙарын бүлеште, бер нисә бөртөк картуфтарын алды. Икмәктәренә, йәлләп, теймәне. Унын, исмаһам, туйғансы ашарлыҡ ите бар ҙа.

Нимес ныҡ әҙерләнә икән, һуғыш ҡаты булыр, башланһа, тигәйнеләр. Һуғышҡа яраҡлы ир-егетте ҡырып-йыуып фронтҡа алғандарын да аңланы Ғәлимйән: урманға ағас ҡырҡырға, бесән сабырға бисә-сәсә лә, үҫмер бала-саға йөрөй башланы.

Һуғыш тураһындағы уйҙары тағы күңелен йыртҡыланы Ғәлимйәндең. Кем ул – Ғәлимйән? Берәй ҡурҡаҡ йәнме илен дошмандан һаҡлай алмаҫлыҡ? Эйе, ул – ҡасҡы. Тик, ҡасып йөрөүҙең сәбәбе бөтөнләй башҡа лаһа! Һуғышҡа барыуҙан ҡурҡыу түгел, тиктомалға төрмәгә эләгеүҙән ҡасты бит ул урманға. Юҡ, ул ҡурҡаҡ түгел! Тик белә Ғәлимйән: уны барыбер һуғышҡа ебәрмәйәсәктәр, башын зинданда серетәсәктәр. Шул уйҙарынан йөрәге ҡыҫылды.

Әрнеткес хистәрҙән арына алмай көн уҙғарҙы ҡасҡы. Күҙ алдынан йәнендәй яҡын күргән Ғәҙелйәне, яратҡан Нәфисәһе китмәне. Күккә ҡараны тағы. Бөҙрә йөнлө болоттарҙы еңелсә ел туҙҙырған. Киске шандаҡ ҡып-ҡыҙыл. Яугирҙарҙың һуғыш яланында ҡойған ҡаны шулай сағыламы әллә һауала?

Эңер төштө. Инде йылға сылтырауығы ла асығыраҡ ишетелә. Тәүлектең был ваҡыт арауығында күҙ алмашыныусан: ҡыуаҡлыҡтар, ҡаһҡаһалар пәйҙәһенә инеп, уны күҙәтәләр һымаҡ ҡасҡыға, улар артында йыртҡыс хайуандар ҡараууллағандай. Бер тауышты ла ҡолағынан ысҡындырмай ул. Әммә бөгөн тирә яҡ тыныс. Көн һайын үҙенә ҡурҡыныс янағанын белә егет. Тик әлегә, кешене ике аяҡлы көслө хайуан итеп ҡабул итеп, Ғәлимйәндең ҡыуышын урап үтә йыртҡыстар. Юлдарына саҡ ҡына арҡыры торһон, айыу ҙа, бүре лә, хатта һеләүһен дә унын үҙенә ташланасаҡ. Тәбиғәт – аяуһыҙ.

Ҡыуышына инеп ятты ҡасҡы. Йөрәгенең ҡыҫыуына, әсетеп-әсетеп һулҡылдауына сыҙай алмай, улай ҙа, былай ҙа борғоланды, һуҙып-һуҙып ыңғырашты. Бар булмышы унын, эстән урғылып сыҡҡан бер көскә әүрелеп, кешеләргә тартыла ине.

– Булмай былай! Нәфисәгә барып ҡайт! – тип бойорҙо үҙенә. – Бысҡыһыҙ эш бармаҫ, унын тауышы артыҡ яңғырамай. Тағы әллә күпме әйбер кәрәк әле һиңә. Шуларҙы алып килерһең урманыңа, Аҡтырнаҡты эйәртеп алырһың. Эргәңдә бер тере йән йөрөр, исмаһам.

Үҙ алдына шулай һөйләнеп ята торғас, таңғы йондоҙҙар һүнә башлауға, йоҡлап киткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды ҡасҡы. Төнгө ҡараңғылыҡ донъяны үҙ ҡосағынан ысҡындырмағайны әле.

## Нәфисә

Ғәҙелйәнгә “ҡара ҡағыҙ” килгәне бирле Нәфисә үҙенә урын таба алмай. Илай торғас, күҙ йәштәре лә ҡороно. Бөгөн дә бына ҡырҙан, бәсһеҙ булып, арып ҡайтты. Аҙыраҡ ҡапҡыланы ла, кәрәсин лампаһын һүндерҙе. Урындыҡ түренә йомарланып ятты, тик йоҡоһо алмай яфаланды. Талсыҡҡан тәне әрней, етмәһә. Эштән ҡайттымы, көн дә шулай. Ҡырҙа, кеше араһында, көн тиҙерәк үтә, исмаһам. Өс бисәгә өс кәбән ҡойҙолар бөгөн дә. Бала-саға ат һөрәһе менән саҡҡа ташып өлгөртөп торҙо бесәнде. Ҡоймай ҡара! Сулаҡ Саҙрый ҡамсыһын һелтәп: “Трудденығыҙҙы ҡырҡам, ҡыбырлағыҙ!” – тип аҡырып-аҡыра. Мал һымаҡ та күрмәй кешене. Ҡайһылай оторо ҡуба! Һуғышҡа тиклем шып-шым йөрөгәнен...

Уфтанды ла Нәфисә, юрғанына бөркәнде.

– Еңгә, еңгә... Нәфисә!

Ойоп киткән икән, һиҫкәнеп тороп ултырҙы йәш ҡатын. Өнөмө был төшөмө?

– Нәфисә, Нәфисә...

– Кем ул?!

– Ҡысҡырма, Нәфисә, Ғәлимйән мин.

– Ғәлимйә-ә-ән?

Келә асылды. Өйгә инә һалды ла ҡасҡы, ишекте элеп ҡуйҙы.

– Ҡурҡма минән, һаумы, Нәфисә!

Нәфисә лампаһына ут алырға маташты.

– Яҡтыртма лампаңды, Нәфисә.

Аптырап, урындыҡ ситенә сүгәләне ҡатын.

– Һин... Тереме?..

– Тере, тере. Күрәһең бит, мин был. Ғәҙелйән фронттамы, хәбәре бармы?

– Бар... Үле хәбәре. – Нәфисә һулҡылдап алды.

– Ҡасан?

– Ҡағыҙ килеүенә ай булды инде. Батырҙарса һәләк булды, тигәндәр.

– Батырҙарса?!.

Ғәлимйән устары менән башын ҡыҫып, шымып ҡалды... Бер туған ике атайҙан тыуһалар ҙа, игеҙәктәр һымаҡ үҫтеләр улар. Ғәҙелйән бер йәш самаһы ғына өлкәнерәк. Аҡ йөҙлө, ҡаҡса, һонтор, һылыу егет ине. Оҙон керпектәре уға айырыуса наҙ өҫтәне.

– Бигерәк ҡыҙҙар һымаҡ был Ғәҙелйән, – тинеләр ауылда. – Бәхете менән йәшәй күрһен.

Һис айырылышманы улар, тау-урманды гел бергә ҡыҙырҙылар. Утыҙ һигеҙенсе йылда аталары ҡулға алындылар ҙа хәбәрһеҙ юғалдылар. Күптәрҙең башы китте ул йылы. Тормоштоң ауырлыҡтары әсәләрен дә бөктө, улар ҙа вафат булып ҡуйҙы. Үҙ-ара терәк булышып, егеттәр Ғәлимйәндәрҙең өйөндә йәшәне. И-и-их, Ғәҙелйән, хәйләң етмәнеме һуғышта, үҙеңде һаҡлай алманыңмы?

– Тауыҡты галушҡа егә лә, тупраҡ тейәп, йөк тарттыра торғайныҡ. Сыбар тауыҡ хәйләкәр ине, һөйрәмәй, ҡабырғаһына ята ла ҡуя. Мин ҡыуам, Ғәҙелйән йәлләй. Аптырағас, парлап икенсе тауыҡты екһәк тә, тартманы. Оло ине ул, атайым һуйҙы аҙаҡтан.

Нимә һөйләйем мин, тигәндәй, Ғәлимйән сикәләрен ыуҙы. Яҡын кешеһен – Ғәҙелйәнде юғалтыу кисерештәре ауыр, үтә ауыр уға.

– Ҡайҙарҙа йөрөнөң үҙең, Ғәлимйән, ниңә йүнләп һөйләмәйһең?

– Аттар юғалғас та урманға ҡастым. Төрмәгә алып китерҙәр ине, юғиһә.

– Ниндәй аттар ул?

Ғәлимйән һуңғы айҙарҙа үҙе кисергәндәрҙе һөйләп бирҙе.

Ауылдағы ағай-энеләре, күрше-тирәләре Ғәҙелйән менән Нәфисәнең туйҙарын уҙғарғас, шаңҡып йөрөгән Ғәлимйән ситкә сығып китергә ҡарар итте. Яратҡан ҡыҙындың икенсе ир менән йәшәп ятыуын нисек кисермәк кәрәк?! Ул ир Ғәҙелйән булған хәлдә лә. Иптәше Сәғитте өгөтләп, урман хужалығына эшкә барып инделәр. Икеһенә ике пар еген ат биреп, диләнкәнән ағас сығарырға ҡушып ҡуйҙылар. Алһыҙ-ялһыҙ, урманда ҡуна йөрөп эшләне улар. Бәлә һорап килмәне – май айы аҙағының бер төнөндә дүрт аттары берсә юғалды. "Аттарҙы ҡайҙа иттегеҙ?" – тип бәйләнәсәктәре көн кеүек асыҡ ине. "Атайымдың олаҡҡаны ла еткән һис бер ғәйепһеҙгә. Ни булһа ла булыр, төрмәгә эләгәсәгем юҡ!" – тип, ҡулына эләккән әйберҙәрен йөкмәне лә Ғәлимйән урманға ҡасты. Ауылдан сығып китер алдынан Нәфисәне генә барып күрҙе.

– Тормошом селпәрәмә килде, Нәфисә, хатта һин дә хуш күрмәнең мине! Бүтән күрешә алмабыҙ, башымды алып сығып китәм... – тине ул уға ғына.

Унығы, аптырап, ауыҙын асып, һүҙ әйтә алмай тороп ҡалды.

– Хушлашҡанда бүтән күрешә алмабыҙ тигәсең, әллә нәмәләр уйлап бөтөргәйнем. Бахырҡайым, шунан бирле урмандамы? Нисек йәшәйһең унда яңғыҙың? Сәғитте ҡулға алдылар ҙа юғалды ана...

– Бергә ҡасайыҡ тинем мин уға, тыңламаны. "Ғәзиз башым ни күрһә – шул булыр. Ә һин ҡурҡма, мин һине һатмам", – тине. Күңдерә алманым бер нисек тә. Бергә-бергә еңелерәк булыр ине хәҙер бына. Ҡыйын, Нәфисә, яңғыҙлыҡ үлтереп алып бара. Аҡтырнаҡты бирер инең миңә иптәшкә. Әле, ана, танып, әллә ҡайҙан ялағайланып килә.

– Ғәҙелйән менән һинеке лә ул Аҡтырнаҡ, эйәртеп ал.

Күҙҙәре ҡараңғыға өйрәнде уларҙың. Нәфисә ашъяулығына икмәк, йомро бәрәңге, сәй ҡуйҙы. Алдыры менән ҡатыҡ килтереп сығарҙы.

– Астан үлмәҫлек он биреп торалар, – тине ул, ашамлыҡтың ҡыҫыҡ булыуына үҙен ғәйепле тойғандай. – Ҡатыҡты Рәйхана индергәйне, инәһе менән һыйыр аҫрайҙар ҙа.

– Кейәүгә сығырға уйламаймы әле Рәйхана?

– Кейәү ҡайғыһымы, Ғәлимйән? Көн һайын эт һымаҡ телдәребеҙҙе арҡыры тешләп ҡайтып йығылабыҙ. Шунан... Кемгә сыҡһын ул? Бөтә егеттәр һуғышта. Ир заты ҡалдымы?

Ни тиклем ымһынһа ла, бер телемдән артыҡ икмәк ҡапманы Ғәлимйән. Нәфисәнең үҙенә ҡалһын, тип уйланы. Ә бына ҡатыҡты кинәнеп һемерҙе.

– Инәйемдең ҡатығы ла шулай тәмле була торғайны, һағындырған...

Нәфисә уға ауыл хәлдәре, тормоштоң ауырлыҡтары тураһында һөйләп алды.

– Аҙна һайын тиерлек берәүҙең һуғышта һәләк булыуы хәбәре килеп тора. Китә шунан өй беренсә илаш-һыҡташ. Һәр кем үҙенекенең тере йөрөп ҡайтыуын теләй. Шуларҙы күреп, Ғәҙелйәндең ҡайғыһы баҫылғандай тойола. Бер мин ир юғалтманым, тип уйлайым да.

Йәш ҡатындан күҙҙәрен алмай егет. Нәфисәгә ҡараған һайын уғата ярһый. Был тиклем бөтә ере лә килешеп тормаҫ! Ҡыйғас ҡара ҡаштары, бешкән сейәләй ҡыҙарышҡан матур ирендәре, бәләкәй генә ҡупшы танауы, ыҡсым, нескә билле кәүҙәһе... Сәстәре, бөҙрәләнеп, арҡаһына һылашҡан. Ә йомшаҡ тауышы, наҙлы ҡараштары... Әсир итә лә ҡуя!

– Йотаһың бит, тишкәнсе ҡарамаһаң...

– Бынау ҡалаҡҡа һалам да хәҙер үк йотам мин һине! Кил яныма, Нәфисә, шундай һағындым... Ярай һин бар әле был тормошта!

Ҡосаҡлап алды егет ҡатынды.

– Миңә сыҡманың да кейәүгә...

– Ныҡыштыңмы һуң?

– Ғәзелйән дә һиңә ғашиҡ булғас, ҡалайтайым? Мин уны ла егеттәрсә яраттым да. Юлына нисек арҡыры торайым? Һинән генә ҡалды барыһы ла. Уны ышандырмаһаң, ғүмеренә ынтылмаç ине һиңә. Мин уны беләм.

– Күңелең киң һинең, бахырҡайым...

Матур ҡараштар егеттең эс-бауырына үтеп инде.

– Минән генә торманы шул, йәнем. Йөрәкте алдап булмай. Һине яратам мин! Үҙең йөрөнөң ауыҙыңа һыу уртлағандай булып. “Яратам!” – тип бер әйтеүең етә ине миңә. Әйтмәнең. Ғәзелйән дә яҡын ине, ул ныҡыша белде йыуаш күренһә лә. – Нәфисә һөйгәненең ҡулдарын усына алды. – Миңә ышан, Ғәлимйән.

– Үткән эштән – төш яҡшы. Әйҙә, минең менән урманға!

Көтөлмәгән һүҙҙәрҙән һиçкәнеп китте ҡатын. Зиһененә һыймай: унын һөйгәне – ҡасҡы! Бына, ниһайәт, осрашты улар. Нисек йәшәрҙәр урманда икеһе генә? Ә бала тыуһа? Алла-а-ам... Күпме ғүмер бирһәң дә бәғрем менән бергә булайыҡмы әллә, ни күрһәк тә бергә күрәйекме? Бахырҡайым, ҡайһылай ыҙалай! Ауылда еңелме һуң? Тәүәккәлләргәме?..

– Йәшәй алырбыҙмы унда?

Нәфисәнең ҡырҡа кире ҡаҡмауын, икеләнеүен күреп, урманда нисек йәшәйәсәктәре тураһында шашынып һөйләй башланы ҡасҡы.

– Беҙҙең йылы өйөбөҙ буласаҡ. Һунарға йөрөйөм мин, ас ултырмабыҙ, итебеҙ һәр саҡ булыр!

– Әл-л-ә-ә-ә... Тамаҡта ғынамы тормош...

– Күреп торам бит, һин дә яңғыҙың ҡаңғыраһың. Ҡышҡылыҡҡа әҙерләнеп бөтәм дә килеп алам үҙеңде. Тик был турала бер кем дә белмәһен, йәме? Кеше күҙенә күренмәбеҙ, гөрләтеп йәшәрбеҙ икәү!

– Рәйхана ла белмәһенме?

– Рәйхана һатмаç-һатыуын. Шулай ҙа белмәгәне яҡшыраҡ. Һаҡланғанды Хоҙай үҙе һаҡлар, тиҙәр ҙә.

– Һинең яныңа барырға хәл итһәм, Рәйханаға әйтмәй булдыра алмам мин.

Нәфисәнең аҡылына ышана Ғәлимйән. Әйтһә-әйтһен әхирәтенә, тик унын янына килергә риза ғына булһын.

– Хуш, Нәфисә! Һин тип тырышырмын был яғына. Миңә китергә ваҡыт.

Тиҙҙән эт эйәрткән һупата кәүҙә, оҙон-оҙон баçып, ҡараңғылыҡҡа инеп юғалды. Август айының иртәнге шаңдағы һыҙыла башлағайны.

***

Рәйхана килеп уятмаһа, эшкә һуңлай ине Нәфисә.

– Ни булды һиңә бөгөн? Ғүмерҙә йоҡлап ятмағаныңды.

– Төндә керпек тә ҡаҡманым, таңға ғына серем итеп киткәнмен.

Әхирәтенә тура ҡарай алманы Нәфисә. Ялтырашҡан күҙҙәре һатҡанлығын һиҙә.

– Ай-һа-а-й-й, әйт, нимә булды?

Рәйхананан нисек сер йәшерһен? Төндә Ғәлимйән килеп китеүен һөйләп бирҙе. Күҙҙәрен ҡыçыбыраҡ ҡарап торҙо ла Рәйхана уға, ҡосаҡлап алды.

– Донъя – ҡуласа, тиҙәр, әхирәткәйем. Бына бит, һөйгәнең менән осраштырған яҙмыш. Ирекәйеңдең рухы риза булыр, һинең Ғәлимйәнде яратҡаныңды белде бит ул аҙаҡтан. Иçеңдәме, һуғышҡа оҙатҡанда: “Ней Ғәлимйәне әллә ҡайҙа китте лә батты, үҙ кешең булыр ине яныңда,”– тигәйне һиңә. “Уны ла һуғышҡа алырҙар...” – тинең. Ул өндәшмәне. Һине Ғәлимйәндән тартып алғандай тойоп йөрөнө ул. Яратышҡанығыҙҙы алдан белһә, һис өйләнмәç ине һиңә, тип уйлайым хәҙер. Өҙгөләнмә, үлгән артынан үлеп булмай. Күрәһебеҙ был һуғыштан

алдалыр әле... Бәхетеңде ҡулыңдан ысҡындырма, Нәфисәкәйем! Ғәлимйән ҡайҙа әле?

Был һорауға нисек яуап бирергә белмәй, икеләнеберәк ҡалды Нәфисә. Шунан:

– Оҙаҡламай килеп алып китәм тине, – тигән яуап тапты ахырҙа.

Күҙ осо менән генә ҡарап ҡуйҙы Рәйхана әхирәтенә.

– Әйтәһең килмәһә – әйтмә...

– Һиңә һөйләмәй нисек түҙәйем?!

Инде төпкә йәшеренгән күҙ йәштәре атылып сыҡты Нәфисәнең, башын әхирәтенең түшенә һалып, барыһын да һөйләп бирҙе.

– Яңғыҙың нисек йәшәмәк кәрәк урманда?.. – Рәйхананың күҙҙәренә лә йәш төйөлдө. – Шунан, бараһыңмы янына?

– Белмәйем.

Әхирәттәр, ҡосаҡлашып ултырған көйө, шымып ҡалдылар.

Ғәлимйәндең ҡасҡы булып йәшәүе Рәйхана өсөн дә ауыр хәбәр ине.

– Аҙаҡтан һөйләшербеҙ, әйҙә ҡуҙғалайыҡ, эшкә һуңлайбыҙ.

Тиҙ генә тотоп әйтерлек һүҙ таба алманы Рәйхана. Уйламайынса хәбәр һөйләп, әхирәтенең кинәт ҡалҡҡан бәхет ҡояшына тап төшөрә буламы?

Улар эшкә ашыҡты. Арбаларына тейәлешеп, ауылды ғына сыҡҡайнылар, аттарын һыбайлы милиционер ҡыуып етте.

– Һаумыһығыҙ, ҡыҙҙар! Рәйхана һылыу, эштәр барамы колхозда?

– Бара... – Рәйхана әхирәтенең беләгенә йәбеште. Йөҙөнә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе.

– Ҡайҙан килеп сыҡты кинәт... – тип шыбырланы ул әхирәтенә.

Районның милиция начальнигы Ғәлимовты танып, йөрәге “жыу” итеп ҡалды Нәфисәнең, ҡурҡышынан ағарынды.

– Нәфисә килен, төш әле арбаңдан, – тине Ғәлимов тыныс тауыш менән. Ҡалғандарға: – Көтөгөҙ аҙыраҡ, оҙаҡ тотмам мин һеҙҙе! – тип бойорҙо.

Нәфисә янына килде.

– Ауырып тораһыңмы әллә, килен, йөҙөң ағарып киткән?

– Юҡсы... Мин һеҙгә килен буламмы ни?

Уның һорауына иғтибар итмәне Ғәлимов, һынаулы ҡарап ҡына ҡуйҙы.

– Ғәҙелйән һәләк булып ҡалған икән. Яҡындар беҙ уның менән, өс туғандар. Артыҡ көйәләнмә, һуғыш булғас, үлемһеҙ булмаç. Тереләр йәшәргә тейеш. Йәшһең әле, һаҡла үҙеңде. Ғәлимйәндән хәбәр юҡмы?

Тағы һөҙөп ҡараны ул Нәфисәгә. Йәш ҡатын үҙен көскә ҡулға алды.

– Ауылдан сығып киткәне бирле күргәнем юҡ, – тип милиционерға тура ҡарай алды Нәфисә.

– Ярай, ярай, мин былай ғына һорайым. Күрһәң-фәлән тип. Ихласлаһам, күптән табыр инем мин уны. Артыҡ эҙләргә лә тормайым. Дөрөç тә эшләгәндер, бәлки, кем белә...

Был һүҙҙәрен Ғәлимов урманда йөрөгән Ғәлимйәнгә төбәп әйткән һымаҡ тойолдо Нәфисәгә. Нимә тип әйтергә белмәй,һүҙһеҙ ҡалды.

– Килеп күренһә, әйт Ғәлимйәнгә, һаҡ булһын, эше ябылмаған. Ат юғалтыу, һуңынан хөкөмдән ҡасып йөрөү ҙур енәйәт. Оҙаҡ ябылмаç әле эше, башынан һыйпамаçтар. Ҡусты кеше бит. Бына шуны әйтәйем тигәйнем, килен. – Арбала ултырған Рәйхананан күҙҙәрен алмай үҙе, уға Нәфисә аша ҡарай. – Мине фронтҡа алалар. Бүтән осрашырға насип булмаһа, ғәйепкә алмағыҙ!

Рәйхана яғына тағы бер ҡараны ла Ғәлимов, атын кирегә бороп, ауылға ҡарай юрттырҙы. “Һәйбәт кеше икән”, – тип уйлап ҡалды Нәфисә. Нескә күңелен баçып торған ҡара болот таралды.

– Ғәлимйән юҡҡа ҡасмаған икән урманға, – тип шыбырланы әхирәтенә. –Ҡарале, һинән күҙҙәрен алмай ҙа ул!

Рәйхана өндәшмәне, ҡыҙарынды ғына.

Эштәре айырыуса ыраны бөгөн, хатта дүрт кәбән ослап ҡуйҙылар. Көн оҙонона осоп-ҡунып йөрөгән әхирәтенә ҡарап Рәйхана ҡыуанды.

## Һунарҙа

Нәфисә менән осрашҡандан һуң Ғәлимйәндең көс-дәрте икеләтә артты. Бер нисә көндә мәмерйәһенең эсенә, ауыҙына бура бурап, мүккә күтәреп ҡуйҙы. Йомро ағастарҙы янлап теҙеп, ишек итеп элде. Уны эстән дә, тыштан да терәүҙәр менән нығытып бикләмәле итте. Тигеҙләп юнылған бүрәнәләрҙе иҙәнгә түшәне, һайғау итеп һалды. Һары балсыҡ иҙмәһенә мүк ҡушып болғап, бүрәнә араларын һыланы. Урындығын, өҫтәлен, эскәмйәһен, мөгәрәп ҡапҡасын, эт ояһын айырыуса зауыҡ менән эшләне ул. Оҙаҡ ҡарап торҙо шунан уларға. Һөйөндө, ҡәнәғәт ҡалды.

Нәфисәгә оҡшармы? Һөйгәненең һылыу йөҙө күҙ алдынан китмәй. Ана, матур итеп йылмайҙы йөрәккәйе. “Һәйбәт килеп сыҡҡан өйөң, Ғәлимйән, йәшәргә була бында!” – тигән һымаҡ тойолдо уға.

Аҡтырнағы... Ҡайһылай аҡыллы ул! Урманға инеп юғалып тора ла хужаһына әйләнеп килә һала. Янында өйөрөлөп-сөйөрөлә шунан. Ғәлимйән бүрәнә һөйрәһә, нисек уға ярҙам итергә белә алмай ҡаңғыра. Аптырағас, сыйылдай-сыйылдай хужаһының салбар балағынан булһа ла тартҡыларға тотона. Түҙмәҫ, ауылға ҡайтып китер, тип уйлағайны. Юҡсы, уйлап та ҡуйманы. Яҡшы эт эйәһен ташлай буламы!

– Бына шунда йәшәрбеҙ, Аҡтырнаҡ, һинең урының бына бында булыр, – тип Ғәлимйән өй эсендә мөйөштә ҡоролған ояға күрһәтте. – Бар, инеп ятып ҡара!

Аҡтырнаҡ, хужаһын ҡыуандырып, йоҡлар урынынан ҡәнәғәт булып килеп сыҡты. Ҡойроғон болғай-болғай, ҡасҡының күҙҙәренә тура ҡараны. Рәхмәт белдереүе шулмы? Ғәлимйән уның башынан һыйпаны, муйынынан яратты. Иркәләп, аяҡтары араһында уранғыланы ла эте, тағы ояһына инеп китте, унда түшәлгән йомшаҡ үләнгә ятып ҡараны. Аҡтырнаҡтың был ҡыланышынан Ғәлимйәндең күңеле күтәрелде: иң яҡын дуҫына ярай алды бит ул!

Инде мейес сығарыу өсөн кирбес кәрәк. Балсыҡ иҙмәһен ерҙә соҡоп яһалған кирбес ҙурлығы тишектәргә тултырҙы. Аҙыраҡ кибеп нығынһа, ҙур соҡорға күсереп һалыр, уларҙың өҫтөнә ут яғыр. Балсыҡ көслө утта ҡыҙып янһа, үҙенә мейес сығарырлыҡ кирбес сығыр.

Береһе артынан икенсеһе һиҙелмәй уҙҙы көндәрҙең. Ғәлимйән иртә таңдан алып ҡараңғы төшкәнсе эшләне. Һәр төндө улар эте менән арышып, әммә бик ҡәнәғәт ҡалышып ҡаршы алдылар.

– Аҡтырнаҡ, – тине ул бер көндө. – Ашарға аҙыҡ самалы ҡалды. Бигерәк тә тоҙ бөтөп бара. Бөгөнгә өй эштәре көтөп торор, һунарға йөрөп ҡайтырға кәрәк беҙгә.

Ҡояш тыуғас та ныҡ эҫетә башланы. Күгәүен ҡоторҙо. Аҡтырнаҡ, уларҙы тотоп сәйнәйем тип, үлән араһына тәкмәсләп-тәкмәсләп китә. Ә Ғәлимйәнгә түҙергә, иғтибар итмәҫкә генә ҡала уларға, һуғып үлтереп, һурған ҡандарын сығарһаң, бигерәк оторо ҡуба күгәүендәрҙең. “Һуңғы тапҡыр ҡоторошоуығыҙҙыр, көндәрегеҙ һанаулы ҡалды”, – тип йыуата үҙен. Этен муйынсағына эләктерҙе, ҡыуышына, аҡланына бер ҡараш ташланы ла үҙе генә белгән һуҡмаҡ менән юлға сыҡты.

Ҡасҡының һунары өс төрҙән тора. Тәүгеһе – урманға эшкә йөрөгән колхозсылар янына барып ҡайтыу. Уларҙан бигерәк тә тоҙ кәрәк Ғәлимйәнгә. Икенсеһе

– тирә яҡ ауылдарға һунар. Һарыҡтарҙы байтаҡ сәлдерҙе инде. Нәфисәһен урманға алып ҡайтҡас, бер нәмәгә ҡарамай ат “һуғырға” кәрәк буласаҡ. Йылҡы ите менән ҡыш сығырға була. Өсөнсөһө – ысын һунар. Әлегә ихласлап тотонғаны юҡ был кәсепкә. Үҙе эшләп ҡорған ағас тоҙаҡҡа ике ҡуян эләктергәйне. Береһе үлеп ятҡан, Аҡтырнаҡҡа булды. Икенсеһен һуйып алғайны, итен оҡшатманы. Йәйге ҡуян булғанғалыр.

Бесәнселәр, ғәҙәттә, эшкә бер урынға йөрөй. Туранан барһа, уларҙың сабынлығына тиклем дүрт-биш сәғәтлек юл. Шунан оҙаҡ ҡына күҙәтеп ятырға кәрәк. Колхозсылар төшкө ашҡа туҡтағансы, үҙенә кәрәкте ала һалып, күҙҙән юғалыу хәйерле.

Аш бешергән ерҙә берәү ҙә ҡалмай. Усаҡ яғып, ҡаҙан аҫалар ҙа эшкә тотоналар: һәр ҡайһыһына көндәлек норма бирелгән. Ҡаҙан тирәһенә дежурға көн һайын ҡатын-ҡыҙҙарҙың береһен ҡуялар. Ул усаҡ янына килеп-китеп йөрөй, ҡаҙандағы ашты ҡарай, утҡа утын өҫтәй, бесәнен дә сабырға өлгөрә. Әле лә усаҡ янында ҡырҡ-ҡырҡ биш йәштәр самаһы бер ҡатын уранғылай.

Тау һөҙәгендәге йыуан ҡарағай артына боҫто ҡасҡы. Арыла – ҙур яланда – ҡатын-ҡыҙ, үҫмер малай-шалай, ҡыҙ-ҡырҡын тауыштары яңғырап тора. Аҡтырнағының моронон ҡыҫты Ғәлимйән. Тауышыңды сығарма, тигәнде аңлата ине был. “Эттәре күренмәй, булһа ла, тегендә – бесәнселәр янында йөрөйҙөр, – тип уйланы егет. – Хәйер, беленер-беленмәҫ ел улар яғынан, эт булған хәлдә лә тиҙ генә һиҙмәҫ”.

Ҡатын арбалағы әйбер-ҡараны япты ла шул аҡланға ҡарай атланы. Уның артынан эсе янып ҡарап ҡалды ҡасҡы. “Урларға ине был бисәне”, – тигән уй үтте башынан, әммә шунда уҡ нәфсеһен тыйҙы ҡасҡы: йәшәйһең килһә, тормошҡа ашмаҫ теләктәреңә баш бул!

“Шым!” – Ҡасҡы этенең башынан һыйпаны. Ҡыуаҡлыҡтар артына һуҡанлап боҫа-боҫа, арба янына килде. Аҙыҡ-түлек шунда булырға тейеш. Әһә, тоҙҙары күп, эре тоҙ! Ҙур ғына киҫәген ярты тоҡтай әйбер һыйырҙай тоҡсайына һалды. Бесәнселәргә лә ҡалдырҙы. Танауына бешкән ит еҫе бәрелде. “Иттәре бешеп сыҡҡан. Тиҙҙән төшкөләккә туҡтаясаҡтар”. Был уйы сосайтты уны. Ҡаҙандағы һарыҡ ботон эләктерә һалып, уны ла тоҡсайына тыҡты. Өс плитә таҡта сәйҙәрен, шырпыларын бүлешеп алып, кеҫәләренә тултырҙы. Шундағы сепрәккә ярты биҙрәләй он төрөп алды, аҙыраҡ картуф та тоҡсайында урын тапты. «Аҡтырнаҡ, әйҙә!» тип шым ғына бойорҙо ла этенә, йүгерә-атлай урманға инеп китте. Оҙаҡ барҙы шулай. Артынан тауыш-фәлән ишетелмәне. Ҡарурман ҡосағында ҡасҡы аҙымдарын аҡрынайтты: һунар уңышлы үтте.

***

Йылғаның түбәнге ағышында ҡоралайҙар һыулауға төшкән һуҡмаҡ күргәйне Ғәлимйән. Иртәгәһенә шунда йүнәлде. Хәнйәренән башҡа уның ҡоралы юҡ. Шулай ҙа ҡоралай аулауҙың берәй әмәлен тапмаҡсы.

Балта, көрәк алды аусы. Аҡтырнаҡ, ғәҙәтенсә, хужаһына эйәрҙе. Соҡор ҡаҙып, шунда төшөрөп булмаҫмы ҡоралайҙы?

Һуҡмаҡтың ярылып тапалыуына ҡарағанда, ҡоралайҙар бында көтөүе менән йөрөгән. Йылғаға төшөп һыу эскәндәр ҙә кире боролғандар. Шул эҙҙәр менән атланы һунарсы. Йөҙ аҙым да барманы, тәрән уйымға килеп терәлде. Ҡоралайҙар был соҡорҙо урап үткәндәр. “Бына бит, тәбиғәт минең өсөн тырышҡан!” – тип ҡыуанды Ғәлимйән. Хайуанды соҡорға төшөрә алһа, ул аусынынҡы буласаҡ. Уйымдың һөҙәк яғын, көрәге менән ярҙы ҡырҡҡылап, текәләтеп сыҡты. Ағас ботаҡтары тунап төшөрөп, уларҙы ике-өс ҡат итеп соҡор өҫтөнә арҡырыға-буйға

түшәне. Инде үҙенән, этенән ҡалған еҫтәрҙе бөтөрөргә тырышырға кәрәк. Тоҙло һыуҙы ботаҡтарға, соҡорҙоң тирә яғына, артҡа сигәләй барып, үҙе йөрөгән ерҙәргә һипте. Аҡтырнағын бер аҙым да ситкә ебәрмәне. Йылғаға килеп төштө, һыуҙы ағынға ҡаршы кисеп, әкрен генә юғарыға – ҡыуышына ҡарай атланы. Һиҫкәнеп китте шул саҡ, шып туҡтаны: унан ҡурҡып, яҫы таш аҫтынан ҡап-ҡара арҡалы шамбы, аҡрын ғына йөҙөп килеп сыҡты ла, ҡумырыҡ араһына инеп китте. Тулҡынланыуынан ни эшләргә белмәне ҡасҡы. Тирә яҡты яҡшылабыраҡ ҡарап сығырға булды: ана, ҡаршыһында – ботаҡтары һыуға һалынып үҫкән йыуан ерек аҫтында, бәләкәй генә ятыу. Йылға эреле-ваҡлы таш өйөмө аша сылтырап ағып төшә лә, уларҙың аҫтында – ҡаршы яр буйында ятыу хасил итә. Тимәк, балыҡ шунда үрсей. Ятыуҙы оҙаҡ тикшереп йөрөнө ул, аяҡтары өшөй башлағас ҡына ярға сыҡты. Ҡыуанысынан йырлағыһы килә – балығы ла буласаҡ! Былдай ризыҡ башына инеп тә сыҡмай ине бит уның! Бер яҡтан, яңы асышы ҡыуандырһа, икенсенән, һунар ҡомары ҡалҡып ҡайтып инде ул ҡыуышына: яңы көн тиҙерәк тыуһасы!

Иртәгәһенә Ғәлимйән ҙур һаҡлыҡ менән кирбестәрен соҡорға ташып, бер нисә ҡат теҙеп һалып сыҡты. Өҫтөнә күп итеп ҡоро-һары ағас өйҙө. Утынды соҡор янына ташып ҡуйҙы, сөнки усаҡты оҙаҡ яғырға кәрәк. Ул ҡыҙыу янырға тейеш, балсыҡ шул саҡта ғына янып, кирбескә әйләнәсәк. Ҡоро утындың төтөнө аҙ була. Етмәһә, соҡорҙоң тирә яғын шәм һымаҡ, шыйҙан ҡарағастар уратып алған. Усаҡ алыҫтан күренергә тейеш түгел. Хоҙайға тапшырып, Ғәлимйән усағын тоҡандырҙы. Ҡоро ҡайын гөлтләп янып та китте. Гел өҫтәп торҙо ҡасҡы утынды. Мәшәҡәтләнә торғас, төш ауғанын һиҙмәй ҙә ҡалды.

Һунарсыға ғына хас эске бер һиҙгерлек уны ҡоралайҙар һуҡмағына әйҙәне. "У-у-ө-ө! У-у-ө-ө!" Бала һымаҡ бәлә һалып, мөҙөлдәгән ҡоралай тауышын Ғәлимйән йыраҡтан уҡ ишетте. Аҡтырнаҡ алға ынтылды, тик көслө ҡулдар уның муйынсаҡ бауын ысҡындырманы. Соҡорға йәш ҡоралай тәкәһе төшкәйне. Ул, ирекkә ынтылып, үҙен ян-яҡҡа ташлай. Тик тояҡтар әләгер нәмә юҡ, кире тәгәрәй ҙә төшә уйым төбөнә. Ике яҡҡа тарбанлап үҫкән мөгөҙҙәре менән ярҙы һөҙгөсләп ҡарай. Юҡ, соҡорҙан сығып ысҡынырлыҡ әмәл юҡ!

Аусының ярһыуынан йөрәге дөп-дөп тибә, ҡулдары тыңламай. Соҡорға эйелеп, арҡандың элмәкле осон саҡҡа хайуандың мөгөҙҙәренә кейҙерҙе ул. Соҡорға һикереп төштө. Бауҙы көс менән аҫҡа тартып, ҡоралайҙың башын ергә ҡыҫты. Хәнйәрен биленән һурып алды ла боғаҙлап ебәрҙе.

Итте ҡыуышына ташып алыу, уны турап, йылға буйында ҡаҙып эшләгән ҡар баҙына төшөрөү менән кис етте. Төн уртаһы етеүгә, ҡасҡы ла, Аҡтырнаҡ та ҙур-ҙур татлы ҡоралай һөйәктәрен мөнйөйҙәр ине инде.

***

Балыҡ тотоу сәме Ғәлимйәнгә тынғы бирмәй бөгөн. Ҡалған бөтә эшен онотоп, ҙур ҡосаҡ ваҡ тал сыбығы ҡырҡып килтерҙе лә, мурҙа ишергә керешіте. Был эште атаһынан күргәне бар, тик үҙе ишеп ҡарағаны юҡ. Өйрәнер, үҙенсә ҡыландырыр. Шарандарға ҡалһа, уныһы ябай әйбер: талды теҙеп һалаһың да, икенселәре менән арҡырыһына ныҡытып ишеп сығаһың. Аҡтырнаҡ, туҡ булғанғамы, йыраҡ китмәй, хужаһының эшен күҙәтә. Һуңғы бер нисә төндә һыуыткайны, апаҡ ҡырау ҙа төшкәйне, күгәүен ҡаңғыртмай.

Мурҙа һалып ҡайтыуға, көн кискә тартҡайны. Кирбестәрен барып ҡараны. Оҡшатты ул был эшен дә. Көслө ялҡында, ҡыҙыу күмерҙә янып, таш һымаҡ ҡатҡан кирбестәре.

Кисен, тамаҡ туйҙырғас, Ғәлимйән ҡыуыш алдына сығып ултырҙы. Урманды

тотош һоро эңер солғап алған. Күк йөҙө аяҙ, көҙгә табан йондоҙҙар ҙа яҡтыраҡ булып тыуа. Һауала үлән еҫе аңҡый. Яҡын уға яланы, улай ғына ла түгел, ярата ул яланын! Тын алыуҙары шундай рәхәт, иркен. "Нәфисәм, аҡыллым минең, ҡайғы белмәй, үҙебеҙсә кинәнеп йәшәрбеҙ урманда. Ошонда – үҙ өйөбөҙҙә – тау-таш, зифа буйлы ҡарағайҙар, хуш еҫтәрен бөркҡән үлән-сәскә араһында көн күрербеҙ. Берәү ҙә ҡамасауламаҫ беҙгә!"

Ҡасҡының уйҙары татлы.

Урманға ҡасып килгәне бирле, Ғәлимйәнде бөгөн беренсе тапҡыр күңел тыныслығы иҙрәтте. Хатта тау йылғаһы ла уның йөрәге тибеше ыңғайына сылтырай ҙа сылтырай һымаҡ. Тағы бер көндөң уҙғандың төпкөлөнә инеп сумыуын күреп хушлашыу көйөн көйләйме әллә ул?

Икенсе көндө иртәнсәк мурҙаға төшкән балыҡҡа ышанмай ҡарап торҙо ҡасҡы. Шамбы ғына түгел, бәрҙе лә бар ҙаһа йылғала! Ҡыуанысынан тәне зымбырланы, таҡмаҡ әйтеп, мурҙаһы тирәләй бейергә тотондо. Уның шатлығы Аҡтырнаҡҡа күсте, лауылдап, Ғәлимйән янында һикерәнләне.

Тиҙҙән Нәфисәһен урманға алып килергә, бының өсөн буласаҡ өйөнөң ҡалған эштәрен бөтөрөргә кәрәк булһа ла, Ғәлимйән бөгөн үҙенә ял иғлан итте. Балыҡ тотоу шатлығы ифрат көслө уның! Балыҡты һурпа итеп һыуҙа ла, һарыҡ майына ҡурып та бешерҙе. Малай саҡтарында Ғәҙелйән менән балыҡты әрекмән япрағына төрөп, усаҡта ҡыҙҙыра торғайнылар. Уны ла эшләне.

Көн аяҙ, матур. Ҡояш нурҙары ҡыя төшә хәҙер, шуғамылыр, артыҡ эҫе түгел. Уйҙары йылы егеттең: бына уның биләмәләре, барыһы ла бар бында. Янында Нәфисәһе лә йөрөһә, рәхәтләнеп йәшәйәсәктәр.

Ҡапыл ни аралалыр эргәһенән китеп өлгөргән Аҡтырнаҡтың сәңкелдәгән тауышы яңғыраны. Донъяһын онотоп иҙрәп ултырған егет һиҫкәнеп китте. Уны саҡыра бит! Сепрәк менән япты ла алдындағы ашамлығын, эт абалаған тауышҡа ҡарай йүгерҙе. Ахылдай-ухылдай мәмерйәһе артындағы тау ҡыраһына менеүгә, Аҡтырнаҡты күреп, туҡтап ҡалды: ҙур, йомро бурһыҡты өңөнә индермәй маташа эте. Тегеһе ыҫылдай, сыйылдай, нисек тә булһа ярһыған эттән ҡасып ҡотолорға тырыша. Бурһыҡ! Бына ҡайҙа ул дарыуға май! Ләкин әлегә уны тотоп булмаясаҡ. Хәнйәр мылтыҡ түгел.

– Аҡтырнаҡ, әйҙә бында!

Эт, аптырап, хужаһына ҡараны. "Мин һиңә йәнлек тотошам да. Килә һал үҙең бында тиҙерәк!" – тигән һымаҡ уның бөтә ҡиәфәте. Шунан файҙаланып, бурһыҡ өңөнә инеп юғалды. "Ғәйебем нимәлә һуң?" – Аҡтырнаҡ башын эйеп, ҡойроғон болғап, хужаһы янына килде.

– Аҡтырнаҡ, һин аҡыллы этһең, үпкәләмә миңә. Ә бурһыҡты беҙ тоторбоҙ, сабыр ит. Һин булмаһаң, белер инемме мин уның бында оялағанын?

Эттең яңаҡтарынан, башынан һыйпай-һыйпай ҡосаҡлап, иртәгә бурһыҡты нисек итеп тотасағын күҙ алдынан үткәреп, ҡасҡы тәмле йоҡоға сумды.

"Төнөн бурһыҡ үҙе һунарҙа йөрөһә, төш ваҡытында ояһында ятырға тейеш", – тип уйлап, көн үҙәгенә тиклем Ғәлимйән өйөнә кирбес ташыу менән булды. Өй эштәренән мейес сығарыу ҡалды. Уның нисек буласағы тураһында уйлап ҡуйған. Мейес өйҙөң түрге мөйөшөндә торасаҡ, йылы йөрөй торған ҡойолары бишәү буласаҡ. Ут, шул ҡойоларҙан үтеп, кирбестәрҙе йылытасаҡ. Уларынан йылы өйгә тараласаҡ. Төтөн, туп-тура күккә олғашып, әллә ҡайҙан күренеп тормаһын өсөн, тау үренә ҡарай ҡаҙылған, таштар менән ҡапланған канау буйлап беленмәй таралып бөтәсәк. Был эш бөгөнгә тороп торор. Ғәлимйән әле бурһыҡ аулау теләге менән яна.

Бурһыҡ ҡалҡыуыраҡ урында оялаған. Бына өңөнөң ауыҙы. Дошман һөжүм

итә ҡалһа, өңөнән сығып һыҙыу өсөн тағы ла бер нисә ауыҙ булырға тейеш. Эйе, ана ул икенсе ҡасыу юлы. Был йомро тишек ҙур ғына, бурһыҡ үҙе иркен һыйып йөрөрлөк. Шулай ҙа, яҫы таш аҫтына индереп үк ҡаҙылғас, тиҙ генә шәйләп алырмын тимә.

Өңдөң шул ауыҙына ут яҡты ҡаҫҡы. Үҙе, ҡулына күҫәк тотоп, ояның алғы яҡ тишеге янына сүгәләне. Тыныс ҡына көттө артабан ни булырын. Башта тишектән аҙлап төтөн сыға башланы. Ниһайәт, бурһыҡтың аҡһыл һыҙатлы һоро мороно ла күренде. Бышҡырына-сөскөрөнә үҙе килеп сыҡты шунан. “Дөңк!” Бурһыҡ аусының аяҡ аҫтына тәгәрәне, хәнйәр йөрәген ярҙы.

Урман тормошона көндән-көн ныҒыраҡ күнегә барҙы ҡаҫҡы, үҙенә яңынан-яңы асыштар асты. Эргәһендә дуҫы – Аҡтырнағы – булғанғамы, тиҙҙән янына Нәфисәһе килеүе өмөтөмө, әллә көноҙонон эш менән үткәргәнгәме, үҙен игәгән ауыр, яңғыҙлыҡ тойғолары баҫылғандай булды. Нәфисәһен күсереп алып ҡайтыу өсөн бер нисә көндән өйө тулыһынса әҙер буласаҡ. Тик һөйгәне менән бергә генә күсеп инәсәк ул өйөнә!

## Күсенеү

Көҙөн Уралда тәбиғәт үҙгәреп тороусан. Бәғзе көндәрҙә ҡояш, иртәнсәктән үк ялтырап, йылмайып килеп сыға ла, ҡаҫҡыны наҙлай башлай. Уның йылыһы, хатта кейем аша үтеп, ағзаларын иркәләй, күңелен күтәрә, илаһи дәрт өҫтәй. Көндәр аҙыраҡ шулай матур тора ла, урманды тағы илаҡ, һалҡын болоттар баҫа ла ала. Бындай саҡтарҙа Ғәлимйән тартылған ҡыптыр тиренән үҙе теккән көртөкәйен, итектәрен кейеп ала. Йәшәр урыны әҙер инде уның. Әйҙә яуһын ямғыр, әйҙә һыуыһын көндәр – инде уға барыбер!

Ҡайһылай шәп килеп сыҡты өйө! Бәләкәй генә ҡәлғә, тиерһең. Ситтән, ҡырҡ-илле аҙым йыраҡлыҡтан ҡараһаң, бында – тау тишегендә, кеше йәшәй тип уйламаҫһың да. Мәмерйәнең ауыҙын ҡаплаған бура ла килеп терәлмәйенсә күренмәй – ғәскәр һымаҡ сафтарға теҙелгән ҡарағайҙар ышыҡлай. Артыңдың ныҡ булыуын тойоу ниндәй рәхәт!

Мейесе лә көйлө килеп сыҡты. Ябып ебәрһә, тиҙ йылына, йылыһы шундуҡ өйгә тарала. Сөгөндәге ашы ла көттөрмәй бешеп сыға. Сәйен ҡайнатып алыуға мейестәге уты янып бөтә. Мәмерйә саңырына баҫҡыс эшләп һөйәгәйне, шунда менә һала ла Ғәлимйән, бер генә яҫы ташты шыуҙырып, мейестең мөрйәһен томалай. Иртәгәгә тиклем өйҙәге йылы шул көйөнсә тора. Тимәк, ҡышҡы сатнама һыуыҡтарҙа ла өйҙә йылы буласаҡ. Аҡбалсыҡ ташы табып яндырып, мейесен, өй стеналарын, түшәмен ағартып ебәрҙе. Өй эсе яҡтырып, бейегәйеп киткәндәй тойолдо уға.

“Нәфисәне күсереп килтерергә әҙерһеңме, Ғәлимйән?” Үҙенең был һорауына ул: “Эйе, әҙермен!” – тип ауыҙ тултырып яуап биреү өсөн тырышты. Әле лә башҡарған эштәрен тағы бер барлап сығырға булды. Эйе, өйө әҙер, унда йәшәү өсөн кәрәкле шарттар булдырылған. Төптә – мейес артында, өңөп, мунса һымаҡ урын да эшләп ҡуйҙы хатта. Мейескә яҡһаң, уның артына өйөп һалған таштар ҙа ҡыҙа. Эҫе һыу һипһәң, нәҡ ҡәҙимге мунсалағы һымаҡ, тәнде йомшартып, ҡайнар боҫ борҡой. Мәтрүшкә ҡушып бәйләгән ҡайын миндек тә әҙерләп ҡуйҙы. Сабын әйҙә кинәнеп, йыуын эҫе һыу менән рәхәтләнеп!

Аҙыҡ-түлек өсөн Ғәлимйән өйҙә лә, ҡаяны онтай-онтай, мөгәрәп ҡаҙып алды. Тышта, йәйҙәрен һалҡын булһын өсөн, яңынан тәрәнерәк итеп ҡарбаҙ ҡаҙҙы. Уның төбөндә ике яҡлап өңдәр соҡоно. Бында ул, киҫәкләп ҡырҡып, боҙ тултырасаҡ. Әле үк ҡарбаҙҙа ит, балыҡ, тоҙланған бәшмәк һаҡлай. Өйҙәге мөгәрәбендә бәрәңге, ҡаҡланған, киптерелгән еләк-емеш, он тота. Нәфисәне күсереп

килтергәс тә тик ятырға тимәгән дә, ҡышҡа тиклем әллә күпме эштәр башҡарып өлгөрөр.

– Нәфисә, һине барып алып ҡайтырға ваҡыт етте! – тине ул үҙенә хисләнеп. Әйтерһең, тауышын һөйгәне ишетергә тейеш ине...

Ауылға барыу өсөн дөм-ҡараңғы төндө һайланы ҡасҡы. Һаҡланғанды Хоҙай үҙе һаҡлар, ти торғайны әсәһе. Һаҡ булырға, һәр аҙымын уйлап баҫырға тейеш ул был яғына.

Нәфисә йоҡлай ине. Бер-ике тәҙрә сиртеп, саҡ ҡына тауыш биргәйне Ғәлимйән, барыһын да аңланы ул. Урынынан һикереп торҙо.

– Килдеңме? Һағындым үҙеңде, түҙәр әмәлем ҡалманы...

– Килдем, килдем, Нәфисәкәйем! Әйттем бит килеп алып китәм тип! Әйҙә, йыйын.

– Мин әҙер, күптәнән.

Ике йәр бер-береһенә тартылды...

***

Төргәктәрен күтәреп, үҙ биләмәләренә килеп ингәндә, ҡояш арҡан буйы күтәрелгәйне инде. Шәп атлай алманы улар, Нәфисә төнгө урманға күнекмәгән.

– Бына ошо ҡыуышта йәшәнем әлегә тиклем. – Ғәлимйән үҙен йәлләтергә түгел, ғорурлыҡ менән әйтте. – Бөгөн яңы өйөбөҙгә күсәбеҙ! Ял итә тор, мин барып өйҙө әҙерләп киләйем.

– Ҡурҡам да мин бер үҙем...

– Ҡурҡма, Нәфисә, Аҡтырнаҡ яныңда ҡалыр. Ул-был була ҡалһа, хәҙер тауыш бирә ул. Мин оҙаҡ йөрөмәм, ҡурҡма!

Ҡасҡы ҡосаҡлап үпте лә һөйгәнен, өйөнә ҡарай күтәрелде. Шундай рәхәт уға, еңел. Бына, ниһайәт, мораҙына иреште. Нәфисәһе менән бергә буласаҡ был яғына! Йылмайыуы йөҙөнән китмәй.

Нәфисәне башлап индергәнендә өй ялтырап торорға тейеш. Тиҙҙән ашы ҡайнап сыҡты. Үҙҙәре менән алып килгән әйбер-ҡараны урынлаштырҙы. Өйөн тағы бер йыйыштырып алды. Өҫтәленә ике тәгәс, ике көрөшкә ҡуйҙы. Аҡтырнаҡтың ояһы алдына уның үҙенең һауытын ултыртты.

– Инде барһаң да була Нәфисәң артынан! – тип һөйләнде ул үҙенән ҡәнәғәт ҡалып. Хәҙер һөйгәнен етәкләп өйөнә алып инәсәк ул!

Ҡыуышы янына килгәндә, Нәфисә, Аҡтырнаҡты һыйпай-һыйпай, ауыҙы эсенән көй көйләп ултыра ине.

– Өйөбөҙ һине ҡабул итергә әҙер, Нәфисәкәй!

Егеттең күҙҙәренә тура ҡарап, наҙлы йылмайҙы һылыу ҡатын. Ҡанаттар үҫкәнме ни Ғәлимйәненә! Ҡайһылай шатлана ул! Әйтмәксе лә, былай ҙа ялтыраҡ көн ифрат матур күренә ине Ғәлимйәнгә. Шул тиклем ихлас шатланыр икән кеше...

Мәмерйәгә күтәрелделәр. Ғәлимйән, өйөнөң ишеген асты ла Нәфисәгә баш эйҙе.

– Рәхим итегеҙ, ханым! – тип шаяртты, ҡулы менән эскә ишараланы.

Үҙе йәшәйәсәк өйгә инде Нәфисә, оҙаҡ ҡына тикшереп ҡарап торҙо.

– Өйө ҡайҙа икән, тип баш ватҡайным. Былай икән...

– Эйе, бына шулай, Нәфисә. Нисек?

– Тырышҡанһың, йәнем.

– Рәхмәт. Һиңә оҡшаһас, мин дә бик шатмын. Хәҙер, Нәфисә, ижаб уҡыйбыҙ үҙебеҙгә.

– Ниндәй?.. Нисек ижаб уҡыйбыҙ?

– Саҡ ҡына сабыр ит.

Өҫтәл уртаһына ул әсәһенән ҡалған берҙән-бер изге ҡомартҡыны – Ҡөрьән Кәрим китабын килтереп һалды.

– Ижаб уҡылмаған, ҡайһылай ир менән ҡатын булып йәшәйбеҙ? Хоҙай ҡабул итмәҫ. Бисмиллаһир-рахманир-рахим. – Һул ҡулын Ҡөрьәнгә һалды. – Ҡулыңды минең ҡулға һал, Нәфисә. Уның әйткәнен эшләне Нәфисә. – Хоҙай бәндәһе Ғәлимйәндең хәләл ефете булырға ризаһыңмы? Өс тапҡыр әйт!

– Ризамын, ризамын, ризамын!

– Ғәлимйән! – Инде үҙенә өндәште. – Хоҙай бәндәһе Нәфисәне хәләл ефетең итеп алырға ризаһыңмы? – Үҙ-үҙенә яуап бирҙе: – Ризамын, ризамын, ризамын!

– Бына, Ҡөрьәнгә ҡулдарыбыҙҙы һалып анттар биреште. Ир менән ҡатын беҙ хәҙер. Амин!

– Эйе... – Нәфисәнең күҙҙәрендә йәштәр ялтыраშты. Бүтәнсә һүҙ әйтә алмай ултырҙы. Бик тулҡынлана ине ул был мәлдә.

– Никах табынының һый-хөрмәте алдыңда, Нәфисә, рәхим ит! – тине Ғәлимйән тантаналы тауыш менән. Өҫтәлдәге ҡоралай, һарыҡ итенә, таба икмәгенә, тоҙланған бәшмәккә, ҡурылған балыҡҡа, еләк ҡағына күрһәтте. Ҡатынының ирендәренән һурып үпте. Нәфисә лә иренә һыйынды.

– Ашауың һәйбәт икән, – Нәфисә бармаҡ остарына ғына эләктереп ҡулына балыҡ алды. – Балыҡ та тотаһыңмы?

– Балыҡ күп бында. Ауылға барыр алдынан мурҙаны ҡарап, иплэп һалып китҡәйнем. Иртәгә бергәләшеп барып ҡарарбыҙ, үҙең күрерһең.

Нәфисәнең ашамлыҡтан риза булыуы ҡыуандырҙы Ғәлимйәнде.

– Бөгөн тәҙрәгә быяла ҡуйып ебәрһәм...

– Әле нимә тора унда?

– Киреп киптерелгән ҡоралай ҡарыны. Быялабыҙ булды бит инде, ҡарынды алып, ике ҡат быяла ҡуям. Ҡөрьән китабына айырым кәштә эшләрмен, күҙ ҡараһылай һаҡлайыҡ уны.

Ике бүрәнәне бысып, оҙонсалай уйылған тәҙрәнән, ҡарын тартылыуға ҡарамаҫтан, байтаҡ уҡ яҡтылыҡ төшә. Быяла ҡуйып ебәрһә, тағы ла яҡтырасаҡ өйө. Атаһының алмас һыҙғыһының да кәрәге тейҙе.

Ашыҡмай, һөйләшә-һөйләшә ашанылар. Аҡтырнаҡ, туйып, башын тәпәйҙәренә һалды ла, күҙҙәрен бер иргә, бер ҡатынға йүгертеп, уларҙы күҙәтә. Бына өсәүбеҙ хәҙер, ниндәй рәхәт беҙгә, тигән һымаҡ.

– Ҡышҡа тиклем башҡараһы иң ҙур эшем – ат ҡыуып килтереү эше тора минең, Нәфисә. Ҡыш бауыры оҙон, ти торғайны атайым, һуғымһыҙ ауырға төшөр. Урманды ҡар ҡаплаһас, эҙ ҡалдырып ауылдарға сығып йөрөй алмайым мин. Хәҙер арттан төшөрҙәр. Ҡышҡыһын үҙебеҙҙең биләмәләрҙән сыҡмай ғына йәшәргә тура килер.

– Кеше малын урлап ашайбыҙмы?

– Ә мин ни эшләргә тейеш, Нәфисә?! Минең аттарҙы урланылар ҙа! Ниндәй көнгә ҡалдырҙылар бына!

Ирен ҡыҙғаныуы еңде Нәфисәне.

– Уныһын үҙең беләһең. Кеше рәнйетмәйбеҙме, тип кенә әйтеүем.

– Мине лә рәнйеттеләр, Нәфисә! Минең дә йәшәгем килә!

– Тыныслан, йәнем, тыныслан. Бына әле иҫкә төштө: милиция начальнигы Ғәлимовты күрҙем мин һин ауылға килеп киткәс. Һинең турала һорашты. Һаҡ булһын, эше ябылмаған әле, оҙаҡ ябылмаҫ тәфтиш эше, тине. Урманда ҡасып ятыуың тураһында һиҙенә ул.

– Ул ҡайҙан белә?!

– Тыныслан, тием бит. Ул белмәй – һиҙенә. “Эҙләһәм, күптән табыр инем инде. Ҡусты кеше бит, бәлки, дөрөҫ тә эшләгәндер, һаҡ булһын”, – тип иҫкәртте.

– Аңлашыла-а-а. Улай ғына булһа, ярай ҙа.

– Һуғышҡа алалар мине, тип хушлашты.

– Шулаймы? Һау ғына йөрөһөн. Атайым яҡтан яҡын ул.

“Ғәлимов ағай мине ихлас эҙләмәгән. Күҙ буяп маташҡандыр, моғайын. Шунһыҙ булмаҫ. Ихласлаһа, тапмай буламы? Тимәк, төйәгебеҙ ғүмерлеккә ошонда – урманда буласаҡ! – тип уйланы Ғәлимйән. – Ауылды, кешеләрҙе оноторға кәрәк. Ғәлимов ағай уны тиккә иҫкәртмәгән!”

Был уйҙарын ул ҡатынына сисеп торманы. Артығы ниңә кәрәк?

Ул, ярай, өйрәнде урманға. Әйтерһең, ғүмер буйы бында йәшәгән. Нәфисәһе нишләр? Ауылды, әхирәттәрен һағынасаҡ, әлбиттә. Быныһын Ғәлимйән, үҙе кисергәс, яҡшы беләә. Ярай әле, ҡатынының ата-әсәһе көтөп ултырмай. Етем ҡалғанда уға ун ике йәш самаһы ине. Күрше ауылда кейәүҙәге апаһында йәшәне. Ете класты бөтөргәс, ауылға кире ҡайтты, атам-инәм өйөндә булам, тине. Апаһы, еҙнәһе ярҙам итеп торҙолар. Үҙе колхозға эшкә төштө.

Юҡ, Ғәлимйән барҙа уның һымаҡ уҡ һағынып өҙгөләнмәҫ Нәфисәһе! Ғәлимйән барҙа? Ә ниңә һин булмаҫҡа тейешһең? Нәфисәне ышандырып, урманға кем алып килде? Хәҙер һин ҡатының өсөн дә йәшәргә бурыслы! Үлем тураһында уйларға ла хаҡың юҡ! Һөйгәнең яҡшы йәшәһен тиһәң, үҙеңде һаҡларға бурыслыһың! Үлһәң дә, Нәфисәнән һуң ошонда ятып үлерһең!

Көн кисәүләне. Ғәлимйән, ауыҙы эсенән мығырлап көй көйләп, ашыҡмай ғына тәҙрәгә быяла ҡуйҙы. Был эшен тамамлап, үҙенән риза булғас, алып киләсәк аты торорлоҡ урын кәртәләп ҡуйҙы. Нәфисә өй эштәре менән булашты. Бөгөн генә барлыҡҡа килгән ғаилә яңы тормош менән ғүмер кисерә башланы.

Ҡатынының ашы бешеп сыҡты.

– Ғәлимйән, ин өйгә, аш беште!

Донъя һиллеге тойҙо ҡасҡы: ҡатыны уны ашҡа саҡыра! Ҡайһылай татлы Нәфисәһе бешергән аш! Тамағы туҡ Аҡтырнаҡ, оҙон ҡыҙыл телен сығарып ирендәрен ялай-ялай, ике күҙен хужаларынан алмай. Ул да шат. Ҡасҡының күңеленә еңел, рәхәт. Ошо көндә һис онотасаҡ түгел! Тәүге мөхәббәт онотолмаған кеүек.

## Сәғит менән Фәрит

Һунарға барам, кәләш, оҙаҡлабыраҡ китһәм, аптырап ултырма, тигәйне Ғәлимйән. Икенсе көн бына, һаман юҡ. Уҙған төндө, ҡурҡышынан йөрәге ярылмай, нисек үткәрҙе икән Нәфисә? Әллә нәмәләр уйлап бөтөрҙө ул. Эшкә әүрәп, ауыр уйҙарын башынан сығарып ташларға тырышты. Ире әсетергә ҡуйған төлкө, бүреһыҡ, ҡуян тиреләрен иләп-ирәкләп бөтөрҙө. Шунан ғына, инде ҡайтыр тип уйлап, аш-һыу әҙерләргә тотондо.

– Ваф! Ваф!

Аҡтырнаҡтың шат тауышы ишетелде.

– Ҡайтты, ана! – тип тышҡа атылды ҡатын.

Ерән ат һыбайлап алған Ғәлимйән аҡландарына килеп ингән ине инде. Атын тауға, өйҙәренә ҡарай, тартты. Аҡтырнаҡтың шатланыуы! Һикереп-һикереп хужаһының итеген ялай.

– Һау торҙоңмо, кәләш! – Ғәлимйәндең кәйефе шәп. – Бына һиңә һуғымға ат алып ҡайттым. Ҡатынын ҡыҫып-ҡыҫып ҡосаҡлап алды. – Һағындырҙың, Нәфисә!

– Ят күҙгә салынмаһын, тотолоп ҡуймаһын тип уйлап, йәнем сыға яҙҙы.

– Уңай килеп сыҡты барыһы ла. Бер төндө күҙәтеп ятып үткәрергә тура килде. Туп-тура барып алып булмай ул атты. Йыраҡтағы ауылдан, урыҫтарҙан, сәлдерҙем.

– Ярай ҙа ул... Ин өйгә, хәҙер аш бешеп сыға.

– Атты ғына торғалыҡҡа ҡуяйым да. Өҫтәлеңдә әҙерләй тор.

Ләззәтләнеп әйтте был һүҙҙәрен ҡасҡы. Ҡайтыуыңа ятраҡкан кәләшең көтөп торһон әле!

Көҙ башында уҡ әҙерләп ҡуйған бесәнен атына һалды ла, Ғәлимйән ҡатыны янына өйгә инде. Урманда көн иткән өс йән эйәһе, киске ҡорға йыйылып, тыныс ҡына фани донъяның тағы бер көнөн оҙатты.

***

Көҙгө урман үҙгәрҙе. Тәбиғәттә хәҙер күпселек еүеш һауа, йоҡо килтергес мыжыҡ ямғырҙар хакимлыҡ итә. Күк йөҙө лә түбәнерәк, тарыраҡ. Һалбыр болоттар ергә йәбешә. Серегән үлән, бәшмәк, мүк еҫтәре, уҡмашып, тотош урманды баҫып алған. Ауыр ул еҫтәр, күңелдә шомлоҡ тыуҙыра. Инде ҡоштар йыры ла һирәк ишетелә.

Ғәлимйән менән Нәфисәнең көндәре ҡышҡылыҡҡа әҙерләнеү мәшәҡәттәре менән һиҙелмәйенсә үтә торҙо. Бөгөн иртәнсәк улар тағы мурҙаларын барып ҡараны. Һәйбәт төшкән балыҡ, шул уҡ эреле-ваҡлы шамбы ла, ике ус аяһындай ҙурлыҡтағы бәрҙеләр. Мурҙаһын ярға сығарып бушатты ла Ғәлимйән, яңынан йылға уртаһына индереп һалып ҡуйҙы. Мурҙаның ике яғынан ағас бағандарға теркәтеп ҡуйған шарандарын ипләштерҙе.

– Бөгөн ҡоралайға һунар итмәксемен, кәләш, әллә һин дә бараһыңмы?

Һунар сәмен тойоп өлгөргән ҡатындың күҙҙәре ялтырашты. Шулай ҙа:

– Һиңә ҡамасаулап йөрөмәмме? – тип һорауҙы урынлы тапты.

– Киреһенсә, миңә дәрт бирерһең, ярҙамың ғына тейер.

Шаштырып ебәрҙе. Ағас ботаҡтары ташып, соҡор өҫтөнә түшәп һалып сығыуы уға бер ни ҙә тормай. Һөйгәненең күңелен күтәреү, яңғыҙын ҡалдырмаҫҡа тырышыу уйында.

Ҡоралайҙар һыулауға әле һаман шул һуҡмаҡтан йөрөй. Һунарсы йыш килмәгәнгәме, уларҙың ҡурҡҡаны һиҙелмәй. Һәр ваҡыт, етмәһә, ағас ботаҡтарын соҡорға яңыртып түшәй. Һыуға иҙеп һибелгән тоҙ ҙа уларға оҡшап ҡалғандай. Һәр хәлдә Ғәлимйән шулай уйлай: соҡор ситендәге ағас япраҡтары кимерелеп бөтә.

Барыһын да әүәлгесә эшләп ҡуйҙы ҡасҡы, хатта уйымдың ярҙарына ла тоҙло һыу һипте. Аҡтырнаҡты, есен ҡалдырып йөрөмәһен тип, Нәфисә тотоп торҙо.

– Булды, Нәфисә, Аҡтырнаҡты етәкләп лә һуҡмаҡ буйлап алдан китегеҙ, – тине аусы. Үҙе, һуҡмаҡҡа тоҙло һыу һибә-һибә, арттарынан барҙы.

***

Тәүге ҡар мул яуҙы. Ҡыш килде. Көндәр һыуытты, йылға ситтәре боҙ менән ҡапланды. Тик айырым-айырым ағын урындар һаман, үҙҙәрен яҡты донъянан ҡаплатҡылары килмәй, дәртле йырҙарын йырлай бирә.

Ҡапҡан ҡуйырға, мурҙа ҡарарға йөрөттө ҡасҡы ҡатынын. Өйҙә бер үҙен ҡалдырмаҫҡа тырышты. Тотҡан балыҡтарын киптерергә элделәр. Байтағын, ҡоралай ите менән бергә, ҡарбаҙға төшөрҙөләр, өҫтөнән боҙ түшәнеләр. Тағы ла ҡоралайҙың ҡабырға итен һылап алып, тоҙлап киптерергә элделәр. Ғәлимйәндең әсәһе шулай итә торғайны. Һуғым һуйып ебәрһәләр, уларҙың йылҡы ите лә буласаҡ. Бер тоҡҡа яҡын ондары бар, тоҙҙары ла етерлек. Мөгәрәптәге бәрәңгеләрен орлоҡҡа тип һаҡлай Ғәлимйән. Бәрәңге сәсергә урын да ҡарап ҡуйған.

Тоҙло бәшмәк, емеш-еләк – ҡорҙарына өҫтәлмә ризыҡ. Өс баштарына тағы нимә кәрәк?

Тормоштары ыңғай бара, тик ҡатынының йыш йүткереүе күңелен һыҙлата ҡасҡының. Йөҙө һарғайып, күҙҙәре төпкә батып китте ана. Хәрәкәттәре лә әллә нисек, яй ғына. Өтә баҫып йөрөгәнен... Хәле юҡ икәнлеге күренеп тора, шулай ҙа, иренә ауыр хәлен белдермәҫкә тырышып, көсләп булһа ла йылмайып ҡуя. Тәне уттай янып, тора алмай ятып китте бер көндө. Ғәлимйән ҡатынының янында уранғыланды. Мәтрүшкә, кейәү үләне төнәтмәләрен алдынан өҙмәне. Йылҡы һурпаһы бирҙе, бурһыҡ майын иретеп, ҡалаҡлап эсерҙе. Аҙна-ун көн тирәһе дауаланы ҡатынын. Шунан ғына ҡатығып, тороп йөрөй башланы Нәфисә.

Февраль айы бурандары, һелкетеп, ағастарҙы ҡарҙан таҙартып бөтөрҙө. Көндәр ҙә, төндәр ҙә инде йылыраҡ. Өрпәк аҙау ҡар епшене, йомшарҙы.

Йоҡларға ятҡайнылар. Нәфисә башын иренең күкрәгенә һалды.

– Ғәлимйән, мин йөклө лә ул...

– Йөклөһөң?

Нәфисә башын ҡаҡты.

– Бик һәйбәт, Нәфисәкәй, ир менән ҡатын булғас, уларҙан бала ла тыуа инде ул! Тик ауырыма, ҡурҡытма мине бүтән, йәме?

– Ярай, тырышырмын...

Уларҙың балалары буласаҡ! Әллә ҡалай ирмәк хистәр: Ғәлимйән – атай! Ул булырмы, ҡыҙмы? Кем булһа ла барыбер уға, иҫән-һау тыуһын. Нәфисәһе ауырып китмәһен.

– Аш бешер, Нәфисә, сәй ҡайнат, ҡашығаяҡ йыу, – тине ул ҡатынын наҙлап ҡосаҡлап. – Ауыр күтәрә күрмә, яраймы?

– Шулай итермен, Ғәлимйән.

Утынды ике-өс көнгә етерлек итеп, өйгә ташып ҡуя башланы Ғәлимйән, күнәктәрҙе һыуҙан өҙмәне. Нәфисәһе тамам төҙәлеп, кәйефе күтәрелеп китте. Кистәрен оҙаҡ итеп хәбәр һөйләшеп ултыралар, алдағы тормоштарын барлайҙар. Лампалағы кәрәсин тамам бөткәс, Ғәлимйән сыраға күсте.

– Һине урманға алып килгәс кенә тынысландым, Нәфисә. Ифрат ауыр ине миңә һинһеҙ.

– Миңә лә кешеләрһеҙ йәшәүе еңел түгел. Шулай ҙа, ауылдағы тормош иҫкә төшһә, бында булғаныма ҡыуанып та ҡуям. Һинең янымда икәнлегеңде тойоу ҙа һәйбәт. Тик, оҙаҡ йәшәрбеҙме урманда, тип уйлайым да, йәнем өшөп китә. Кешеләр менән аралашып йәшәмәгәс, Ғәлимйән, барыбер ҡыйын.

– Уныһы шулай... Тик ҡайҙа бара алабыҙ беҙ? Ауылға ҡайтып булмай әлегә.

– Юҡ, юҡ! Ауылға ҡайтһаҡ, айырылыштыралар беҙҙе!

– Ауырып китә күрмә, Нәфисә! Һаҡла үҙеңде.

– Аслы-туҡлы, эсәктәр өҙөлә яҙғансы эшләнек тә ауылда. Гел ауыр күтәреү берәй зарар килтермәһә ярар ине, тип уйлайым. Тик эсем ауыртты ауырығанда.

– Һаҡлай күр үҙеңде, ауыр күтәрмә был яғына. Матур ғына йәшәп ятҡанда...

– Әйҙә ул турала уйламайыҡ.

***

Аҙыҡ табыу ҡайғыһы юҡ ҡасҡының. Ҡарбаҙы тулы ит. Шулай ҙа, йылғалағы боҙ иреп бөтөү менән, тағы мурҙа һалды. Әле генә тотолған балыҡтың тәме бөтөнләй башҡа, ашаған һайын ашағы килеп тора.

Буш ваҡыттарында, бигерәк тә кистәрен, һыҙғырта торғас, ҡурайҙа яҡшы уҡ

уйнарға өйрәнеп алды Ғәлимйән. Атаһы күҙ алдынан китмәй, унын һымаҡ тартырға тырышты. Ҡурайы моңо күңеленә һеңеп ҡалған егеттең. Кистәрен, башын атаһының күкрәгенә һалыр ҙа, ҡурайҙан ағылған һағышлы ла, моңло ла көйҙәрҙе оҙаҡ итеп йотлоғоп тыңлар ине. Ғәлимйән дә, атаһына оҡшатырға тырышып, урындыҡҡа салкан төшөп ята, уйнай ҙа уйнай ҡурайын шунан. Үҙе өсөн дә, Нәфисәһенә лә күңел аҙығына әүерелде ул ҡурай.

*...Табаҡ та ғына табаҡ, ай, аҡ ҡағыҙ*
*Буранбайҙың яҙған да хаттары.*
*Шул хаттарҙы уҡып ҡарап, вай кем,*
*Зар илайҙар ауыл ҡарттары...*

Атаһы һымаҡ йырлап та ебәрә. Нәфисәгә:

– Әйҙә ҡушыл, икәүләп йырлайыҡ! – тип ныҡыша. Унынһы ҡәнәғәт йылмая, башын һелкә.

– Һин йырлағанда, миңә тыңларға ғына.

Көҙөн төрлө йыуанлыҡтағы ҡурай йыйып алып ҡайтып, түшәмгә ҡағылған сөйҙәргә теҙеп һалып ҡуйҙы. Оҙон көйҙәр йыуаныраҡ ҡурайҙан моңло сыға, еңелдәре иһә нәҙегерәктәрҙән яҡшыраҡ яңғырай. Бейеү көйҙәренә күсһә, ағас ҡумыҙын матур ирендәренә терәп, Нәфисә ҡушыла.

*... Күршебеҙгә ҡунаҡ килгән,*
*Инде нихәл итәйек?*
*Туҡмаҡ ҡойроҡ ҡара бәрәс*
*һуйып ҡунаҡ итәйек...*

– Ярай әле, үҙебеҙҙең күршеләр юҡ! – тип шарҡылдап көлә Ғәлимйән.

Мөхәббәт тулы күҙҙәре менән иренә ҡарай Нәфисә.

– Һуң, булһа нимә?

– Уларға ҡунаҡ килеп төшһә, беҙгә лә саҡырып алырға кәрәк була ла! – Тағы көлә Ғәлимйән.

– Ә-ә-ә, эйе шул... – Килешә ире менән Нәфисә, унын шаяртыуына ҡушыла. Яулығының сите менән генә ҡумыҙын һөртөштөрөп ҡуя. Әсәһенең иҫтәлеген – ҡумыҙҙы бик һаҡлап тота ул.

Йылы, ҡоро көн бөгөн.

– Тик өйҙә ятып бәлһерәп кителде, кәләш, мин урманға сығып йөрөп киләйем. Аҡтырнаҡ һинең менән ҡалыр.

"Ә мин бармайыммы?" – тигән һымаҡ һөйкөмлө ҡараш ташлаһа ла Нәфисә иренә, белә: унын һаулығы өсөн борсолған Ғәлимйән ҡаршы төшәсәк, оҙон юлға уны алмаясаҡ. Шуға күрә:

– Алдыңды-артыңды ҡарап ҡына йөрө, – тиеү менән сикләнде.

– Кискә әйләнеп ҡайтырмын.

Ҡатынын ҡосаҡлап сәстәренән һыйпаны.

Алдына ниндәйҙер бер маҡсат ҡуйманы ҡасҡы. Дәррәү баш ҡалҡытҡан үләнсәскәләргә, йәшел хәтфә күлдәктәрен яңыртҡан ағастар матурлығына һоҡланып, май ҡояшы йылыһы аҫтында атланы ла атланы. Ел түгел, саҡ ҡына һауа баҫымы ҡуҙғалһа ла, асыҡ-йәшелгә сорналған уҫаҡ япраҡтары, шыбыр-шыбыр бер-береһенә сәләмдәр ебәрешкән һымаҡ, дерелдәшә башлайҙар. Ғәлимйәндең битенә, муйынына үрмәксе ауҙары, йәбешкәк ҡарышлауыҡтар һылана, һирәкһаяҡ яңы терелгән серәкәй килеп ҡуна. Юлсының артыҡ иҫе китмәй уларға, ҡулы менән һыпырып ҡына ҡуя. Тын алыуы шундай рәхәт, иркен. Һәр яҡтан һиллек бөркөлә. Урмандан таралған татлы еҫтәр танауын ҡытыҡлай.

Урманда яңғыҙың йөрөүе – меңәрләгән аҙымдарға һуҙылған тынлыҡ ул. Йәш, йомшаҡ үләндән атлауы үҙе бер кинәнес, ер һәлмесәп торған һымаҡ. Ғәлимйәндән ҡурҡып, йә алдан, йә уңдан, йә һулдан “киҡ-ҡи-и-иҡ” тигән тауыштар сығарған ҡошсоҡтар, үлән араһынан фырылдашып күтәреләләр ҙә, төрлө тарафтарға осошоп китәләр. Ана, уңдараҡ, кәкүк саҡырырға тотондо: “Кәк-күк, кәк-күк...”

– Эй, ҡошҡай, нисә йыл йәшәргә ҡалды миңә?

– Кәк-күк, кәк-күк... Кәк-күк, кәк-күк!

– Берәү, икәү... Ун өс, ун дүрт!

Был мәлдә ҡасҡы үҙенең урманда барлығы ун дүрт йыл йәшәрен белмәй ине әле.

– Миңә, һаран ҡош, ун дүрт йыл ғына ғүмер вәғәҙә иттең. Ярай, быныһына ла рәхмәт! – тине ул. Күңеле күтәрелеп китте. – Һин, кәкүккәй, шунса ғүмер бирһәң, икенсегеҙ, бәлки, тағы өҫтәр...

Көнбайышҡа ҡарай атлауында булды Ғәлимйән. Бәләкәй-бәләкәй һаҙлыҡлы аҡлансыҡтар артта ҡалды. Шау сәскәгә күмелеп, күпереп ятҡан ялан алдында туҡтап ҡалды хатта: миҙгелдең иң матур, иң наҙлы, күркәм биҙәктәре ул – сәскәләр! Ниндәй ҡөҙрәт, ниндәй тартыу көсө уларҙа! Шуғамылыр, ошо яҙҙың йәйгә күскән сағын йыл әйләнәһенә онота алмай, һағына кешеләр.

“Был яҡтарҙы ҡарап сығыу зыян итмәҫ”, – тип уйлап, юлын дауам итте ҡасҡы. Сәскәләр өҫтөнән үтергә баҙнат итмәй, яланды урап үтте. Алда, тау итәгендәге асыҡ урында, ялбырап үҫеп ултырған йөҙйәшәр ҡарағайҙы йыраҡтан уҡ күрҙе. Ағас тирәләй кескәй генә ике йәнлек уранғылай. Туҡтап, уларҙы күҙәтте. Айыу балалары бит! Бер-береһе менән көрәшергә булып китәләр, ҡарағайға үрмәләргә ынтылалар, йыуан олонға ҡоластары етмәй, кире тәгәрәшеп төшәләр.

Урынынан ҡуҙғалманы Ғәлимйән. Инә айыу шул тирәлә йөрөргә тейеш. Балаларын ҡурсаларға уйлап, уға ташлана торған булһа – бөттө баш! Сабыйҙарҙы күҙәтеп байтаҡ ултырҙы, инә айыу күренмәне. Ғәлимйән әкрен генә айыу балаларына яҡынлашты. Билендәге хәнйәрен ҡапшап ҡуйҙы ирекһеҙҙән. Туҡтамай йүгерешкән йомро йән эйәләре, Ғәлимйәнде шәйләп, аптырашып уға текәлделәр. Ғәлимйән ҡуҙғалманы, ике күҙе генә инә айыу килеп сыҡмаһын тип күҙәтә, ҡолаҡтары бер генә тауышты ла ысҡындырмаҫҡа тырыша. Бына сабыйҙарҙың береһе – саҡ ҡына ҙурырағы – ҡасҡыға ҡарай атланы, икенсеһе уға эйәрҙе. Инәләре килеп сыҡһа! Әммә айыу күренмәй, тауышы ла ишетелмәй – урманда тынлыҡ. Шулай етем ҡалдығыҙмы, сабыйҙар?!

Айыу балалары Ғәлимйәнде уратып уйнарға тотондо. Салбар балаҡтарынан тартҡылайҙар, артҡы тәпәйҙәренә баҫып, уның түшенә ынтылалар, иңбашына эленгән тоҡсайына үреләләр. “Асмы әллә былар?” тигән уй башынан үтте. Тоҡсайынан ит киҫәктәре алып айыу балаларына һондо. Бешкән итте башта оҙаҡ еҫкәп торҙо кескәйҙәр, шунан ҡулынан тартып алдылар ҙа йолҡҡолай-йолҡҡолай йотоп ҡуйҙылар. Уларҙан күҙҙәрен алмай, Ғәлимйән үҙе лә бер киҫәк ит һоғондо. Былар менән ни ҡылырға?

Шул саҡ ағас олононоң урта тирәһендә мыжғыған ҡорттар иғтибарын йәлеп итте. Бал ҡорттары, солоҡ ҡорто ла баһа! Нәфисәһен бал менән һыйлаясағын күҙ алдына килтереп, хатта ауыҙына төкөрөгө йыйылды ҡасҡының. “Солоҡ балын алыр өсөн әҙерләнеп килергә кәрәк”, – тип уйлап, айыу балаларын арҡаларынан һыйпап яратты ла, ҡайтыу яғына ҡуҙғалды. Аҙыраҡ эйәрә бирҙеләр ҙә тегеләре, өмөт менән мөлдөрәмә күҙҙәрен уға төбәп, арт һындарына сүгәләнеләр. “Инәләре һәләк булған булһа, астан үлә бит был сабыйҙар!” Был уйы

бер ҡарарға тиҙ килтерҙе ҡаҫҡыны. Тоҡсайына ултыртты ла уларҙы, шәп-шәп атлап урманға тартылды.

– У-а-а! У-а-а! О-о-у-у!

Кинәт пәйҙә булды айыу. Аҡландың ҡаршы яҡ сыуаҡлығынан үкерә-үкерә килеп сыҡты, туп-тура Ғәлимйәнгә ташланды. Ҡасыу башына ла инеп сыҡманы миҙәтле ирҙең. Хәйер, ҡасып та ҡайҙа бараһың?! Ниндәйҙер бер эске көскә буйһоноп, хәнйәрен һурып сығарҙы. Бар булған көсө, бөтә булмышы йомғаҡҡа төйнәлде. Урынында ҡатып ҡалды шулай ҡаҫҡы.

Аралар тиҙ ҡыҫҡарҙы.

Ғәлимйәндең күҙҙәре айыуҙың йөрәге тапҡырында. Бына йыртҡыстың эҫе тыны битенә бәрелде… Хәнйәре айыуҙың йөрәген телгәндә, үткер тырнаҡтары арҡа тиреһен һыҙырғанын тойҙо ул…

Күпме ятҡандыр, күҙҙәрен асҡанда, эргәһендә үле айыу кәүҙәһен, уны уратып еҫкәнеп-төрткөләп ҡаңғырған балаларын күрҙе. Арҡаһы әсетеп һыҙлай. Ағзаларының теүәл ҡыбырлауҙарына ҡарағанда, айыу уның арҡаһын берҙе генә һыпырып өлгөргән. Шул тирәнән япраҡтар өҙөп алып, арҡаһына, күлдәге аҫтына, тыҡҡысланы. Йыртҡыстың тырнаҡ эҙҙәренә йомшаҡ япраҡтар тейеү менән еңеллек тойҙо ул. Яраһы ҡурҡыныс түгел икәнлеген аңланы. Был турала бүтән уйламаҫҡа тырышты.

Ул айыу үлтерҙе! Ул – көслө! Күңелендә урғылған ғорурлыҡ хистәрен тиҙ генә баҫа алманы ҡаҫҡы…

– Эй, малайҙар! – тине ул бәләкәстәргә. – Инәйегеҙҙе үлтергән өсөн ғәфү итегеҙ инде мине! Тик шуны белегеҙ, шилмалар: инәйегеҙ үҙе башлап ташланды миңә! Ә мин унан көслөрәк! Минең дә йәшәйһем килә!

***

Нәфисә айыу балаларын моронсоҡтарынан, арҡаларынан һыйпаны. Шунан, һиҫкәнеп, уға йылмайып ҡарап торған Ғәлимйәндән:

– Арҡаң ныҡ һыҙлаймы? – тип һораны.

– Туйға тиклем төҙәлә ул!

– Ниндәй туй ти ул?

– Беҙҙең туй булмаған бит әле! – Ғәлимйән көлгәндә, күкрәге һелкенеп торҙо. – Ауылға ҡайтырбыҙ бына йәшәргә, туй үткәрербеҙ.

Үҙе ышанмаһа ла, шулай тине Ғәлимйән.

Иренә ҡушылып Нәфисә лә көлгән булды.

Яраларына бурһыҡ майы һөртөп, таҙа сепрәк менән урап бәйләп ҡуйҙы ҡатыны. Арҡаһының һыҙлауы баҫылғандай итте, еңел булып ҡалды. Ҡатыны уның күҙҙәренә ҡараны.

– Ә ҙурайһалар нишләрбеҙ?

– Ҙурайғансы өйрәнә бит улар беҙгә, ҡул айыуҙарына әйләнәләр. Үҙебеҙгә һаҡсы булырҙар, – тип тынысландырҙы ул ҡатынын.

– Үҙебеҙгә ташлана башламаһалар ярай ҙа… – тип шөбһәһен йәшермәне Нәфисә.

– Ҡурҡма, кәләш, ҡурҡма. Сабыйҙарҙы урманда ҡарауһыҙ ҡалдырып китә алманым мин. Астан үләләр бит! Хәҙер балыҡ менән һыйлайым.

– Исем ҡушайыҡ. Өйрәнеп китһәләр, саҡырыуға уңай булыр.

– Бына шәп әйттең, кәләш. Мин уйламай ҙа инем! Кем тип ҡушабыҙ?

– Әлләсе, айыуҙарға ниндәй исем ҡушалар һуң? Үҙең беләһең.

Айыу балаларын, инәләренең тиреһен, көсө еткән тиклем итен күтәреп ҡайтып килгәндә үк уйлап ҡуйғайны инде Ғәлимйән исемдәр тураһында. Әле ҡатынын тағы бер маҡтап алайым тип алдына сыҡманы. Береһенә – Сәғит, икенсеһенә –

Ғәҙелйән тип ҡушырға уйлағайны. “Ғәҙелйән” төшөп ҡалды шунда уҡ, яҡын кешене иҫкә төшөрөп торор гел, ҡайғы яңыртыр. Сәғиткә оҡшаш Фәрит булыр, тип уйлағайны.

– Сәғит менән Фәрит булһалар?

– Ниңә кеше исемдәрен?

– Бындағы кешеләр – беҙ икәү генә. Кеше исемдәре күберәк булыр, тип әйтәм.

– Йә ярай, булһын, улайһа.

Килештеләр. Фәрит менән Сәғит уларҙа йәшәй башланы.

Аҡтырнаҡ башта айыу балаларын ҡабул итмәне. Хужалары улар менән уйнай башлаһа, шыңшый-шыңшый ситкә китә, асыуынан фырҡылдап, йыраҡтан күҙәтеп ята.

– Ғәлимйән, күрәһеңме, Сәғит менән Фәриттән ҡыҙғана беҙҙе Аҡтырнаҡ.

– Күрҙем, Нәфисә. Ҡалайтһын, беҙҙең иғтибар тик уға ғына булды бит быға тиклем. Шуға көнеккән. Өйрәнер, бер ҡайҙа ла китмәҫ.

Айыу балаларына өйҙәре эргәһендә ҡыуыш һымаҡ ҡоролма әтмәләп ҡуйҙы Ғәлимйән. Төндәрен шунда инеп йоҡларға күнегеп китте сабыйҙар. Исемдәрен айыра алмай ҡаңғыралар. “Фәрит!” – тип ҡысҡырһалар ҙа, “Сәғит!” – тип өндәшһәләр ҙә хужалары – уларға барыбер. Икеһе лә йүгерешеп килеп етә. Көндәр буйына төрлө кәмиттәр күрһәтеп бөтөрәләр. Тора бара уларға Аҡтырнаҡ та ҡушыла башланы. Тормоштарына йәм өҫтәне Сәғит менән Фәрит урман кешеләренең.

***

Аҙ булһа ла бал алып ҡайтыу теләге менән янған Ғәлимйән тағы юлға әҙерләнә башланы. Нәфисәнең яулыҡтарынан башын, битен ҡорттарҙан һаҡларлыҡ итеп кәләпүш тектеләр. Арҡан алды, биленә балтаһын ҡыҫтырҙы ла урманға инеп йомолдо ҡасҡы.

Ҡарт ҡарағай уны тәү тапҡыр осрашҡандағыса ҡаршыланы. Яҡын-тирәлә лә үҙгәреш күрмәне ҡасҡы. Көн артыҡ эҫе түгел, шулай ҙа томра. Тик тау битенә, ҡарағай янына күтәрелгәс кенә, аҙыраҡ ел беленде. “Күк күкрәп ямғыр яуыр, ахырыһы, көн һарығыуға, – тип уйланы Ғәлимйән. – Кискә тиклем ҡайтып етергә кәрәк”.

Солоҡ ҡорто мәж килә. Бал тейәп ҡайтҡандары оя ауыҙы алдына килеп ҡуналар ҙа “бейей” башлайҙар. Йөктәрен бушатып сыҡҡандары уларҙы бер аҙ күҙәтеп ултыра, бейеүсе ҡорттарҙың ни әйтергә теләгәндәрен аңларға тырышалар. Шунан, аңғарып ҡалып, дәртләнешеп осоп китәләр.

– Бә-ә-әй-й, былар үҙ-ара һөйләшәләр ҙә баһа! – Ғәлимйән хайран ҡалды. – Балды ҡайҙан йыйып килтерергә кәрәклеген бер-береһенә хәбәр итәләр. Ғәжәп! Был йән эйәләрендә лә аҡыл бар икән!

Көслө оялағы бал ҡорттарының эшмәкәрлеге уға күстеме, ҡарағайҙан артыҡ йыраҡ китмәй усаҡ тоҡандырҙы. Ағас торонбашланғас, арҡанының бер осона таш бәйләп ботаҡтар араһынан кире яҡҡа ырғытты, икенсе осон түбәндәге ботаҡҡа нығытып бәйләп ҡуйҙы. Борҡорап төтәгән торонбаш алды шунан, арҡан буйлап юғарыға үрмәләне. Бал ҡорттары Ғәлимйәнде һырып алды, әммә бимазалай алманылар. Кәләпүш уны яҡшы һаҡлай. Төтөн менән ҡорттарҙы ояларынан ҡыуып ебәрҙе Ғәлимйән. Иркенләп һауытына бал тултырып алды.

Ғәлимйәндең һиҙеме дөрөҫкә сыҡты. Ул өйөнә ҡайтып инеүгә, урғылышып өйөрөлгән ҡара болоттар урманды ҡаплап алды. Йәшен йәшнәп, күк күкрәп, эре ямғыр ҡойорға тотондо. Иҫәпһеҙ-һанһыҙ биҙрәләрҙән ҡоямы ни ямғыр!

– Бал әлегә күп түгел, йыйыу өҫтөндә ҡорттар. Рәхмәт уларға, барын бирҙеләр, – тип шаяртты Ғәлимйән, ҡатынына биш ҡаҙаҡтай бал тотторҙо.

Ҡорт балы алып ҡайта алыуына бик шат ул.

– Ҡарале, юҡ менән булып йөрөйҙәр, тиһәм. Урманда ла бал була икән! – тип ҡыуанды унымы ла. Һөйгәненең был һүҙҙәрен татлы бал йотҡандай ҡабул итте ҡасҡы, ауыҙы йырылды.

Яу әйҙә, ямғыр! Ғәлимйән менән Нәфисәгә унан зыян юҡ. Йылы өйҙәрендә улар, ана, айыу итен тәмләйҙәр, баллап сәй эсәләр.

## Юғалтыу

Тормоштары үҙ сираты менән аҡты урман кешеләренең. Нәфисәнең эсе ҙурая барғанлығын күреп, бер яҡтан ҡыуанһа, ныҡ итеп ауырып китә күрмәһен, тип борсолоуы ла артты Ғәлимйәндең. Ҡатынының ашауын төрләләндерергә тырышты. Еләк ҡағын үҙе ҡабып та ҡуймай, гел Нәфисәһен ҡыҫтай.

– Үҙең дә аша һуң, – ти Нәфисә.

– Миңә еләк нимәгә, файҙалы ризыҡ һиңә кәрәк, кәләш, – тип ныҡыша ире.

Уйлағанын эшләне ҡасҡы. Бер тигеҙ, ҡояшлы аҡланда көрәге менән ер баҫып, унда, урманда ҡарап ҡуйған ятҡылыҡтан торф ташып таратып һалып, ике биҙрәнән ашыу картуф ултыртты. Киләһе йылға, Хоҙай насип итһә, күберәк ултыртыр. Бәрәңгеһе лә буласаҡ уның!

Бер көндө күп итеп яҫы-яҫы үлән япраҡтары, балтырған йыйып, һарына ҡаҙып алып ҡайтты ҡасҡы.

– Был япраҡтарҙы атайым “башҡорт кәбеҫтәһе” тип, ашҡа һалдыра торғайны. Балтырған менән һарынаны шул көйөнә аша, файҙалы улар, – тине ул. Ҡатынын ҡосаҡлап, ҡабарып торған эсен һыйпаны. – Иҫән-һау ғына ҡотол инде, йәме, аҡыллым?

– Тырышырмын...

Сәғит менән Фәрит, ашауҙары яҡшы булғанғалыр, айлап түгел, көнләп үҫтеләр. Ҙурайҙылар, йыуанайҙылар, һимерҙеләр. Хужаларына ҡаршылаша башланылар. Ҡайһы саҡта хатта Ғәлимйәнде тыңламай үкерешеп, һуғышырға маташалар. “Бүрене бүреккә һалһаң да урманға ҡарай”, – тиеүҙәре дөрөҫ икән. Хафалана башланы ҡасҡы. “Үҙем өйҙә юҡта Нәфисәне имгәтмәһен былар, Алла һаҡлаһын! – тип уйланы. – Ҡотолорға кәрәк уларҙан!”

Уйын ҡатынына әйтте.

– Нәфисә, уҫалайҙылар был айыуҙар, ҡулға ныҡлап эйәләштереп булманы былай булғас. Бикләп тотоп, яндарынан китмәй тәрбиәләргә кәрәк ине лә бит... Уларҙың ыңғайҙарына гел тороп булманы. Олаҡтырайым мин уларҙы, төпкөлгә илтеп ҡалдырайым.

– Шулай ит, Ғәлимйән, ҡурҡам мин уларҙан. Әйтәйем тип йөрөгәйнем әле үҙеңә.

Аҡтырнаҡты ҡатыны янында өйҙә ҡалдырып, ике үҫмер айыуҙы муйынсаҡтарынан етәкләп, әлеге сал ҡарағайға тағы килде ҡасҡы. Башта туйысына солоҡ балы тултырып алып төштө.

– Рәхмәт һеҙгә, эй, эшсән халыҡ! Миңә шул балығыҙ етте, ҡалғаны үҙегеҙгә йәшәргә булһын. Киләһе йыл тағы килермен ҡунаҡҡа, – тине ул үҙе тирәләй безелдәшкән ҡорттарға.

Татлы еҫ һиҙеп, айыуҙар сабырһыҙланды. Ғәлимйән, ағас ҡайырыһына һалып, уларға бал ҡалдырҙы ла, шәп-шәп атлап, ҡайтыу яғына йүнәлде. “Эйәрерҙәрме уға, әллә үҙ тормоштары менән йәшәп алып китерҙәрме?” – тип уйлап, артына ҡарай-ҡарай барҙы.

Айыуҙар эйәрмәне, һуңынан да күренмәне. Ҡырағай ҡара урман үҙ ҡосағына алды уларҙы.

***

Нәфисәнең хәле тағы насарайҙы. Йыш, күкрәк төбө менән йүткерә. Ашамай. Саҡ ҡына ризыҡ ҡапһа, эсен тотоп, бөгәрләнеп төшә. Төнәтмә йә, нәфсеһе төшөп, һурпа һемерһә лә, баҫтыра алмай, ҡоҫа. Ябыҡты, ҡатмаға ҡалды. “Эй Аллам, ҡалайтып ҡына ҡарайым һуң?” Өҙгөләнә Ғәлимйән Нәфисәһенә ҡарап, йөрәге телгеләнә.

– Бирешмә, Нәфисәкәйем, төҙәлеп китерһең бына...

Йыуата ҡатынын, эргәһенән китмәй.

Нәфисәне мунсала йыуындырып сығарҙы. Тирләһә, файҙаһы тейер, бәлки, тип уйланы. Аҙыраҡ тирләне Нәфисә. Ире түшәккә ятҡырып, юрғанға ураны. Үлән төнәтмәһе йотторҙо, бал ҡаптырҙы. Ойоно ҡатыны, тынысланды. Уны ҡосаҡлап, сәстәренән һыйпап ята торғас, Ғәлимйән дә йоҡлап киткән...

Нәфисәнең быуылып-быуылып йүтәлләүенә уянып китте ул.

Башын ике яҡҡа ташлап ыҙарғалана ҡатыны.

– Ғәлимй-ә-ән...һы-ы-ыу-у... – тип ыңғырашты.

Бер ҡулы менән Нәфисәнең ҡулын күтәрә биреп, төнәтмә эсерҙе. Ҡатыны күҙҙәрен асты.

– Бала тыуырға итә...

– Нишләйем икән ни?

– Һы-ы-у-у йы-лы-ыт...

Ғәлимйән мейескә утын тултырып әҙерләп ҡуйғайны, тоҡандыра һалды. Ҡоро утын, гөрләгән көй сығарып, ялҡындарын бейетә-бейетә янып та китте.

– Хәҙер һыу йылып сығыр.

– Кил әле яныма... – Тағы йүтәленә быуылды Нәфисә. – Тот эсемде, ярыла инде... Ултыр яныма Ғәлимйән...

Нәфисәнең ҡулдарын усына алды Ғәлимйән, икенсеһе менән эсен һыйпаны.

– Бирешмә, зинһар, Нәфисә! Бала тыуыр, бер һин тыуҙырмайһың да...

– Юҡ, йәнем, бала етлекмәгән. Ҡыбырламай. Үле тыуыр, әгәр тыуҙыра алһам... Хәлем юҡ, үлеп китһәм, бәхил бул... Кешеләргә ынтыл, йыраҡҡа сығып кит, бәхетеңде эҙлә!.. Һин һәйбәт кешеһең, бәхетле булырға хаҡың бар! Көсләһәң, шулай ҙа бер үҙең йәшәй алмаҫһың... урманда. Хайуан түгел дә һин – кеше!.. Яраттым мин һине... Рәхмәт... Тик ҡыҫҡа булды...

Йүтәле тағы яңырҙы ҡатынының, быуҙы аҡыллыһын. Ҡулдарын, берәй нәмәгә тотонорға теләгәндәй, ян-яҡҡа ташлай. Устарына ала ҡасҡы уларҙы, һыйпай. Тик ҡатыны тағы һурып ала ла ҡулдарын, тағы әллә ҡайҙарға ынтыла башлай.

– У-у-у-ф-ф-ф, өшөйөм...

Нәфисә иҫен юғалтты. Шул көйөнә уянманы. Тәне, әкренләп, һыуына башланы. Урындыҡтағы түшәк уның эркелеп аҡҡан ҡанына буялды. Хатта урындыҡтан иҙәнгә һарҡты...

– Нәфисә-ә-ә!!!... – Һин дә ҡалдырҙың мине... Ниңә шулай икән минең ҡисмәтем...

Күпме ятҡандыр Ғәлимйән һөйгәненең үле кәүҙәһен ҡосаҡлап, үкһеүҙән ҙур кәүҙәһе һелкенеп. Аҙыраҡ үҙен ҡулға алғанда, бар донъя ҡояш нурҙарына күмелгәйне. Сыр-сыу килешеп ҡоштар һайрай, иңкеш-күгәүендәр безелдәшә. Саҡ ҡына елгә бәүелеп, ҡарағайҙар, ҡайындар, уҫаҡтар, үлән-сәскәләр, Нәфисә менән бәхилләшергә теләгәндәй, баштарын эйә һымаҡ...

Үле бала тыуып, үҙе артынан әсәһен алды. Ғәлимйән уны йыуып, таҙа сепрәккә төрҙө.

– Атай булыу бәхете тәтемәне миңә...

Урындыҡтағы ҡанлы әйберҙәрҙе һыпырып алды. Нәфисәһен йыуҙы, ҡулдарын кәүҙәһе буйына һуҙып һалды.

– Бәхил бул, Нәфисә, бергә йәшәргә яҙманы беҙгә...

Күпме таҙа сепрәк бар, шуға төрҙө ҡатынын.

– Кәфенлегең булыр...

Ҡәберҙе өйөнән арыраҡ ҡалҡыулыҡта ҡаҙҙы. Ашыҡмай, диҡҡәт менән башҡарҙы был эшен.

– Өйөгөҙ һәйбәт булһын, мәңгелеккә...

Ҡатын-ҡыҙ мәйетен текә баҫтырып ҡуйғанда, уның күкрәге ҡәберҙән күренергә тейеш түгел икәнлеген ишеткәне бар. Ҡәберҙең тәрәнлеген шунан сығып ҡаҙҙы. Ләхет алды. Абусарына ла – тыуып, исем алып өлгөрмәгән йә үле тыуған эҙәми заттарҙы шулай тип атайҙар – урын иркен булһын тип, киңерәк итте ләхетте. Йомро, шыма усаҡ ағастарын, ике яҡтарын юнып тигеҙләп, ләхет ҡапҡаһы әҙерләне.

– Нәфисә, ташлап киттең, яңғыҙымды ҡалдырып...

Ҡояш инде туп-тура яҡтырта, ерләргә ваҡыт.

– Йәнегеҙ ожмахта булһын! Аҡтырнаҡ, тағы икебеҙ тороп ҡалдыҡ...

Ипле генә йөрөй ҡаҫҡы бер аҙ үҙенә тейешлеһен эшләп. Йөрәге ҡыҫып, күңеле тулышып, Аҡтырнаҡты ҡосаҡлай ҙа тағы һулҡылдай-һулҡылдай илай башлай. Сыйылдап, уға эте ҡушыла. Уның да күҙҙәренә йәш тулған. Әйтерһең, барыһын да аңлай!

Ҡара ҡайғы дәүҙәй ирҙәреңде лә бөгөп төшөрә икән!..

Ҡатыны менән Абусарҙы ерләгәс, зыяраттарын нәҙек усаҡ ағасы менән кәртәләп алды. Күктә йондоҙҙар ҡалҡҡансы яндарында ултырҙы шунан. Әллә ниндәй хәтирәләргә сумып, Нәфисәһе менән һөйләшеп бөттө. Татлы ла, аяныс та ине был хәтирәләр.

Аҡтырнаҡ хужаһының янынан бер аҙым да китмәне.

## Ауылда

Ул көндө – 9 майҙа – берәү ҙә эшкә сыҡманы. Һәр кемдән күңелдәрҙе елкендерерлек итеп урғылып торған ифрат көслө шатлыҡ та, йөрәк өҙгөс аяуһыҙ һағыш та, уҡмашып, ауылды бер юлы баҫып алды. Инәйҙәр, өләсәйҙәр һуңғы тамсы йәштәрен сығара. Хоҙайҙан илгә именлек теләп, ирендәрен ҡыймылдаталар. Ҡатын-ҡыҙҙың яулыҡ остары күҙ йәштәренә мансылған.

Кешеләр һандыҡ төптәрендә ятҡан иң зиннәтле әйберҙәрен сығарып кейенешеп алған. Бына тальян моңо яңғыраны. Оморҙаҡ яугир тарта уны. Һул ҡулын һуғышта өҙҙөргән. Таҙа итеп йыуылған, яҡшылап үтекләнгән гимнастеркаһының буш еңе һалбырап төшөп, осо бил ҡайышына ҡыҫтырылған. Ҡатыны – Сабираһы – уң ҡулын иренең биленә һалған. Һулаҡайы менән, һөйгәне һау ҡулы менән тальян төймәләренә баҫҡан һайын, уның күреген тартып килә. Башын күтәргән, күкрәген алғараҡ сығарған. Түшендә Ҡыҙыл Йондоҙ ордены, миҙалдары ялтырашҡан Оморҙағы өсөн ғорурланып атлай ҡатын. Бите, яңаҡтары буйлап йәштәре аға. Һөртмәй Сабира уларҙы – иренең иҫән-һау әйләнеп ҡайтыуы, Еңеү килеүе шатлыҡтарынан сыҡҡан йәштәрҙе...

Халыҡты клуб алдына йыйҙылар. Район етәкселеге исеменән Ғәлимов килгән. Ул – майор хәҙер, һуғыштан ҡайтҡас та элекке эшендә йөрөй – район милицияһын етәкләй.

Һүҙҙе уға бирҙеләр.

– Бөгөн бөтә ил менән байрам итәбеҙ – Еңеү байрамы! – тип башланы ул сығышын. Тауышы йомшаҡ, тигеҙ, шул уҡ ваҡытта көр, ышанысլы яңғырай.

– Бөйөк Ватан һуғышы Совет халҡы алдына ҡот оскос вәхишлеге менән килеп баҫты: йә фашистар, йә беҙ. Гитлерсы Германия илебеҙҙе ике-өс ай эсендә баҫып алырға, үҙебеҙҙе ҡырып һалырға, һис юғында ҡол итергә уйланы. Бөтә ил менән күтәрелде һуғышҡа халҡыбыҙ! Совет һалдаттары быға тиклем тарихта булмаған ҡаһарманлыҡтар күрһәтте. Тылда ҡатын-ҡыҙ, хатта бала-саға, үҙҙәрен аямай, аслы-туҡлы булыуҙарына ҡарамаҫтан, колхоз баҫыуҙарында, малсылыҡта бил турайтмай эшләне – һәр кем Еңеүҙе яҡынайтырға тырышты. Ауыр, бик ауыр һуғыш кисерҙек, иптәштәр! Шулай ҙа фашистарҙы үҙ өңөндә дөмөктөрҙөк – килеп сыҡманы Гитлерҙың уйы! Еңеү байрамы менән ҡотлайым, иптәштәр, барығыҙҙы ла!

Сығыш яһаусылар күп булды. Рәйхана уларҙы тыңламай, тиерлек, ике күҙе Ғәлимовта. Тура, мыҡты кәүҙәһенә хәрби кейеме килешеп тора, орден-миҙалдары уға олпатлыҡ өҫтәй. Ас яңаҡлы, ҡырлас танаулы йөҙөнән, үткер ҡараштарынан кешеләргә илтифатлыҡ бөркөлә. Утыҙ йәше тулмаған, тиҙәр, шулай ҙа халыҡ алдында ниндәй абруйлы!

Рәйхана Ғәлимовты һуғыштан алда ла күрә-күрә йөрөнө. Тәүге осрашҡандарында уҡ был типһә тимер өҙөрлөк егет ҡыҙҙың йөрәгенә ут һалды. Ауылда йыйылыштарҙа ҡатнашҡыланы. Комсомол ойошмаһын етәкләгән Рәйхана янына килде бер саҡ.

– Шунан, һылыу, эштәр барамы колхозда? – тип һорағайны. Йәшкелт күҙҙәрен ялтыратып, матур итеп йылмайыуы ҡыҙҙың йөрәген семерләткәйне. – Йәштәрҙең кәйефе нисек ауылда?

– Егеттәр, ҡыҙҙар тырыш беҙҙә. Колхоздың төп эштәрен улар башҡара.

Ғәлимовтың үҙенә ҡарата булған иғтибарынан ҡойолоп төшкән ҡыҙ тағы әллә нимәләр тытылдағайны:

– Ярай, һылыу, күрешербеҙ әле, – тип хушлашҡайны Ғәлимов ул саҡта.

Фронтҡа китер алдынан ауылға килеп, Нәфисә менән һөйләшеп китте. Ситтәрәк арбала ултырған Рәйханаға, эсен яндырып, ҡараны ла ҡараны моңһоу күҙҙәре менән.

Митинг бөттө. Халыҡ таралыша башланы. Күрәме ул Рәйхананы? Күргән, күҙәтеп торған. Тип-тигеҙ аҡ тештәрен ялтыратып йылмайып, Ғәлимов туп-тура уға ҡарай атланы. Йөрәге күкрәгенән сығырҙай булып типкән ҡыҙ ҡуҙғалырлыҡ көс тапманы үҙендә.

– Рәйхана, һаумыһығыҙ! Еңеү байрамы менән!

Тальян тауышы яңырҙы. Уға ағайҙарҙың, еңгәләрҙең, килендәрҙең таҡмаҡтары ҡушылды.

*... Алдыр Урал буйҙары,*
*Гөлдөр Урал буйҙары.*
*Ниместәрҙе дөмбәҫләргә*
*Китте Урал улдары.*
*Ал иттек илебеҙҙе,*
*Гөл иттек илебеҙҙе.*
*Фашистарҙан тапатмабыҙ*
*Беҙ изге еребеҙҙе...*

Үрге урамдан ир-аттың, ҡатын-ҡыҙҙың бергәләшкән йыры ишетелде:

*... Алыҫтанҡай, ай, күренгән*
*Ҡырҡтыҡайҙың ҡара ташы икән.*
*Беҙ китә лә тиеп ҡайғырмағыҙ,*
*Ил һаҡларға тыуған баш икән...*

– Халыҡ тантанаһы үҙәккә үтерлек... – Рәйхананың моңһоу күҙҙәре йәштәренә сыланды. Үҙен ҡулға алып, ауыр көрһөндө. – Күпме кеше ҡырылды һуғышта... Еңеү байрамы менән һеҙҙе лә ҡотлайым, бигерәк тә фронтовик булғанығыҙ өсөн.

– Бөтә халыҡ яулаған еңеү ул бөгөн.

– Шулай... Һеҙ әйтмешләй, ҡот осҡос булды һуғыш...

– Әйҙәгеҙ, йылға буйынан йөрөп әйләнәйек, Рәйхана, һорауҙарым да бар һеҙгә.

– Әйҙәгеҙ, һорағыҙ улай булғас. – Рәйхана йылғаға ҡарай атланы.

Урмандан – тауҙар араһынан ағып сығып, ауылды һыулаған йылға, ҙур булмаһа ла, ярҙары төрлө ағас-ҡыуаҡлыҡтарға күмелеп, бындағы кешеләргә көс бирә, йәшәгән урындарын матурлай. Йылға буйы бөгөн айырыуса күркәм күренде Рәйханаға. Үлән яҡшы уҡ күтәрелгән, ҡайһы бер сәскәләр ҙә, ҡояшҡа ынтылып, үрмәләшеп баштарын ҡалҡытҡан. Бөрөләре тулышып, япраҡлана башлаған таллыҡта әленән-әле ҡоштар һайрауы ишетелеп ҡала. Быларҙы күрерлек, тәбиғәт хозурлығы менән һоҡланып йәшәрлек инеме һуң һуңғы йылдарҙа? Иртә тороп эшкә йүгерҙеләр, кистәрен әлһерәп ҡайтып йығылдылар...

Рәйхана, тыуған ерҙәрен тәү тапҡыр күргәндәй һоҡланып, һаман алға атланы.

– Ҡарағыҙ әле, шундай матур икән дә ауылым!

– Матур һеҙҙә... – Ғәлимовты үҙ уйҙары биләп алған.

– Йә, бирегеҙ һорауығыҙҙы.

– Һорау тип... Беләһеңме... Беләһегеҙме, Рәйхана... – Ул тотлоҡто.

– “Һин”гә күскәс, ҡалһын шулай, Ғәлимов. Нимә тураһында һорарға теләүеңде лә беләм, шикелле. Нәфисә ҡайҙа юғалды, тимәксеһеңме?

– Нәҡ шулай. Тик минән ҡурҡма, Рәйхана, әгәр сер икән, бүтән берәү ҙә белмәйәсәк.

Рәйхана көлөп ебәрҙе. Сыңғырауыҡ нескә тауышы йылға буйын яңғыратты.

– Офицер һүҙенә нисек ышанмайһың!

– Ғәлимйән урманда ҡасып йәшәй, шулай бит?

Йәшел күҙҙәре һөйкөмлө, үтә ҡарайҙар. Дөрөҫөн әйтеүҙән башҡа сара ҡалманы Рәйханаға.

– Эйе, урманда ул. Ҡырҡ беренсе йылдың көҙөнә тартым Нәфисәне лә үҙе менән алып китте. Шунан бирле мин дә бер нәмә лә беләйем. Эҙләп табырға итәһеңме?

– Юҡ, Рәйхана, эҙләп йөрөмәм мин уларҙы. Үҙҙәре һайлап алған яҙмыштары. Хәйер, Ғәлимйәнгә бүтәнсә сара ҡалмағайны. Йәшәй алалар икән – йәшәһендәр. Закон әһелдәре бындай заманда Ғәлимйәнде иҫтәренә төшөрөп тормаҫ, уның ҡайғыһы төштән кире хәҙер. Шулай булғас, мин дә һүнеп барған күмерҙе ҡуҙғатып тормайым, тағы дөрләп янып китмәһен. Минең өсөн дә ҡәҙерле улар, Рәйхана, Ғәлимйән ҡусты тейеш кеше.

Артабан әйтер һүҙҙәрен уйлап торҙо башта Ғәлимов.

– Рәйхана, ҡыҫҡаһы, мин тура һүҙле кеше. Кейәүгә сыҡ миңә, әгәр риза булһаң. Һуғышҡа ҡәҙәр үк яратып йөрөнөм мин һине. Ул саҡта әйтергә баҙнатым етмәне. Фронтта саҡта ла күҙ алдымдан китмәнең. Көс бирҙең миңә унда, тере ҡалырға ярҙам иттең!

Ҡолаҡтарына тиклем ҡыҙарҙы Рәйхана. Ғәлимовтың тәҡдим яһарын күңеле менән һиҙһә лә, былай кинәт килеп сығыр тип уйламағайны. Егет, уға тура ҡарап, яуап көттө.

– Шулай уҡмы ни... Әл-л-лә, бигерәк тиҙ. Хәйер, риза мин. Оҡшатып... йөрөнөм мин дә һине.

Ҡыҙҙы ҡосағына ҡыҫты Ғәлимов.

***

Еңеү байрамы тантаналарынан тиҙ арынды халыҡ. Яҙғы сәсеү эштәре ҡыҙҙы. Хәленән килгән һәр кем баҫыуҙарға, ырҙын табағына ашыҡты. Фронтовиктар ҡайтҡас, ауылда ирҙәр ишәйҙе. Сәсеү эштәре йылдамыраҡ, еңелерәк китте. Кешеләр ҙә иркенерәк һулағанға оҡшай, һәр эшкә күңел һалып, ихлас тотона.

Ауылға Ғәлимов хәҙер йыш килә. Райком вәкиле ул бында. Ашлыҡ келәттәренә, ырҙын табағында уранғылай. Ырҙында баш күтәрмәй эшләгән Рәйханаға яҡыныраҡ йөрөргә тырыша. Кистәрен йылға буйына төшәләр.

– Йөрәгем һулҡылдай, – тине бер көндө Рәйхана. – Нәфисә менән бер-бер хәл булған һымаҡ...

– Яҡшыға юрайыҡ, Рәйхана, – тип егет һөйгәнен иркәләп. – Уларҙы табып, ауылға алып ҡайтыуы ҡыйын эш түгел, тик... ике осло. Ғәлимйәнде хөкөмгә тарттырасаҡтар. Үҙ яйҙарына урманда йәшәп ятыуҙары хәйерле, тип уйлайым мин.

– Э-э-й-й-й, бахырҡайҙарым...

Туйҙарын улар көҙгө байлыҡта, игенде урып-йыйып алғас, уҙғарырға килештеләр.

– Һуғыштан һуңғы тәүге ашлыҡты йыйып алайыҡ башта, – тине Ғәлимов. – Ауыр ваҡытта, эш уттай ҡыҙыу саҡта, туй үткәреп ятыуы килешмәҫ. Күп ҡалманы көтөргә.

– Эйе, ярай... Шулай итәйек.

Ә офоҡ бөгөн бигерәк матур. Байыуға барған ҡояштың утлы шарынан бөркөлгән нурҙар урмандағы текә-текә тау ҡырастарын, үҙәндәрҙе, ҡая-ташты, уйһыулыҡтарҙы алһыуландырҙы. Ҡайындың, уҫаҡтың төрлө төҫтәргә буяла башлаған япраҡтары, иркәләнеп, йәйрәште. Шаңдаҡтағы һандал болот өйкөмдәре, ғәжәйеп һындар яһап, йәштәрҙе күңел-булмыштары менән тотошлайына тәбиғәттең мөғжизәле донъяһына алып инде.

– Ниндәй матур тыуған төйәгебеҙ!

– Эйе, Рәйхана, гүзәллектән күҙҙәр ҡамаша... Фронтта йөрөгәндә берәй саҡ бындай бәхет татыр тип башыма инеп тә сыҡманы. Һиңә ҡарата йәшәгән көслө эске тойғоларым һынырға бирмәне, ниндәй ауыр мәлдәрҙә лә йәшәүгә ынтылышым көслө ине. Әле бына... Шундай рәхәт һинең менән!

Тәбиғәт, йәштәрҙе тәбрикләргә теләйме, һаман шаяра. Ҡыя нурҙар бына, болоттар арауығынан кинәт килеп сыҡтылар ҙа, ауыл ашаһындағы баҫыуҙа бер шәлкем бойҙайҙы алтынға мансыны. Уғата шаянланып, шундуҡ кире болот араһына ҡастылар. Йәшеренеп оҙаҡ торманы улар, тағы асылып, бөгөнгә хушлашырға теләгәндәй, был юлы инде өҫтәрәк – тауҙағы бөҙрә ҡайын ҡатыш мәңге йәшел ҡарағай урманын ҡосаҡлап үптеләр. Шул арала бер көлтәләй шаянылраҡтары йәнәшәләге һарыҡ тиреһендәй генә бөҙрәкәй болотта тишек табып, тулыланып, баштарын ергә һәлендергән һолола ла уйнаҡсылап өлгөрҙө. Ниндәйҙер бер изге көс, болоттарҙы бер асып, бер ябып, бешеп етешкән иген менән кинәнеп уйнай, крәҫтиәндең күңелен ҡытыҡлай. Йомарт, хозур еребеҙгә ҡөҙрәт, моң һибә.

– Мөғжизә-ә-ә! Хатта йырлағы килә, Ғәлимов!

– Йырла һуң, Рәйхана!

Рәйхана инәлтмәне.

*Таштуъайҡай, һинең ҡамышыңды*
*Еҙ ҡурайҡай итеп тартайым.*
*Таштуъай ҙа, һинең кәкүгең юҡ,*
*Үҙ Уралҡайыма ҡайтайым...*

Һөйгәненән күҙҙәрен алмай Ғәлимов. Ә йыр моңо, йылға буйлап уралып, ауылға, кешеләргә, тарала...

*Таштуъай ҙа буйы, ай, күләүек,*
*Күләүек тә түгел, һаҙ икән.*
*Һаҙҙарында һайрар ҡоштары юҡ,*
*Моңло ҡошҡайҙары ҡаҙ икән!..*

Офоҡ тамам ҡыҙарҙы. Бергә уҡмашҡан ямғыр болоттарын йыртып сыҡҡан һуңғы ялтыр нурҙар, тандыр ғына һибәләгән ваҡ ямғыр пәрҙәһендә сағылыштылар ҙа, иртәгәһен тағы осрашыу ниәте менән, күҙҙән юғалдылар.

Йыр дауам итте.

*Таштуъай ҙа, һинең ҡурайың юҡ*
*Һағышымды көйләп тартырға.*
*Урал япраҡтары кире тарта*
*Таштуъайҙы ташлап ҡайтырға...*

Ҡапыл йәйғор ҡалҡты. Ер менән күк арауығындағы һаҙағай уйыны ауылда ураҡ мәле етеүен белдерҙе.

## Бөгөлөү

Яҡындарын юғалтҡан йыл үтә ҡыйын булды ҡасҡыға. Улын, тере тыумағанғамы, тиҙ онотто. Ә бына Нәфисәһе күҙ алдынан китмәй яфаланы. Төштәренә йыш инде.

– Һиңә унда нисек, ҡыйын түгелме, Нәфисә? – тип һорай ҡатынынан.

– Ю-ю-юҡ, йәнем, мине бында берәүһе лә рәнйетмәй. Фәрештәләр, әйҙәләп, тик яҡтынан-яҡтыға ғына алып йөрөйҙәр. Рәхәт шундай. Һине лә, улымды ғына эҙләп йөҙәйем ҡайһы саҡта.

– Әллә мин дә яныңа киләйем дә ҡуяйыммы, Нәфисә?

– Ярамай һиңә, Ғәлимйән! Үҙеңә ҡул һалыу оло гонаһ. Хоҙай Тәғәлә, һин ундай юл менән китһәң, минең янға ебәрергә бер ваҡытта ла рөхсәт итмәс. Улай ҡыланһаң, һине үҙенә алғас та беҙҙе берләштермәс. Һине тамуҡҡа оҙатыр. Шуны бел! Донъяға ялалғас, кеше фанилыҡтың барлыҡ һынауҙарын үтергә бурыслы. Был һынауҙар ни тиклем ауыр булһа ла! Онотма шуны! Түҙ, йәнем, һин әле йәшәргә тейешһең. Ҡалғанын Хоҙай Тәғәлә үҙе белә. Түҙем булһаң, осрашырбыҙ ҙа, бәлки, бер саҡ...

Йыуата ла ҡатыны, йылы, йомшаҡ томан-күлдәккә төрөнөп, әллә ҡайҙарға йөҙә лә китә. Йөҙө ап-аҡ, ап-аҡ күлдәге... Үҙен тыныс тота, тауышы талғын, саҡ ҡына йылмайып, йырлаған һымаҡ һуҙып ҡына һөйләшә. Шундай асыҡ ишетә һөйгәнен ҡасҡы!

– Нәфисә-ә-ә! Нәфис-ә-ә-ә!

Аҡыллыһының әйткән һүҙҙәре күңеленә инеп ята. Тормошта эләгеп тороп булһа ла йәшәргә тейеш икәнлегенә инандыра.

Тик... Ҡайһылай түҙергә уға? Төптән – эске донъяһынан, урғылып тышҡа типкән көс-булмышы кешеләргә ынтылғанда?! Сыҙап торғоһоҙ ауыр ҙаһа уға! Һағышы йөрәген ҡысып тотоп алған да саҡ ҡына ла ысҡындырмай! Нисек ыҙалата! Янында һөйгәне булмағас, өйө лә ҡомһоу төҫ алды. Яңғыҙаҡ йөрөүҙән, ярты-йортолоҡтан туйҙы ла тамам! Яратып, хыялланып алғайны ла аҙыраҡ. Артабан да шулай йәшәгеһе килә бит уның!

Берҙән-бер йыуанысы – Аҡтырнағы. Ул булмаһа, нишләр ине?

Унының, хужаһының хәлен аңлап, битен, ирендәрен ялай. Йыуата. Ҡосаҡлай этен ҡасҡы, иркәләй – һыҡтауы тамағына тығыла.

– Аҡтырнаҡ, китмә янымдан, ҡыйын миңә...

Китеүен-китмәй Аҡтырнаҡ, әммә бер саҡ яҙ ваҡытында юғалып тороп

ҡурҡытҡайны Ғәлимйәнде. Әллә ун көн, әллә унан да күберәк ваҡыт үтте. Аҡтырнаҡ юҡ. Ауылға ҡайтып киткәндер, хатта эт тә урмандан туйҙы, уға ла үҙе ишеләр кәрәк, тип уйлай башлағайны инде ҡасҡы.

Бер ваҡыт таң менән яҡында ғына бүре олоуына уянып китте. Бүреләр олоуын быға тиклем дә ишетеп торҙо, әммә бөгөнгө һымаҡ эргәлә генә олоған тауышты ул беренсе тапҡыр ишетә. Урынынан һикереп тора һалды.

– Ваф! Ваф! Ваф! – Юғарылағы, тау итәгендәге, аҡланда Аҡтырнаҡ, лауылдай-сәңкелдәй, уны саҡыра ине. Был яҡҡа – өй яғына, килә бирә лә, кире ағаслыҡҡа ҡарай саба. Аҡтырнаҡ ауылға ҡайтып китмәгән! Ул бында, урманда, йөрөгән. Был яңылыҡҡа ҡасҡы шул тиклем ҡыуанды, алабарманланып, этенә ҡарай ынтылды. Шул ваҡытта ғына ул ағаслыҡ ситендә тыныс ҡына ултырған бүрене, янында бер-береһе менән баҫтырышып уйнаған көсөктәрен күреп ҡалды. Бына эш ниҙә икән! Ғаиләһе бар ҙа баһа Аҡтырнағының! Эте өсөн ғорурлыҡ хистәре ифрат көслө ине шул саҡта!

Аҡтырнаҡтың тырышыуҙары бушҡа китте: аҡланға сыҡманы инә бүре, балаларын да ебәрмәне. Тиҙҙән эте лә күҙҙән юғалды. Иртәгәһенә генә, йоҡоһонан тороп сығыуына, өй тупһаһы алдында бөгәрләнеп йоҡлап ята ине дуҫы. Ошо хәлдән һуң ҡасҡы Аҡтырнағының оҙаҡ ваҡыттарға юғалып тороуына өйрәнеп китте. Йөрөһөн, этенең үҙ тормошо, уны ғына ҡарауылларға тимәгән!

Күпме ғүмер уҙҙы икән Нәфисәһен юғалтыуына, йылғаһынан күпме һыуҙар аҡты икән? Яҙмышына күнде ҡасҡы – күпме булһа ла барыбер. Күнмәй нишләһен? Йөрәге таш булып ҡаттымы – һыҙламай хәҙер. Һүрелде ул, ауырайҙы. Олоғайып киткәндәй тоя үҙен. Эте лә ҡартайҙы. Уның да ҡыбырлауы элекке һымаҡ түгел: инде янында өйөрөлөп-сөйөрөлмәй, хәрәкәттәре һүлпән. Әммә күҙҙәрендәге тоғролоҡ саҡҡылары ғына әле һаман әүәлгесә яна. Эйе, күпте һөйләй был ҡараштар ҡасҡыға!

Бар булмышын ҡасҡының тәбиғәт, ундағы үҙгәрештәр, мөғжизәле тормош ағышы тураһындағы уйҙар солғап алды. Урмандағы бер үҙгәрешкә лә битараф ҡала алмай. Бигерәк тә йыл миҙгелдәре алышыныуын күҙәтергә ярата. Уларҙың береһенә күнегеп китә лә, ялҡыпмы, күңеленән яңы миҙгелде көтөп ала алмай ҡаңғыра. Көтөп алһа, уның да тормошона яңылыҡ килеп ингәндәй тоя үҙен. Мәлдәрҙең һәр ҡайһыһы башында яңы уй-хистәр ҡуҙғата – шуларға эләгеп көн күрә ҡасҡы. Ауыр кисерештәр хыялый итерҙәр, юғиһә...

Йыл һайын яҙғы матур көндәр тыуҙымы, Нәфисәһен һағыныуы, үҙе лә һиҙмәҫтән, өҫкә ҡалҡа, йөрәге тағы ҡуҙғый. Бындай ваҡытта һөйгәненең ҡәберенә килә. Үҙе ултыртҡан зифа буйлы, һылыу ҡайынға һағышланып ҡарап тора – Нәфисәһе торамы ни алдында! Нәфисә ҡайыны тип йөрөтә уны. Ҡәберлекте ҡыу үләндәрҙән таҙарта. Яңы күренә башлаған төрлө сәскәләрҙе тамырҙары менән ҡаҙып алып килә лә, ерҙе йомшартып, ҡәбер өҫтөнә теҙеп ултыртып сыға. Йәйгеһен ҡәберлек гөл-зарға әүерелә.

Балыҡсылыҡ, емеш-еләк, бәшмәк йыйыу, уларҙы ҡышҡылыҡҡа әҙерләү, һунар – бына уның төп кәсептәре. Йыл әйләнәһенә көндәре шул эштәр менән үтә. Тағы ла йәнлек тиреләре йыйылып китһә, уларҙы эшкәртә. Кейемдәре туҙып, йыртылып бөткәс, ирәкләнгән йомшаҡ тиреләрҙән тун, салбар, ҡолаҡсын бүрек, көртөкәй, аяҡтарына итек тегеп кейеп алды. Эш менән булышһа, көндәр үткәнен һиҙмәй ҙә ҡала, ауыр уйҙарынан арына.

Ҡоралай ауларға йөрөмәй инде ул. Нисәмә йыл үтте, әллә ҡайҙа күсеп киттеләр ҙә, бүтән был яҡтарҙа күренмәйҙәр хайуандар. Ҡасҡы уларҙан ваз кисте. Мылтығы булмағас, баҫтырып тотһонмо? Уларҙы эҙәрләп йөрөүҙән дә фәтүә тапмай. Йыл һайын бер баш йылҡынан ҡалмай ҙа. Ас ултырмай.

Урманға эшкә хәҙер күберәк ирҙәр йөрөй. Һуғыш бөткәнлеген Ғәлимйән

шунан аңланы. Күренселәрҙең, бесәнселәрҙең ашауҙары арыуланды. Тамаҡтары туҡ булғас, эштәре лә ырамлы. Ҡайынды, усаҡты, турап, ҙур-ҙур итеп өйөмдәргә өйәләр. Төҙөлөшкә тигән һайлам ҡарағайҙарҙы оҙон көйөнсә бер ергә тарттырып һалалар. Ҡар яуҙымы, колхоз тракторҙары уларын ауылға һөйрәтеп алып ҡайта. Утынды саналарға тейәп ташыйҙар.

Бер трактор, көнө буйы тырылдап, урманда эшләй. Йығылған ағасты тәғәйенле урынға тарттыра. Урмансылар эш араһында күмәкләшеп шаярышып алалар, бер-береһенә төртмә һүҙҙәр әйтешәләр, шарҡылдашып көлөшәләр. И-и-х-х, ҡушылып китһәң ине шуларға!.. Күрә Ғәлимйән, кешеләрҙә һуғыш күрһәткән хәсрәттәр онотола бара – тормош яҡшыға үҙгәрә. Ул да Ғәҙелйәнде һирәк иҫенә төшөрә бит хәҙер.

Урмансыларға яҡын йөрөү ҡасҡы өсөн ҡурҡыныс янаһа ла, нишләһен, йәшерен-бошорон арбалары янына килеп тоҙ, он, икмәк, сәй-шәкәр сәлдерергә мәжбүр. Бүтәнсә ҡайҙан алһын? Ә картуфтарына теймәй ул. Хәҙер уның үҙенең картуфы бар! Уны урманда үҫтерергә өйрәнеп алды Ғәлимйән: мәтеле ергә торф ташып һалды. Уны йыл һайын ташып өҫтәй торғас, ер йомшарҙы. Йыл әйләнәһенә етә картуфы, орлоҡҡа ла ҡала.

Йәйге селләлә – бер, көҙгә тартым икенсеһенә солоҡ балы алырға бара. Йөҙйәшәр ҡарағайҙы йәшен һуғып йыҡҡан, ҡарт олон буйына ярылып киткән хатта. Күпте күргән ағастың төбө генә ҡап-ҡара булып һерәйеп ултыра. Бал ҡорттары таралышып, был урындан йыраҡ түгел тағы ла оя ҡорғандар. Балы күп ҡасҡының. Унан хәмер әсетергә өйрәнеп алды. Мейес алдында йылыла торған һайын ҡеүәте арта. Баштараҡ, иҫергәнсе эсә лә, бар донъяһын онота торғайны. Ҡурай тартырға керешә, ҡыҫҡырып йырлай башлай.

*... Минең хәлде кеше белмәй,*
*Ултырып илап алам аулаҡта...*

Нәфисәнең ҡумыҙын алып сиртергә тотона. Күңеле тулышып һыҡтай-һыҡтай ҙа, ниңә илағанын үҙе лә аңламай, йоҡлап китә. Шул хәлендә аҙна-ун көн үткәрә. Эсмәй йөрөп ала ла аҙыраҡ, тағы донъяһын онота.

– Былай дауам итһәң, харап булаһың бит, Ғәлимйән! – тип бик ныҡ әрләп алды үҙен ҡасҡы. – Кешелектән сығып, хайуанға әйләнәһең дә! Тамағыңда ла әҙерләй алмайһың бит эсеп ятып! Ашарыңа бөтһә, кем килтерер!

Хәмерҙе күп эсһә, күтәрә алмаҫын, аҡрынлап шул юлға баҫырын аңланы Ғәлимйән. Был ғәҙәтен ташланы. Ул йәшәргә тейеш! Хоҙай үҙенә ҡасан алырға үҙе белә. Ана, үрмәксене генә ал. Бер көндө өйөнән сыҡмай эсеп ятҡанында, хайран ҡалғайны ҡасҡы. Ишек яңаҡтарына тартып, үрмәксе ау үргән. Ғәҙәти хәл, бер уйлаһаң. Ауҙы һыпырып алды. Һуңғараҡ ҡарап ебәрһә, ау тағы тартылған. Уныһын да таҙартып ҡуйҙы. Әммә, аҙыраҡ ваҡыт үтеүгә, ишектә нәҙек ептәр яңынан ялтыраша ине! Бына ныҡыш! Ҡайһылай бөтмәҫ ихтыяр көсө бәләкәй генә бер бөжәктә! Ә ул? Ниңә бөгөлөп бара әле? Үрмәкселәй ҙә була алмаймы, көсһөҙләндеме шулай?!

Үрмәксенең ғәжәйеп ныҡышмалылығы ҡасҡыға ныҡ тәьҫир итте. Йәшәүгә ҡарата яңы ҡараш тыуғандай, көс өҫтәлгәндәй тойҙо үҙендә. Иртә көҙҙән ауылдарға йөрөүен ташламаны. Төндә бер һарыҡ алып китеп һуйыуы уға бер ни ҙә тормай. Ҡайһылыр бер уҙған көҙҙә генә ҡар ҡалын булып иртә яуҙы ла шул көйөнсә иремәне. Эҙ ҡалдырып, ат артынан йөрөү тураһында уйларға ла ярамай. Аптырағас, ҡар ҡатыуға, үҙ биләмәләренә иң яҡын ауылға килде. Ағас ышығында байтаҡ күҙәтеп торҙо. Боҙҙа уйылған мәкелә мал һыулай. Эңер төштө. Һыу эсеп туйған тана-үгеҙҙәр әкрен генә ауылға тартылды. Йомро кәүҙәле бер һимеҙ үгеҙ, муйынын ҡайырып ҡул баштарын ялай-ялай, ғәмһеҙ генә урынында тороп

ҡалды. Күҙ асып йомғансы Ғәлимйән уны һыбайлап, мөгөҙөнән ҡайыра тотто ла, салып та ебәрҙе. Үгеҙҙең ике ботон тунап, айырып ала һалды, икеһен ике иңбашына һалып, урман ышығына инеп юғалды.

Көҙөн айырыуса оҡшай ҡасҡыға. Ҡар яуҙымы, донъя бөтөнләй үҙгәрә, таҙара. Ап-аҡ ҡар ҡояшлы көндәрҙә бигерәк тә уның күҙҙәрен ҡамаштырып уйнаҡлай. Бер генә юлдан йөрөп, йылғаға – мурҙаһына, һуҡмаҡ ярып ала. Шарлауыҡта һыу ҡышҡы сатнама һыуыҡтар төшкәнсе туңмай, тыныс ҡына сылтырауын белә. Шунда йөрөй ул. Яңғыҙаҡ Ғәлимйәнде йылғаның йырынан да наҙлыраҡ итеп тынысландырыусы юҡ. Һыу ситендәге боҙға супайып ултыра, сикһеҙ уйҙарына сумып, оҙаҡ итеп серләшеп ала.

– Мин берәҙәккә ни әйтергә теләһәң дә, һәр һүҙең яҡын миңә, йылғам, тере йәндәй күрәм үҙеңде.

– Улай булғас, айырылма һуң минән, кинәнеп йәшәп тик ят ошонда! – тигән һымаҡ йылғаһы. – Теләһә нәмә уйлама, барыбер тормошоңдо үҙгәртә алмайһың!

– Нисек уйламайым ти мин? Һинән айырмалы, мейе бирелгән дәһә миңә? Уның уйлата торған һәләтен ҡайҙа ҡуяйым? Һиңә рәхәт, сылтырап ағып тик ятаһың...

Шулай тиһә лә йылғаһына, Ғәлимйәндең күңеле ҡатҡан хәҙер, нескәлеген юғалтҡан. Ошолай берәҙәк булып йәшәүе инде уның тормошо ҡағиҙәһенә әүрелгән. Бындай шарттарҙа йөрәк һыҙламай. Шулай ҙа...

Шулай ҙа, инде уҙған, кире ҡайтарып булмаған ғүмерен тағы бер – инде нисәнсе тапҡырҙыр! – үҙе лә һиҙмәҫтән, күҙ алдынан үткәрергә тотона. Ошо уҙғандың күбеһе этләнеп йәшәүҙән, ҡайғы-хәсрәттәрҙән торғас, күңелеңә ҡайҙан еңел булһын? Кеше булып тыуғас, кеше рәүешле йәшәргә тырышҡас, бөтөнләй уйланмай йәшәү мөмкин түгел дәһә! Нәфисәһе йыш ҡына иҫенә килеп төшә – уны ҡайҙа итһен? Тағы йылғаһына бара.

– Ниңә Хоҙай Тәғәлә Нәфисәне,  исмаһам, янымда ҡалдырманы – үҙенә алды? Миңә былай ҙа ауыр ҙаһа! Саф күңелле яҡшы әҙәмдәр Уға ла кәрәк, тиҙәр. Әллә шулаймы?

Бындай һорауға яуап бирерлек юғарылыҡта түгел йылға...

Ваҡыт үткән һайын, һөйгәненең рухы алыҫлаша барғанлығын тоя ҡасҡы. Шуғамылыр, ул инде өҙгөләнмәй, ҡатыны тураһында тыныс ҡына уйлай. Йөрәкте телгеләүҙән мәслихәт юҡ, хәйер, уныһы үҙе лә хәҙер өҙгөләнергә тормай.

Беренсе ҡар бәғзе йылдарҙа елгә туҙып бөтә, көндәр йылыбыраҡ торһа, ергә һеңеп юғала. Төндәрен көҙгө ай айырыуса яҡты, һыуыта, туңдыра. Көндәре имшеү бындай саҡтарҙың. Иртәнсәк тороуына, ағастарҙы гәлсәр бәҫ ҡаплап алған була. Уның матурлығы! Ҡояш нурҙарында төрлө төҫтәргә инеп йымылдашып, күҙҙәрҙең яуын ала. Урманда тынлыҡ. Тыуған төбәктәренән йылы яҡтарға китмәй ҡышлаған ҡоштар, үҙҙәренең нимәгәлер шатланыуҙарын белдереп, сутылдашып ҡуялар. Әммә бындай күренеш оҙаҡҡа бармай. Тәүҙә аҡрын ғына һибәләп ҡар яуа башлай. Тора бара ул көсәйә, урманды шаулатып ҡоторған буран да туҙына. Бер нисә көн дауамына һуҙыла шулай. Был ҡарҙы соҡор-саҡырҙарға, уйһыулыҡтарға тынҡыслап тултырып ҡуя буран. Яҙғы ҡояш иретеп, йылғасыҡтарға әйләнеп ағып бөткәнсе, йылы тун һымаҡ урманды ҡаплап ята ул. Ҡыш буйына тағы әллә нисәмә тапҡыр аҡ тун кейә әле урман.

Ҡышын бөтөнләй башҡа. Был миҙгелдең көндәре ҡырыҫ, тик аяҙ, тыныс көндәрҙә генә тәбиғәт менән иркенләп аралашырға мөмкин. Һыуыҡтарҙа, бурандарҙа өйөңдә генә тор. Бындай ваҡыттарҙа Ғәлимйән иртәнсәктән үк йылғанан һыу ташып ала, көнө буйына яғырға етерлек әрҙәнә утын индерә. Шул арала

һаҡал-мыйығы, ҡаштары бәбәкләнеп өлгөрә. Мейес яғыу, аш бешереү, Аҡтырнағы менән иркенләп ултырып тамаҡ туйҙырыу, ҡашығаяҡ йыуыу менән ваҡыты үтә. Кистәрен өйҙә ҡурайы илай, ҡумыҙы үкһей. Ҡаҡ ҡарағайҙан йышынҡы һыҙырып, елем ҡайнатып, уларҙы йәбештереп, думбыра һымаҡ әйбер ҙә әтмәләп алды. Артыҡ яңғырамаһа ла, яҡшы уҡ көй сығарырлыҡ килеп сыҡты.

Ҡышҡы оҙон төндәрҙә ҡасҡы ҡатмарлы уйҙары менән яңғыҙы ҡала.

Мейес алдына ултырып ала. Аҡтырнағы эргәһенә килеп ята. Утын, янып бөтөп, күмергә әйләнгәнсе икәүләшеп күҙәтәләр. Ҡыҙыу күмер балҡышы үҙе үк уйҙарға тарыта. Аҡтырнаҡ, башын тәпәйҙәренә һалып ала, күҙҙәрендә ут яҡтыһы ялтыраша. Ә Ғәлимйән иһә, фекерҙәрен ашыҡтырмай ғына, үҙенсә фәлсәфә ҡорорға тотона. Әммә уйҙарының осона сыға алмай ҡаңғыра. Үҙ яҙмышының бөтәндәрҙеке һымаҡ булмауын, киҫкән кирегә ҡайырылыуын аңламай.

Сәғит менән икеһенең аттары юғалыуҙа ғәйептәре шулай ҙурмы? Ғәйепле булғанда ла, ул тиклем кешене һөргөнгә ҡыуып, юҡҡа сығарырға кәрәкме? Уғрыларҙы саҡырып алып килеп аттарын ҡулдарына тоттормағандар ҙа! Ныҡ арығас, арбаларын йәнәш ҡуйып, аттарын тышап, үҙҙәре ҡаты йоҡоға талғайнылар. Тороуҙарына аттары юҡ. Ҡараҡтарҙы эҙләүсе, уларҙы тотоп язаға тарттырырға ынтылыусы бөтөнләй булманы. Кем юғалтҡан – шул ғәйепле. Бөттө-китте... Кемгә кәрәк кеше бәләһе. “Аттарҙы үҙегеҙ олаҡтырғанһығыҙ, кемдәр менәндер килешеп эшләгәнһегеҙ!” – тип бәйләнделәр ҙә – вәссәләм шуның менән. Шул буламы хәҡиҡәт?! Енәйәтселәрҙе эҙләп тотоу урынына үҙҙәренә йәбештеләр ҙә! Урманға ҡасмаһа, уның да һөйәктәре әллә ҡайҙа сереп ятыр ине инде...

Ә Ғәҙелйән менән уның аталарын тиктән-тиккә ниңә ҡулға алдылар икән? Шул көйөнсә ҡайтманылар. Исмаһам, хәбәрҙәре лә ишетелмәне аҙаҡтан. Уларҙың ғәйептәре нимәлә ине? Колхоз тип таң һарыһынан көн ҡараңғыһына саҡлы көн һайын бил бөктөләр. Эштәрендә маҡтаулы инеләр хатта. Балаларын асяланғас итмәҫкә, яҡшылыҡҡа, муллыҡҡа ынтылдылар. Килеп сыҡманы. Көскә, тамаҡтарын тамаҡҡа ялғап, ярым-яланғас йәшәнеләр. Тормошҡа аптыраған атаһының:

*Төн ҡараңғы, көн ҡараңғы,*
*Яҡты шәм янмаҫ микән? –*

тип һамаҡлап ебәреүҙәрен Ғәлимйән яҡшы хәтерләй. Яҡты шәм янманы уларға – ҡайҙалыр ҡараңғылыҡҡа инеп юғалдылар үҙҙәре. Аталары менән бергә ғаилә тормоштарының да ҡото китте – аһ-зарға әүерелде йәшәүҙәре. Шуғамылыр, ауырыуға һабышып, әсәләре донъя ҡуйҙы. Ғәйепһеҙгә яуапҡа тарттырылып, сит ерҙәрҙә баштарын һалған ирҙәре үҙҙәре артынан ҡатындарын да алдылар буламы? Балаларына ла – Ғәҙелйән менән Ғәлимйәнгә, яҡты шәмде күрергә яҙманы. Тырам-тыраҡай туҙышып юҡҡа сыҡты ғаиләләр...

Кем асыҡлап, алдарына килтереп һалды һуң аталарының ғәйептәрен? “Кеше ошағы менән алып киттеләр атайҙарығыҙҙы”, – тигәйне әсәһе. Ошаҡ менән генә кешене юҡ итәләрме шулай! Ә ошаҡсыһы ниңә шулай ҡыланған? Әсәһе әйтеүенсә, ике кешенең башына еткән дә, үҙен дә алып киткәндәр һуңыраҡ. Ул да ҡайтмаған. Ни етмәгән был кешегә? Ниңә ошаҡлашҡан, ауылдаштарын шул тиклем күрә алмаған? Ауылда бер үҙе тороп ҡалырға уйлағанмы, түрә булырға ынтылғанмы? Йә Хоҙа-а-а-й-й...

Ябай халыҡ өсөн ҡоролған илебеҙ, тип аңлаттылар мәктәптә. Халыҡ тигәне ошо улар һымаҡ ярлы-ябағанан тормаймы? Шулай икән, ниңә кәнде уларҙы ҡырҙылар? Ауылдан ғына нәҡ аталары һымаҡ тырышып эшләп йөрөгән тиҫтәләрсә кешенең башы олаҡты ла. Йәш балалы әсәләрҙе лә аяманылар. Үҙ халҡын юҡ итеүгә ҡоролған дәүләт буламы?

Колхозсыларҙың бер дөйөм йыйылышын ғүмеренә онотмаҫ Ғәлимйән. Барлыҡ ауыл халҡын йыйҙылар унда, уның шикелле малай-шалай ҙа ҡалманы. Бер генә мәсьәлә ҡаралды: йыллыҡ трудодендары тулмаған ике колхозсы ҡатынды һөргөнгә ебәреү. Береһенең ире Граждандар һуғышында ҡатнашҡан, Совет власын яулашҡан. Балалары – икәү, кесеһенә – өс йәш. Икенсе ҡатындың ире – ҡыҙыл партизан, ғәрип. Өс балаһының кесеһе имсәк тә ташламаған әле. Ошо ике ғаиләне һөргөнгә ебәреү тураһында ҡарар ҡабул иттертеп, халыҡтан ҡул күтәрттерҙеләр. Күтәрмәй ҡара! Үҙең “халыҡ дошманы”на әйләнәһең. Ағайҙар, апайҙар үҙҙәре ҡул күтәрәләр, үҙҙәре, күҙ йәштәрен тыя алмайынса, илашып ултыралар. Бер-береһенә баштарын да күтәреп ҡарай алмайҙар! Быны нисек онотмаҡ кәрәк?!

“Ерҙәге матур тормош өсөн, ғәҙеллек хаҡына Ғайса пәйғәмбәребеҙҙең иблис менән көрәше заманында йәшәйбеҙ. Быуат буйына барасаҡ ул көрәш, – тигәйне әсәһе, ауырыу уны тамам түшәккә йыҡҡас. Ҡайҙан ишеткәндер, әммә үҙе бик ышанып әйткәйне был һүҙҙәрен. – Пәйғәмбәребеҙ, кире ергә ҡайтып, иблисте еңәсәк барыбер. Халыҡтар менән үҙе идара итә башлаясаҡ. Изгелек яуызлыҡты һәр саҡ баҫа килгән. Шуның өсөн, улым, кешеләргә яҡшылыҡ ҡылып өйрән. Берәү һиңә таш менән атһа, икенсе төрлө, яуызлыҡ эшләһә, һин уға аш менән ат йәки гел яҡшылыҡ эшлә. Шулай итһәң, тормошоң бысранмаҫ, Хоҙай Тәғәлә күрер, һинең яҡлы булыр. Ә ауырлыҡтарға түҙем булып өйрән, улым!.. Кеше күрәһен күрмәйенсә гүргә инмәй”.

Түҙә Ғәлимйән, түҙә. Әсәһенең дә, Нәфисәһенең дә һүҙҙәрен күңелендә тота. Түҙмәй ҡайҙа барһын?

Көн сыуаҡ бөгөн. Һыуыҡ. Үҙендә еңеллек тойоп, йылғаһына барып ҡайтырға булды ҡасҡы.

– Әйҙә, Аҡтырнаҡ, барып мурҙаны алып ҡуяйыҡ. Балыҡ төшөп, сарыф булып ятмаһын. Яҙға тиклем мурҙа һалыу бөттө шуның менән, – тине ул этенә.

Эй рәхәт тә ҡышҡы аяҙ көндә! Саф һауа күкрәкте киңәйтеп ебәрә. Ҡалын ҡарҙан баҫылған тал-ерек ботаҡтары, дуғаланып, аҫҡа эйелгән. “Шаҡ!” Тора биргәс тағы ла: “Шаҡ!” – тигән тауыштар әленән-әле йылға буйын яңғырата: әле бында, әле тегендә, өҫтөндә баҫып ятҡан ҡар ауырлығын күтәрә алмай, еректең мурт ботаҡтары һына. Ҡайҙа ҡарама – ҡуян эҙҙәре. Арыраҡ төлкө йөрөгән. “Ҡуян тоторға сыҡҡан оҙонғойроҡ, – тип уйланы Ғәлимйән. – Шилма, һиңә лә тамаҡ туйҙырырға, йәшәргә кәрәкме?”

Мурҙа ятҡан шарлауыҡ, боҙ менән ҡаплана барып, тар ғына йырынты һымаҡ тороп ҡалған. Ялтыр боҙҙа ҡаталарының табандарын әкрен генә шыуҙыра-шыуҙыра, шарлауыҡҡа яҡынлашты ҡасҡы. Тунын систе. Супайып, ҡулын һыуға тыҡты ла мурҙаһының башы бәйләп ҡуйылған тимер сыбыҡтан эләктереп алды. Мурҙаны баҫып ятҡан ауыр ташты шыуҙырып төшөрҙө. Инде күтәреп алам тип кәүҙәһен турайтҡайны, баҫҡан ерендә боҙ ярылды. Шаптыр-шоптор һыуға барып сумды. Боҙло һыу тәнен сөрөштөрҙө. Ҡулынан ҡайһы арала ысҡынғандыр мурҙа, балыҡтар ялтырашҡанын ғына шәйләп ҡалды. Ағым көсө Ғәлимйәнде боҙ аҫтына һөйрәне. Һыу ыңғайына ағып барып, боҙ ситенә ҡултыҡтары менән эләгеп ҡалды. Ҡурҡышынан:

– Аҡтырна-а-аҡ! – тип ҡысҡырғанын һиҙмәй ҙә ҡалды.

Хайуанҡайҙың йөрәге хужаһыныҡы менән бергә тибәме ни, ҡурҡып, икеләнеп торманы – уны ҡотҡарам, тип һыуға ташланды. Ҡартайып, бәлһерәгән эт, аҙ ғына ҡаршылашып ҡараны-ҡарауын, әммә һыу көсөнә тора алырлыҡ көсө юҡ ине. Эте һыу аҫтына китте тигәндә, Ғәлимйән уны бер ҡулы менән ҡосаҡлап алып өлгөрҙө. Ҡайһылай, нисек килеп сыҡҡандыр, тиҙҙән Аҡтырнаҡтың боҙ

өҫтөндә ятҡанын күреп, йөрәгенә йылы йүгерҙе. Аңы асыҡлана төштө. Һыуланған көртөкәйе, ҡалын салбары, һыуланып, ауырайҙылар, ҡасҡыны боҙ аҫтына тарталар. "Тимер сыбыҡ... Мурҙа бәйләнгән тимер сым эргәлә лә!" Ошо уйы йәшендәй килеп инде башына. Һыңар ҡулы менән һыуҙы болғата торғас, тимер сыбыҡты эләктереп алды. Йә Хоҙа-а-ай-й...

Күкрәгенә тиклем тәрәнлектәге шарлауыҡтан, сым буйлап тартыла-тартыла, көскә килеп сыҡты ҡасҡы. "Былай ҡыланғаны юҡ ине лә һуң уның, нишләп алабарманланды? Хәйер, боҙ ярылыр тип башына инеп тә сыҡманы. Этен саҡырмаһа булмағанмы! Аҡтырнаҡтың ярҙамға ташланырын белә бит! Нисек ҡотҡарһын ул һине?! Иң яҡын йән эйәһен үлемесле ҡурҡыныс аҫтына ҡуйҙым да баһа мин!" Шулай әрләне үҙен.

Әрлә үҙеңде, әрләмә – һуң ине инде. Мурҙаны ярға һөйрәп сығарғансы, кейеме шаҡырайып туңды. Көртөйөн сисеп, ҡоро тунын кейеп алды. Салбар балаҡтары тиҙҙән суйын торбалай ҡатты. Теше-тешкә теймәй, ҡалтырана башланы. "Һыуыҡ тейҙерһәң, бөттөң бит!"

– Аҡтырнаҡ, әйҙә! – тип саҡ бойора алды. Йүгерә-атлай өйөнә ҡарай ынтылды.

Һыуыҡ үтте ҡасҡыға. Салбарына ҡуша туңған тиреһе әрнеп һыҙлай. Саҡҡа систе әйберен. Бурһыҡ майына бал ҡушты, шуның менән тәнен ыуҙы. Үлән төнәтмәһе эсеп, түшәгенә йығылды. Тәне уттай яна. Етмәһә, туңған тиреһе һыҙырыла башланы. Йоҡлай алманы, төнө буйына һаташып сыҡты. Боҙло һыуға барып төшә лә, Аҡтырнағын саҡыра башлай... Төндө көскә уҙғарҙы.

***

Йылы миҙгел тыуҙы. Инде турараҡ төшкән ҡояш нурҙары урманға яҙ килтерҙе. Яланында умырзая баш ҡалҡытты, йыуа сыҡты. Ҡасҡының тын алышы көндән-көн ауырлаша, үпкәләре шыйылдай, йүткереге тамағын быуа. Дәү кәүҙәһен саҡҡа ҡуҙғалтып, өйөнә утын, һыу ташып ала. Ит бешерергә ултырта. Быларҙы эшләгәнсе, ҡара тиргә бата, шунан, торараҡ, өшөп ҡалтыранырға тотона. Хәле бөтөп, түшәгенә тәгәрәй, юрғанына урана. Ята торғас, бөтә тәне тағы яна башлай. Күпме ваҡыт этләнә ул шулай? Дүрт аймы?

Көнөнә бер-ике киҫәк ит сәйнәп йота, һурпа һемергеләй – бармай тамағына аш. Ҡаҡ һөйәккә ҡалды ҡасҡы, дәү кәүҙәһе шиңде. Итте күберәген Аҡтырнаҡ һоғона. Хужаһы уны тышҡа сығарып ебәрһә, күп тә үтмәй, ишекте тырнай башлай: "Ас, мин килдем!"

Хәле яҡшырманы Ғәлимйәндең – күкрәгендәге көсө мыҫҡаллап тәненән сыға бара. Һуңғы көндәре яҡынлашҡанын аңланы ул – ярҙам итеүсе булмаясаҡ! Бар булмышын битарафлыҡ солғап алды – яҙмыш менән еңешеп булмай. Урманда үлеп, кәүҙәһен йыртҡыстарҙан ботарлатҡыһы ғына килмәй. Башында бер генә уй уның: "Үлеп ятһаң, кем ерләр һине? Ауылына, икенсе берәй ауылға ла барып етә алмаясаҡһың. Аяҡтан йығылмаҫ борон, кеше йөрөгән һуҡмаҡҡа булһа ла сығып ҡалырға тейешһең. Берәйһе табып алыр барыбер. Ерләрҙәр..."

## Аҡтырнаҡ

Һәр саҡ билендә йөрөгән турһығына мәтрүшкә сәйе тултырҙы Ғәлимйән. Тоҡсайына бешкән ит, оҙаҡ ятыуҙан сөхәригә әйләнгән икмәк һыныҡтары һалып алды. Ғыжылдай, тамағы ҡырылғансы йүткерә.

Көн матур бөгөн. Ағас остарындағы аралыҡтарҙан ҡыйғас һирәк болоттар күренгеләп ҡала. Ямғыр-фәлән булырына бер ниндәй ҙә ишара юҡ. Урманда һауа йылынды, әммә ҡасҡының бөтә тәне ҡалтырай. Өйөнөң ишеген тыштан

нығытып терәп ҡуйғансы, манма тиргә батты. Һыуыҡ тир арҡаһы буйлап аға, өшөтә.

Яланына төштө. Үҙ биләмәләренә оҙаҡ ҡарап торҙо ул. Ана, Нәфисә ҡайыны, ҡайһылай һылыу ул! Япраҡтары, һөйгәненең сәстәреме ни, бөҙрәләнеп, зифа буйына үрелгән – Йыһанға – мәңгелеккә, ынтылыу көсө бөркөлә уларҙан. Өйө... Йәшәй алманылар улар бында Нәфисәһе менән – теләктәрен ҡабул итмәне Хоҙай. Ҡалайтаһың, барыһы ла Уның ҡулында.

Күпме ғүмер кисерҙе икән яңғыҙы урманда? Яңылышмаһа – ун дүрт йыл. Шуларҙың өсөһө генә – Нәфисә менән бергә йәшәгән йылдары, бәхетле булды. Көн һайын тыуған ҡояшты, һөйгәнен, урманын – бар ғәмде, тағы күреү өсөн уянды ул йоҡоһонан. Тормоштағы бөтмәҫ-төкәнмәҫ ләззәтте һөйөүҙә, һөйөлөүҙә, хеҙмәттә, тасуирлап маҡтап бөтөп булмаған тәбиғәт матурлығында, уның серҙәрендә тапты. Әле килеп ауырыуға һабышты бына, үҙен һаҡлай алманы. Һаман көн күрер ине лә ошонда, тик, көсөң юҡ икән, урманда тороп булмай бер үҙеңә – ятып үлергә генә ҡала.

Үҙе йөрөгән һуҡмаҡтарҙың иң ҡыҫҡаһын һайланы ҡасҡы. Йығылһа ла, ул юлға сығып тәгәрәйәсәк!

– Рәхмәт, урманым – бер ҡат туным! – Атаһының һүҙҙәрен онотмаған. – Хуш, Нәфисәм ҡайыны! Өйөм, яланым, йылғам, ун дүрт йыл ошонда йәшәттегеҙ. Хушығыҙ! Һеҙҙе күрә алмам мин бүтән... – Күҙҙәренән йәштәре аға. – Шаулап үҫ, урманым, гел шулай, сәскәләргә күмелеп ят һәр саҡ, яланым! Туҡтама – сылтыра ла сылтыра, йылғам! Ә һин, аҡыллым, көт мине... – һуңғы тапҡыр күҙҙәре менән ҡосоп алды зифа ҡайынын. Сәскә өҙөп алды, танауына килтерҙе – татлы еҫтәрен тойманы. Тик бер бөртөк йәш тамсыһы ғына күк тажға тәгәрәп төштө. – Әйҙә, Аҡтырнаҡ!

Алға, кешеләргә, ынтылды ҡасҡы. Эте, уның менән йәнәш бара бирҙе лә, ҡайҙалыр инеп юғалды. Ул да урманға бүтәнсә килмәҫен һиҙеп, хушлашып йөрөймө? Килеп етер, аҡылһыҙ түгел дә Аҡтырнағы. Йүтәле хәлен алһа ла, атланы ла атланы.

– Тағы йөҙ аҙым баҫаһың! – тип бойора үҙенә.

Бер, ике, өс... ун биш... һикһән... Йөҙ аҙым атлауға, ҡайын төбөнә тәгәрәй.

Бына инде нисәнсе тапҡыр тағы туҡтаны. Дерелдәшеп, тыңламаған ҡулдары менән эләктереп, турһығынан сәй уртланы. Уға хәҙер барыбер, тиҙерәк юлға ғына сығып ятһын. Күңелендәге битарафлыҡ, йылы ҡояш нурҙары иҙрәтте уны...

Аҡтырнаҡтың, сыйылдап, битенән ялауына уянып китте.

– Килдеңме, Аҡтырнағым?

Олоғайған, хәрәкәттәре һүлпәнәйгән эте, әле килеп ярһыған, уңып бөткән ҡара йөндәре тырпайышҡан. Урынында сыҙап тора алмай, хужаһының иғтибарын үҙенә йәлеп итергә тырыша.

– Нимә булды һиңә?

Эте уның янында өйөрөлдө лә, сыйылдап, япраҡтары ҡуйырып өлгөрмәгән ҡайынлыҡҡа ҡарай аянланы. Уның артынан ғәжәпләнеп ҡарап ҡалған ҡасҡының, күҙҙәрен бәзләтеп туп-тура уға ҡарап ултырған бүрене күреп, ҡурҡышынан тәне зымбырланы. Шул саҡ уның өс көсөгө инәләренә ташланды. Икеһе ҡойроғонан, өсөнсөһө алдан тартҡылай, муйынына ынтыла. Ҡарт бүре сыҙаны башта, балаларының шаярыуына уларҙы иркәләү менән яуап ҡайтарҙы. Әммә сабыйҙарының һөжүме көсәйгәндән-көсәйҙе. Ҡолаҡһыҙ, ҡойроҡһоҙ ҡалдырырғамы ни ниәттәре инәләрен? Көсөктәрҙең әле нығынып бөтмәгән осло тештәре инәләренең ҡуйы йөнөн үтеп, артыҡ ауырттырмаһалар ҙа, тора-бара бахырҡайҙы түҙмәҫлек хәлгә килтерҙе. Ҡойроғон бот араһына йәшереп ҡарай,

ергә ҡыҫа. Башын, аптырағандан, тәпәйҙәре араһына йәшерә, мәхлүк. Былай ҙа ҡотола алмағас, ялбарған һымаҡ сыйылдап ебәрҙе. Шуны ғына көттөмө Аҡтырнаҡ, һөйәркәһен яҡлашырға тотондо: янындағы көсөктө арҡаһына йығып һалды, теге икеһен, арҡаларынан эләктереп алып, ике яҡҡа алып осорҙо.

– Бына минең менән уйнап ҡарағыҙ! – тигәндәй ғорур ҡиәфәт алды, бүре менән кескәйҙәр араһына супайҙы.

Көсөктәрҙең асыҡ-ҡара йөндәрен шәйләп, эте өсөн ғорурлыҡ кисерҙе шул саҡта Ғәлимйән: "Аҡтырнағым минең! Аҙналар буйына юғалып йөрөүҙәрең тик-кә булмаған икән. Күпме бүрәт тыуып өлгөрҙө һинән? Йәреңде арбар өсөн күпме ата бүре менән талашырға, уларҙан өҫтөн сығырға кәрәк булған һиңә! Көсөң бушҡа китмәгән – үҙеңдән һуң балаларың ҡала, исмаһам..."

Ҡулына көнйылытҡыс килеп ҡунды ла, урта бармағы буйлап юғарыға ынтылды. Бармағы осона менеп етте, киң итеп ҡанаттарын йәйеп ебәреп, осоп та китте. Ғәлимйән дә урынынан ҡуҙғалды – ул әле маҡсатына ирешмәгән!

Үҙен йәлләү хистәренә батып һөйрәне аяҡтарын ҡаҫҡы.

– Кем һин – кешеме? Кеше һинең һымаҡ буламы? Йәшәйем тип күпме тырыштың, күпме көс һалдың – барыһы ла бушҡа! Аҡтырнағың һымаҡ тоҡом да ҡалдыра алманың. Йыртҡыс түгел, ҡарға ҡунып суҡырға тотонһа ла, бына, ҡаршы ҡулың күтәрерлек хәлең юҡ. Бөтә һине белгән кеше онотоп бөткән хәҙер, бер кемгә лә кәрәкмәйһең!.. Ҡосаҡлап ятып үлергә тыуған тупрағың да алыҫта... Етте һиңә, донъя менән бәхилләшергә ваҡыт! Тик юлға ғына сығып ет!

Шул уйҙары менән һаман алға ынтылды.

Аҡтырнаҡ, өс көсөгө менән инә бүре, Ғәлимйәндән бер сама арауыҡ тотоп, уның ыңғайына баралар. Эте уның янына килеп етә һала ла, хәлен белергә, хужаһына дәрт өҫтәргә теләгәндәй, ҡулдарын, битен ялап китә.

– Ғаиләң менән хушлашаһыңмы, әллә мине оҙатаһығыҙмы?

Йомолмаған күҙҙәре менән уға ҡарап торҙо ла Аҡтырнаҡ, бер нәмә лә аңламайһың, тигән һымаҡ башын эйеп, тағы тегеләре янына йүнәлде. "Бер йыл ғына йәшәмәйҙер эте был бүре менән, – тип уйланы ҡаҫҡы. – Бүреләр һайлаған тормош юлдаштарына тоғро ҡалалар бит".

Алда ағас асығын белгерткән һыҙат күренде. Бүре лә, көсөктәр ҙә, Аҡтырнаҡ та күҙҙән юғалдылар.

– Айырылышыуыбыҙ шулдыр, – тип уйланы Ғәлимйән. – Нишләйһең, һәр кемгә – үҙенеке. Бәхил бул, Аҡтырнағым!..

Көн кискә тартты.

– Юлға йыраҡ ҡалманы, бер ынтылһаң, барып сығырһың, – тип дәртләндерҙе үҙен ҡаҫҡы. Һуңғы көсөн йыйыр өсөн саҡ ҡына сәй уртланы. Итен, икмәген ҡапшап ҡараны ла тоҡсайында, ергә ауҙарҙы – ашағыһы ла, ҡарағыһы ла килмәй. Бәлки, Аҡтырнаҡҡа, йә уның көсөктәренә яҙыр... Тағы ҡуҙғалды.

Күпме ятыр юлда? Ергә йығылыр алдынан, бөксәңләп, аҫтына ботаҡ-һатаҡ йыйып түшәне. Устары менән гөргөләп, аҙау үлән, япраҡ йәйҙе. Иҫен юғалтыр-юғалтмаҫ сиккә етеп, шул түшәгенә бөгәрләнеп ятты...

...Мотоцикл тауышына иҫенә килде. Милиция кейемендәге берәүҙең еңел генә итеп иңбаштарынан һелккәненә күҙҙәрен асты. Яңаҡтары эскә батҡан, йөҙөн оҙон ҡара һаҡал баҫҡан кешенең хәлен аңлап, милиционер уны ашыҡтырманы. Шунан:

– Һин Ғәлимйәнме? – тип һораны.

– Мин – Ғәлимйән – ҡаҫҡы... – тиергә саҡ көс тапты хәлһеҙ берәҙәк.

– Ә мин – Ғәлимов, һинең ағайың. Дауаханаға алып барам мин һине.

– Аға-а-ай-й, рәхмә-ә-әт...

Көслө ҡулдар күпкә еңеләйгән Ғәлимйәнде мотоциклдың люлькаһына күтәреп ултыртты, алдына ҡаҫҡының этен – Аҡтырнаҡты – һалды.

– Аҡтырнағым... Мине ташламаған...

Этен ҡосаҡлап мығырлаған Ғәлимйәндең ҡиәфәте тетрәтте Ғәлимовты. Кешенең түҙемлелеге, эттең тоғролоғо хайран ҡалдырҙы фронтовикты. Ихтыярһыҙҙан тамағына төйөр тығылды. Мотоцикл тауышынан Ғәлимйән ишетерлек итеп ҡысҡырҙы шунан:

– Этең башын күкрәгеңә һалып ята ине...

Ҡасҡының күҙҙәрендә бөрсөк йәштәр ялтырашты. Тауышы сыҡманы. Бар ҡиәфәте:

– Тоғро ҡалдың миңә, һуңғы көндәреməсә... – тигәндәй уның.

***

Дауаханаға йыш килде Ғәлимов. Көндәрҙең береһендә Рәйхана ла күренде. Ғәлимйән, йүткерә-йүткерә, уларға урманда нисек йәшәүҙәре тураһында һөйләп бирҙе. Үкһеп илағыһы килде Рәйхананың уны тыңлап – үҙен көскә тыйҙы.

– Ғәлимйәндән йәшәгән урындарын һорап бел, Нәфисәнең ҡәберенә барып ҡайтайыҡ, – тине ул дауахананан сыҡҡас.

– Мин ул ерҙе беләм... Тойомлайым.

Урманға һыбай барҙылар. Уларҙы Ғәлимйәндең өйө, яланы, Нәфисә ҡайыны ҡаршы алды.

Рәйхана сәскәләр гөлләмәһе йыйып та алған.

– Башта Нәфисәгә барайыҡ.

Ғәлимов алдан атланы. Ҡәберлек өҫтөндә – Нәфисә ҡайыны төбөндә – Аҡтырнаҡтың бөгәрләнеп ятҡан үле кәүҙәһен күреп, ҡатыны кинәт ҡурҡмаһын өсөн, иҫкәртеп өлгөрҙө:

– Бында Аҡтырнаҡ үлеп ята.

– И-и-и, хайуанҡай...

Был күренештән Ғәлимов ныҡ тетрәнде.

– Бына эт, исмаһам, кешемен тип йөрөгән ҡайһы бер әҙәмдәргә торғоһоҙ! – Ҡатынына: – Ҡартайған эт ситкә китеп үлә, тиҙәр ололар. Аҡтырнаҡ Ғәлимйәнде беҙҙең ҡулға тапшырып, үҙе Нәфисә янына килеп үлгән... Иҫ китмәле! – тине күңеле йомшарып. – Ошонда ерләргә кәрәк Аҡтырнаҡты.

Ғәлимйәндең өйөн асып инделәр.

– Күрәһеңме, Рәйхана, Ғәлимйән торлағын ҡайһылай уңайлы, аҡыл менән ҡороп алған. Һыу төшмәй, елләнеп торған ағас тиҙ серемәй ул – оҙаҡ торор әле был өй! – тине Ғәлимов ҡустыһының оҫта ҡулдарына һоҡланып. – Йүнле эш ҡоралы ла юҡ, ә нисек сәмләнеп эшләгән...

Рәйхана Нәфисәнең ҡумыҙын тотоп тора ине.

– Һинең йөҙөң итеп һаҡлармын, әхирәткәйем... – Ауыҙы эсенән шулай тип һөйләнде лә: – Кеше яҙмышы... Ҡыйын миңә... – тип йәшле күҙҙәрен иренә төбәне. Ғәлимов уның башын күкрәгенә ҡыҫты, сәстәренән һыйпаны.

– Миңә лә еңел түгел...

Тағы Ҡөрьән Кәримде, иҫтәлек булһын тип, думбыраны алдылар. Көрәк тотоп Аҡтырнаҡты ерләп килде Ғәлимов. Өйҙөң ишеген нығытып терәтеп ҡуйҙы.

– Нисек тора – шулай ҡалһын, – тине ул тәрән уйҙарына сумып.

***

Ғәлимовтың ныҡышып һорауҙарына биреште баш табип.

– Ғәлимйән оҙаҡ йәшәмәйәсәк, үпкәләре серей. Яман шеш унда, – тип дөрөҫөн әйтеп бирҙе.

– Күпме... ғүмере ҡалған?

– Ике, иң оҙағы – өс ай.

Был турала ҡатынына әйткәс, Рәйхана дауахананан ҡайтышманы.

– Ун дүрт йыл урманда яңғыҙы интеккән. Исмаһам, үлере алдынан янында кеше өҙөлмәһен.

Ире ихлас килеште.

– Эйе, эйе, Рәйхана, мөмкин тиклем янында торайыҡ.

Үҙҙәренең дә тамаҡтарын дауаханала ялғап йөрөнөләр. Ғәлимйәнде лә һыйларға тырыштылар: шыйыҡ бутҡа йотторҙолар, төрлө һутлы эсемлек бирҙеләр – улары ла бер-икешәр ҡалаҡ ҡына барҙы ауырыуға. Көслө дарыуҙарҙан һуң хәле яҡшырғандай итә ҡасҡының, тик, уларының тәьҫире оҙаҡҡа бармай – тағы һыҙлана.

– Тиҙерәк үҙеңә алһаңсы... Хоҙайым...

Көн уҙып, яңылары тыуып тора торғас, көҙ ҙә етте. Ағастар һары күлдәктәрен кейҙе. Ғәлимйән һурылды, кәүҙәһе бәләкәй генә булып ҡалды. Һүҙҙәрен саҡҡа әйтә, ғырылдай. Тыны ҡурыла. Һуңғы сәғәттәре һуҡты уның.

– Ғәли-мо-ов... Аға-а-ай-й... Зи-инһа-а-ар... Ми-и-не-е... Нә-ә-фис-ә-ә-мяны-ына ҡу-у-уй...

Көскә әйтте һуңғы теләген.

– Шулай итермен,һүҙ бирәм. Тик, һиңә үлем тураһында уйларға иртә әле.

Үҙенсә ҡустыһына дәрт өҫтәмәксе.

– Ю-ю-ҡ... Хә-әле-ем бөт-т-тө-ө... Бә-ә-х-и-ил бу-у-лы-ы-ғы-ыҙ...

Ғәлимйәндең һуңғы минуттарына тиклем Нәфисәне уйлап ятыуына, уға ынтылыуына тағы бер тетрәнде Ғәлимовтар, йөрәктәре ҡыҫылды.

– Мөхәббәт тигәнең һүнмәй икән бер ҡасанда! – тине Рәйхана хистәргә бирелеп.

– Күрәһең, мөхәббәтте үлем генә сикләй алалыр, – тине Ғәлимов та. Ҡатынының һүҙҙәрен ҡеүәтләне. – Мөхәббәтен кеше теге донъяға ла алып китмәһә...

– Аға-а-ай-й... Акт-ы-ырна-а-ҡ ҡ-а-айҙа и-к-ә-ән?..

Әйтһәм, ауыр кисермәҫме Ғәлимйән, тип икеләнеберәк ҡалды тәүҙә Ғәлимов. Шунан һүҙҙең дөрөҫөнә туҡталды:

– Уның кәүҙәһен урманда – Нәфисә ҡайыны аҫтында таптыҡ... Шунда ерләнем Аҡтырнаҡты... – Һыҡтап ебәрмәй, саҡҡа әйтте был һүҙҙәрен.

– Барыбыҙ ҙа бергә булырбыҙ... – Асыҡ итеп әйтте һуңғы һүҙҙәрен Ғәлимйән. Шунан тынына быуылды...

***

...Ер ярылды. Ғәлимйәндең унда төшкөһө килмәй. Йомшаҡ, йылы томан эсендә әсәһе пәйҙә булды шул саҡ.

– Кил бында, улым, бергә булырбыҙ. Сабырлығың етте фани донъяла, һынауҙарҙы үттең – баҡыйлыҡта еңел булыр үҙеңә.

Күҙҙән юғалды әсәһе. Ҡулдарын болғап йылмайып, атаһы йөҙөп үтте... Кемдәрҙер Ғәлимйәнде ер ярығына этәрә, икенсе бер көс юғарыға – Йыһанға әйҙәй. Томанлыҡта Нәфисәһе күренде, үҙе Абусарын етәкләгән, йылмая.

– Килдем янына, Нәфисә...

– Түҙҙең, бергә булырбыҙ, тинем дә... Әйҙә беҙҙең менән!..

Ниһайәт, ер ярығына этәргән көстән арынды ҡасҡы, яҡындары һымаҡ уҡ аҡҡа төрөндө лә, улар артынан йөҙөп китте...

**2006 йыл.**



**Ғайса**
**ХӨСӘЙЕНОВ**

# МӘЛДӘР, ӘМӘЛДӘР, ҒӘМӘЛДӘР

## ПАРСАЛАР, БАРСАЛАР

### Әмәленән ғәмәле

Донъяға, ғәмәлгә ғәжәптәр итерлек.

Күпме йәшәмә донъяның үҙен белеп-төшөнөп бөтөрлөк түгел.

Күпме күккә, айға, йондоҙҙарға баҡма, ғәләмдең сиктәренә уй-фараздарың менән дә һис етерлек түгел.

Улай ғынамы әле, әҙәм балаһы үҙ тирә-яғына, донъяһына, тормошона ҡарап та йыш ҡына баҙап ҡала.

Ғүмерҙең айҙары, йылдары, миҙгелдәре бар.

Ваҡыттың сәғәте, минуты, секунды, хатта әллә ниндәй мәлдәре, әмәлдәре бар.

Күпме йәшәмә йәшәүҙең йәмен-тәмен татып бөтөрлөк түгел.

***

Бер уйлаһаң мәл – бары күҙ асып йомған ара.

Әле генә бар ине, әле генә юҡ та.

Мәл бер һулыш араһы. Ә һулышты алаһы ла алаһы.

Мәленә күрә әмәле, әмәленә күрә ғәмәле.

Мәлһеҙ-әмәлһеҙ донъя ғәмәлһеҙ.

***

Мәлдәрҙән секундтар, секундтарҙан минуттар, минуттарҙан сәғәттәр, сәғәттәрҙән көн-төндәр, көндәрҙән аҙналар, аҙналарҙан айҙар, айҙарҙан йылдар, йылдарҙан мөсәл ғүмерҙәр йыйыла. Шулай әҙәм ғүмерҙәре хасил була. Хасил була ла бит...

Донъя мәшәҡәттәре менән көндәрҙең, айҙарҙың, йылдарҙың нисек үткәнен генә түгел, ғүмер сәғәтеңдең һуҡҡанын да белмәй ҡалабыҙ...

Әмәленән ғәмәле. Әле бүлешәһе уйҙарым, күҙәтеүҙәрем, ғәмәли фәлсәфәм ошолар хаҡында.

## Һүҙ яйым

Хәҙер миңә, һикһәнемде тултырған кешегә, йылдар ғына түгел, айҙар, көндәр ҙә ҡәҙерле. Мин хәҙер мәлдәр, әмәлдәр, ғәмәлдәр хаҡында күберәк уйланам.

Ғүмер ҡыҫҡарғанға, сәсмәләрем дә ҡыҫҡа.

Ғүмер ни ул... үҙе оҙон һәм ҡыҫҡа мәлдәрҙән ғибәрәт.

Шулай, ҡыҫҡа мәлдәр, ҡалған минуттар мәлһеҙ юғалмаҫ, бәлкем.

Өлгөрмәһәк, теге донъяла осларбыҙ, осо-ние булһа...

Бәхилләшмәгәндәр менән шунда бәхеш табырбыҙ.

***

Һәр көн шундай итеп йәшә ине, бушҡа үткән йә үтәлмәҫ көндәреңде ҡаплатҡансы. Күңелең туйғансы.

Һәр көн шундай итеп йәшә ине ул: үткәндәргә үкенмәҫ, ниҙерҙелер үтенмәҫ өсөн дә.

***

Ике яурындағы ике фәрештә донъялыҡта ҡылған яҡшы йә яман эш-ҡылыҡтарҙы яҙып бара, ти.

Яҡшылығы яҙылған яурыным үҙемә һалынып төшөп барған кеүек, иншалла.

Шуларҙы үҙ йөрәгемә яҙылғандары менән сағыштырып ҡарарға ине. Баһалары ни дәрәжәлә икән?

Ҡиәмәт көнөнән алда ҡайҙа юлығыуымды белер инем, исмаһам. Әле үлсәүбизмәндәре генә юҡ шул.

***

Ҡапыл ерле юҡтан башҡа килгән уй шундуҡ ерле юҡҡа сыға ла китә.

Әллә күктән ингән, әллә фәрештәләр килтергән хәбәр булды ул. Мәлһеҙ үткәне, эҙһеҙ юғалғаны хәйерлегә булһын.

***

Мин донъяға үҙем теләп килмәнем. Үҙем теләмәгән көйө китәсәкмен дә. Шуға күрә үҙем булмағас, һүҙем булһа ла ҡалһын әле, тим.

## Шәжәрәм

Минең ете быуын шәжәрәм былай:

Ырыҫҡол – Хөсәйен – Фәйзулла – Ғиззәтулла – Ғиниәтулла – Батыргәрәй – Ғайса.

Был әле бер теҙмә, шәжәрә ағасының бер ботағы ғына. Унның тармаҡ йыуан ботағы, төпкө олоно борон замандағы Төмән бейгә барып төпләнә:

Төмән бей – Майҡы бей – Солтан бей – Ихсан бей – Рыҫлан бей – Аллабирҙе бей – Хоҙайбирҙе бей – Исәт бей – Дәүләткилде бей – Байтирәк – Аҡбирҙе – Бикшәйех – Мырҙаш – Хөсәйен.

Ана ҡайҙан, бейҙәр затынан килә беҙҙең табын ырыуы шәжәрәбеҙ. Тамырҙарым атаҡлы табын ырыуҙаштарым Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Дауыт Юлтый, Мәжит Ғафури, Жәлил Кейекбаев шәжәрәләренә барып тоташыуына ҡыуанам.

Үрҙә һанаған ете быуын шәжәрәм әле шул көйө бары ҡыу ағас ботағы. Ә мин уны Өфөлә, Үҙәк дәүләт архивы фондындағы халыҡты иҫәпкә алыу яҙмалары (ревизские записи) буйынса тикшереп, ата-бабаларымдың ҡайһы йылдарҙа йәшәүен, ғаиләләрен, кемдәрҙең нисек ғаилә ҡороуҙарын, тормош хәлдәрен асыҡлап сыҡтым. Минең алдыма улар ҡасандыр йәшәгән тере кешеләр, үҙ

исем-аттары, бала-сағалары менән йәнле булып килеп баҫты. Бына документ мөғжизәһе! Ул исемдәр әлеге шәжәрә быуыны ботағында, гүйә, үҫентеләр ебәреп, йәшел япраҡ ярып, теремекләнеп китте.

Шәжәрә – ул минең рухи тамырҙарым да. Минең Фәйзула менән Ғиззәтулла ҡартатай-оло бабамдар заманынса уҡымышлы кеше, указлы мулла заттар булған. Стәрлебаш, Ҡарғалы атаҡлы мәҙрәсәләренә китеп уҡыған.

Документтарҙа шул ата-бабамдар менән танышҡас, минең рухым яңырып киткән кеүек, улар менән күрешеп һөйләшкән һымаҡ булып китте хатта ки.

Башҡорттарым, шәжәрәгеҙ быуындарын асыҡлап, халыҡ иҫәбен алыу документтарын барлап, рухығыҙҙы яңыртығыҙ, ата-бабаларығыҙ менән осрашҡандай булырһығыҙ, тим.

## Ауылым күрке

Тыуған ауылым Үтәгәндең минең өсөн мәңгегә күңел күркем булып ҡалыр ике йорто ғына бар әлегәсә. Береһе – мин тыуып-үҫкән һалам башлы, бейек оло ҙур тәҙрәле өй урынында һалынған, мин үҙем, ғаиләм менән ҡайтып йөрөгән, һеңлем Зәкирә менән кейәүебеҙ Рим Искәндәров һалдыртҡан заманса иркен ҡуш өйлө күркәм ағас йорт, икенсеһе – ҡайтҡан һайын инеп сыҡмай күңелем булмаған, байрам, үҙ юбилейҙарым осоронда Өфөнән ололап саҡырып байрам ҡунағы иткән, хөрмәт күрһәткән, кейәүебеҙ оҙаҡ йылдар директоры булып эшләгән һәм бинаһын таштан һалдырған ауылым мәктәбе.

Үтәгәнем үҙе инде – балаһы алдында үҙ бурысын үтәгән төҫлө, берсә ҡыуанып, берсә һағышланып баҡҡандай, бала сағымдағы оло, оҙон ҡуш йортло клубы, унда аҙна һайын тигәндәй уҙып торған кисәләре, уйын тамашалары, кинолары, ә китаптар менән тулы, шахмат-шашка уйындары, бильярд – һәр көн киске уттары менән үҙенә арбап тартып торған китапхана бинаһы минең рухымды биҙәгән, зиһенемде байытҡан ғүмерлек күңелем өлөшө ул. Ғәлиулла бабайымдың тимер башлы, бейек ҡупшы йортона урынлашып алған ауыл Советы ла, эре генә йөрөгән рәйестәре, ҡай саҡ ҡырҡа ҡылыҡтары, ара-тирә ошо йортҡа ҡыңғыраулы аттарҙа, кырандастарға ултырып йәштәр никахлашыуҙарын яҙҙырырға шаулатып килеп төшөүҙәре...

Күңел күркем булған тыуған ауылыма үҙ мөнәсәбәтемде, онотолмаҫ иҫтәлектәремде, рәсми телдә “Яҙмышыма яҙғаны” (“Автобиографиям”) тигән автобиографик яҙмаларымда ташҡа баҫтырғанмын, китап итеп сығарғанмын. Шулай итеп, күпмелер үҙемдең уллыҡ бурысымды атҡарғанмын.

Был юлы ауылымдың йәнә бер күңел күркем булыр бер мөйөшөн иҫкә алғым килә.

Ул – мәктәп музейы бүлмәһе. Мәктәптең икенсе ҡатында, яҡты бүлмәлә урынлашҡан. Унда тыуған ауылымдың бер аҙ тарихын һәм әүәлге көнкүрешен һынландырған иҫтәлекле экспонаттар, ҡорал-ҡорамалдар табып ҡуйылған.

Ҡырмыҫҡалы районының Үтәгән исемле урта ҡул ғына ауылынан илйортобоҙға, республикаға билдәле булыр, үҙенсә хөрмәт ителер бер нисә шәхес тә сыҡҡан икән. Уларҙы элекке беҙҙең “Урал” исемле колхоз территорияһында ултырған Прибельский – (Ағиҙел буйы) тигән шәкәр заводы ҡасабаһында йәшәгән һәүәҫкәр рәссам төшөргән һүрәттәр атап әйтеп тора: Үтәгән Мыуашов, Абдрахман Аҡъегет, Банат Батырова, Ғайса Хөсәйенов, Роберт Байымов, Әхәт Хөсәйенов...Үтәгән Мыуашов бынан өс йөҙ йылдар әүәл тыуған ауылымды нигеҙләгән аҡһаҡал, 1755 йылғы башҡорт ихтилалында ҡатнашҡан, 1773 – 1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында полковник дәрәжәһенәсә күтәрелгән бер

тарихи шәхес. Абдрахман Аҡъегет – 1812 – 1814 йылдар Ватан һуғышы батыры, исеме легендаларҙа ҡалған дан кеше. Хәҙерге көндә лә Үтәгәндә ул батырҙың нәҫел-тоҡомдары йәшәп ята. Банат Батырова иһә үткән быуатыбыҙҙа, совет осоронда ауылдағы хеҙмәт батырлығы менән дан алған атаҡлы ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙан беренсе Социалистик Хеҙмәт геройы. Мин бала сағымда, әсәйемә ярҙамлашып, уның звеноһында эшләштем.

Роберт Байымов – филология фәндәре докторы, профессор. Башҡортостан Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты. Әхәт Хөсәйенов – Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан республикаһының атҡаҙанған артисы. Былар Үтәгәндең ғорурлығы.

Тыуған ауылымдың бер күңел күркен мин йәнә ауылдаштарым, тоҡомдаштарым әүәле ҡулланған ҡорал-ҡорамалдарында, ҡул, һөнәр эштәрендә, көнкүрештәрен биҙәгән нәмәләрҙә лә күрәм.

Бына ата-бабаларыбыҙ, әсәй, ҡатын-ҡыҙ туғандарыбыҙ ҡасандыр тотҡан, ҡулланған ҡорал-ҡорамалдар янына уҙып, оҙаҡ-оҙаҡ ҡарап торам, ҡайһыларын тотоп ҡарайым, ғәжәпләнәм, һоҡланам, уйҙарға батам.

Ниндәй генә ҡорамалдары юҡ: ул тубалы, һоҫаһы, кирәме, төтөнлөгө, мурҙаһы, ауы, тәрәше, һеүәне, дөмбөрө, ҡалъяны, саҡтаһы, суҡмары, ҡапҡаны, ҡалыбы, ҡайрағы, яныуысы, тәпеһе, кәйләһе, киндер һуғыу, туҡыма туҡыу ҡорамалдары, көрөҫ-ҡалтырсалары, тәрәш-шүреләре, ҡабаһы, көнйәләре...

Быларҙың күбеһен хәҙерге йәштәрҙең байтағы ҡулына тотоп ҡарау түгел, күргәне-белгәне лә юҡтыр, исемдәрен дә ишетмәгәндер. Сөнки улар ата- бабаларыбыҙ көнкүрешенең ҡомартҡылары булып хәҙер инде күбеһе музейҙарҙа ғына һаҡлана.

Ә бына минең үҙем өсөн улар, ата-бабаларымдың төҫө булып, күңелем түрендә, телемдә ҡәҙимге көнитеш һыны булып йәшәп килә.

Шағир һүҙҙәре менән әйткәндә, ауылымдың үткәне лә, хәҙергеһе лә күңел күрке кеүек күңелемә яҡын минең.

## Дачала

Йәй көндәре дачала иртәнге сәғәттәрҙә верандаға сығып ултырам. Диванда ял итәм, тәбиғәтте күҙәтәм.

Ҡояш урман артынан ҡалҡынған һайын тирә-йүн йәнләнә, йәмләнә бара. Йорт нигеҙемдәге бал ҡорттары безләшеп бер туҡтауһыҙ, өҙлөкһөҙ ем-бал артынан оса, икенселәре кескәй боттарына  һеркә тейәп ояларына ҡайта.

Йорт мөйөшөндәге оло ҡарағасыбыҙ янындағы оло ҡырмыҫҡа өйөмөндә шунса уҡ эш ҡайнай. Әшсе ҡырмыҫҡалар үҙҙәренән әллә күпмегә дәү берәй нәмәне һөйрәй, бүтәндәре ниндәйҙер хәстәрҙәр менән йүгерешә, төрлөһө төрлөсә мәж-мыж килә.

Баҡсабыҙ емеш ағастарында ҡоштар сутылдаша, йәй иртәһен сәләмләй.

Бер уйланһаң, донъя ғәжәйеп йәмле һәм мәғәнәле: һәр мәхлүктең, ҡош-ҡорттоң үҙ шөғөлө бар, хатта ки донъяны йәмләр үҙ кескәй өлөшө бар. Бал ҡорто һеркәләндермәй сәскә лә атмай, емеш тә бирмәй бит.

Шундай хозурлыҡтарға һуғарылып, тәрән уй-тойғоларға бирелеп, үҙеңде ысын кешеләй тойоп, донъяның, үҙеңдең йәшәү мәғәнәһен тәрәнерәк аңлай барған кеүекһең.

Тора-бара үҙенән-үҙе ҡулдар ҡәләмгә тотона, өҫтәл артына ултыраһың, ғилем, ижад донъяһына сумаһың.

Кешелектең, йәшәйештең бер мәғәнәһе ошондалыр ҙа, моғайын.

## Йөрәгем

Өс тиҫтә йылдар самаһы мин йөрәгем тураһында уйламаным. Ул мине уйнатты – үҙем шат инем.

Ҡырҡта шырҡ, тиҙәр – миңә йөрәк зәхмәте ҡағылды, – хафаға төштөм.

Ун-ун биш йыл йөрәк менән булдым, дауа ҡылдым.

Иллеләргә етә тағы йөрәгемдең ҡайҙалығын оноттом.

Йөрәк мине йәлләне, иркәләне, аҡыл йөрәкһетергә ирек ҡуйманы.

Етмештә йөрәгем һәр нәмәгә тышау һала башланы, буйһонмай, йөрәк ҡушҡанды үтәмәй сара ҡалманы.

Әлегә мин барҙа һин бар, һин барҙа мин бар, тип йәшәп ятҡан көнөбөҙ.

## Аҡылым

Миңә аҡыл ултырғандан алып, аҡылым миңә хеҙмәт итте. Шулай аҡылым менән һин дә мин йәшәнек. Аҡыллыбыҙ тип маҡтанышманыҡ, һыр биреп тә барманыҡ.

Ғилем, аҡыл эйәһе булғас, үҙенән-үҙе аҡһаҡаллыҡ та килгәндер, тим. Аҡыллыбыҙ, тип аҡыл һатманыҡ, үҙ-ара һынатманыҡ. Аҡыл – даръя, уй – диңгеҙ, тип сәбәләнмәнек. Нәфсем ҡотортһа, аҡылым теҙген була алды.

Ҡартая килә аҡыл һайыға, тиҙәр. Үҙем әле һаман мейемдә гел эшләткәс, үҙемә аҡылым теп-теүәл кеүек.

Оҙон ғүмергә ҡарағанда, аҡыл ғүмерлеге, аҡыллы ҡартлыҡ ҡиммәтерәк.

Аҡылым донъя хаҡында уйлана.

Йөрәгем Алла хаҡына тибә.

Аҡыл менән йөрәк типә-тиң икән.

Мин иҫән, мин аман, миндә – иман.

Берәй ағзам ауыртһа, Алланы телгә алдым.

Ауырып китһәм, ғүмер хаҡында уйландым.

Шат-күңелле саҡтарҙа донъямды оноттом.

Кәртәләрҙән сыҡҡанда хафаларға юлыҡтым.

Күҙеңде асыбыраҡ ҡарамай, әсеһен-сөсөһөн татымай донъяның йәмен дә, тәмен дә, белеп булмай икән ул.

***

Кеше донъяла үҙ урынын табырға тейеш.

Былай тип әйтеүҙәре генә еңел.

– Ҡалайтып табырға? Нисек?..

– Эшкә, һөнәргә эйә бул!

– Ниндәйҙәренә?

– Һәләтеңә ярашлыһына, күңелеңә ятҡанына. Хикмәт тә ошонда, һәләтеңә ярашлыһын тотһаң, уңаһың, тотмаһаң, туңаһың.

Көсөңә, күңелеңә, булмышыңа ярашлы эш-һөнәр һайлай алыуҙан ыңғайлы һәм уңайлы тормош, эш-һөнәр юлы башлана.

Ҡулай эшле, һөнәрле кеше бәхетле.

Шул саҡта эш тә, ҡул да уйнап тора. Күңелеңә лә кинәнес, тормошоң да бөтөн.

***

Кеше үҙ бәхете менән тыуа, тиҙәр.
Ә ул бәхет ниҙә икәнен белергә кәрәк бит әле.
Тимәк, ул бәхет асҡысын таба белергә кәрәк.

Ул ваҡытта эш-һөнәр, тормош серҙәрен, хатта ки еңел аңлап булыр ине.

Мин үҙем, мәҫәлән, күңелемә яҡын һөнәремде тапҡас та кеше күңелдәрен асыр асҡыстарҙы ғүмерем буйы эҙләп йөрөнөм.

***

Кеше үҙенән һуң ниҙер ҡалдыра:
Тоҡомон, исемен, ниндәйҙер есемен.
Шулар менән генә кеше кешелер.
Шулай эшләп китер эшелер.

***

Минең үҙ донъям, үҙ хәстәрем.
Минең үҙ эшем, үҙ мәшәкәттәрем.
Башлыса ғилем, яҙыу эше менән мәшғүлмен.
Шуғалыр ҙа күпмелер мәшһүрмен.

Аңлы ғүмеремдә (етмеш йылдан артыҡ): мәктәптә – уҡыусы, институтта – студент, аспирантурала – аспирант, ғилми институтта әҙәбиәтсе ғалим булып уҡыуҙарыма, күпме белем туплауыма нисек башым тубал булмай, барын аңлар-төшөнөр өсөн баш ватыуҙарыма, әллә ниндәй уй-хыялдарға бирелеүемә нисек хыялыйҙар булмайым, нисек әле мейеләрем ярылмай икән, тип аптырайым.

Күрәһең, мейем артыҡ-бортоғон, сүп-сарын үҙ аҡылы менән иләй торалыр.

Хәтер юҡ, тип зарланған булабыҙ, ҡартая бара, бәлки, уға борсолорға түгел, һөйөнөргә кәрәктер – мейе бит йәшәр өсөн үҙ файҙаһына эшләйҙер, моғайын.

Артыҡ-бортоғон елгәрә торалыр.

***

Том-томдар, хисапһыҙ тауҙай китаптар уҡып, сатай-ботай яҙылған ғәрәп шрифтлы иҫке ҡулъяҙма китаптар менән танышып, күҙҙең нурҙары бөткәнен, көнөм ҡасан уҡ инде күҙлек кейеүгә ҡалғанын, яйлап насар күреүемде, һуҡырая барыуымды ла белеп-тойоп торам.

Күҙ, ғилем эше, күрәһең, ҡорбандар ҙа һорай торғандыр. Нишләйһең, һайлаған юлым өсөн йәнем дә, күҙем дә фиҙа.

***

Олоғайғас аңлайһың: зиһен дә, кәрең дә кәмей бара шул. Олоғайғас тояһың, күҙҙәрең дә секерәйә, күҙ күремең дә кәмей бара.

Улай ғынамы, ғүмерең йылдары, айҙары һанаулы ғына ҡала бара.

Шуларҙың әмәлен, һанын, көнөн белмәү генә бәндәне тынысландыра имеш.

Уй-теләгең шуға ғына ҡала: донъянан айыҡ аҡылың менән тиҙ һәм тыныс үтһәңсе.

***

Ололарҙан йыш ишеткәнем бар:
Кеше хаҡында һөйләгәнсе, башта үҙ-үҙеңде бел, тиҙәр.
Тормош хаҡында гәп һатҡансы, тәүҙә үҙ тормошоңдо ҡор әле, тиҙәр.
Ололар һөйләшкәндә белер-белмәҫ һүҙ әйтһәң, ҡыҫылмайыраҡ тор әле, тип тә ебәрәләр.

Шундай саҡтарҙа тиҙерәк үҫке, оло кеше булғы килде.
Тормош тигәнен үҙ ҡулдарың менән ҡорғо килде.
Тағы әллә кемдәр булғы, әллә ниҙәр ҡырғы килде.
Донъяла әҙәмсә торғо килде.

***

И, уй-хыялдар!
Шулар күңелеңде күркәмләй, рухыңды күтәрә түгелме?
Күңел күрке, рух сафлығы рухани донъялыр ҙа әле ул, әгәр төптәнерәк уйланһаң.
Изге заттар, әүлиәләр, пәйғәмбәрҙәр, бөйөк шәхестәр күктән төшмәгән, ерҙә тыуып-үҫкән олуғ рух-күңел илселәре түгелме ни.
Шундайҙар бит кешелеккә тормош, рух тәжрибәләрен, изге китаптарын, тәғлимәттәрен, рухи-ғилем байлыҡтарын яҙып ҡалдырған.
Күккә ҡарап фекер ит, ергә ҡарап шөкөр ит, тигәндәр.
Һәр кем үҙе хаҡында, күңел донъяһы тураһында уйланырға хаҡлылыр. Шағирыбыҙ әйтмешләй, уй-фекер бүлешкәндән кәмемәй, бары арта, байыға ғына торғандыр.

***

Башта күберәк уй-хыялдар менән йәшәнем.
Аҡылға ултырғас, баш баҫып эшләнем.
Уңыштар хыялға ҡанат ҡуйҙы, күңелде үҫтерҙе.
Бар ғүмерем эш өҫтөндә, өҫтәл артында үтте.
Инде һәммәһе үтте-китте...

## Беләбеҙме?..

Һәр кем үҙен яҡшыраҡ белә кеүек. Йәшәй-йәшәй бүтәндәргә ҡарағанда үҙеңде яҡшыраҡ беләһең, әлбиттә. Холоҡ-ҡылығыңды белеп, күнегеп бөтәһең. Аҡылға ултыраһың.
Ә ҡай саҡ үҙ күңел донъяңда уҡ аҙашып-албырғап ҡалаһың. Ҡай саҡ аҡылың менән хис-тойғоң эске бәхәскә керешә, нәфсең менән аҡылың сәкәләшә. Күңелеңде әллә ниндәй шик-шөбһәләр кимерә. Нәфсең еңеп китһә, имеш уныһы шайтан ҡотҡоһонан, тиҙәр. Күңел фәрештәң менән шулай шайтан талаша микән ни? Һәр кем ҡай бер нәфселе һәм гонаһлы уй- ҡылыҡтарын үҙ-үҙенән дә йәшерергә тырыша түгелме һуң? Шул саҡ үҙ-үҙеңде уйлап-аңлап ҡара инде...
Йәшермәйем, мин үҙем дә һәр саҡ аҡыллы һәм инсафлы булаһы кеше, үҙ күңелемдә аҙашҡылап ҡалам, ниндәйҙер выждан ғазаптары кисерәм, аңлатып бөткөһөҙ һорауҙар алдына баҫам. Төбө-тамырына төшөнә алмайым. Тәүбәләргә килгән саҡтарым булғылай.
Кемдәрҙер алдында ғәфүҙәр үтенәһем, донъялыҡтан күпмелер сафланып үтәһем килә.

***

Үҙ-үҙеңде лә яҡшы белеп бөтмәгәс, бүтәндәрҙе белеп бөтөп буламы ни.
Күп йәһәттән сер ул әҙәмдең күңел донъяһы.
Уны ренгент нурҙары ярҙамында ғына аңлап булмай.
Күҙ менән күҙ, һүҙ менән һүҙ генә һөйләшергә мөмкин.
Күңел менән күңел һөйләшһә йә серләшһә, икенсе хәл.
Бында Фрейдтан да былай нескә психоанализ хәжәт.
Тапһаң икәнсе шуға асҡыстарҙы.

***

Хәҙерге кеше күп нәмә белә, күп күрә: телевизорын ҡарай, радиоһын тыңлай, гәзит-журналдар уҡый. Уға мәғлүмәт көн һайын ташҡын булып инә. Күбеһе бер ҡолағынан инә, икенсеһенән сығып та китә. Аңға, мейегә һеңмәй, йөрәккә барып етмәй.

Быларға инде асҡысты тапһа, психологтар, шағирҙар, әҙиптәр таба, тапмаһа...

## Үҙемсә...

Үҙең тураһында һөйләү ихтыяжы күңел ҡушыуы буйынса тыуа торғандыр ул. Кешеләргә үҙең тураһында ла ниҙер әйткең, уйыңдағын уртаҡлашҡың килеп китә.

Күңел бушатыр өсөн генә түгел, фәһем өсөн.

***

Үҙ-үҙеңде еңеү бүтәндәрҙе еңеүҙән күпкә ҙурыраҡ. Үҙ-үҙеңде еңеү – нәфсе, хаталарыңды, етешһеҙлектәреңде еңеп үҫеү, таҙарыныу, көсәйә барыу ул. Асылда шулай.

Көсөң көсһөҙлөгөңдө еңергә етһә – һин көслө.

***

Кешенең йомшаҡ, етешһеҙ яҡтары ла күп булыр, шуға ул ҡай саҡ албырғап та ҡалыр. Шуларҙы үткәрә, еңә бел – шунда хикмәт.

***

Ваҡтар араһында йөрөй-йөрөй, ваҡ-төйәктәр хаҡында гәпләшә-ғәйбәтләшә үҙеңдең ваҡланып киткәнеңде һиҙмәй ҙә ҡалғылайһың.

Тирә-йүнеңдә өлгө алыр өлкән заттар, рухыңды байытыр һәм сафландырыр оло йөрәклеләр күберәк булһа икән.

***

Гел объектив һәм сабыр бул, тиҙәр. Әйтеүе еңел дә ул. Хис кешеһенә гел шулай булып ҡарарға тырышһаң, үҙеңдән ни ҡалыр ине.

## Ишең

Донъяла һәр кешенең үҙ ише, үҙ һыңары була имеш, тиҙәр. Улар шул хәтле оҡшаш, һуйған да ҡаплаған, йәнәһе. Шул, булһа, үҙ иш-ҡушыңды табып, ситтән ҡарап күҙәтеп ҡара икән. Үҙеңдең нисек икәнеңде үҙ күҙҙәрең менән ситтән күрер инең.

Йә шул иш-ҡушың гел йәнәшеңдә булһа икән ул. Бер эшеңде үҙең, икенсеһен ул башҡарыр ине.

Беҙҙең ауылда Мөхәмәтша тигән ағай була торғайны. Шаян холоҡло, йылғыр ҡылыҡлы, бер аҙ елғыуар кеше ине. Үҙе бына тигән һунарсы.

Бер заман, һуғыштан һуңғы ауыр йылдарҙа, уңышлы ғына һунар итеп ике-өс ҡуян алып ҡайтып, бер-ике көн һыйланып ятҡан икән, бригадир эшкә саҡыра килгән.

Уйын-көлкө, һый-хөрмәттән тиҙ генә айырылғыһы килмәй генә Мөхәмәтша әйтеп һалған:

– Их, донъяла ике Хашша булһа икән ул. Береһе шулай гел күңел асып йөрөһөн ине, икенсеһе, әйҙә, гел эш менән булһын ине.

Минең үҙемдең шулай бик күп эштәрҙән арып киткәнемдә, өҫтәүенә, бүтәндәре өҫтәлеп, көтөп торғанда, ауылдашым Мөхәмәтша-Хашшаның һүҙҙәрен үҙемсәләй ҡабатлап ҡуйғылайым:

– Их, донъяла ике Ғайса булһа икән ул. Береһе бер эше, икенсеһе икенсе эше менән булыр ине. Икеһенә лә күпмелер еңелгәрәк килер ине.

Йә ай-йондоҙҙар үҙемде яратып артымдан ҡалмай, йә үҙем уларҙы тартып эйәртеп барам.

Бәлки, ҡөҙрәттәребеҙ берҙәй уртаҡтыр.

***

Йыһан даръяһы ҡаршыһында мин бер мәл генә күренеп ҡаламдыр.

Әммә мин ошо йыһан Мәленең сикһеҙлеген аңлаған затмын.

Аңыма шул Мәлдең сикһеҙлеге һыя.

***

Күҙем, уйым менән мин йондоҙҙарға күҙ асып йомғансы барып етәм.

Ә йондоҙ нурҙары беҙгә миллион йылдарҙа килеп етә, тиҙәр.

Шулай булғас, йондоҙмо, кешеме ҡөҙрәтлерәк?

## Диңгеҙ һәм мин

Осһоҙ-ҡырыйһыҙ диңгеҙҙең ҡомло һәм күбекле яр буйынан атлайым.

Ҡомдағы аяҡ эҙҙәремде диңгеҙ тулҡыны йыуа бара. Диңгеҙ күбеген ел юя. Диңгеҙ, тулҡын, ел генә мәңге төҫлө. Улар ҡаршыһында мин ҡом менән күбеккә бәрәбәр. Ә диңгеҙ тулҡыны ипкенендә минең эҙем ҡала. Әммә күңелемдә минең диңгеҙ шауы, диңгеҙ киңлеге йәшәй.

Ә мин диңгеҙҙең киңлеген һәм мәңгелеген аңлауым менән диңгеҙҙән тиңһеҙ өҫтөнмөн.

Рухым минең мәңгелекте даулай. Диңгеҙ миңә ҡушылып шаулай.

Ҡомдан сәхрәләр хасил була,

Тамсыларҙан диңгеҙ ярала.

Кешеләрҙән Кешелек диңгеҙе тулҡына.

Кешелек диңгеҙе сикһеҙ һәм мәңгелектер, бәлкем?

Аяҡ аҫтымда диңгеҙ шаулай...

Ә күңелем мәңгелек даулай.

***

Уйымда һәм рухымда Мәңгелек менән бәхәсләшәм.

Тик Мәңгелек минең менән һүҙ көрәштерә алмай. Телемде белмәй. Ул өнһөҙ, мәңге тын.

Ә мин мәлһеҙ өнләмөн, тынысһыҙмын.

Мәңгелек, һинең телеңде лә белһәм ине.

Беҙ, бәлки, тиң тороп бәхәсләшә алыр инек.

***

Бер ғүмеремдә үҙем Мәңгелектең бер бөртөгөн аҫрайым.

Ә мәңгелектең мәңге барлығын аңлауым менән уны мәңгеләштерәм.

***

Диңгеҙ ҡаршыһында мин бер бөртөкмөн,

Урман, далалар, ҡыяҡтар даръяһында бер төкмөн.

Океандар ҡайнауында ямғыр тамсыһындай тамсымын,

Уның өҫтөндә күк-йәшендәр йәшнәгәндә, гүйә, ут ҡамсымын.

Ҡул көсөм, аҡыл ҡеүәтем менән барыһы өҫтөнән осам,

Уларҙы уйым, күңелем, бар рухым менән ҡосам.
Сөнки мин – кешемен,
Шуның менән көсләмөн.
Шуның менән өҫтөнмөн.
Мәңгелектең бер тере тамсыһы мин.
Мәңгелектең мәңгелеген төшөнөүсеһе мин.

## Уйланам да тулғанам

Мин оҙон юлға йыйынамын.
Тыуған өйөм: китмә, бында үткәнең, хәтирәләрең, ти.
Юлым: әйҙә, юлға, унда һинең киләсәгең, күрәһең, ти.
Ә ике арала – минең хәҙергем, бөгөнгөм.
Хәҙергем – хәҙергә иң ҡәҙерлем. Бөгөнөм – бөгөнгө бергөнөм.
Шулай үҙемә, гүйә, өс замандың һыйҙырам.

***

Тойоп, аңлап булмаҫ абсолют хәҡиҡәттән
үҙем танып белгән хәҡиҡәт яҡын миңә.

***

Хыял менән аҡыл араһы бөрсә яҡын, берсә йыраҡтыр.
Күңелең ятмаһа, тот та быраҡтыр.
Һөйөү йөрәктәрҙе йөрәктәргә бәйләр,
Хыял аҡылға ҡанат ҡуйыр.

***

Йөрәкте – тай-тулаҡ, аҡылды теҙген, тиҙәр.
Тик уға ҡороҡ һалырға ғына яҙмаһын.
Йөрәк менән аҡыл берлегенә ни етә!

***

Үткәндәге бурыстарҙы түләр өсөн киләсәктән үтестәр алабыҙ.
Алабыҙ ҙа ҡай саҡ буш ҡалабыҙ.
Үтескә генә йәшәмәһәк ине ғүмерҙәрҙе.

***

Минең белем, тәжрибәм – аҡыл ҡаҙнам.

***

Ихтыярлы кеше алдында уны алға әйҙәп алыҫ офоҡ, ниҙер саҡырып торорға тейеш. Шул офоҡтарға, офоҡ артынан офоҡтарға ынтылған кеше генә аҡыл эйәһе, ғалим, шағир булып китәлер ул.

***

Иртәнге ҡояш сығышын, көн сыуағын, киске шәфәкте ғүмеремдең яҡты бер көнө итеп ҡаршыларға, мөмкин тиклем яҡшы кәйеф менән оҙатырға тырышам.

Ул миңә ниндәй шатлыҡ, эштә уңыш, башыма аҡыл, белем өҫтәүе менән ҡыуанам.

Берәй көндө уңышһыҙлыҡтарға тарыһам, күңелем кителһә, йөрәгем әрнеһә, икенсе көндө күңел ҡырғандарын онотorға, бушлыҡтарын эш-шөғөлөм менән тултырырға тырышам.

Көн-көнгә тура килмәһә лә, ваҡыт бизмәненең тигеҙерәк тартҡаны хәйерле.

# Тормош

Бала саҡта беҙ тәбиғәтте, тормошто үҙебеҙ өсөн үҙебеҙ асабыҙ. Аяҡтарҙы кесерткәндән саҡтырып, ҡаты үлән төптәренә баҫып, ҡорттарынан сағылып тирәйүндә таныйбыҙ, һоҡланабыҙ йә ҡурҡабыҙ.

Бәлиғ булғас, тәбиғәтен дә, тормошон да үҙебеҙгә буйһондорорға тырышабыҙ. Тәбиғәттең йәменән хәжәте күберәк ҡыҙыҡһындыра.

Тормоштоң ҡыҙыҡ та, ҡыҙығыр ҙа яҡтары күп. Тормоштоң биҙҙерер, иҙер яҡтары ла юҡ түгел. Ҡыҙығын күберәк күреп, биҙҙерерҙән алыҫыраҡ йөрөһәң икән дә һуң.

Юҡ шул, тормош юлында үҙ кәртәләрен, төрлө йәтмәләрен үрә тора.

Әҙәм шулар менән булып күп ғүмерен уҙҙыра.

Барынан үттем, мораҙыма еттем тигәндә ғүмеркәйең дә үтеп киткән була.

Берсә әүрәткес, берсә алдатҡыс хикмәт ул тормош.

***

Тормоштоң үтә ҡәҙерле, илерткес мәлдәре күп.

Әммә уларға әүрәп, әүрә булып ҡалыуың да бар.

Нәфсең шайтан ҡотҡоһона бирелдеме – бөттөң, бөлдөң.

Әүрәтеп тә, әүрә итеп тә бөгә шул тормош әҙәмде.

***

Әҙәм балаһы йыш ҡына бер нәмәгә әүрәп, күптән мәхрүм ҡала.

Әҙәм тормош эсенә башы менән сумып, уның матурлыҡтарын, ҡыҙыҡтарын да күрмәй ҡала.

Әҙәмгә әҙәмсәрәк йәшәүҙән дә ҡәҙерлеһе юҡтыр.

***

Үткәндәрҙе кире ҡайтарып булмай.

Үткәндәргә хәтереңдә генә ҡайтып әйләнергә була.

Хәтер тигәнең дә йыш ҡына үкенескә әйләнә.

Шунан баштар әйләнә, күңел ептәре бәйләнә.

***

Донъя бер ҡарағанда иҫ китмәле ғәжәйеп.

Икенсе күҙ менән ҡараһаң, ғәйрәтеңде сигәрер хәтәр.

Донъяның үҙен ғәжәпләндереп, артына тибеп йәшә ине ул.

Донъяһымы буш, әҙәмеме хуш булыр ине микән?

***

Әҙәм донъяны күрер, аңлар, аҙаҡ үкенер өсөн генә донъяға килә кеүек. Аңлағас, үҙен мәңге йәшәтер йә рухи йәшәртер өсөн хыялланып, йыуанып, инанып йәшәйҙәр.

Әҙәм үҙенән, үҙ уй-хыялынан ары аша алмай шул.

***

Тормош – тормошта үҙенсә сәйәхәт ул, маҡсаты – юл күрһәткесе.

Маҡсат томаланһа, тоҫмалдар юғалһа, әҙәм тормош даръяһында аҙашып ҡалыуы ла ихтимал.

***

Тормош һабағы мәктәп, институт һабаҡтарынан ҡатмарлыраҡ һәм ауырыраҡ.

Тормош – ул һине үҙенең уттарына һалып, һыуҙарына батырып сыныҡтырып, аңыңа ҡарағанда йөрәгеңә, нисек кеше булырыңа нығыраҡ һабаҡ бирә. Иң ҙур һабаҡ – тормош һабағы.

***

Ауырлыҡ менән табылған бәхет ҡәҙерле.
Еңел табылған бехеттең ҡәҙере лә үҙенсә.

***

Тормош һабағы – әҙәп һабағына әйләнгәндә генә үрнәкле.
Һабаҡтың һабағы инде – икеләтә һауап.
Тормошҡа бигүк ышанып бөтөргә лә ярамаҫ.
Ул әүрәтеп һине уйынсыҡтай ҙа итер.
Ул ғына етмәгән, аңғармаҫтан көтмәгәнеңә илтер.

***

Тормош – ғибрәт һәм һабаҡ.
Уның һабаҡ булыр яғы әһәмиәтле.
Ғибрәттәр тормошта былай ҙа тулып ята.

***

Беҙ тормош ҡорабыҙ тип эшләйбеҙ, эшләйбеҙ,
Ә йүнләп йәшәмәйбеҙ, буғай.

***

Беҙ халыҡҡа хеҙмәт итәбеҙ тип эшләйбеҙ, эшләйбеҙ,
Ә донъяның рәхәтен йүнләп күрмәйбеҙ һәм белмәйбеҙ, буғай.
Шулай булһа ул тулы, ҡәнәғәт тормош микән ул?

***

Йәшәйбеҙ, йәшәйбеҙ, һаман йәшәй белмәйбеҙ.
Эшләйбеҙ, эшләйбеҙ, һаман эшләп бөтә алмайбыҙ.
Йәшәүҙең мәғәнәһе, тип баш ватабыҙ – үҙебеҙ ватылабыҙ.

***

Тормош – көрәш, тибеҙ, үҙебеҙ туҙабыҙ.
Тормош – ауыр тибеҙ, шулай ауырыуға әйләнәбеҙ.
Шул тормош тип үләбеҙ.

***

Уҡыу – күп белеүгә, әңгәмә – зирәклеккә, яҙыу ғәҙәте – теүәллеккә илтер.

***

Әҙ яҙған хәтеренә ышаныр, әҙ һөйләгән зирәклегенә таяныр. Әҙ уҡыған күп белер булып ҡыланыр хәйләләр.

***

Кеше үҙ күңелен кәрәкһә күтәрә лә, кәрәк-кәрәкмәгәндә төшөрә лә ала – бары үҙенән.

***

Кешене таныр өсөн һөйләшеп белешергә кәрәк.
Кешене аңлар өсөн һөйләгәнен тыңларға кәрәк.

***

Кешене эш кеше итешә.
Кешенең ҡылығы яҙмышын билдәләшә.

***

Кешегә сит тел өйрәнеү өсөн бер-ике йыл етә.
Кешенең теленән төшмәй йәшәү өсөн бер оҙон ғүмер ҙә етмәй.

***

Кешенең мөмкинлектәре сикһеҙ.
Әммә ул да үҙе булдыра алғандың артығына бигүк сыға алмай.

***

Кеше үҙен үҙе, яҡындарын яҡшы белмәй кешеләрҙе белә алмай.
Үҙеңдән башлана һәр нәмә. Тормош ул тормошто ҡормош икән, күпкә тормош.

***

Үҙең артабан күтәрелергә теләйһең икән, бүтәндәрҙе лә күтәреш, улар ҙа һине әлдән әле күтәрешер.

***

Кеше йәмәғәт өсөн генә йәшәгәндә лә, үҙе өсөн генә йәшәгәндә лә онотоласаҡ. Икеһен дә бергә ҡушһаң – икеләтә отоуың бар.

***

Кешеләргә хөрмәт – үҙ-үҙеңә лә хөрмәт. Хөрмәттән фәҡәт хөрмәт тыуа ала.

***

Кеше күңелен дуҫтары күтәрергә әҙер торһа, дошмандары төшөрөргә әҙер – Былары ни?
Кеше үҙен генә сикләмәһен һәм ситләтмәһен ине.

***

Мәңгелек, тиҙәр – кем һуң мәңгелекте татып ҡараған.
Баҡыйлыҡ, тиҙәр – кем һуң уны барып күргән.
Фанилыҡ, тиҙәр – уға йәбешеүҙән башҡа ни ҡала.

***

Һин донъяға килгәнһең икән, шуны күреп, аңлап, татып китеүҙәре бәхет түгелме ни?
Уға килмәй, киләлмәй, йә килеп тә белмәй-нитмәй китеүҙәре оло бәхетһеҙлек түгелме ни.
Донъяға килгәндең, күргәндең, аңлағандың
Йәнендә баҡый, рухында мәңгелек өлөшө бар.
Йыһанда мәңгелекте аңлаған йән, бәлки, бары кешеләлер.

***

Кеше аҡыл ҡеүәһе, фекерләүе менән бөйөк.
Бәлки, шундай бөйөклөгө менән мәңгелеккә дәғүәселер.
Кеше булмаһа, Алла ғына белә, бәлки, мәңгелек тә тыумаҫ ине.

***

Кешелек барҙа донъя бар, донъяның йәме, мәғәнәһе бар.
Кешелек булмаһа донъяһы ла, йәме лә, ние лә юҡ.
Рухһыҙ барлыҡтың да, мәңгелектең дә, сикһеҙлектең дә
Мәңгелеге-ние лә, мәғәнәһе-көйө лә юҡ.

***

Һәр кем үҙ үҙаңы менән донъяны таный,
Һәр кем уйы, рухы менән рухиәтте таный.
Рухиәтлек ул – илаһилыҡ, мәңгелек затынан.

## Һаҡсы фәрештәм

Ғүмерем буйы мине яҡшы, һаҡсы фәрештәм алдан әйҙәй барғандыр, тим: саф күңелемдән әйтелгән изге уй-теләктәрем яйлап һәр саҡ тигәндәй ғәмәлгә аша килде, яҡты хыялдарым рухымды күркәмләне, үҙемде ер өҫтөнән күпмелер юғарыраҡ йөрөткәндәй итте. Рәхмәтлемен мин хыял фәрештәмә. Тылсымлы әкиәттәр оҫтаһы Һанс Андерсен: “Минең тормошом – ваҡиғаларға бай, гүзәл әкиәт ул. Минең юлымда фея осраны һәм мине изге юлдан үҙ артынан эйәртеп алып китте”, – ти.

Минең тормош юлым, әлбиттә, әкиәт иленә оҡшамаған. Әммә мин ошо ауыр, ҡырыҫ ғүмер юл башында ла үҙ уйымса уй-хыялым менән унан юғарыраҡ булырға ынтылғанмын, яҡты хыялдар мине алға әйҙәгән, китап донъяһына ғәжәйеп хыялый мөғжизәләр иленә алып киткән. Кәүҙәм ерҙән, уй-хыялдарым күктән йөрөгән.

## Яҙмыш

Кеше яҙмышының иң мөһим бер мәле үҙ булмышыңды, нимәгә һәләтеңде тойоп самалап алыуҙыр, моғайын. Дөрөҫ самалаһаң – уңаһың, булмаһа...

Күпме әҙәм үҙ булмышының, һәләтенең ниҙә икәнен таба алмай яфалана, яңылыш юлдан китеп аҙашып йөрөй.

Үҙен тормошта тиҙ тапҡан – яҙмышына хужа булған, яҙмышын үҙе үк яҙышҡан кеше бәхетле.

Ҡандан, гендан яҙмыш алдан яҙылһа ла, кеше ғүмере алдан программаланһа ла, маяҡтары ҡаҙап ҡуйылмаған шул.

***

Уй-хыялдың осо-ҡырыйы юҡ, ул һине күк-ғәрештәргә ашырып, аҙаштырып ҡуйыуы ла ихтимал.

Хыял – яҡшы, уй – шәберәк. Хыял осор, уй тотор.

Ярһыу толпарҙы ла теҙгенләгәндәре кеүек, осҡор уй-хыялдарҙы теҙгенләй алыу көс. Ғәрештәргә ашып юғалмаһын, ер барын, ер өҫләй елеүен белһен ул.

## Уй-хыял

Уй менән уйҙың, хыял менән хыялдың айырмалары ла ҙур.
Бар ерлекле уй, бар ерлекһеҙе. Бар төплө уй, бар буш уй.
Бар ғәмәлгә ашыр төплө хыял,
Бар ғәләмдә аҙашыр төпһөҙ хыял.
Уй-хыялдың бергә береккәне, ергә ереккәне шәп.

***

Донъяла уйлар уйҙар бар,
Донъяла һөйләр һүҙҙәр бар.
Һәр уйҙы телгә әйләндереү, һөйләү мотлаҡ түгел.
Һөйләрҙәйе бар, һөйләмәҫтәйе бар.

***

Әҙәм ни генә уйламаҫ, әммә һәр береһен ишеттерә бармаҫ.
Шаран-яран – үтә ярған.
Уйлап һөйләгән – аҡыл йыйған.
Уйнап һөйләгән – хис йыйған.
Уйламай һөйләгән – бөлгән.

***

Бәғзе берәү бер төрлө уйлар, икенсе төрлө һөйләр.
Бындайҙарҙы ике йөҙлө, тиҙәр.
Берәүҙең ни уйында – шул телендә;
Бындайҙарҙы иҫәр, тиерҙәр.

***

Һәр хаҡты һөйләгән дә һәр саҡ хаҡ булмаҫ.
Бушты һөйләгән дә һәр саҡ буш булмаҫ.
Һөйләй белеүҙең дә рәте, үҙ сираты булыр.

***

Дуҫыңдың да кәйефен боҙмаҫ өсөн ҡай саҡ әйтер һүҙеңде әйтеүҙән дә тыйылғылап ҡалаһың, сөнки мәле ул түгел.

Дошманыңды шаштырмаҫ өсөн әйтерен дә әйтмәй тыйылып ҡалаһың, сөнки ваҡыты ул түгел.

***

Тейешһеҙ ерҙә һүҙ аймылыштырырға тейешһең, сөнки ваҡыты етмәгән.
Тейешле һүҙҙе ҡай мәл әйтергә ҡыймайһың, сөнки ваҡыты үтмәгән.

***

Кешенең уйын йөҙөнән дә белеп була, тиҙәр – хаҡ һүҙ.
Бәғзенең уйын теленән дә белеп булмай, сөнки... алдаҡ һүҙ.

***

Һүҙҙең бик уйлап һөйләгәне яҡшы. Уйламай һөйләгәне шаҡшы.

***

Уйламай һөйләп үҙеңә дошман йыйырһың.
Уйлап һөйләп дошманыңды ҡыйырһың.

***

Киләле-китәле уйлағанды һөйләһәң, нәфселе хистәрҙе телгә әйләндерһәң, үҙ-ара аралашыуҙың йәме-тәме ҡалмаҫ ине.

***

Тәмле һүҙ әҙәмде терелтә, тәмһеҙе – илертә.

***

Бер мәл баш миңрәүе менән сирләгән һылыу ҡыҙ:

– Мин һеҙҙең әле минең хаҡта ни уйлағанығыҙҙы белеп торам, мейегеҙҙән уҡып торам, тимәһенме.

– Үҙем дә белмәйем, ни уйлайым икән, әйтеп бирегеҙсе? – тим, аптырап. Әммә ауырыу һылыуҡай әйтергә баҙнат итмәне – күрәһең, нәфсегә һуҡтырғандыр.

## Ваҡыт

Ваҡыт мине генә түгел, тирә-йүнде лә ҡартайта –
Йән ҡартая, йәнһеҙ нәмәләр иҫкерә, ҡыйрала.
Ваҡыт йәшәртә лә: алмашҡанда миҙгелдәр йәшәрә, ололарҙан йәштәр тыуа.
Ваҡыт – мәңгелек ағым ул.

***

Ваҡыт – иң оло бүләк.

Ғүмер – иң ҡәҙерлеһе.

Байлығын ҡәҙерләп, ғүмерҙең ҡәҙерен белгән мәғәнәле йәшәү һәм эшләү һәр шәхестең бурысы.

Һәр көнөң эш-шөғөл менән тулы ваҡытың тығыҙ кеүек.

Ә шундай көндәрҙе иҫкә төшөрөргә тырышһаң, хәтерҙә ҡалған йүнле бер ние юҡ тиерлек.

Тимәк, хатта шундай көндәрең, хәтирәһеҙ, йә үҙ хәтерең ҡыҫҡа.

Үткән көндәрең баҡыр, бөгөнгөһө – алтын, киләһе – алмаздыр.

***

Ваҡыт – аҡса, – быны Америка президенты Франклин әйткән.

Хәҙерге американдар һаман шул девиз менән йәшәй бирә.

***

Ваҡыттың әлегеһе, урындың хәҙергеһе шәп.
Ваҡыт – иң оло бүләк.
Ғүмер – иң ҡәҙерлеһе.

***

Ваҡыт – мираж, һағым кеүегерәк ул:
Ымһындырып, ашыҡтырып атлата ла атлата.
Ваҡыт – рәшә кеүегерәк ул:
Күңелле сәғәттәрендә бәүелтеп, үткәне беленмәй.
Ауыр саҡтарҙа, таш тейәгән йөк кеүек, аҡрын бара.
Үткәндәргә йыш әйләнеп ҡараһаң, абыныуың бар.
Өмөт менән алға ҡарап барыуҙарға ни етә.

***

Уңыштарҙан уңышҡа өлгәшә барған кешене
Уңыш боҙмай, уның рухын, һиммәтен арттыра ғына бара.

***

Үҙеңә үҙең ҡаты булмаһаң, башҡалар һиңә ҡаты булырҙар.

***

Үҙ-үҙеңде хөрмәт итә белмәһәң, башҡалар ҙа һине хөрмәт итмәҫ.

***

Оло вәғәҙәләр биреп тә уны үтәмәүҙән һис ниндәй вәғәҙә бирмәйенсә кәрәкле эштәрҙе башҡарыу, кешелек вазифаңды үтәү – мең артыҡ.

***

Шундай итеп эшләргә һәм йәшәргә кәрәк ине ул, юҡ-барҙарға, ҡайғы-хәсрәттәргә ваҡытың ҡалмаһын ине.

Әжәлең килгәндә лә уны ни менәндер албырғат ине – иҫе китеп торһасы.

***

Әҙ менән иҫәпләшмәү күпте бөтөрә.

Күпте өмөт итеү әҙҙән дә мәхрүм ҡалдыра. Таштан тау яһала.

Шишмәнән йылға ярала.

Йылғалар даръяларҙы йәйрәтә.

Кескәйҙән бөйөклөк башлана.

***

Донъя һине интектерә – тилмертә лә.

Тик ебеп төшә күрмә, кешем.

***

Донъя булғас ҡабаланған, хафаланған саҡтарың да күп булыр.

Хата – һабаҡ, хафанан да һабаҡ таба бел.

***

Ғүмер – ул шәп йәшәлгән, хәтирәле, ҡыҙыҡлы яҡтары менән үңер, ә ҡалғаны, онотолғаны – көл-күмер.

***

Һәр кемдең ғүмере үҙенә ғәзиз. Бөйөк шәхестәр ғүмере тураһында түгел, әҙәм күберәк үҙ ғүмере хаҡында уйлана һәм борсола.

## Кеше

Һәр кеше – үҙе бер серле донъя. Уны асып һәм асыҡлап бөтөү мөмкин түгел. Асылып бөтһә, бәлки, ҡыҙығы ла ҡалмаҫ ине.

***

Кешемен тигән кеше ғүмер буйына алға, юғарыға ынтылған. Хыял иткән, күктәргә ашҡан. Күҙ күремен һәм күңел офоҡтарын киңәйтергә, донъяны киңерәк иңләргә тырышҡан. Мәңге тырыша.

Шундайҙарҙың күңелдәре лә киң, рухтары ла бейек һәм бөйөк.

***

Кеше бейеклектән түгел, түбәндән, түбәнлектән ҡурҡа. Түбән йәндәрҙе күрәлмауы ла уның шунан.

***

Күп ҡатлы йорттарҙа берәүҙең түшәме икенсеһе өсөн иҙән икән, рухи донъяла ла берәүҙең күңел түшәме бәғзе берәү өсөн иҙән булыуы ихтимал. Рухи бейеклектәр ҙә төрлө кимәлдә шул.

Әҙер ҡараштҡа ҡарағанда үҙ аҡылың менән килгән ҡараш ҡәҙерле. Был зиһен-аҡыл киңәйеүенең бер билдәһе ул.

Төптән бәреп, һуғарып торор үҙ шишмәләре булғанда ғына йылға мул һыулы.

***

Әҙәмгә ҙурлағанды күтәрерлек, хурлағанды үткәрерлек аҡыл, сабырлыҡ та бик кәрәк.

***

Йәнеңде тапатыуҙан, выжданыңды таплатыуҙан һаҡлан, кешем.

***

Кеше хәтерен һаҡлау, хәтерле булыу бер бурыс.

Халыҡ хәтерен һаҡлар һәм ҡәҙерләр кимәлгә етеү оло бурыс.

Ошо оло бурысты башҡарыусыларға олораҡ өлөштәр тейә.

Кеше ғүмер буйы алға, юғарыға ынтыла.

Урманда гел ергә бағып бәшмәк эҙләгән кеше урман матурлығын йүнләп күрмәй. Уның иғтибары бары – бәшмәктә.

Тормошта мал, донъя артынан ҡыуған кешенең дә донъя матурлығын күрергә, һоҡланып йәшәргә бигүк форсаты булмай.

Форсаты етә, форсаты ҡалмай.

***

Кешегә айҙар, йылдар ғына ғүмер үтеүен һиҙҙереп, хәтеренә төшөрөп тора. Унда ла ул әле яңы ай, яңы йыл тип үҙен йыуата, гел яңылыҡ, яңырыу көтөп йыуана.

Кеше киләсәк тип йәшәй шул күберәк, ә киләсәк артында ни торғанын бик уйламай.

***

Сабый тыуғас, ғүмерен көнләп, айлап һанайбыҙ. Аҙаҡ йылдарға күсәбеҙ.

Ҡартайғас, ололар йәшен тиҫтәләр менән генә хисаплай: етмеште, һигеҙенсе тиҫтәне ҡыуам йә туҡһанды ваҡлайым, ти.

Һәр ғүмер миҙгеленең үҙ ҡәҙере һәм иҫәбе бар.

***

Ғүмерҙәр кисә-кисә әҙәм физик һәм мораль яҡтан да яйлап иҫкерә.

Шунда ғына уға әжәл тураһында иҫ керә.

***

Ер шарында йыл һайын етмеш миллион самаһы кеше ишәйә икән. Кеше һаны артҡан һайын, нишләптер, кешегә һан артмай.

***

Кеше үҙ ғүмеренең тәүге өлөшөндә йәмғиәттән күпте бурысҡа ала, икенсе яртыһында шуны ҡайтара.

Донъялыҡта бурыстарын түләп бөтөргәндәр бар, икеләтә-өсләтә арттырып ҡайтарғандар, шулай уҡ бурыслы булып киткәндәр ҙә бар. Бурыслы булып, йән тыныслығы тапмай, донъянан китмәҫкә ине.

***

Йәш сағында бала була белмәгән олоғайғас аға була белмәҫ.

***

Был донъяға кеше икһеҙ-сикһеҙ мәңгелектән ни бары ете-һигеҙ тиҫтә йыл йәшәр өсөн килә. Әҙәм ғүмере – даръяның бер тамсыһы. Әммә шунда ла ул мәңге йәшәрҙәй булып ҡылана йә тамсы ғына ғүмеркәйен дә заяға һибә.

***

Ваҡ-төйәк менән тулған көндәрҙә олораҡ, эрерәк нәмәләргә урын ҡалмай.

***

Күңел күтәренке саҡтарҙа кескәй шатлыҡтар ҙа оло һөйөнөскә әйләнә, ҡайғы-хәсрәттәр ҙә еңелерәк үтә.

Күңел төшөнкө саҡта юҡ ҡына ҡайғылар ҙа оло булып күренә, шатлыҡтар ҙа әллә ни ҡыуанып ҡабул ителмәй.

Күңелдәрҙе күтәреү өсөн ниндәйҙер наҙ, йылылыҡ кәрәк. Төшөрөр өсөн бер кескәй дорфалыҡ та етә.

***

Оло кешенең бер һиммәте үҙенең инде кем икәнен аңлауҙа, дәрт менән дарманды самалай белеүҙә.

***

Бәхетте күп саҡ әллә ҡайҙан эҙләйбеҙ. Ә уның эргәлә генә, үҙендә үк булыуын абайлап та бирмәйбеҙ.

Һау-сәләмәтлегеңдән ирәйеп иркенләп эшләп йөрөүҙәрең, йәшәү йәмен күреп кинәнеүҙәрең, үҙең, эшең менән бүтәндәрҙе кинәндереүҙәрең үҙе бәхет.

Ныҡ беленеп, ялтырап тормаған бәхет ҡәҙерлерәк һәм күпкә ғүмерлерәк тә ул.

***

Эш кешене һөймәлекле һәм көслө итешә.

Уй-аҡыл уны һиммәтле һәм мәртәбәле итешә.

Донъяның, нәмәләрҙең айышына төшөнөргә тырышҡандарын ғилем эйәһе һәм философ итешә.

***

Донъяға, йәшәйешкә төбәлеп баҡҡанға донъя үҙе лә төбәлеп ҡарар. Шулай үҙ-ара тығыҙ бәйләныш, аңланыш барлыҡҡа килер.

***

Философтарҙы тормош, заман үҙе тыуҙыра. Нәмәләрҙе, шарттарҙы тәртипкә һалған, тормошто аҡыллы ойоштораған кеше заты аң үҫешен дә билдәле бер тәртипкә, системаға һала.

***

Кеше, философ йәшәйеш, йыһан тәртибен тәрәнерәк аңлай барған һайын, уның рухи донъяһы байыраҡ, рухы бөйөгөрәк була барыр.

Боронғо аҡыл эйәһе Сенека кеше иң юғары ынтылыштар өсөн тыуған, тип юҡҡа әйтмәгәндер.

***

Көс әҙәмгә ҡеүәт өҫтәй.
Дәрт әҙәмгә дарман өҫтәй,
Аҡыл әҙәмде бөйөк итешә.
Әҙәмдең әҙәмлеге ошоларға ҡарап баһалана.

***

Матди фәҡиргә ярҙам итеп була,
рухи фәҡиргә ярҙамдың әллә ни файҙаһы юҡ.

***

Йәшәй-йәшәй, эшләй-эшләй үҙ-ара бағланыштың бер ирмәк яғын асам:
Мин белмәгән кешеләр мине танып беләләр –
Быны мин белмәйем.
Мин белгән кешеләрҙең бәғзеләре мине танымаҫҡа тырыша – быныһын үҙем беләм.
Бәғзе саҡта мин үҙемде-үҙем белмәй башлайым.
Кешеләр ҙә минең хаҡта барыһын белеп бөтһә, минең үҙем өсөн дә ҡыҙығым ҡалмаҫ инелер.
Кешелекте, йәшәйеште белеү ҙә шулайҙыр ул.

***

Кеше эше менән бөйөк. Бөйөк тә бары кеше.

***

Донъяла кеше тигән исем – ҙур исем.
Максим Горький уны ҙур хәреф менән яҙырға кәрәк, тигән.

***

Һөнәрле, белемле булыуҙарҙан кеше булыуы ауырыраҡ. Кешелек вазифаһы – иң ысын вазифа.

***

Маҡтаулы кешенең маҡтап әйткәне генә йөрәккә бал да май.
Ялтыр һүҙле ялған маҡтауҙан да яманы юҡ.
Ул кешене юҡҡа маһайтып боҙоуы бар.

***

Үҙе кәм кеше бүтәндәрҙән кәмселек эҙләр.
Үҙ кәмселеген йәшереп, үҙен бүтәндәрҙән өҫтөн итергә булашыр.
Ундайҙарға аҡыл биреү хәүефле.

***

Бөйөк шәхестәр бар. Улар – халыҡтың иң дан ул-ҡыҙҙары, милләт йөҙө. Ҙур таланттар бар. Улар иһә халыҡтың иң һәләтле ул-ҡыҙҙары, милләт күрке.

***

Ҡара халыҡ – ҡара һарыҡ, тигән һүҙ ҙә бар халыҡта.
Ҡараһы түгел, ағы, аҡ йөҙлөһө бөйөк итешә халыҡты.

***

Һөнәр эйәһендә һөнәр оҫталығы менән кешелек һәләте ҡушылғаны күберәк маҡтала.

***

Кешене һөнәре биҙәй, намыҫы матурлай.

***

Донъяла кешенең күп нәмәгә хаҡлы булыуынан уның донъяла хаҡлы йәшәүе мөһимерәк.

***

Беҙ йыш ҡына донъяға, кешеләргә һуҡранырға әүәҫбеҙ. Сәбәбе үҙебеҙҙә, үҙебеҙгә һуҡранырға кәрәк икәнен иҫләмәйбеҙ.

***

Кешене кеше һәләк иткәнгә ҡарағанда кеше үҙен-үҙе һәләкәткә алып барыуы, үҙ ғүмерен ҡыҫҡартыуы күберәк.

***

Ни генә тимә, кеше барыбер ике сферала йәшәй, береһе – кешеләргә һөйләр, теле менән әйтер уй-тойғолары сфераһы.

Икенсеһе – үҙе генә белер, эске уй-тойғоһо ғына аңлатыр һәм йәшәтергә тырыштырыр эске күңел сфераһы. Кеше күберәк ошо икеһе менән дә әүәрә килеп йәшәй.

Кеше, ғәҙәттә, иреккә ирегә.

Бик киң ирек-иркенлектәр килгәндә баҙап та ҡала...

Ирек иркенә инеү ҙә еңел түгелдер ул.

***

Әхлаҡи ҡанундар кешенең инстинктын да бигүк сикләп бармағаны хәйерлерәктер. Ҡанун ҡоршауға әйләнмәһен.

***

Кешене етмеш биш процент, йәғни дүрттән өс өлөш ғүмерен хыял-фантазияға әүрәп йәшәй, тиҙәр. Унын дүрттән бер өлөш ғүмере генә эшкә, ысын хәстәрҙәргә ҡалған була түгелме һуң. Шуны һис юғы нисбәтен яртыға ярты итергә тырышыу зарур.

***

Кешенең тел оҫталығына ҡарағанда ҡул оҫталығы баһалыраҡ.

Оҫта ҡулдар тота донъяны. Оҫта телдәр йәмләй күңелде.

***

Кеше күпмелер күктәге айға оҡшай ул. Айҙың яҡты йөҙөн күрәбеҙ, ә мәңге туң, һалҡын, өшөткөс артҡы яғын күрмәйбеҙ..

Кешемен тигән кеше лә үҙенең кире, туң яҡтарын һис күрһәтеп бармаҫ, әгәр ул һармаҡ булмаһа.

***

Кешенең иң башта яҡшы яҡтарын күрергә тырыш. Хатта иҫәр кешенең дә яҡшы ҡылыҡтарын эҙләү хәйерле.

***

Кешенең үҙенән бигерәк һүҙенә ҡарап таныйҙар. Ҡылығына, эшенә ҡарап баһалайҙар.

***

Аҡһаҡалды аҡ һаҡалына ҡарап түгел, шулай уҡ теленә, яғымлы һүҙҙәренә ҡарап таныйҙар.

Зиһененде байытыр, рухыңды нығытыр һүҙҙәре, кәңәштәре менән ололайҙар.

***

Күп һөйләгән кешелә фәтеүә юҡ.
Күп ҡыланған кешелә мәғәнә юҡ.

***

Һәйбәт кешенең яңылыштары ла үҙенсә.
Ул уға ҡыҙыҡһыныуҙы ғына арттыра.
Яҡшы кешенең йомшаҡлыҡтары ла үҙенсә һәйбәт.
Ул уның яҡшы яҡтарын тағы сағыуыраҡ аса.

***

Ҡояш булғанда кешенең күләгәһе үҙенән ҡалмай.
Яман кешенең яманаты артынан ҡалмай.

## Матурлыҡ

Аҡыл беленә, матурлыҡ күренә.
Матурлыҡ кешене биҙәй.
Аҡыллыҡ – күркәмләй.

***

Сибәр ҡатын ирҙәрҙе һоҡландыра, ә ирен һағайта.

***

Сибәрҙән йөҙ ояла, күҙ сағыла.
Үтә сибәрҙәр бәхетле булмаҫ.
Матурлыҡ йөҙ өсөн, уңғанлыҡ көн өсөн.

Йышылған матурҙа һиммәт булмаҫ,
Шуға ҡиммәт тә тормаҫ.
Матурлыҡты һатып алып булмай,
Матурҙы һатып алып була.

***

Ҡатын-ҡыҙ матурлығы ир-егеткә бәхет тә, хәстәр ҙә, тик хәсрәткә генә әйләнә күрмәһен.

***

Һалҡын матурҙан ҡайнар йәр күркәм.

***

Сәскәнән сәскәгә осҡан, сәскәләр ҡосҡан күбәләк матур.
Матур ҡыҙға ғашиҡ бул, әммә аҡыллыны ал.

***

Урта матур ҡыҙ ҡатын булғас һылыуылана.

***

Ҡыҙҙар, матурмын, тип маһая,
Егеттәр шуға буй һона.
Аҙаҡтан тамам бойһона.

## Шәхес

– Кем ул шәхес?

– Тамғалы кеше. Аҡыл эйәһе. Өлгөлө зат...

Шәхес булыр өсөн бик күп һәйбәт сифаттар, һыҙаттар кәрәктер.

Ауыл ерендә ябай халыҡ ололаған, хөрмәт иткән кеше үҙ даирәһендә шәхес дәрәжәһендә.

Исеме, эштәре, һәйбәт сифаттары тыуған районы күләмендә танылһа, уның географик киңлектәргә сығыуын һөйләй торғандыр.

Интеллигенция араһынан интеллекты, юғары мәҙәниәте, өлгөлө хеҙмәттәре менән танылған уҡымышлыларҙы милләттең данлыҡлы, арҙаҡлы шәхестәре тип һанарға кәрәк.

## Идеал

Кеше ниндәйҙер идеялар, уй-хыялдар менән генә түгел, юғары идеалдар менән дә йәшәргә тейеш.

Идеал кешенең рухын күтәрә, донъяға ҡарашын киңәйтә. Идеал – изге уй-хыял.

***

Философ – хикмәтле уй-фекер эйәһе.

Философ – йәшәйештең, ысынбарлыҡтың айышын аңларға һәм аңлатырға ынтылған шәхес.

Философ булып тыумайҙар, тормош, тәжрибәләр философ итә кешене. Миңә ҡалһа, бер ҡарамаҡта донъяла кешеләрҙе ике типҡа бүлеп тә ҡарайым: бер тип кешеләр – үҙҙәрен тышҡы яҡтан ыҫпай, матур тоторға тырышыуы, тышҡы ыҡтыматлығы менән айырыла.

Икенсе тип кешеләр – үҙҙәренең эске матурлығы, күңел күрке менән һоҡландыра.

Әгәр ошо сифаттар бер кешелә тиң бергәләшһәләр, ул инде шәхес, өлгөлө кеше.

***

Ғүмер үтә-үтә, аҡыл йыя-йыя кешеләр аҡыллыраҡ була бара.

Әммә ҡай берҙәренән балалыҡ аҡылы барыбер сығып бөтмәй. Ундай аҡыллылыҡ тәбиғиерәк һәм самимираҡтыр, бәлкем.

Бала саҡта уйнайһың, йәшлектә йәшнәйһең, ҡартлыҡта уйлайһың – тимәк, үҙеңсә йәшәйһең. Тик тормошта уйнап, ҡыҫыр йәшнәп, еңелсә уйлап, еңел-елпе генә йәшәй күрмә, кешем.

***

Донъяла ысын кеше булып йәшәүҙәре еңел түгел. Донъяла әҙәплеккә өйрәнеүҙәре лә анһат түгел. Намыҫты һаҡлауҙары ла еңел бирелмәй. Шуға ла ул сифаттар ҡәҙерле.

Шунда ғына кеше ҡәҙерле, шәхес баһалы.

***

Кешеләр закон ҡаршыһында ғына тиң. Быңдай кешеләр донъяла тиң түгел. Шуға Хоҙай бирмәгәнгә, тиң түгеллеккә үпкәләргә ярамаҫ. Үҙеңде ярағанынса яратып, хәлеңә күрә тырышып, барына, тейеренә ҡәнәғәт булып йәшәү ҙә кешесә.

Үҙ хәлеңде белмәй самаһыҙ көсәнһәң, биртенергә мөмкин.

Көнөңдө, йүнеңде үҙең күрә алаһың, көнләшергә мөмкин.

Көнләш, әммә көнсөлгә әүрелә күрмә. Үҙеңсә көрәш, күрәш була күрмә. Туймаҫ ҡылығың арҡаһында үҙеңде имгәтә күрмә.

***

Әҙәмдәр донъяға тигеҙ яратылған. Хоҙай ғына уларҙы тиң яратмаған.

Донъя һәр кемгә тигеҙ, тик холоҡ-ҡылыҡтары тигеҙ түгел. Бары ла тиң, тигеҙ булһа, донъя үҙе ожмах булыр ине. Әҙәмдәр донъяға әҙер-бәҙер килһәләр, эшшөғөл менән йәшәмәһәләр, йәшәү үҙе, тормош булмаҫ ине. Тормошто тормош иткән, йәшәүҙе ысын йәшәүгә әүрелдергән генә донъялыҡта ысын кеше.

***

Донъяла яҡшылыҡ һәм яманлыҡ төшөнсәләре ҡулай тормош эсендә тыуған. Яҡшы һәм яуыз заттар тормош эсендә яралған. Шуға Хоҙайға, тормошҡа бер кемдең дә үпкәләргә хаҡы юҡ.

Хаҡлыҡты, тәрбиәне башта үҙеңдән эҙлә, кешем.

***

Бала сағымды хәтерләйем. Бейек ағас башына менеп, мин тирә-яғымдың киңлеген, матурлығын шәйләнем.

Өй түбәһенә менеп, ауыл өйҙәренең кесерәйеп ҡалғанын күрҙем. Ауылым ҡалансаһы башынан тирә-йүндең киңлеген байҡаным.

Күп ҡатлы ҡала йорттары бейеклегенән донъяның киңлеген төшөнә барҙым.

Самолеттарҙа осҡанда Ер шарының ололоғон самаланым.

Китаптар, телескоптар аша күргән-белгәндәрем уй-йыһандарға ашырҙы.

Шулай уй-күремдәрем киңәйә, тәрәнәйә барҙы кеүек.

Уй-фекер киңлеге һәм тәрәнлеге хикмәте барыбер үҙеңдә, үҙ тәбиғәтеңдә икән – шуныһын да төшөндөм, ниһайәт.

***

Һәр кешелә мәғлүм дәрәжәлә илаһилыҡ йәшәй. Хоҙай һалған илаһи орлоҡ кеүек.

Уны һиҙемләү, төшөнөү, үҫтерә алыу фәҡәт һәр кемдең үҙенән.

***

Алла тойғоһо, илаһи уй-тойғолар идеалға ынтылыш, йәшәйештең мәғәнәһен аңларға тырышыу ҙа ул.

***

Үҙем бар уй-хыялым менән донъяны, кешелекте төшөнөргә тырыштым. Әммә шуның асылының бөртөгөн булһа ла төшөнөп-инанып бөттөммө икән?

Ә инде донъя-донъя тиһәм дә үҙ-үҙемде төшөнөп, үҙ-үҙемде ҡулға алып камиллыҡҡа өлгәшә алмауыма аптырап ҡалам. Былар ҙа донъя, кеше тигән серҙең бер хикмәтле яғылыр, моғайын.

***

Донъя төшөнсәһенең бер сикһеҙлеге һәм хикмәте донъяның, йыһандың үҙ сикһеҙлеген дә аңлатыр ул. Сикһеҙҙе кем белеп-тойоп бөткән. Сикһеҙҙе сикләү мөмкин түгел.

***

Мин үҙемдә тыуған төплөрәк уй-фекерҙәремде аҡыл эйәләренең фекерҙәре менән сағыштырып ҡарағыланым. Тап килеүҙәренә ҡыуандым, туры килмәгәндәренә лә шатландым.

Әҙәм барыбер, хатта бөйөк аҡылдар ҙа, бер йүнәлештә фекерләй икән, уртаҡ һорауҙар тирәһендә баш вата.

Шуларға тамсы ғына үҙ фекереңде ҡуша алһаң да ҙур ваҡиға.

Әҙәм балаһы – ғалим, философ донъя, ысынбарлыҡ, йәшәйеш мәләләрендә бер үҙе яңы уй-фекер донъяһын аса алмайҙыр хәҙер. Ә бәлки...

Аҡыл кешене аҡылһыҙлыҡтарға ла илтеүе ихтимал. Аҡыллылыҡ ҡына аҡылды йүгәнләп тота.

***

Аҡыл һатыу әле аҡыллылыҡ түгел. Мәгәр хәҙерге заманда аҡыл һатыла ла. Тейешле баһалана икән, тимәк, баһаһы бар. Баһа – һатыу-алыу үлсәме лә.

Хәҙер илебеҙҙән кеше аҡылы сит илдәргә китә, һатыла тибеҙ. Хәҡиҡәт шулай. Баһаһы, хаҡы булмаһа, аҡыл аҡылмы ни ул.

## Үлем

Бөйөк кешеләрҙең тормошо үлгәндән һуң башлана, тигән фекер йәшәй. Кеше хаҡында вафатынан һуң мәғлүм бер хәтер һәм йәдкәр ҡала алғанда ла бик хуш. Йәғни ул донъяға килеп, донъянан эҙһеҙ-ниһеҙ үтмәгән булыр ине. Әҙәм өсөн шул да күпмелер йыуаныс.

***

Михаил Булгаков “Ничего не просите у сильных мира сего, все будет вам предложено в свое время” тигән. Рус әҙибе, үҙе хаҡында булһа, әлбиттә, хаҡ әйткән. Уға оло даны вафатынан һуң ғына килә.

Д. Корнеги: “Әгәр үҙегеҙҙең тормоштағы тынғыһыҙлыҡтарҙан ҡотолорға теләһәгеҙ, һәр саҡ эш менән шөғөлләнегеҙ”, – ти.

Эш-шөғөл генә донъя тынғыһыҙлыҡтарынан, көндәлек мәшәҡәттәрҙән ҡотҡара аламы?

***

Фән еңел шөғөл түгел. Фән көслө аҡылдарға ғына ярашлы, тигән француз әҙибе М. Монтень.

***

Донъялыҡта әҙәмгә тыйыуҙар күп. Дин тыя, көн тыя, хужалар тыя...

Әҙәмгә гел генә тыйылып йәшәүҙәре бик ҡыйын шул.

Был йәһәттән урыҫтың бик йәтеш бер мәҡәле бар: “Если нельзя, но очень хочется, то можно”.

***

Бөгөнгөнөң бер сәғәте иртәгенең ике сәғәтенә торошло. Кисәгенең бер сәғәте инде бер нигә лә тормай кеүек. Уларҙың торошон эшләнгән эштәреңдең файҙаһына ҡарап ҡына үлсәргә мөмкин.

***

Бушҡа әрәм ителгән ваҡыт – тереклек өсөн генә, ә файҙалы үткән ваҡыт – йәшәү өсөн.

Тимәк, файҙалы үткән ваҡыт иҫәбе менән кеше ғүмере үлсәнә булыр.

***

Аҡыллы кеше үҙе ебәргән һәм бүтәндәр эшләгән хаталарға ҡарап та һабаҡ ала.

Хаталарың аҙ булһа, яҙмышың өсөн хафаларың да аҙ булыр.

***

Аҡыллы кеше һәр кемдең, һәр нәмәнең яҡшы яғына башта иғтибар итер. Шулай аҙ аҡыл ҡаҙнаһын сүп-сарҙар менән тултырыуҙан да һаҡлар.

***

Уҡыу кешене белемле итә, тыңлау кешене иғтибарлы итә. Яҙыу кешене эшлекле итешә – әйткән һүҙ оса, яҙған ҡала.

***

Файҙалы эш менән арып үткән көн һәйбәт йоҡлата. Файҙалы, емешле үткән ғүмер кешегә тыныс үлем дә килтерәлер. Мәңгелек йоҡо ла тыныс булһа ине.

***

Кеше ғүмере сағыштырмаса оҙон. Ул ғүмерҙә күп изге нәмә эшләп ҡалырға мөмкин. Уны һәлмәкләү ҡалғандар хөкөмөндә. Эштәреңдән ҡәнәғәт булып, донъяларҙан тыныс үтһәң ине. Киләсәк тә һине күпмелер баһалай белһә икән.

***

Иртән донъя ахыры етә тигән мәлдә лә мотлаҡ ағас ултыртып ҡал, ти Ҡөрьән. Киткәндә лә сәсеп кит, үлгәнсе ағас ултыртып кит, тип халыҡ юҡтан әйтмәй икән.

***

Кеше сирек ғүмерен йәшәргә әҙерләнеү – уҡыу, белем алыу менән үткәрә.

Сирек ғүмерен шуны тормошта һынап ҡарай.

Ҡалған сирек ғүмере үлемен көтөп үтә.

Шулай ғүмер үтә лә китә.

Үлем бер генә.

***

Аҡыллы аҙға ла ҡәнәғәт. Аҡылһыҙ күпте лә аҙһына. Улар араһында айырма шул ғына.

***

Яҙмыш һәм холоҡ исемдәре генә төрлөсә бирҙәй.

***

Аталар ағас ултырта, балалары шуның емешен татый,
Ейәндәр тамырына балта саба.

***

Аңлы ғүмерем – минең байлығым. Эшләгән эшем – файҙалы шөғөлөм. Файҙалы шөғөлөм – йәшәү ҡәнәғәтем.

***

Кешенең ярты ғүмере – аҡылға ултырыу миҙгеле. Кешенең ҡалған ғүмере – шул аҡыл емешен тиреү миҙгеле.

Йыйған аҡылың үҙе емеш биреп, донъялыҡта ҡалырға яҙһын.

***

Тормош – ул көнкүреш, байрам, күңел асыш ҡына түгел.
Тормош – ул ауыр вазифа, тир түгеп көнитмеш.

***

Ҡанун тыймағанды ҡай саҡ күңел тыя.
Ҡанун ҡушмағанды ҡай саҡ шул уҡ күңел ҡуша.
Төньяҡ еле викингтарҙы барлыҡҡа килтергән, ти скандинавтар мәҡәле.
Хеҙмәт кешене барлыҡҡа килтергән, ти Дарвин.
Урал тәбиғәте башҡортто бай күңелле иткәндер, тим мин.

***

“Урал” йыры – башҡортоң гимны. Урал батыр – башҡорттоң уй-хыялы, илаһи һыны.
Урал тәбиғәте – башҡорттоң күңел көҙгөһө.
Уралтау байлығы – башҡорттоң кәсеп, һөнәрҙәр сығышы.

***

Фәнни асыштар кешелеккә ҡыуаныстар ғына түгел, асынproblemштар ҙа килтерә.
Бер файҙаһының икенсе зарарлы яғы беленә.
Белем ғилем генә килтермәй – ғәм, һағыш, ҡайғы ла өҫтәй әҙәм башына. Үҙеңде хөрмәт итһендәр өсөн бүтәндәрҙе хөрмәт итә белергә лә кәрәк. Хөрмәтлеләр ҡаршыһында ғына хөрмәтле булыуың мөмкин.
Хөрмәт – хеҙмәттән, баһаһы – кешеләрҙән.

***

Ыҙаланыу – тормошта башҡарған файҙалы эшең – көсөң, аҡылың, яратыуың өсөн түләмдер, ти Рабиндранат Тагор.
Эйе, минең дә фәндә, ижадта күпмелер башҡарған эшем тырыш хеҙмәт, ижади ыҙа-яфалар менән тыуғандыр.
Былар минең өсөн теләп алған һәм ҡәнәғәтлек килтергән ыҙалар булды.
Әммә мәғлүм уңыштарым ҡай саҡ үҙемә көнсөлдәр тарафынан көнләшеү, хөсөтлөк ҡылыу, танымаҫҡа тырышыу, төрлө һүҙ, ғәйбәт ишетеү ыҙалары булып та ҡайтҡыланы.
Былары йөрәкте нахаҡҡа яфалар ыҙалар ине.
Төрлө әҙәмдәр араһында йәшәгәс һәм эшләгәс, уларһыҙ ҙа булмайҙыр инде.

***

Ҡылыҡ сәсһәң, ғәҙәт урырһың, ғәҙәт йыйһаң, характер табырһың, характер тапһаң, яҙмышың беленер.
Яҙмышыңа яҙғанынан уҙып булмай, тиһәләр ҙә, төптән уйлаһаң, ҡылығыбыҙ, ғәҙәтебеҙ, холҡобоҙ, ҡараштарыбыҙ менән яҙмышыбыҙҙы үҙебеҙ табабыҙ ҙа үҙебеҙ яҙа башлайбыҙ икән.

***

Маҡсатың асыҡ булғанда, эшең ырамлы, йәшәүең күңелле. Был үҙе бәхет.

***

Уртаса уҡытыусы бары һөйләй, яҡшы уҡытыусы аңлата.
Шәп уҡытыусы аңына һеңдерә, дан уҡытыусы ҡанатландыра.

***

Кешеләр ашҡаҙандарын нисек боҙған кеүек, үҙ күңелдәрен, бәғерҙәрен, аҡыл һәм намыҫтарын да шунса боҙалар.
Боҙолғандарын күптәре аҙаҡтан төшөнә, ләкин һуң була.

***

Ғүмер һәр кемгә лә ҡәҙерле, әммә әҙәпле кешегә намыҫ ғүмерҙән дә ҡәҙерлерәк.

***

Выждан менән намыҫ бер туған. Намыҫ – ул выждандың тышҡы сағылышы. Выждан иһә намыҫтың эске яҡтылығы, айышы.

***

Тоғролоҡто һаҡлау һиммәтлек. Намыҫты һаҡлау – ғүмерлек.

***

Яҙмыш – ул үҙеңә яҙған ғүмерҙең асыла барған һәм әле асылып бөтмәгән бер күренеше.
Үҙ яҙмышы юҫығын алдан тойған кеше генә уны үҙ ҡулына аласаҡ, уны аңламаған яҙмыш ҡоло булып ҡаласаҡ.

***

Иң яҡшыларҙың яҡшыһы – һәйбәт тәрбиә алыу, һәйбәт мөхиткә тура килеү. Был да яҙмыш, бәхетле яҙмыш.

***

Яҡшы йәшәгән ғүмер, бәхетле ҡартлыҡ – баһаһыҙ ҡаҙаныш. Изге баһаһы булһа, быға тиң аҙ.

***

Матур ғүмер һөрөү иң юғары маҡсаттарҙан да олораҡ. Маҡсат – йә үтәлер, йә үтәлмәҫ. Киләсәк ғүмер – үтәр һәм үтәләсәк йомғаҡ.
Мәңге онотолоу – икенсе тапҡыр үлем. Бай натуралы шәхестәр беренсеһенә ҡарағанда икенсеһенән ҡурҡа.

***

Ғүмер ул – утта янып һүнгән күмер. Әгәр шул күмер сатҡы саҡҡанда яңынан терелһә, бушҡа үтмәгән ғүмер.

***

Ваҡытында ғүмерҙең ҡәҙерен белгән һәм ҡәҙерләп файҙаланған кешенән дә аҡыллыһы юҡ. Аҡыл бизмәне ғүмерҙең баһаһы менән үлсәнә.

***

Берәү аҡыл менән йәшәй, берәү – таһыл менән...
Бәғзе – хәйлә менән, бәғзе мутлыҡ менән.
Тимәк, йәшәү менән йәшәүҙең дә айырмалары ҙур.

***

Матур үткәнгә йыш әйләнеп ҡарала. Үҙенсә баһалана.
Ул һиңә сәм һәм дәрт бирһә, шул шәп. Тик үткәнгә ҡыҙығып һәм оҙаҡ ҡыҙынып ултыра ғына күрмә.

***

Ҡартайтты тип, күп ҡайғырып, күптәр үҙен тиҙ ҡартайта. Ҡартлығыңа бирешмәй, эш-шөғөл менән мәшғүл булып йәшәүҙәргә ни етә!

***

Теләгән һәр саҡ булдыра, теләмәгән йөҙ сәбәп таба.

***

Әҙҙән ҡәнәғәт булмаған булыр олонан да ҡолаҡ ҡағыр.
Әҙҙән дә ҡыуанған ҙурҙы ла ҙурыраҡ баһалай белер.

***

Күңелең ятмаған эшкә тотонма,
Күңел һалмаған әҙәмгә йоғонма.

***

Үҙен-үҙе тота алған донъяны ла тота алыр, тигән бер аҡыл эйәһе. Донъяларҙы тота алмағанда ла үҙ донъяңды, үҙ рухи донъяңды тотоп, шуның ҡәҙерен белеп йәшәһәң ине – был да ярайһы маҡсат. Кешеләрҙең шундай маҡсаттары донъяны тота, донъяны йәшәтә бит.

***

Йәшлек – аҡыл һәм тәжрибә туплау дәүере.
Ғүмер уртаһы – шуны ҡулланыу дәүере.
Ҡартлыҡ – ғүмер туртаһы.

***

Йәшлек – тормоштан алыу, ҡыҙығын табыу.
Ир-егетлек – алғаныңды ҡайтарыу, ҡыҙығының ҡыйынын да күреп аҡылланыу.
Ҡартлыҡ – нисек йәшәгәнеңдең ҡарыуын күреү, үкенеү, үтенеү.

***

Ғүмер йылдар оҙонлоғо менән түгел, башҡарған эштәреңдең йөкмәткеһе, һәлмәклеге һәм ҡәҙере менән нарыҡланыр.

***

Кеше үҙе өсөн һәм оҙағыраҡ йәшәүгә ҡарағанда әҙәм араһында әҙәмсә, күптәр араһында өлгөлө булып йәшәһә, йәмғиәткә күберәк хеҙмәт күрһәтһә, абруй ҡаҙанһа, йәмғиәт тормошо ла күпкә бай һәм матур, кеше үҙе лә күпкә һиммәтле булып китер ине.

***

Үҙ йәне генә аяулыға тарих вә хәтер аяуһыҙ булыр.

***

Үҙ-үҙен генә ҡайғыртҡанды бүтәндәр ҙә ҡайғыртмаҫ.
Үҙ-үҙем тигән үҙлегенә йомолоп юҡҡа сығар.

***

Үҙ тормошоңдо ҡороп, үҙ-үҙеңде раҫлау – икенсе баҫҡыс.
Дөйөм кешелек өсөн төп көсөңдө сарыф итеү, өлөш ҡуша алыу – юғарыраҡ баҫҡыс.

***

Ғүмер – бик етди ғәмәл. Ләкин ғүмерҙә гел етди генә итеп йәшәп булмайҙыр. Ул саҡта уның ҡыҙығы ла, мәғәнәһе лә ҡалмаҫ ине.

***

Ғүмер хәтәр нимә ул. Ул кешене бөлдөрә лә, үлтерә лә.

***

П. Я. Чаадаев: “Шәреҡте өйрәнегеҙ, ул кешелек традицияларының бөйөк музейы”, – тигән. Мин үҙемдең оҙон ғүмеремдә һәм ғилми юлымда шул бөйөк музейҙың бер-нисә залдарында ғына була алдым, шунда фәһем алған ғилемем дә бик күпкә яраны, күпте аңларға ярҙам итте.

***

Мин алтмыштарҙы үткәс, ҡартая барып, аҡыл һайығыуынан ҡурҡа торғайным. Хәҙер үҙ тәжрибәмдән әйтә алам: етмештәргәсә, унан үткәс тә аҡыл

һайыҡмай икән ул, бәлки, тосораҡ, һәлмәгерәк була баралыр әле, тик шуныһы йәл: хәтер наҡыҫлана, көс-ҡеүәт кәмей бара, сир-сырхау үҙен әленән-әле һиҙҙерә төҫлө. Шулары булмаһа, ҡартлыҡтан да шәбе булмаҫ ине ул. Ҡартлыҡта мөмкин тиклем күберәк биреп ҡалырға, һәр көн ҡәҙерен белергә, теге донъяға аҙыраҡ алып китергә тигән ниәттәр көсәйә генә.

***

Ижадта илһам менән алдырырға мөмкин, фәндә – фәҡәт аҡыл менән.

***

Ир кеше йорт һала. Ҡатын кеше шул йортто биҙәй, бала кеше шуны тултыра.

Йортоң нисек – көнөң, йүнең шулай.

***

Уңыштар дуҫтарыңды арттырмай, тик хөрмәт иткәндәрҙе һәм көнсөлдәрҙе күбәйтә.

Дуҫтарыңды һөйөндөрөп, көнсөлдәрҙе көйөндөрөп йәшәүҙәре лә бер күрк. Һәр кемгә яҡшы булыу еңел, һәр саҡ хәҡиҡәтте яҡлауы ауыр.

***

Сикле әҙәмдәр үҙҙәренән сиккә сыҡҡанды һәм аҡылдары етмәгәнде һәр саҡ ғәйепләргә әҙер тороусан. Ыңғай һүҙ, яҡшы фекер әйтә белмәгәс, нишләһендәр инде, меҫкендәр.

***

Үҙем кешеләр тураһында ҡулымдан килгәнсә хәстәрлек күрергә тырышам.

Әммә үҙем, ғаиләм хаҡында хәстәрләргә, тейешлеһен үтәренә ваҡытым да, баҙнатлығым да етмәй.

Шул арҡала ғаиләмдән дә тиргәләм.

Бәғзе берәүҙәрҙең юҡтан ғына хәтерҙәре ҡалып бара. Ә мин ваҡ-төйәк хәтер ҡалдырыусыларға, яманларға маташыусыларға яуап бирергә йә иҫемә алырға ла форсатым да, теләгем дә юҡ.

Яуап бирәм тип, ундайҙар түбәнлегенә төшә алмайым. Быны намыҫым күтәрмәй.

Ғәйбәт ишетһәм, ниндәйҙер бәндәләрҙең һалҡын ҡарашын тойһам, кемдәрҙеңдер йөрәген үртәрлек ялҡыным бар икән, тип һөйөнөп ҡуям.

***

Эш, йомош менән һүҙ ҡатҡан ҡайһы берәүҙәр, ваҡытым юҡ, тип яуап бирһәләр, быларҙың изге эшкә, файҙалы шөғөлгә ваҡыттары юҡ икән, тип эсемдән көйөнөп алам.

Ләкин шуны йөҙҙәренә бәреп әйтергә батырлығым етмәй. Йөҙ йыртыу булыр, тим.

Уңышҡа, шөһрәткә өлгәшкән кешеләрҙән көмселек эҙләгән, соҡсонған әҙәмдәр, ғәҙәттә, үҙҙәре уңышһыҙлыҡҡа тарыған йә булдыҡһыҙҙар рәтенән булыр.

Аҡыллылар аҡылһыҙҙар кимәленә төшә алмай. Булдыҡлылар булдыҡһыҙҙар ҡатарында булмай.

Бөркөттәр юғары оса, сысҡан тибер көйөлдөләр генә түбәндә соҡсона.

Мәләүез ҡалаһында тормошто шиғриәтһез күҙ алдына килтерә алмаған кешеләр бар. Әҙәби кисәләрҙә лә улар бик әүҙем ҡатнаша. "Ағиҙел" журналына яҙылыуҙа ла, уны таратыу-пропагандалауҙа ла улар тырышлыҡ күрһәтә. Шундай уҡыусыларыбыҙ булғанда, киләсәгебеҙ өмөтлө беҙҙең.

Был һанда, мөмкинлектән сығып, уларҙың бер нисә шиғырын тәҡдим итәбеҙ.

**Хәҙисә ЮДАЕВА**

## Мираҫ

*Балалары барыбыҙ ҙа Ер-Әсәнең,*
*Дауамы һәм киләсәге Ер-Атаның.*
*Планетабыҙ — оло бер йорт, уртаҡ мираҫ,*
*Планетабыҙ — Ер-Әсәнең йомарт йорто,*
*Әҙәмдәре — ошо ерҙең йәме, ҡото.*
*Шуҡ балалай, өй түрендә, ҡосағында*
*Кемдәр уйнай, дары һибеп усағыңда.*
*Ҙур йортобоҙ тыныс булһын, яҡты булһын,*
*Йәштәр үҫһен, атай менән әсәй булһын.*
*Киләсәккә ҡалһын беҙҙән оло мираҫ,*
*Ошонан да артыҡ бүләк, байлыҡ булмаҫ.*

## Миләш

*Төнө буйы һис туҡтамай ҡарҙар яуҙы,*
*Ҡуҙҙай миләш тәлгәшенә ал ҡар ятты.*
*Һаҡһыҙ әгәр ел ҡағылһа, ялҡын сығыр,*
*Миләш янып, һалҡын ҡышта юҡҡа сығыр.*
*Осоп килде ҡыҙылтүштәр һыйланырға,*
*Бик өшөгәс, ҡуҙ-миләштә йылынырға.*
*Ҡайнар миләш емешендә туйындылар,*
*Аҡ ҡарҙарға ҡуҙ-миләштәр ҡойолдолар.*
*Миләштәрҙән бар тәлгәштәр тирелеп бөттө,*
*Әйтерһең дә, ҡуҙ-тәлгәштәр терелеп осто.*
*Миләш инде ҡыш көнөндә усаҡ яҡмай,*
*Ә тәлгәшһеҙ миләштәргә ал ҡар ятмай.*

## *Сер*

*Был донъяла йәшәү — бер мәлме?*
*Матур бер төш, ҡыҫҡа бер өнмө?*
*Әжәл — мәңгелеккә ишекме?*
*Әллә упҡын, һалҡын бушлыҡмы?*
*О, Тәңрем, һинең серең ныҡтыр,*
*Уны сисер аҡыл, көс юҡтыр.*
*Бәндәләрең мәңге сисә алмаҫ,*
*Һиңә барһа, кире ҡайталмаҫ.*

**Хәлиҙә ШӘЙӘХМӘТОВА**

## *Хыял*

*Һине мин онотам, буғай —*
*Бушлыҡ беҙҙең аралар.*
*Һинең менән минең яҙмыш*
*Ик(е) үҙәндән ағалар.*
*Һәр йылғаның үҙ моңдары,*
*Үҙ ағышы, ярҙары.*
*Әммә, ниндәй булһалар ҙа,*
*Ярһып-таша яҙҙарын.*
*Хатта шишмә даръяға тиң,—*
*Диңгеҙ инде торғаны.*
*...Һине иҫемә төшөрҙөм —*
*Яҙға ҡайтып ураным.*

**Әлфиә САДИҠОВА**

## *Көҙгө моң*

*Тау итәгендәге ҡайындарҙың*
*Һәр береһе һылыу, төҙ ине.*
*Һин йәш егет, мин дә йәп-йәш ҡыҙый,*
*Илаһи мәл шундай... көҙ ине.*

*Етәкләшеп гиҙҙек сауҡалыҡты,*
*Күңелдәрҙә сабый сафлығы.*
*Икәүләшеп йөҙгән хыялдарҙа*
*Ап-аҡ туҙҙың һөттәй аҡлығы.*

*Аяҡ аҫтарында һары тәңкә*
*Ямғыр тамсыһынан сыланған.*
*Ишетелер-ишетелмәҫ моңдо*
*Бар тәбиғәт тыңлап тын ҡалған.*

*Ошо моңға ҡушылып һин йырланың*
*Тамашасың — мин дә ҡайындар.*
*Онотолмаҫ мәлдәр ғүмерлеккә*
*Бәхет булып иҫтә ҡалдылар.*

*Һәр көҙ килеп ошо сауҡалыҡҡа,*
*Ҡайындарҙы тағы күҙләйем.*
*Әллә һағынам мин сихри моңдо,*
*Әллә йәшлегемде эҙләйем.*

## Шиғыр тыуа

*Ваҡытынан алда тотҡан тулғаҡ ише,*
*Йөрәгемдә һығып-һығып шиғыр тыуа.*
*Уңалмаған яраларҙа тотош йөрәк,*
*Уның ҡанһырауын әсе йәшем йыуа.*

*Ситлектәге зарыҡҡан бер ҡошсоҡ кеүек,*
*Талпыныр та, талсығып та шиғыр тыуа.*
*Иреклектә, иркенлектә осҡо килә,*
*Тик ситлектең тимерҙәре тынды быуа.*

*Яңы ғына күҙен асҡан сәскә һымаҡ,*
*Саф хистәрҙән, шатлыҡтарҙан шиғыр тыуа.*
*Күңелемә иҫ китмәле наҙҙар тула,*
*Икеләнеү, борсолоуҙы шулар ҡыуа —*
*Булмышымда ана шулай шиғыр тыуа!*

**Нәйлә ӘЙҮПОВА**

## Бәхет өсөн ни кәрәк?

*Мин бәхетле, тиеп йәшәр өсөн,*
*Кеше өсөн ерҙә ни кәрәк?*
*Иң кәрәге кеше булып йәшәү,*
*Һөйгән кешең, һөйгән эш кәрәк.*

*Мин бәхетле, тиеп йәшәр өсөн*
*Йорттоң йәме — балалар кәрәк.*
*Балаларға кәрәк әсә наҙы,*
*Һынау тотор аталар кәрәк.*

*Мин бәхетле, тиеп йәшәр өсөн*
*Бер туғандар кәрәк, дуҫ кәрәк.*
*Ярһып типкән ҡайнар йөрәк кәрәк,*
*Һөйөп туймаҫ тыуған ил кәрәк.*

## Кәртә

*Кеше ғүмеркәйе кәртә-кәртә,*
*Юлдарына ҡуйыла бик иртә.*
*Бер кәртәне аша сығыуыңа*
*Алда яңы кәртәләр көтә.*

*Шыма ғына атлап сығам тиһәң,*
*Арттан килеп төртә кәртәләр.*
*Ашығып та эш сығарып булмай,*
*Алдан баҫып, баштан сиртәләр.*

*Бер генә лә ҡыҙыҡ булмаҫ ине,*
*Тормош барһа бер ҙә кәртәһеҙ,*
*Яҡшы ат та йөгөн тарта алмай,*
*Егелмәйсә генә, тәртәһеҙ.*

*Бер генә лә ҡыҙыҡ булмаҫ ине*
*Шыма ғына донъя көтөүе,*
*Ҡай сағында бик тә ярап ҡуя*
*Кәртәләрҙең бер аҙ төртөүе.*

*Донъя ҡуйғас, тупаҫ кәртәләрҙең*
*Булмай, тиҙәр, арты, алды ла.*
*Дүрт мөйөшлө зыярат кәртәләрен*
*Хоҙай ҡуя кеше алдына.*

## Шундай ҙа саҡтар була

*Баш эйҙерер булып, тормош*
*Ҡат-ҡат бирә һынауын,*
*Сабыр йән бит өмөт итә,*
*Бөгөлһә лә, һынмауын.*

*Биҙгән саҡта моңһоу күңел*
*Тормоштоң ҡараһынан,*
*Йырып сығырға көс таба*
*Һағыштар араһынан.*

*Шундай ҙа саҡ була: күңел*
*Һыу ташы булып ҡата,*
*Үҙ туғаның дошман була,*
*Башҡа ла һыймаҫ хатта.*

*Сыбыртҡылай ҡай саҡ тормош —*
*Түҙ генә ғәзиз йәнең,*
*Шартлап сәселерҙәй була*
*Тамырҙарыңда ҡаның.*

*Эй, Хоҙайым, бир ярҙамың*
*Йәшәргә һин ҡушҡанса.*
*Ни күрһәтһәң — үҙ ҡулыңда,*
*Йәшәп булмай башҡаса.*

*Бөйөк иткән тик һин генә,*
*Йөрәктә һөйөү һаҡла,*
*Изгелек һал күңелдәргә,*
*Иманһыҙлыктан пакла.*

# ҠАЛЫПЛАШМАҒАН АЛЫМДАР ҠУЛЛАНЫП

*(Баш һүҙ урынына)*

*Кешелек ысынбарлыҡты танып-белеүҙә ҡан замандарҙан фәнни һәм художестволы алымдар ҡуллана. Был төп ысулдарҙың бергә уҡмашып, синкретик форма алып китеүе лә йыш осрай. Ҡағиҙә рәүешендә, донъялыҡты өйрәнеү-тикшереүҙең башҡа юлдары (мәҫәлән, дини тәғлимәт) инҡар ителә йә иҫәпкә алынмай. Ә бит уйланырға урын бар. Генийҙарға тиклем (Циолковский, Эйнштейн, Бехтерев исемдәрен телгә алыу ҙа етә) дини раҫлауҙар менән фәнни асыштарҙың яраша алыуын кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәргә таянып иҫбат итә.*

*Ошо юҫыҡтан ҡарағанда, Рәшиҙә Ғиззәтуллинаның эҙләнеүҙәре, һис шикһеҙ, иғтибарға лайыҡ. Бер үк ваҡытта дипломлы фән әһелдәренең күпселеге уның күҙәтеүҙәренә етди ҡарамауы бик ихтимал, сөнки авторҙың тикшеренеү ысулы күнегелгән ҡалыптарға һыйып бөтмәй.*

*Асылда мифологияны (ҡарһүҙҙе) беҙ фән теле менән өйрәнеүгә лә саҡ тотоноп ҡына торабыҙ әле. Был йүнәлештә күп нәмә асыҡланыр, һәм беҙ, үҙебеҙ ҙә һиҙмәҫтән, яңылыҡ тигәнебеҙ онотоу-оноттороуға дусар ителгән, ысынында иһә әллә ҡасан – ҡан замандан уҡ билдәле күренеш икән дә, тип гәжәп итәсәкбеҙ, таң ҡаласаҡбыҙ...*

*Тәҡдим ителгән мәҡәләлә иһә автор мәшһүр "Урал батыр"ҙы ижад ителгән дәүере, шул осорҙоң аң кимәле күҙлегенән дә, йәшерен кодҡа һалынған синкретик әҫәр булараҡ та күҙалларға ынтыла.*

*Милләтте милләт итеүсе көстө автор рухи ныҡлыҡта күрә. Рухты нығытыу иһә үҙ-үҙең өҫтөндә ныҡышмалы эшләү менән туранан-тура бәйле. Эҙмә-эҙлелек тикшеренеүсене йога күренешен өйрәнеүгә алып килә. Билдәле булыуынса, йога тәғлимәтенә ярашлы, кеше йәне, донъяның алты ҡатындағы һынауҙарҙы үтеп, етенсеһенә олғашырға тейеш. "Урал батыр" эпосы йөкмәткеһенең тап ошо күҙлектән баһаланыуы ҡыҙыҡлы. Рәшиҙә Ғиззәтуллинаның башҡорттоң милли әхлаҡ-ҡағиҙәләренә бәйле фекерҙәрен дә урап үтеү ҡыйын.*

*Шулай итеп, Рәшиҙә Ғиззәтуллинаның мәҡәләһе үҙенсәлекле тикшереү алымы менән ылыҡтыра. Уйлы уҡыусы тота килеп кенә тәҡдим ителгән хеҙмәттә үткәрелгән фекерҙәрҙе бер һелтәнеүҙә кире ҡағырға ашыҡмаҫ. Сөнки, тулыһынса ҡабул итмәгән хәлдә лә, ныҡышмалы эҙләнеүҙәр һөҙөмтәһе булып тыуған һығымталарға битараф ҡалыу мөмкин түгел. Унан килеп, халҡына, уның тарихына сикһеҙ мөхәббәт, киләсәгенә бәйле оптимистик ҡараш менән һуғарылған бындай эштәрҙең йәш быуынды рухлы итеп тәрбиәләүҙә әһәмиәте баһалап бөтөргөһөҙ. Әлбиттә, оккультизм йүнәлешендә тикшеренеүҙәргә фән юлын үҙләштергәндән һуң килеү, бәлки, һөҙөмтәлерәктер. Шулай ҙа авторҙың үҙ фекерҙәрен нигеҙләй алыуы, телгә һиҙгерлеге, иң мөһиме – маҡсаттарының изге (халҡының рухи ҡеүәтен нығытыу) булыуы күңелде арбай.*

***Фәнил КҮЗБӘКОВ,***
***филология фәндәре докторы,***
***журналдың бүлек мөхәррире.***

# “Урал батыр” эпосында йога тәғлимәте

Будда тәғлимәтенә ярашлы, Йыһанда һәр яҡлап камил һәм тулы, күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын булған бөтөн[1] урын бар. Ул – Нирвана. Унан таралып, матдилашып (ауырайып), ергә тартылған, үҙенең тәүбулмышына тап килмәгән йән икенсел хәлендә ни тойоуы мөмкин?! Әлбиттә, тупаҫ материя тәүторошона хас бөйөклөктән алыҫлаша, йәғни Рух[2] күтәренкелеген юғалта. Сөнки ул фанилыҡ сифаттарына солғана, матдилашыу тәжрибәһенә һәм донъяуи белемдәргә генә эйә була бара.

Ләкин йәндең төпкөл аңы, “үҙ – үҙәге”[3] үҙенең саф сағын, нур саткыһы[4] мәлен аң баҙында һаҡлай. Шуға әҙәм балаһы, эске ғазаптар кисереп, һәр саҡ нимәлер эҙләй, ҡайҙалыр ынтыла. Был – үҙебеҙҙең тәүбулмыш хәлебеҙҙе юҡһыныу, шул тәүтормошобоҙҙо һағыныу. Күптәр быны сәбәбенә төшөнә алмауҙан, онотолоу теләгенән эскелеккә һалыша, донъянан ваз кисеү юлы күреп, наркотик ҡуллана башлай, йә булмаһа, башҡа алдаткыс шөғөлдәргә алмаштырырға маташып, яңылыш юл һайлай. Күңел донъяһының тышҡы ығы-зығынан бер аҙға ваз кисеп торғоһо килеү теләген беҙҙең ата-бабалар, тап йога өйрәткәнсә, аяҡтарҙы салып ултырып, ҡурай моңо тәьҫире аҫтында онотолоу (медитация) юлы аша үтәгән. Тап ошо ваҡытта беҙҙең төпкө аң-хәтер, Йыһан менән тоташып, уның ҡеүәтен тойоп, ләззәтләнә, тынысланыу таба. Юғиһә, һәр ваҡыт ireклек эҙләүсән, азатлыҡҡа ынтылыусан йән фани донъяның ҡуласаһы – Сансаранан



Три Канала

---

[1]Сағыштыр: башҡорт телендә бөтөн — 1. Күләме, дәүмәле кәмемәгән; теүәл. Кәм түгел; камил. 2. Туҙған, тишелгән, зарарланған ере юҡ; туҙмаған, төҙөк. 3. Мохтажлығы, кәмселеге юҡ; етеш. 4. Кәсергә бүленмәгән; теүәл. 5. Бөтә — бар булған; барлыҡ, һәммә. Санскрит телендә: bhuta —1. Минувший, прошедший; 2. Все сущее; 3. Благополучие; 4. Составной элемент мира (земля, вода, огонь, воздух, эфир). Ҡушма һүҙҙәрҙә: bhuta — ҡartar — прошедшее, минувшее время; bhuta-dharini — земля; bhu-tala — поверхность земли: “Бер талай ер" һүҙбәйләнешендә һаҡланған; bhuti — 1. Сила, мощь; 2. Успех, счастье; 3. Украшение."Бөтөн" — боронғораҡ формаһы “будун" — buddhi — ум, разум, взгляд, мнение, дух, душа, мудрость предположение о чем-л., размышление; Buddha — пробужденный, раскрывшийся, просветленный, умудренный, мудрый, ученый, мудрец; тот, кто обладает знанием истины, освобожден от мирского и постиг путь к Нирване. “В башкирском языке — бот — бод (будда) означает — неподвижный идол, что в целом соответствует учению буддизма о нирване как царстве Невозмутимости" (Галлямов С.А. Башкордская философия. Этика. Т.3. — Уфа: Китап, 2005. стр. 95).

[2]Руах /иудаизм/ — дыхание, дух Господа, пронизывающий творение. В христианстве глубокая связь между святым Духом, вносящим жизнь во все и дыханием. В буддизме дыхание /прана/ — колесница ума, т.к. прана обеспечивает движение нашего ума.

[3]Йогала һәм буддизма Атман — “Истинное эго".

[4]Санскритта Ҫаҡ — 1. Быть насыщенным; 2. Быть удовлетворенным; 3. Отгонять, отталкивать; 4. Сопротивляться. Башҡорт телендә саҡ һүҙе күсмә мәғәнәлә “рухи теүәллекте, бөтөнлөктө" белдергәндә ҡулланыла: мәҫ.: күңел саҡ ваҡыт. Ошоға өҫтәп эллин телендә лә София — аҡыл, аң эйәһе булыуын иҫкә алайыҡ; hat — сверкать.

ысҡына алмауҙан тонсоға, арый, юл таба алмай йөҙәй. Бәндәнең йән генәһе тәүбулмышына хас бөтөнлөк, камиллыҡ тойғоһо етмәүҙән ыҙалана, уны, шул теүәллектән айырылғанлыҡтан, бүленгәнлек, өҙөлгәнлек тойғоһо яфалай. Йәндең, Аңдың саф мәле – Йыһан, тәбиғәт менән ҡушылған, бергә бөтөн булған тәүтормош сағына кире ҡайтара алыу юлын Маһамудра[5] тип атайҙар.

Әҙәмдең аңын томаналыҡтан, наҙанлыҡтан арындырыусы Маһамудра – өс таяуға нигеҙләнгән ғилем:

1. Буддизм доктринаһының йәҙрә өлөшө булған Үлем тураһында фекер йөрөтөү;

2. “Сәбәп – һөҙөмтә” бәйләнешен раҫлаусы карма законын аңлатыу;

3. Кеше сифатында йәшәү – яҙмыштың иң ҡиммәтле бүләге икәнлеген танытыу.

“Урал батыр” эпосында “Үлем” һүҙе, 79 тапҡыр ҡабатланып, уның тәбиғәте, сифаттары бик ентекле итеп тасуирлана һәм әһәмиәте ҡат-ҡат һыҙыҡ өҫтөнә алына икән, был үлемһеҙ әҫәр – туранан-тура Маһамудраның сығанағы, тип әйтә алабыҙ.



Чакры

Маһамудрала был донъяның тороҡһоҙлоғо, ундағы ҡапма-ҡаршылыҡлы (дуаль булған) хәл-ваҡиғаларҙың сиратлап, алмашынып килеүе тураһындағы хәҡиҡәт Үлем төшөнсәһе менән бергә ҡарала. Был “сансара” – “донъя ҡуласаһы” – “ваҡыт тәгәрмәсе” эсендәге әүерелеш – реинкарнация тип атала. Әлеге хәлең башҡаларҙыҡынан яҡшыраҡ булыуы менән һауаланмаҫҡа, йә киреһенсә, сағыштырмаса насарыраҡ тойолғанда, кәмселек кисереп, көнләшмәҫкә өйрәтә әҙәмде был карма. Ошо хәҡиҡәтте аңлатыусы “Калачакра”[6] (Ваҡыт тәгәрмәсе) тураһындағы сутралар ҙа бик фәһемле. Уға ярашлы, әҙәмдең аңы үҙ-үҙен башҡа йән эйәләре менән бер бөтөн итеп ҡабул итер һәм тиң күреп яратыр, башҡаларҙың именлеген үҙенекендәй күреп хәстәрләү кимәленә етһә генә, эволюция баҫҡысы аша ул

---

*[5]Сағыштыр: Маһир — берәй нәмәгә һәләтле; маһайыу — үҙ-үҙеңде ҙурға һанау, үҙеңде шәпкә ҡуйыу, һауаланыу; ғорурлыҡ тойғоһо кисереү."Ҡайын туҙына маһайыр, имән үҙенә маһайыр". Ошо һүҙҙең ыңғай мәғәнәһенә тап килеүсе Махийән, Маһира, Маһинур, Маһибәҙәр, Маһисәрүәр, Маһизәр, Маһикамал һ.б. исемдәр фарсы теленән тип ҡаралһа ла, улар беҙгә иран-арий телле ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған үҙебеҙҙең рухи байлыҡ та баһа!*

*[6]Ҡала — период, эпоха, время года, время принятия пищи 2 раза в день, половина дня, час, судьба, смерть; Bhuta-ҡala — прошедшее, минувшее время: бөткән, ҡалған! Бында ла аңлатмалы һүҙлектә “промышленность һәм культура үҙәге" тип аңлатылған һәм ғәрәптеке тип бирелгән ҡала һүҙе — беҙҙең үҙебеҙҙең һүҙ ул: киткәнгә эйәреп китмәй, билдәле бер урында, хәлдә тороу; урын алған хәлдә булыу мәғәнәһендә!*

үҙенең тәүторошона, *бөтөн – будун – Будда* хәленә керер ине! Был кимәлгә етер өсөн яп-ябай талаптар үтәлергә тейеш булған. Ул – беҙгә тәүбабабыҙ Урал батыр васыят итеп ҡалдырған өгөт-нәсихәт:

*Ололарға кесе булып,*
*Кәңәш алып йөрөгөҙ.*
*Кеселәргә оло булып,*
*Кәңәш биреп йөрөгөҙ*[7].

Был өгөт-нәсихәттең нигеҙендә лә боронғо дини тәғлимәтебеҙ – йога талаптары ята. Ваҡыт тәгәрмәсе "калачакра" шартлы рәүештә өскә бүленә: үткәнең, бөгөнгөң, киләсәгең. Кеселәргә оло булыу, мәрхәмәт күрһәтеү, юл биреү – ул үҙ үткәнебеҙ, тәжрибәбеҙ нигеҙендә йәшерәк быуындың хәлен тойоп, аңлап, яҡшы өлгө биреү өсөн кәрәк. Ололарға, ҡарттарға ҡарата үҙебеҙ кесе булып, уларҙың тормош тәжрибәһенән һабаҡ алырға, уларҙан нимәгәлер өйрәнергә тейешлегебеҙ ваҡыт тәгәрмәсенең киләсәгенә бәйле, сөнки ҡартлыҡ – беҙҙең алдағы көнөбөҙ. Ябайлаштырып әйткәндә, ямандан ғибрәт алыр, яҡшынан фәһем алыр өсөн үтәбеҙ беҙ тормош юлын. Маһамудраның өсөнсө таяуы – карма буйынса, Сансара ҡуласаһының кешелек донъяһында тыуыу бәхетенә лайыҡлы булғас ҡына, кеше ҡиәфәтендә тейешле кимәлдә рухи ғәмәл үтәүгә өлгәшеп, ҡайтанан йәндәрҙең тәүторошона, йәғни Нирвана һәм Маха Нирванаға күтәрелеү мөмкинлеге тураһында һабаҡ булыр. Һан һәм сифат күҙлегенән тикшергәндә, кеше булып тыуыу ихтималлығы шул тиклем һирәктәр өлөшөнә төшә, шуға күрә бындай ғүмерҙең баһаһы тураһында Саҡтар ырыуының аҡыл эйәһе Гаутама: "Бер көнөң – бер ғүмергә тиң", – тигән. Кешелекте түбән тәгәрәүҙән туҡтатыу һәм уларҙың аң кимәле күтәрелешен хәстәрләү ниәтенән, Нирванаға өлгәшкән ҡайһы бер йәндәр был донъяға кире ҡайтыр булғандар. Төрлө дәүерҙәрҙә тыуған пәйғәмбәрҙәр – Аллаһының ерҙәге илселәре – шулар араһынан булыр. Уларҙың тыуыры күк есемдәре тарафынан алдан иҫкәртелеп килгән:

*Ҡәһҡәһә менән Әзрәкә*
*Урал турында уйлашып,*
*Икәү-ара һөйләшеп,*
*Аптырашып, алъяшып*
*Ултырған саҡ икән, ти.*
*Һынсы дейеүҙәр килеп,*
*Бер ҡарт дейеү бик белеп:*
*"Анау саҡта, ай, батшам,*
*Бер йәш бала тыуғанда,*
*Шуның тауышы килгәндә,*
*Күктә осҡан дейеүҙәр*
*Бары ҡолап төшкәйне.*
*Баланы урлап алырға,*
*Үлтереп юҡ ҡылырға*
*Барған дейеү, ендәрҙең,*
*Бала тәүләп ҡарағас,*
*Тоторға тип уҡталғас.*

---

[7]*Халыҡ әйтемдәрендәге башҡа варианттары: "Кесегә мәрхәмәт, олоға итәғәт (ит)", "Кесегә шәфҡәт итеп юл бир, олоға хөрмәт итеп ҡул бир".*

*Барған бере ҡурҡыуҙан*
*Йөрәге ҡубып үлгәйне...”*

Уралдың ябай ер кешеһе түгел, ә пәйғәмбәр затлы әҙәм булыуын һүрәтләүсе тағы бер күренеш булыр эпоста:

*Урал батыр үлгән һуң,*
*Гүрендә ерһеп бөткән һуң,*
*Гүре балҡып торған, ти,*
*Быны күргән кешеләр*
*Йыйылышып барған, ти.*
*Бер ус тупраҡ алған, ти.*
*Бары данлап һалған, ти,*
*Бара-бара ул ерҙә*
*Алтын булып киткән, ти...*

Тимәк, Уралдың был донъяға килеүе һәм китеүе тураһында күк йөҙө тарафынан ошондай күренештәр аша белдерелә икән, ул – Аллаһы Тәғәләнең ерҙәге илсеһе булыуына шик ҡалмай. Ә ундай бөйөк заттарҙың аңы тик бер йүнәлешкә йүнәлтелгән – донъяны һәләкәттән ҡотҡарыу. Был аныҡ маҡсат мәғлүмәт кимәлендә уларҙың аң баҙында ныҡлы, нигеҙле һалынған булғанлыҡтан, тыумыштан тура юлдан тайпылыуһыҙ алға, тураға, юғарыға барыр ундай шәхестәр. Аллаһының тәғәйен заты булмаһа, Уралдың, әле донъя күреп тә өлгөрмәгән үҫмер генә көйө, үҙ бурысын аныҡ белеүе ҡайҙан булыр ине:

*“Мин күренмәҫ Үлемде*
*Юҡ итергә сыҡҡанмын;*
*Ҡан ҡойоусы батшанан,*
*Кеше ашар дейеүҙән*
*Бар кешене ҡотҡарыу,*
*Йәншишмәнән һыу алып,*
*Үлгәндәрҙе терелтеү*
*Өсөн тыуған батырмын!”*

Был берҙән-бер юл – кеше ҡиәфәтендәге физик тән[8] эсендә тыуған бөйөк йәндең[9] (бодхисаттва) үҙаңы ярҙамында ҡыҫҡа ғына ғүмер эсендә йога баҫҡыстары – рухи үҙәктәр (чакралар) аша күтәрелеп, үҫеше, һәм ошо һәләте ярҙамында башҡаларҙы рухи һәләкәттән ҡурсалау, үргә юл күрһәтеү өсөн үтелә.

Бына шул тәбиғи аңы нигеҙендә Урал бәләкәйҙән үк тыйыу-киҫәтеүҙәргә ихтирамлы, йолаға буйһоноусан. Ата-әсәнең ҡушҡанын бурыс-васыят итеп тота белә.

Йога тәғлимәтендәгесә, кеше булып тыуыу осрағы үҙе бер һирәк өлөш булһа, унан да һирәгерәге – шулар араһында тыумыштан уҡ мәрхәмәтлелек, шәфҡәтлелек сифаттарына эйә, яҡшыға ғына ынтылышы булған, карма законын нескә тойоп, тәбиғи һәләттәрен тик йола (закон, намыҫ эше)

[8]*Санскрит: Тапи — тело, лицо, особа; tапи-iа — сын, tапи-iа — дочь; башҡ. тәнәй — сабый бала; бәпәй, бәпес; tanaya, tапа — потомство, дитя; башҡ. тана — бер йәштән ике йәшкә тиклемге һыйыр малы: тана һыйыр, тана үгеҙ, тана һөтө.*

[9]*Санскрит: Iап — родиться, рождаться; iапа — 1) человек, лицо. 2) род, поколение.3) племя; Iапака — 1. порождающий, производящий 2. 1) родитель, отец. 2) творец, создатель; Iапаtа — 1) человечество, люди. 2) общество; Iапапа — 1) зарождающий. 2) воспроизведение, размножение; 3) жизнь; Iапапi — родительница, мать. Ҡара: башҡ. ана, инә, инәй, әни.*

өйрәнеүгә йүнәлтер, мөмкинлектәрен тик йола ҡағиҙәләрен үтәүгә ҡорор изге йәндәр булыуы бик ҙур мөғжизәгә тиң. Ундайҙар, башҡаларға юл күрһәтеп, ғүмерҙәрен кешелек донъяһын ҡотҡарыуға бағышлай. Эпоста ағалы-ҡустылы Шүлгән менән Уралдың, ҡанды эсеү-эсмәү тураһында бәхәсләшеп, ҡараштары тап килмәү ваҡиғаһын һүрәтләү – Шүлгәндең Хинаяна-Йога,[10] Уралдың Махаяна-Йога юлын һайлауҙарының башы. Эпостың буйынан-буйына улар үҙҙәре һайлаған юлдан яҙлыҡмай барасаҡтарын иҫбат итәсәктәр: береһе тереһыуҙы – үҙен ҡотҡарыу, икенсеһе – тәбиғәт менән кешелекте мәңгеләштереү өсөн эҙләр. Йогала был ике юл да хаҡ тип ҡабул ителгән, тик үҫеш-артылыш юлына баҫыр әҙәмдең унын ҡайһыһынан китергә һайлау хоҡуғы ла бар, сөнки был донъя үҙе шулай дуаль: ағы һәм ҡараһы, дөрөҫө һәм ялғаны, үре һәм түбәне, яҡшыһы һәм яманы, мөхәббәте һәм нәфрәте кеүек ҡапма-ҡаршылыҡтарҙан торасаҡ ул.

Шулай итеп, Урал, бер ниндәй ҡотҡоға бирелмәйсә, баштан уҡ үҫеш-күтәрелеш юлына төшә: ҡабырсыҡтағы ҡанды эсеүҙән баш тартып, беренсенән, үҙен ошо кире мәғлүмәтле, ярамаған, насар карма туплауҙан азат итһә, йәғни яма кимәлен үтһә, икенсенән, атаһы һәм ағаһы Шүлгәнде кейек-йәнлектәрҙе аулауҙан, һунар итеүҙән, уларҙың йәнен ҡыйыуҙан тыйып, был шөғөлдөң ғәҙелһеҙлек икәнлегенә төшөндөрөп, нияма баҫҡысына күтәрелә. Атаһы Шүлгәнде туҡмағанда, ағаһын йәлләп яҡлашҡан Урал атаһының асыуын баҫа алырлыҡ аҡыллы кәңәштәр биреүе – унын аңы муладара чакраһынан ашыуын иҫбатлаусы ваҡиға. Урал, тыуып-үҫкән илем тип атаясаҡ беренсе ил – ер элементына тап килгән кимәлдән артылыу, азат булыу ошо күренеш менән тамамлана, сөнки ул атаһын ышандырырлыҡ аҡылы менән егет ҡорона инеүен иҫбат итте.

Артабан ике улдың Үлемде еңер сара эҙләп юлға сығыуҙары һәм уларҙың ике йүнәлешкә айырылып китеүҙәре символик рәүештә муладаранан сыҡҡан аңдың саталаныуын – уң яҡтағы Пингала (асыу-һарыуҙы ҡайнатыусы, хәрәкәт ҡеүәте – "раджас") һәм һул яҡтағы Ида (томаналыҡ, һиллек ҡеүәте – "тамас") каналдарына бүленеүен һүрәтләй:

*Һулға китһәң, юл буйы –*
*Уйын-көлкө төн буйы,*
*Ҡайғы-этлек күрмәйенсә,*
*Барлығын да белмәйенсә,*
*Рәхәт йәшәй байманда...*
*Уңға китһәң, юл буйы –*
*Илау-һыҡтау йыл буйы;*
*Яуызлыҡта дан алған,*
*Батшаһынан, башҡаһынан*
*Ҡайғы, этлек күреүсе,*
*Ҡанлы йәшен күреүсе,*
*Ҡанлы йәшен түгеүсе*
*Ҡатил батша иле бар;*
*Тау-тау кеше һөйәге,*
*Ҡанға батҡан ере бар...*

---

[10] *Йогала үҙеңде үҙең матди донъя – Сансара ҡоллоғонан азат итеү; йәмғиәттән айырылып, яңғыҙың үтеү юлы.*

Шуға күрә Урал яуыз Ҡатил батшаның илау-һыҡтау, зарға тулы иленә килеп юлыға, ә Шүлгән һиллек, муллыҡта көн күргән илдә бер ыҙа-хәсрәтһеҙ донъя ҡыҙырып йөрөй.

Хәҙер инде был йоганың өсөнсө кимәлендәге Манипура илендә – Урал менән Шүлгәндең ниҙәр кисереүенә байҡау яһайыҡ. Белемгә, донъяны танып-белеүгә ынтылыш манипураның ыңғай сифаты булһа, самаһыҙ ҡомһоҙлоҡ, һаранлыҡ артыу ихтималы уның насар яғы һанала. Ҡатил батша йыл да, халыҡты йыйып, үҙенә – ҡыҙ, ә ҡыҙы егет һайлай икән. Ҡыҙ Уралды һайлай.

*Бер яраны шул саҡта*
*Юл башларға булған, ти.*
*"Кейәү булдың беҙгә", – тип,*
*Арҡаһынан һөйгән, ти.*
*Урал быға күнмәгән,*
*Һарайға ул китмәгән.*
*"Мин йоланы белмәйем,*
*Эш аҙағын күрәйем.*
*Аҙаҡ барһам барырмын,*
*Ҡыҙҙы эҙләп табырмын", –*
*Тиеп Урал әйткән, ти...*

Был ваҡиғаны һүрәтләүҙән беҙ Уралдың егет ҡорона етеүен күрәбеҙ, ләкин, уның кәр-ҡеүәте свадистана кимәленән ашыуы сәбәпле, уның әле үҫмер булыуына ҡарамаҫтан, батша ҡыҙын ылыҡтыра (йогалағы "тиң тиңен табыр" тәртибе!) бер үк ваҡытта, тик егет уның артынан эйәрмәй, әҙәп һаҡлай; тәҡдимде кире ҡағыуын йола белмәүгә һылтап, ҡыҙҙың да намыҫын һәм абруйын халыҡ алдында кәмһетмәй. Быны менән ул үҙ фекере барлығын, үҙ аҡылы менән ҡарар ҡабул итеүгә өлгәшкән батыр егет дәрәжәһен раҫланы. Ҡатилдың Үгеҙе менән көрәшер алдынан да ул:

*"Мин дә ирәм итергә,*
*Үгеҙ, һине тырышмам,*
*Яфаланып, көс түгеп,*
*Һинең менән сайҡашмам.*
*Донъяла һин кешенән*
*Көслө югын таныйһың,*
*Кешегә ҡол булырһың", –*

тип кешелек һәм хайуанлыҡ кимәлдәренең айырмаһын ҡәтғи бүлеп ҡуя.

Шулай уҡ дүрт бәһлеүәндең бер юлы алышта Уралдың алдына сыға алмауын тик йогалағы нескә кимәлдәге ҡеүәттең тупаҫ, физик көстән өҫтөнлөклө булыуы менән генә аңлатып була:

*"Дүртегеҙ ҙә килегеҙ,*
*Үлем эҙләп йөрөгән*
*Батыр көсөн белегеҙ;*
*Ҡулығыҙҙа йән бирһәм,*
*Арыҫланыма бирегеҙ;*
*Көсөгөҙ етһә ташларға,*
*Йәншишмәгә сөйөгөҙ..."*

Ни өсөн Урал Үлемдән ҡурҡмай? Сөнки бындай көрәш арҡылы аңдары

юғары кимәлдәге шәхестәр (батырҙар) ғәҙәти бер һынау ғына үтә: улар өсөн был шулай итеп тере саҡта "үлем тәжрибәһе" үтеү, йәғни "рухи үлем кисереү" һәм "рухтың ҡайтанан тыуыуын кисереү" тип аталған ғәмәл генә ул. Ә ни өсөн батырҙар бындай һынау тотор? Сөнки тап ошо ғәмәл аша донъяуи теләктәрҙе булдырыусы, нәфсене үҫтереүсе "мин-минлек" юҡҡа сығыр, үлер; уның урынына яңы аң – рухи күтәрелеш кисергән бөйөк шәхес әүәләнер был йәндә. Шулай итеп, Урал манипура кимәлендә лә һынауҙы тотҡарлыҡһыҙ йырып сыҡты – был өсөнсө илдең батшаһы ҡыҙын ғөманлы итеп ҡалдырыуы шуға ишара булыр.

Артабанғы ваҡиғалар Уралдың йылан батшаһы Ҡәһҡәһә иленә аяҡ баҫыуына, уның улы Зәрҡумдың ун ике тарбаҡ мөгөҙлө боланды йоторға маташыуына осрау ваҡиғаһы менән башланып китә. Йыландың тамағына торған боландың мөгөҙөн һындырышып, Урал, Зәрҡумды Үлемдән ҡотҡарып, боланды йотоуға булышлыҡ иткәс тә, уныһы шунда уҡ бер сибәр егеткә әйләнә. Был осраҡта боландың ун ике тарбаҡлы мөгөҙө нимәнең символы тиһегеҙ? Ун ике өлөштән тороусы "Ваҡыт тәгәрмәсе" эсендә Сансараның аҫҡы донъяһында тереклек итеүҙән бүккән йәндең өҫкө донъяларға артылырға тырышыуын һүрәтләгән тамаша булыр был. Тарбаҡ мөгөҙлө болан үҙе – йогалағы иң юғары баҫҡыс һаналған сахасрара символы ул: был кимәлгә еткән йән кәүҙәһен үҙ теләге менән ҙурайта-бәләкәйләтә, ауырлығын арттыра-кәметә ала һәм теләгән бер алыҫлыҡтағы арауыҡты үтә алыу, йәне теләгән әйбергә хужа булыу һәләтенә, бөтә донъя менән етәкселек итеү мөмкинлегенә эйә була, тиҙәр. Ул кимәлгә яҡынлашыр өсөн йәндең "кеше булыу" хәлендә булыуы мотлаҡ. Бының өсөн манипураның "ҡомһоҙлоҡ" сифатына эйә Зәрҡум үҙен үлемдән ҡотҡарған Уралға хатта атаһының ынйы башлы таяғын бүләк итергә вәғәҙә итә.

Урал был ваҡытта үҙенең сихри һәләте – юғары кимәлдәге аңы ярҙамында Зәрҡумдың мәкерле уйын үтәнән-үтә уҡый:

*"Йылан илең күрәйем,*
*Бар серене беләйем,*
*Яҡшылыҡҡа яманлыҡ*
*Була икән донъяла, –*
*Бергә барып күрәйем".*

Тәүәккәллек уны алдағы ваҡиғаларҙа үҙ-үҙен һынауға этәрә, сөнки аң үҫеш дауам итә, маҡсатҡа ынтылыш һәр саҡ аңды аныҡ тота. Был анахата – ярайһы уҡ юғары кимәлдәге донъя булыр.

Йылан батшаның бар серен һаҡлап тороусы туғыҙ башлы йыландың бер башын сабып өҙгәс, ергә аҫҡыс ҡойолған, ҡалған һигеҙенән һигеҙ батыр бар булған, ти. Йыландың йөрәген ярыуға унан алтын аҫҡыс табылып, сер һарайын асыу, ә ул һарайҙан һылыу ҡыҙ Гөлостан сығып, ынйы таяҡты Уралға тотторроуы – былар барыһы ла анахата – ер кешеһе донъяһына тап килгән дүртенсе кимәлдәге ил булып сыға. Йоганан билдәле булыуынса, был кимәлгә артылған батырға дан-шөһрәт, билдәлелек килер. Әгәр ҙә ул шуларға әүрәп, ирәйеп китһә, артабан үҫешкә юл ябыласаҡ. Ireккә сыҡҡан халыҡ ысынлап та шуны тәҡдим итә лә Уралға:

*"Тәңре бирмәҫ ярҙамды*
*Беҙгә, егет, атҡарҙың,*

*Ил ҡаплаған яуыздың*
*Утлы яуын аҡтарҙың.*
*Инде, егет, нишләйек,*
*Ниндәй бүләк бирәйек,*
*Ни тип әйтеп ҙурлайыҡ?"*

Бөйөк маҡсатына барыуҙан һис тайпылмаҫ Урал дандан, ҡәҙер-хөрмәттән баш тарта һала:

*"Һис бер ҙурлыҡ кәрәкмәй;*
*Ил батыры шул булыр:*
*Һеҙҙең шатлыҡ – минеке,*
*Минең шатлыҡ – һеҙҙеке.*
*Илдең барын йыяйыҡ,*
*Күмәкләп туй ҡылайыҡ.*
*Арағыҙҙан берәүҙе*
*Башлыҡ итеп ҡуяйыҡ".*

Был яуабы менән ул һауаланыуға, батырлығы менән ғорурланыуға юл ҡуймай, халыҡты ҙурлап, үҙен кеселекле күрһәтә. Күп күргән аҡһаҡалдың һүҙен йыҡмауҙан:

*"Һәр йыл ғүмер бер батыр*
*Иле өсөн яратыр.*
*Быуын-быуын үтер ул.*
*Киләсәк быуын етер ул,*
*Һинең даның ҡалһа ла,*
*Ҡулда ғәйрәт бөтөр ул.*
*Ир бөтһә лә, ил бөтмәҫ,*
*Ил батыры – батырҙан,*
*Батыр ирҙән тыуыр ул;*
*Атанан күреп яу ҡыуып,*
*Ил эсендә үҫер ул,*
*Утын-һыуын кисер ул.*
*Батырҙан батыр тыуғанда,*
*Бер быуын тип һаналған*
*Илдә ғүмер итер ул.*
*Батыр атанан ҡот йәйгән,*
*Матур әсәнән һөт имгән, –*
*Һиңә тиңдәш булыр ҡыҙ,*
*Батырға әсә булыр ҡыҙ", –*

тигәс,

*Урал тыңлаған:*
*Гөлостанды алған, ти,*
*Бер оло туй ҡылған, ти,*
*Бергә ҡунаҡ булған, ти.*

"Исеме үк әйтеп тороуынса, Уралдың был ҡатыны яҡты донъя, ер өҫтө менән бәйле. Уның атаһы Алғыр ҙа – ер кешеһе[11]". Шулай итеп, халыҡ тарафынан инде батырлыҡ дәрәжәһендә танылған Урал был донъяла бар нәмәнең ваҡытлыса, шул иҫәптән ваҡиғаларҙың да алмашыныусанлығы тураһында аҡһаҡалдың һабағын тотто, үҙләштерҙе һәм, Гөлостанды туйлап

---

[11]*Зәкирйән Әминев. "Башҡорт һәм скиф мифологияһындағы ҡайһы бер оҡшашлыҡтар тыуҙырған уйҙар" — "Йәшлек", №145, 2004 йыл.*

алып, киләсәктә үҙенә ярҙамға килер ул яралтып, юлын дауам итә. Уны алда бишенсе ил көтә. Был Вишудда кимәле. Йәншишмәгә юлланыуҙың һул сиген һайлаған Шүлгән дә күтәрелеп еткән был үрҙәргә! Урал туғанын ошонда тап итәсәк, сөнки өҫкә күтәрелгән һайын, донъя киңәйә барһа ла, йән эйәләренең һаны күрәләтә кәмей унда, бындай юғарылыҡҡа артылыу һирәктәр өлөшөнә генә тәтер. Бына шул һирәктәр араһындағы көрәш тә бик ҡаты булыр, сөнки улар араһынан кемдер берәү генә тағы ла үрҙәрәк торған күк тәхетенә урынлашасаҡ. Шуға күрә дейеү батша Әзрәҡә һәр береһе үҙ юлы менән күтәрелгән ағалы-ҡустылының береһен, үҙенә ҡулайлыһын, тиңен ваҡытлыса, мәкерле ниәттән, дуҫ ҡылырға мәжбүр. Дейеү, уларҙың көс-көүәтен бер-береһенә ҡаршы йүнәлтеп, бәрелештереп, үҙе шул көрәштән ситтә ҡалып, отмаҡсы. Ошо юл менән ул, күк батшаһы Самрауҙы ҡолатып, уның урынын алыу өсөн сәмләнә. Был ниәтте тормошҡа ашырыр юлын да улар аныҡ беләә: әҙәм ҡиәфәтендәге берәү кәрәк уларға:

*"Батшам, сара эҙләйек,*
*Ҡул ҡаушарып тормайыҡ;*
*Берәй кеше табайыҡ,*
*Самрау ҡоштоң Аҡбуҙын*
*Кеше аша алайыҡ..."*

Күк батшалары Әзрәҡә менән Ҡәһҡәһә ни өсөн кешенән үтә алмай? Хикмәт ниҙә һуң? Тик рәхәтлектә, ҡәнәғәтләнеү тойғоһона сорналып көн күреүсе аллалар ни өсөн кешенән көсһөҙөрәк? Сөнки, йога өйрәткәнсә, әҙәм балаһына ғына рухи кимәлде үҫтереү теләге хас. Сансара ҡуласаһының уртаһына тап килгәнгә күрә, кешелек донъяһына уның ләззәте һәм ыҙа-яфаһы бер самала тиң бирелгән. Кеше, шуның алтын уртаһын тойоп, өҫкә ынтылыр көс таба алыр булыр. Ә уның аҫҡы ҡаттары булған ғазап ситлектәре – тамуҡ, хайуандар һәм мәңге ас ендәр донъяларында йән аҫрау ҡайғыһынан башҡа хәстәр юҡ, ә кешелектең юғарыраҡ баҫҡыстарҙа тороусы асурҙар һәм күк аллалары өсөн, байманлыҡта йәшәп, ҡайғы-хәсрәт барлығын онотоуға дусар булғанлыҡтан, рухи ғәмәлдәр алып барыу мохтажлығы юҡ. Шуға күрә улар Рух бөйөклөгөнә ынтылыуҙан мәхрүм һәм, нәтижәлә, кешенән көсһөҙөрәк булып ҡалып, еңелергә, түбән ҡоларға мәжбүр. Эпоста һөйләнгән көрәш бына шул сәбәптән бара ла инде. Күк батшалары кешенең аң кимәлен, үҫешен матди донъяның төрлө алдатҡыстарына ымһындырып, туҡтатырға маташа. Үҙҙәре иһә, вишуда (бишенсе элемент – бөйөк бушлыҡта) – аджня (аждаһа) кимәлдәренә азатлыҡта, иркенлектә мәңге хужа булып ҡалырға теләрҙәр.

Был кимәлгә еткән Шүлгән менән Урал – уларҙың ысын көндәштәре, сөнки уларҙың алтынсы ил Аджняға күтәрелеү мөмкинлеге дейеүҙәрҙекенән юғары – кеше атлы әҙәм затынан улар. Был тәңгәлдә пәйҙә булған ай ҡыҙы Айһылыу, ҡояш ҡыҙы Һомайҙың ролдәре нимәлә? Уларҙың образына йога тәғлимәтенең ниндәй сере һалынған?

Йогала ҡур һөйәгендә йоҡо хәлендәге йылан рәүешендә һаҡланыусы ҡеүәтте уятып, хәрәкәткә килтереү, чакралар аша юғарыға күтәреү өсөн бер рухи ғәмәл башҡарылыуы мотлаҡ. Ида һәм Пингала ҡыл-каналдарын унда йыйыла килгән карма ҡалдыҡтарынан, иҫке ҡеүәттән бушатып, таҙартыу маҡсатында һыу һәм ут тәьҫирендә һабаҡ алыу – нескә кимәлдә рухи остазыңдың, руханиҙың ҡағылыуынан уның ҡеүәтен, фатихаһын алыу. Һул яҡ

каналды таҙартыу йогала “һыу менән таҙарыныу[12]” тип атала һәм физик тәндең ҡайһы бер үҙгәреш хәле кисереүе менән оҙатыла: кундалини ҡеүәте күтәрелеү ваҡытында оҙайлы ғына ваҡыт өшөүҙән ҡалтыраныу тойғоһо биләп ала, кеше һүрәнләнеп ҡала, баш ойой. Бер ниндәй йылы кейем һәм тышҡы йылылыҡ ҡотҡара алмай был хәлдән: астраль тәндәге был ҡеүәт төрөн айҙың магнит тәьҫире хәрәкәткә килтерә икән.

Пингала юлағын таҙартыу “ут менән һынау” (“крещение огнем”) тип атала, сөнки кундалини ҡеүәте күтәрелеү тәндең йылылығын самаһыҙ арттыра, кеше сәбәпһеҙгә асыулы, ярһыулыға әйләнә – был күренеш Ҡояш әүҙемлеге менән бәйле.

Һул яҡтан киткән һәм шуға күрә йогалағы “һыу менән бәйле һынау” тотҡан Шүлгән Зәрҡумға осрап, тегеһе уны Әзрәҡәгә алып килә. Ошонда улар тарафынан урланып тотҡонда йәшәгән Айһылыуҙы[13] күрә һәм, әлбиттә, шул тәьҫирҙән уны ойоу ала.

Шүлгән, был матур һәм һил донъя рәхәтлектәрен татып, ни маҡсаттан йөрөүен дә онотоп ебәрә.

*Ләкин был кимәл йоганың маҡсатына ярашлы булмағанға күрә, Шүлгәнде был “ойоу”ҙан сығарырлыҡ тышҡы сәбәп табыла, сөнки дейеүҙәргә үҙ маҡсаттарына ирешеү кәрәк. Шүлгән, шулай итеп, дейеүҙәр һәм Зәрҡум ярҙамында Сансараның ҡулсаһынан ысҡынды булды. Шул уҡ ваҡытта, был кире ниәтле яуыздарҙың яйына төшөп, ул изгелеккә хеҙмәт итер туғаны Уралға ҡаршы була. Әммә был да – Юғары көстәр тарафынан тәүҙән үк икеһен ике яҡҡа аймылыш иткән ике юл – Махаяна һәм Хинаяна аша үҫеш. Һомай, күк батшаһы Самрауҙың Ҡояштан тыуған ҡыҙы булараҡ, уның аң кимәле кешелек донъяһыныҡыларҙан күпкә өҫтөн, шуға күрә ул үҙен түбәнерәктәргә ҡарата мөнәсәбәттәрҙә шәфҡәтле, ярҙамсыл, изгелекле буласаҡ – был күктәгеләрҙең булмышына, асылына тап килер күркәм сифаттар. Һомай, күрәҙәлек ҡылып, вишудда кимәлен үтеп, инде аджняға еткән, бер ынтылһа Йыһан ҡапҡаһы Сахасрараға етер Шүлгәндең яңылыш юлға баҫҡанын тоя. Күк ҡыҙының ошо ҡылығы аша талапсанлыҡ күрһәтеүе – егеттең кирегә тәгәрәү ихтималлығын алдан һиҙгәнгә күрә, ысын йәлләү йөҙөнән иҫкәртеү булыр. Ләкин көнсөллөк һәм нәфсе ҡолона әйләнгән Шүлгәндең аңы томаланып өлгөргән инде. Уның кесе туғаны Уралдың да юлында осраған барлыҡ һынауҙарҙы имен-аман үтеп, был донъяға килеп етерен үтәнән-үтә күргән Һомайҙың өмөтө – унда булыр. Шуға күрә ул, ҡунаҡсыллыҡ йолаһы күрһәтеп, әлегә үҙен танытмай, килеүсе менән әңгәмә ҡора, ниәттәрен аңлап алырға тырыша. Уй-теләктәре аныҡлыҡтан, алсаҡ һәм ябай Урал, һәр ваҡыттағыса, дөрөҫ мәғлүмәтле ихлас яуап бирә:*

*Үҙем йәп-йәш булһам да,*
*Биш ил барын белдем мин:*
*Береһендә үҙем тыуҙым,*
*Икеһен йөрөп күрҙем мин,*
*Ҡалған тағы икеһен*
*Күрергә тип сыҡтым мин.*

---

*[12]Был күренештең сағылышы христиан диненда лә һаҡланған: "Крещение водой" 1. Христианский обряд, совершаемый над младенцами или взрослыми для включения их в число членов церкви; 2. Крещение — один из главных праздников у православных христиан.*

*[13]Иҫләгеҙ: айҙың магнит тәьҫиренән хәрәкәткә килгән ҡеүәт!*

Ул, шулай итеп, үҙе үтеп сыҡҡан биш кимәл – тәүге биш чакраға хас донъяларға хаҡ баһа бирә: былар фани донъя ҡуласаһы Сансараның ыҙалы, яфалы, ғазаптарға тулы биш өлөшө Муладхара, Свадистана, Манипура, Анахата, Вишудда булыр. Маҡсатына яҡынлашҡанын да яҡшы тоя Урал – Сансараның алтынсы ҡатында, ошонда, осратырға тейеш ул Үлем тигән көҙгә күренмәҫ яуыҙы.

Быңдай осрашыу, аңлашыуға әҙер Һомайҙың да, Йәншишмәне күрһәтерҙән алда әйтер һүҙе, бирер баһаһы бар Уралға:

*Минең һиңә шартым бар.*
*Ҡайҙа булһа барырһың,*
*Үҙең уйлап бағырһың;*
*Йылан илен үткән ир,*
*Уңдан һулға сыҡҡан ир,*
*Үҙең юлын табырһың.*

Һомай үҙенә тиң булырҙай йәрен алдағы һынауҙарҙа биш кимәлгә яңынан тәгәрәтмәү сараһын күрә: шул кимәлдәрҙәге – йогала ер, һыу, ут, ел-һауа, бушлыҡ элементтарына тап килгән чакралар ҡапҡанына эләкмәҫ мәңгелек Рух символы – Аҡбуҙатын һәм шуларға хас донъяуи нәфсе-теләктәрҙе аҙҙырыусы ен-дейеүҙәрҙең ау-тоҙағын өҙә сабыр символ – булат ҡылысын вәғәҙә итә.

Урал батыр юғары кимәлдәге ҡеүәтен ҡулланып, телепортация ярҙамында ("таяғын ат иткән, ти") ҙур ара юл үтә, күлдә йөҙөүсе ҡош ҡиәфәтендәге Айһылыуҙы осрата. Урал нисек шулай тиҙ эҙләгәнен тап итә һуң? Был хәл, йогалағы карма законы буйынса, "тиң тиңен таба" принцибы менән аңлатылыр. Шулай уҡ улар икеһе лә нескә һиҙгерлек, аң кимәлендә бер-береһенең изге күңелле булыуҙарын яҡшы тойһалар ҙа, "күҙ асып, күҙ йомғансы" Самрау иленә ҡайтып ингәнсе, серҙе лә асып бөтмәйҙәр, сөнки танышлыҡ әле хәл-ваҡиғаларҙа һыналмаған. Һарайға ҡайтып еткәс, улар һәр береһе ни күргәнен "барын теҙеп һөйләгән".

*Һомай быны ишеткәс,*
*Уралдан сер тартмаған:*
*Үҙе Һомай икәнен,*
*Уралды яҡшы белгәнен*
*Барын теҙеп аңлатҡан,*
*Һомай шунда атаһын*
*Бүлмәһенә саҡыртҡан.*

Инде хәҙер асыҡтан-асыҡ һөйләшеп аңлашыр сәғәт тә һуҡты. Тәүҙә улар кәңәшләшеп, дейеүҙәрҙең бында тағы килеү ихтималлығын асыҡлағас, Айһылыуҙы айға, әсәһе янына, ебәреп тороуҙы хуп күрәләр. Һомай тәүҙә, Уралдың уй-ниәттәренең һаман да бер йүнәлештә икәнен тағы бер ҡат асыҡлар өсөн, һый-хөрмәттә ҡунаҡсыллыҡ ҡағиҙәләрен үтәй. Тәрбиәлелек, сама белеү Уралдың ҡанында булғанлыҡтан, бәҫле ҡунаҡ булып ятыуҙың артабан мәғәнәһе юҡлығын, бер нисә көн үткәс тә, Һомайҙы саҡырып, белдерә: артабан маҡсатына ярашлы юлын дауам итергә сығырын әйтә, уның биргән вәғәҙәһен иҫенә төшөрә.

Һомай, үҙенең күңелен яулаған батырҙы юлға сығарыр алдынан атаһына был серен асып, уның ризалығын ала. Алда буласаҡ данлыҡлы оло туй хаҡына Шүлгән дә тотҡондан сығарыла.

Әлегә ике туғандың хәл-тороштары бер самала, тиң күренә, сөнки улар икеһе

лә был Аджня кимәленә күтәрелеп еттеләр бит. Әммә был күренеш тышҡы ҡарамаҡҡа ғына шулай тойола. Эске үҫешкә йүнәлеш биреүсе ниәттәр иһә бөтөнләй башҡаса. Йыһандың иң ғәҙел, шуға күрә унан ҡотолор йән булмаҫ карма – ҡармаҡ эләктеререн, ҡармап алырын күҙ уңынан ысҡындыра шул көнсөллөктән аңы томаланған Шүлгән. Аң кимәлендә аңлашыу, киҫәтеү ҙә була шул саҡ былар араһында:

*“...Батыр булған ир-егет*
*Еңмәҫ нәмә булырмы?*
*Батырмын тигән ир-егет*
*Яуызға юл ҡуйырмы?*
*Утҡа ҡаршы һыу булыр ул,*
*Яуға ҡаршы тау булыр...”*

Доғаға тиң быңдай кәңәште тотоп, ҡустыһының киҫәтеүенә ҡолаҡ һалһа, Шүлгәндең артабанғы ҡылыҡтары яҡшыға үҙгәрер, юлы юғарыға, Йыһан ҡапҡаһына килтерер ине уны. Ниһайәт, һәр кем, үҙе сәбәп ҡылған эш-ҡылыҡтары буйынса, карма законы бойомға ашырған лайыҡлы һөҙөмтәһен күрер мәл етә. Урал үҙе һайлаған уң юлды уңышлы тамамлауын бар ғәм алдында раҫлай.

Әммә йога тәғлимәтенең һынауҙары быңың менән генә тамамланмауын артабанғы хәл-ваҡиғаларҙан күҙәтербеҙ. Шүлгән менән Уралдың икеһенә лә бергә булып, бер һынау – урта юлды быуып торған, фани донъяға бәйләп тотҡан, ысҡынырға һис бирмәгән һәм ғәҙәткә ингән, күнегелгән өсөнсө тойғо – шул донъяға эҫенеүҙән, эйәләшеүҙән азат булырға кәрәк.

Шүлгән: “Мин дә бер дан табайым. Әзрәҡәгә барайым, илен баҫып алайым”, – тигән ниәтенә Уралды күндереп, серле таяҡты ҡулына төшөрөү менән, яңылыш юлын ҡыуа, яуыз эштәрен ҡыла башлай. Иң беренсе ул “таяғы менән ергә һуҡҡан да, барыһын һыуҙан баҫтырып, һәләкәткә ҡалдырған”. Шул арала әүерменлек сифатына эйә булыр Зәрҡум, ҙур бер балыҡҡа әйләнеп, Һомайҙы ҡарпығас, күктә ҡояш тотолоуы, Аҡбуҙаттың ҡыҙҙы ҡотҡарып, серҙе Урал белеүе – берләшкән ҡеүәттең ут һәм һыу кеүек ике төргә яңынан бүленеүен, Урал менән Шүлгәндең юлдары киренән сатаданыуын, йәғни Махаяна һәм Хинаянала дауам итәсәгенә күрһәтә. Ә был күренеш үҙе донъяның ысын мәғәнәлә дуалләшеүен төҫмөрләтә: хәҙер инде бер-береһенә ҡаршы булыр көстәр тамам бүленде.

Зәрҡум менән Шүлгән, таяҡҡа хужа булып, Әзрәкәгә килгәс, уныһы “ерҙе һыу менән ҡапларға, күкте ут менән ялмарға” бойорған. Был хәлгә түҙерлек әмәле ҡалмаған кешеләр Уралдан ярҙам һорап ялбарыуына батыр сыҙап тормаған, дошмандарға ҡаршы яу асҡан. Был тамашалар барыһы ла Урал менән Шүлгәндең ҡатнашлығында барыуынан беҙ был ике ҡапма-ҡаршы көстәрҙең үҙ-ара көрәш аша, ләкин бергә (сын донъяның бер сифаты) Сушумна каналындағы түбән чакраларҙың һәр береһенә хас “ер”, “һыу”, “ут”, “ел – һауа”, “бушлыҡ – арауыҡ” элементтарынан арыныуынан күҙәтәбеҙ.

Шуларҙың иң өҫкөһө – дейеү батша Әзрәҡә илен Урал Аҡбуҙатында бер үҙе тар-мар итер, Әзрәҡәнең үҙен булат ҡылысы менән тураҡлап, кәүҙәһенән Ямантау барлыҡҡа килер өйөм өйгән, халыҡ иркенләп йәшәһен өсөн, диңгеҙ һыуын сигендергән. Киләһе ваҡиғалар ошо ваҡыт арауығында унан яралған улдарының тыуып-үҫеп, буй еткереп, уға ярҙамға килеп бергәләшеүҙәре менән бәйле. Ҡатил батшаның ейәне, Уралдың беренсе улы Яйыҡ, был ил халҡының Уралды тәңрегә тиңләп хөрмәтләүен, әсәһенең дә уны һағынып көтөүе

тураһында ентекләп бәйән итер. Бигерәк тә уның Урал батыр тарафынан үлтерелгән дүрт батырҙың ҡаны быҒаса ергә һеңмәй, һыуынмай ятыу сәбәбен әсәһенән төпсөнөп-белеп, уның ярҙамы менән ерҙәге барса хәл-ваҡиғаларҙың шаһиты – ҡарт ҡоҙғондо саҡыртып, шул ҡандарҙан дүрт батырҙы терелтеүе иғтибарға лайыҡлы күренеш. Был хәлдең булыуы мөғжизәүи тойолһа ла, йога тәғлимәте өйрәткәнсә, изге кеше алдында ҡылған яуыз эштәренДән яңылыш икәнен аңлап, ысын үкенес кисереү, изгеләрҙән ғәфү һорап, тәүбәгә килеү, хаҡ юлға баҫыу – яңынан тыуыуға тиң һаналыр ғәмәл ул.

*...Урал тотҡан Шүлгәнде.*
*Аҡбуҙаты, улдары*
*Ҡырған дейеү, бүтәнде.*
*Көсө менән Шүлгән дә*
*Уралға кәр ҡылмаған,*
*Алышһа ла, түҙәлмәй,*
*Шунда ергә ҡолаған.*
*Һаҡмар килеп, Шүлгәнгә*
*Ҡылыс менән уҡталған;*
*Урал тыйғас, Һаҡмар ҙа*
*Сапмайынса туҡталған.*
*Урал халыҡты йыйған,*
*Шүлгәнде уртаға ҡуйған.*

Был күренештән юғары кимәлдәге боронғо тәғлимәткә хас "үс алыу теләгенән хөкөм ҡылыу" йолаһының ҡабул ителеүе генә түгел, тыйылған булыуын төҫмөрләйбеҙ. Ысынлап та, бындай йола карма законына ҡаршы килә, сөнки "сәбәп – һөҙөмтә" сылбырында насар ниәттән (сәбәптән) ҡылған ҡылыҡ кире һөҙөмтәгә килтерер, киләһе яуызлыҡтарға сәбәп булдырыр – әммә ләкин был сылбырҙың аҙағы булмаҫ. Аҡыл эйәһе Урал, уландарына ошондай һабаҡ биреү ниәтенән, Шүлгәнде халыҡ алдына ҡуйып, ғәйептәрен һанап, тәүбәһенә килтерергә теләр; сөнки, был иң кешелекле боронғо тәғлимәт өйрәткәнсә, аҡылға ултырыу өсөн бер ҡасан да һуң түгел, тик үҙ ғәйебеңде үҙеңдеке тип таны ғына!

Алдағы ваҡиғаларҙан белеүебеҙсә, яуызлығы йөрәгендә булған Шүлгәндең хаталары өсөн үкенес белдереп аҡланыуы – буш һүҙ, төҙәлергә биргән вәғәҙәһе тағы ла бер ҡыуыҡ анты булып сығыр. Сөнки был сифат – ул ҡолаған "хайуандар донъяһында" хөкөм һөргән "көслө көсһөҙҙө ейер" йолаһына ярашлы йән эйәләренә хас ҡурҡаҡлыҡ. Ошонан һуң төҙәлеү юлына бою ролмаһа, тағы ла бер кимәлгә түбәнерәк, иң аҫҡы донъя ҡапҡаһы – тамуҡҡа юл асыусы Муладараға (ҡара ҡаяға әүерелеү – ер элементына ишара!) осорон иҫкәртеү ҙә ҡуйманы уның тәгәрәүен.

Урал инде кешелек өсөн яҡшылыҡ ҡылыуҙа һуңғы бурысын башҡарырға әҙер:

*Йәншишмәнең бар һыуын*
*Һоҫоп алып киләйек,*
*Бар кешегә бирәйек.*
*Күҙгә күренмәҫ Үлемдән,*
*Килер ауырыу-сырхауҙан,*
*Ауыртыныу-һыҙлауҙан,*
*Кешеләрҙе ҡотҡарып,*
*Барыһыны шат ҡылып,*
*Мәңге үлмәҫ ҡылайыҡ.*

Әммә Уралдың үҙенең аңы әле Йыһан ҡапҡаһы тәңгәленә күтәрелеп етмәгәнлектән, уның был кимәлдә изге тойолор әлеге маҡсатын тормошҡа ашырыу – яңылыш аҙым булыр ине. Ер йөҙөндә бындай байманлыҡта көн күреү Илаһ тыуҙырған, бар иткән тәүтормош хәлгә кире ынтылыуҙан үҫеш юлынан ваз кистерер ине бәндәне. Сөнки әле бар яҡтан камил булыр шәхес булып өлгөрмәгән әҙәм балаһы хата-маҙарҙан, етешһеҙлектәрҙән азат түгел. Ләкин күктәр тарафынан һәр аҙымы ҡурсалауҙа, күҙ уңында булғанлыҡтан, әлбиттә, Уралды хаҡ юлға төшөрөү сараһы күрелер улар тарафынан. Бының өсөн күктең үҙенән туранан-тура күрһәтмә, тоҫкау булыр, тип өмөтләнеү дөрөҫкә тап килмәүен ябай әҙәм төшөнөп бөтмәһә лә, ошо урында иғтибарға лайыҡ ниндәйҙер бер ваҡиғамы, осрашыумы, күренешме – билдә булыр аңлыға. Был турала йога тәғлимәте нигеҙендә барлыҡҡа килгән Будда диненең "Девадатта-сутра"һында күрәҙәлеккә ишаралаусы хәл-ваҡиғаларҙың иң иғтибарға лайыҡлыларынан тип күктәгеләр тарафынан ебәрелгән дүрт илсе-хәбәрсенең пәйҙә булыуы һаналған. Уларға ҡарата вайымһыҙлыҡ күрһәтеү йә иғтибар бүлмәү – иң ҙур ахмаҡлыҡ һаналалыр: әҙәм балаһының "был донъяға тыуыу ғазаптарын" онотоу, "ауырыу-сырхау кисереүсенең хәлен" белмәү, "ҡартлыҡтан ыҙйырағанды" танымау, "үлем түшәгендә ятыусының тәүбәһен" ишетмәү. Йога тәғлимәтенең үҙәген меңәр йыл сер итеп һаҡлаусы эпоста ла был фекер килеп сыҡмай булмаҫтыр бит? Әлбиттә, Урал батырҙың аң кимәлен артабан үҫеш-күтәрелеш йүнәлешенә бороусы бындай персонаж да пәйҙә буласаҡ, мәле еткәс:

*Үлем саҡырып-ялбарып,*
*Бар һөйәге ҡаҡшаған*
*Тәнендә ит ҡалмаған,*
*Ата-әсә, берен дә*
*Кем булғанын белмәгән*
*Бер ҡарт килеп еткән, ти...*

Бик күп быуындар алмашыныуына, һәр быуындың үҙенә хас заман үҙгәрештәренә үҙе шаһит булған аҡһаҡал бик борон бер дәүерҙә "үлемгә йән бирмәҫкә, туйҙан тороп ҡалмаҫҡа тип, Йәншишмәнән һыу эскән", имеш. Бына шул күпте күргән, кешелек донъяһының сал тарихын үҙе аша үткәргән бәндәнең батырға әйтер һүҙҙәре сын тормош тәжрибәһенең төйнәлеше булыр һәм кешелектең барына ла мөрәжәғәтнамә булып ҡалыр:

*Илгә йола булырҙай*
*Һынап белгән заңым бар,*
*Донъяла мәңге ҡалам тип,*
*Үлемгә буй бирмәҫкә,*
*Уны бер заң итмәҫкә*
*Йәншишмәнән эсмәгеҙ,*
*Миндәй хурлыҡ күрмәгеҙ.*
*Донъя ул бер баҡ икән,*
*Йән эйәһе шул баҡта*
*Донъя быуынын һанаған,*
*Ҡайһы быуын аҡлаған,*
*Ҡайһы уны таплаған,*
*Төрлө төҫкә биҙәгән,*
*Бары – үҫемлек, гөл икән;*
*Беҙ Үлем тип һанаған,*

*Яуыз ул тип ҡараған –*
*Бағтың тыуған үсмерен*
*Йәки көнө тулғанын*
*Сүпләп, бағты бушатҡан,*
*Унан донъя ташлатҡан*
*Бөтмәй торған йола икән.*
*Мәңге ҡалам, тимәгеҙ,*
*Йәншишмәнән эсмәгеҙ.*
*Донъяла мәңге ҡалыр эш –*
*Донъяны матур төҙөгән,*
*Бағты мәңге биҙәгән –*
*Ул да булһа яҡшылыҡ.*
*Күккә лә осор – яҡшылыҡ,*
*Һыуға ла батмаҫ – яҡшылыҡ,*
*Утҡа ла янмаҫ – яҡшылыҡ,*
*Телдән төшмәҫ – яҡшылыҡ.*
*Бары эшкә баш булыр,*
*Үҙеңә лә, кешегә*
*Мәңге йәшәр аш булыр".*

Был васыятнамәлә боронғо диндең иң төп һәм үҙәк таяуҙарынан һаналған фекерҙәре һалынған: "Был донъяның бөтә нәмәһе, хәл-ваҡиғалары – тотороҡһоҙ, алмашыныусан". Шуға күрә беҙ үҙебеҙ ҙә был донъяның ҡунағы ғына. Һәр көнөн уның, бер ғүмергә торош итеп, файҙалы эштәр менән үткәреү беҙҙең бында көн итеүебеҙҙе аҡлар: яҡшы ниәт, яҡшы һүҙ, яҡшы ҡылыҡ менән Кеше ғүмеренең һәр осоронда бер күтәрелеш кисереп, Йыһан ҡапҡаһына яҡынайыу өсөн кәңәш был һүҙҙәр. Шул эштәрҙең нигеҙендә ятыусы "яҡшылыҡ ҡылыу" идеяһы йогала үсеш юлының беренсе баҫҡыстары булған яма-нияма – кереш, инеш кимәлдәрен иҫкә төшөрөп, ошо ғәмәл ярҙамында уның юғары булған баҫҡыстарында ла тик шуларға таянып эш итергә кәрәклеген ҡабатлай аҡһаҡал.

Шулай итеп, аҡыллының кәңәше менән Урал батыр,

*Бөтә серҙе аңлағас,*
*Бар халыҡты эйәртеп,*
*Йәншишмәгә барған, ти,*
*Һыуын уртлап алған, ти;*
*Үҙе сапҡан юлына,*
*Дейеүҙәр өйгән тауына*
*Һыуҙы шунда бөрккән, ти.*

Йәншишмәне бөркҡәндән һуң мәңге йәшел булып ҡалған был бағта "байман табып, тын алып, рәхәтләнеп" көн күргән халыҡҡа өсөнсө тапҡыр антын боҙған Шүлгәндең, ҡалдыҡ-боҫтоҡ дейеү-йыландарҙы туплап, яңынан зыян күрһәтә башлауын нисек аңларға йога күҙлегенән? "Бар һәм Бер" булған саф, камил, бөтөн тәүбулмыш – Нирвананың ҡапма-ҡаршы, тиҫкәре, киреһе, түбәне булған был донъяның дуаль булыуынан: көндөң төнө, яҡтының ҡараңғыһы, татлының әсеһе, рәхәттең ҡыйыны, мөхәббәттең нәфрәте булғандай, яҡшылыҡ менән яманлыҡҡа ла мәңге бергә булыу насибынан инде, ни хәл итәһең! Йыһан ҡанунына бер кем дә ҡаршы тора алмаҫ был "ике ярты – бер бөтөн" фанилыҡта. Унан ҡотолоу, йәғни Сансараның алты ҡатынан ашып, етенсеһендә – Сахасрара чакраһындағы Йыһан ҡапҡаһынан аңын сығарыуға

өлгәшерме Урал батыр? Йәндең “рух арбаһы” рәүешен генә үтәүсе есмани тәнде ошо юғары идея өсөн ҡорбан итеп, үлем менән күҙгә-күҙ осрашыуға әҙер булыу – рух азатлығына килеүҙең берҙән-бер юлы. Кешелек тарихында, башҡа донъяуи диндәрҙә лә Аллаһының ерҙәге илселәренең барыһына ла хас сифат булып ҡабатланасаҡ әле был юғары дәрәжәләге батырлыҡ. Камил булмаған кешелек донъяһының хата-кәмселектәрҙән йыйылған насар кармаһы өсөн яуап тотоу, таҙартыу һәм ярлыҡау һорау өсөн булыр был ҡорбан. Сөнки Шүлгәнгә ҡат-ҡат ышаныс күрһәтеп, уның йөҙөндә кеше-ара мөнәсәбәттәргә, ниндәй кимәлде генә алма (туғанлыҡ, дуҫлыҡ, ғаилә һ.б.), юғарыларға хас сын тоғролоҡ юҡлығын иҫбатланы Урал пәйғәмбәр был тормошонда. Ялғанлыҡ, хыянатсанлыҡ, тәүбәне тиҙ онотоу кеүек кәмселектәр кешелекте ғүмер баҡый эҙәрләрен тоҫмаллаған Урал һуңғы батырлыҡ ҡылырға мәжбүр:

*“Кешегә тынлыҡ бирмәгән*
*Ҡалган-боҫҡан дейеүҙән,*
*Яу булыусы Шүлгәндән*
*Бар халыҡты ҡотолтам!” –*
*Тиеп, күлде уртлаган.*
*Күл һыуы ҡайнай башлаган,*
*Дейеүҙәр ҡурҡып шаулаган,*
*Шүлгән барын туплаган.*
*Урал күлде һура, ти, –*
*Дейеүҙәр эскә тула, ти,*
*Берәм-берәм Уралдың*
*Йөрәк-бауырын телә, ти.*
*Дейеү бик күп тулган һуң,*
*Йөрәгене телгән һуң,*
*Урал күлде бөрккән, ти,*
*Ҡырга сыҡҡан дейеүҙе*
*Батырҙары тотҡан, ти.*
*Аягына баҫалмай,*
*Ҡабат яуын асалмай;*
*Урал шунда йыгылган,*
*Бөтә кеше йыйылган,*
*“Ил бәхете ине”, – тип*
*Бары һыҡтап илаган.*

Был батырлыҡтың анахата кимәлендә барғаны һәм фәҡәт кешелек өсөн тәғәйен ҡорбан икәне лә аңлашыла. Вишудда кимәленә күтәрелгән Урал улдарына, халҡына васыятын еткерә:

*...Ир-арыҫлан булһаң да,*
*Батыр беләкле тыуһаң да,*
*Илдә йөрөп, ил күрмәй,*
*Тубыгыңдай ҡан кисмәй,*
*Йөрәгең батыр булалмаҫ.*
*Яуыҙга юлдаш булмагыҙ,*
*Кәңәшһеҙ эш ҡылмагыҙ...*
*Олоно оло итегеҙ –*
*Кәңәш алып йөрөгөҙ;*
*Кесене кесе итегеҙ –*
*Кәңәш биреп йөрөгөҙ...*

*Яҡшылыҡ булһын атығыҙ,*
*Кеше булһын затығыҙ;*
*Яманға юл ҡуймағыҙ,*
*Яҡшынан баш тартмағыҙ!*

Әҙәмдәргә төбәп әйткән һуңғы мөрәжәғәтендә уның үҙенең дә кеше кимәленә хас хата-кәмселектәрҙән азат булмағанлығына күрһәткән һүҙҙәр бар:

*...Ҡулдаш булыр илемдә*
*Батыр ирҙәр бар ине.*
*Шулар ҡәҙерен белмәнем,*
*Батырлыҡҡа маһайып,*
*Кәңәш ҡороп торманым,*
*Яңғыҙ башым уйланым,*
*Уңмаç юлды һайланым.*

Был һүҙҙәрҙә сикләнгәнлек, үҙ-үҙеңде генә таныу кеүек сифаттарҙың һауаланыуға, маһайыуға килтереүен үҙ тәжрибәһендә таныуын белгертеп, үкенес кисерә. Был юлды уңмаç юл тип атап, тәүбәһен бар ғәмгә еткерә. Ошоноң менән ул, бәндәләргә хас хата-кәмселегенән арынып, Аллаһының ризалығына өлгәшеренә ышаныс кисертә. Сөнки башҡаларҙы, өгөт-нәсихәт менән генә тәрбиәләп, үҙгәртеп булмай; "Әйләнә-тирәңдә бөтәһе лә һинең аңың сағылышы", – ти был турала йога тәғлимәте. Тимәк, иң алда үҙ аңыңды күтәреп, кәмселектәреңдән арынып камиллыҡҡа килгәс кенә, башҡаларҙы үҙгәртеп була, тигән һабаҡ бирә беҙгә Урал батыр. Бына ошо эске донъябыҙ – "минминлек, мин – үҙем" (микрокосм) һәм тышҡы донъя – "башҡалар менән бер бөтөнлөк" хәленең (макрокосм) ҡушылыуын иң юғары маҡсат итеп ҡуйған йога тәғлимәтенең һабаҡтары әле бөтмәгән эпоста. Даими үҙгәреүсәнлек хәлендәге алдаҡ ҡына булыр был донъянан, Сансараның ҡатлы-ҡатлы ҡоллоғонан Азатлыҡҡа илтеүсе юлдың ҡапҡаһы аша сығарыусы Үлем батырыбыҙҙың йәнен Мәңгелеккә, тәүбулмыш донъяһы Бөйөк Нур Иле Нирванаға атҡанын "күктән йондоҙ атылып, Һомайға оран биреүенән" таныйбыҙ. Йога өйрәткәнсә, бер нәмә лә сәбәпһеҙ булмай. Матди донъяла икегә бүленгән бөтөндөң һәр яртыһының ярышлап ҡына түгел, сиратлап, берен-бере алмаштырып торған хәлендә, уларҙы айырып таныуҙары – ай-һай, ҡатмарлы булыр кешегә. Халҡының киләсәген хәстәрләгән Урал батыр был осраҡты ла күҙ уңында тотҡан – уның рухын дауам итер аңлылар, миһырбанлылар уның изге эштәрен дауам итер:

*Ҡош-ҡорт, йәнлек күбәйгәс,*
*Шишмә һыуы етмәгәс,*
*Күлдән ҡурҡып эсмәгәс,*
*Иҙел батыр, Яйыҡҡа,*
*Халыҡ йыйылып килгән, ти,*
*"Нишләйбеҙ?" – тип барыһы*
*Аптырашып әйткән, ти.*

Иҙел был хәлдән ҡотолоу юлын яңынан Шүлгәнгә яу асыуҙа күреп, шуға әҙер булғанда, ер ҡотон һаҡлаусы Һомай килеп етеп, улын был ниәтенән туҡтатыуы, аҡыл менән башҡа сара табырға кәңәш итеүенән дә өҫтәге фекерҙең үҫтерелеүен күрәбеҙ: яҡшылыҡ менән яманлыҡ артабан да бергә ҡаласаҡ. Шуға күрә әҙәм затына, был хәҡиҡәтте иҫтә тотоп, аңлы рәүештә яҡшылыҡты үҫтерер эш-ғәмәлдәр ҡылыу юлын эҙләргә кәрәк булыр:

*“Атайымдың ҡулында*
*Булат дейеү тураны;*
*Уралдан тыуған ул булып,*
*Халыҡты һыуһыҙ ҡаңғыртып,*
*Батыр исеме күтәреп,*
*Һыу табалмай тилмереп*
*Тороу ирлек буламы?” –*
*Тигән дә Иҙел ирәйеп,*
*Тауҙы яра сапҡан, ти,*
*Көмөштәй бер аҡ йылға*
*Сылтырап шунда аҡҡан, ти...*

Күктәгеләрҙең фатихаһынан сығып эш итеүсән Урал батыр ошо изге урындарҙы йәнтөйәк итеп беҙгә ҡалдырған, шул турала бәйән итер бөйөк йөкмәткеле тәғлимәтен аманат итеп беҙгә төбәгән икән, уның уландары Иҙел, Яйыҡ, Нөгөш, Һаҡмарҙар тағы бер ҡат халыҡ булып ойошоп, ерегеп китергә сәбәп ҡылған икән, беҙ бының һөҙөмтәһен дә шул кимәлдә раҫларға тейешбеҙ!

## Йомғаҡлау һүҙе

*Кешелек донъяһы тарихтың инволюция (матдилашыу, аң кимәленең түбән төшә барыу этабы), революция (бер хәлдән икенсеһенә күсеш-ҡыйралыш) кеүек осорҙарын тәжрибә өсөн кисерергә мәжбүр булған. Бына шул донъяның ғазаптары, алдаҡтары эсендә буталыуҙарҙан алйыған, миктәгән йән хыялдарҙың буш ҡыуыҡҡа тиңлеген төшөнгәндән һуң, рухи ғәмәлдәргә тотонасаҡ, тормош мәғәнәһен ваҡытлыса онотторор алдатҡыстарҙа түгел, ә мәңгелек ҡиммәттәрҙе эҙләүҙә күрәсәк. Тимәк, уның эволюция (аң күтәрелеше нигеҙендәге үҫеш) юлынан үтергә тейешлеге лә – тәбиғи хәл. Алтын быуат – Һыуғояр дәүеренә аяҡ баҫырға торғанда Ер йөҙөндәге ҡайһы бер халыҡтар, булмаған ерлектә, буш урында мифтар тыуҙырып, йә булмаһа, башҡаныҡына ҡулын һуҙып, талаша-бүлешә ятҡанда, үҙебеҙгә яҙған рухи байлыҡтарыбыҙҙы барлап, уларҙың тәғәйенләнешен дөрөҫ ҡулланһаҡ, киләсәгебеҙ өмөтлө беҙҙең.*

*Белеүебеҙсә, төрлө замандарҙа кешелекте рухи һәләкәт алдында торғанда, шул афәттән алып сығыусы донъяуи диндәр барыһы ла үҙенән алдағыһының үҙенсәлектәрен иҫәпкә алған, буш урында барлыҡҡа килмәгән. Изге Ҡөрьән- Кәримдә христиан һәм иудаизмда билдәле пәйғәмбәрҙәр телгә алынһа, шул диндең башында торған Ғайса пәйғәмбәрҙең дә үҙ ваҡытында Һиндостанға барып, йога серҙәрен өйрәнеүе тураһында фараздар бар. Аҡыл эйәһе Гаутама ла, йога тәғлимәтенең төбөнә тиклем төшөнөп, бөтә баҫҡыстарын үтеп сыҡҡас, шул белемдәрен Будда диненең нигеҙенә башланғыс итеп һалған. Әгәр шул донъяуи диндәрҙең сығанағы – йога тәғлимәте беҙҙең эпосыбыҙҙа ярылып ята икән, бына ҡайҙа ул Рух шишмәһенең башы. Әлегәсә йәшенеп, быуылып ҡына ятҡан шул инештең саф тереһыуын йырып, ағыҙышып ебәреүҙә, йәғни бөйөк тәғлимәттең әле беҙ аңлап бөтмәгән мәғәнәһенә, асылмаған серҙәренә төшөнөү өсөн, бәләкәй өлөшөбөҙҙө кертә алһаҡ, алған белемдәребеҙ, туплаған тормош тәжрибәбеҙ, кеше булып йәшәүебеҙ аҡланыр ине, тигән өмөттәбеҙ.*

**Рәшиҙә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА.**

# Башҡортостан яҙыусыларының сираттағы съезы алдынан

## “ӘҘӘБИӘТ ТОРМОШ ДӘРЕСЛЕГЕМЕ БӨГӨН?”

### *Кәңәшсе лә, серҙәш тә*

(Иншалар бәйгеһенә йомғаҡлау)

*Редакцияның Мәғариф министрлығы менән берлектә, Уҡытыусылар йылына, Башҡортостан яҙыусыларының XV съезына бағышлап иғлан иткән IX – XI синыф уҡыусылары араһындағы иншалар конкурсында йөҙ-ҙән ашыу кеше ҡатнашты.*

*Бәйге йәш быуынды художестволы әҙәбиәткә ылыҡтырыу, уларҙа художестволы әҫәрҙәргә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу, әҙәби геройҙар өлгөһөндә йәштәрҙе патриотик, интернациональ, юғары әхләҡи рухта тәрбиәләү, заманға ярашлы зауыҡҡа эйә ижади шәхес формалаштырыу кеүек ниәттәрҙән сығып ойошторолдо. Был – ғәйәт оло бурыс. Уны бер бәйге уҙғарыу менән генә хәл итеп булмай, әлбиттә. Әммә тамсы ла тама-тама таш тишә, ти халыҡ. Иманыбыҙ камил: был ярыш та шундай тамсыларҙың береһе.*

*Бәйгегә бил быуыусыларҙың күпселеге, ғәҙәттә: “Еңеү түгел, ҡатнашыу мөһим!” – тип иҫәпләй. Дөрөҫөндә лә шулай. Икенсе яғы ла бар: еңеүҙән һуң ҡайһы берәүҙәр тынысланып ҡалыусан, ә ярыштан ут алып өлгөргәндәр уны һүндермәҫкә тырыша.*

*Иншалар менән танышҡанда ҡыуаныс тойғоһо кисерҙек, киләсәгебеҙгә өмөт нығынды.*

*Шуныһына иғтибар иттек: ҡайһы бер ҡала, райондарҙан килгән иншалар, барыһы ла тиерлек юғары баһаға лайыҡ ине. Мәҫәлән, Нефтекама, Миәкә, Мәләүез, Учалыныҡылар шулай булды. Күрәһең, уларҙың мәғариф бүлектәре бәйгегә бик яуаплы ҡараған, ихласлыҡ күрһәткән.*

*Вәғәҙәгә ярашлы иң һәйбәт тип табылған иншаларҙан өҙөктәр бирәбеҙ. Уҡыусыларҙы бындай иғтибар яңы ижади үрҙәргә дәртләндерһен, иң мөһиме – әҙәбиәтебеҙ уларға ғүмерҙәре буйына иң абруйлы кәңәшсе, уй-хыялдар менән уртаҡлашыр серҙәш, ҡыйынлыҡтар тыуғанда ныҡлы терәк булып ҡалһын. Тик изге хыялдарығыҙға хыянат итмәгеҙ.*

*Ижади асыштарҙың ҡыуаныстарын татырға яҙһын!*

*Редакция.*

***

Мәктәптә үткән һәр бер дәрестең, кластан тыш сараның беҙҙең өсөн тәрбиәүи йоғонтоһо бик ҙур. Беренсенән, ойоштороу эше менән уҡыусыларҙа аңлы дисциплина тәрбиәләнә, икенсенән, дәрестә алған мәғлүмәттәрҙең йөкмәткеһенә ҙур тәрбиәүи мәғәнә һалына. Шулай итеп, дәрес башынан аҙағына тиклем тәрбиә сараһына әүерелә.

Әҙәбиәт дәресе иһә мәктәптәге тәрбиә эшенең үҙәге, иң мөһиме тиһәм, бер ҙә яңылышмам, моғайын. Тап ошо әҙәбиәт дәрестәре аша тормоштоң һоҡланғыс һәм ҡабатланғыһыҙ булыуына ышандым, әҙәби әҫәр геройҙарынан ҡыйынлыҡтарҙы еңергә өйрәндем. Туған телемә һөйөүҙе лә нәҡ әҙәбиәт дәресендә тәрбиәләне уҡытыусым. Башҡорт теленең ни тиклем бай, йәнгә сихәтле, матур икәнлеген дә ошо дәрес аша төшөндөм.

Әҙәбиәтте ысын мәғәнәһендә тормош дәреслеге тип әйтер инем. Ыңғай образдар, ә улар башҡорт әҙәбиәтендә бихисап: халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның Һөнәрсеһен, Юлдашын, Ҡыҙрасын, Йәнеш, Емеш, Байрасын ғына миҫалға алайыҡ. Улар изгелек, кешелеклелек, ғәҙеллек кеүек иң күркәм сифаттар тураһында уйланырға мәжбүр итә. Яҡшыны ямандан, бөйөк эштәрҙе ҡомһоҙлоҡ, тупаҫлыҡ, ике йөҙлөлөктән айырып ҡарарға, матурлыҡ, ижад өсөн көрәшергә, уларҙы һаҡларға, яҡларға, ата-олатайҙарҙың данлы эштәрен, батырлығын дауам итергә өйрәтә. Тыуған еребеҙ тәбиғәтен яратыу, һаҡлау, дөрөҫлөккә ынтылыу, йәмғиәткә файҙалы кеше булып үҫеү кеүек гүзәл һыҙаттар, кешелеклелек тәрбиәләй.

Мөғжизәле, бай һүҙ сәнғәтенә юл да әҙәбиәт дәресенән башлана. Ҡабатланмаҫ йәнле образдар аша тормош серҙәрен асырға ынтылыу, һүҙ ярҙамында матурлыҡты күрергә, яратырға өйрәтеү ҙә әҙәбиәттән башлана.

Әҙәбиәт дәресендә ниндәйҙер геройға характеристика биргәндә, беҙ үҙ телебеҙҙә иҫбат итәбеҙ, фекеребеҙҙе дәлилләйбеҙ, бәхәс ҡорорға өйрәнәбеҙ. Ҡыҙыҡһыныусанлыҡ, күҙәтеүсәнлек кеүек мөһим сифаттар ҙа тәрбиәләй ул.

Халҡыбыҙҙың мәҙәни һәм тарихи ҡиммәттәрен белгәндә генә туған телебеҙ менән лайыҡлы ғорурлана алабыҙ.

Бөтә көсөн туған халҡына, ижадҡа арнаған Зәйнәб Биишеваның әҫәрҙәре генә түгел, үҙенең үткән ғүмер юлы ла – тормош дәреслеге. “Оло Эйек буйында”, “Кәмһетелгәндәр”, “Емеш” романдарын тулыһынса уҡып сыҡманым әле, өҙөктәрен генә уҡыным, форсат сығыу менән был трилогияны мотлаҡ уҡыясаҡмын. Уның ҡарауы “Һөнәрсе менән Өйрәнсек”, “Дуҫ булайыҡ”, “Сәйер кеше” әҫәрҙәрен бер нисә тапҡыр уҡып сыҡтым. Һөнәрсе матурлыҡҡа, оҫталыҡҡа, гүзәллеккә баш эйә, ул ниндәйҙер матди байлыҡ тураһында уйланмай ҙа. Ижади хеҙмәте уға илһам бирә, яңы эҙләнеүҙәргә, асыштарға дәртләндерә. Ул саф күңелле кеше. Үҙенең күңелендә яман уй булмағас, башҡалар ҙа үҙе һымаҡ бер ҡатлы, ихлас күңелле, тоғро тип уйлай. Ә өйрәнсек уның киреһе. Үҙен генә уйлай, ҡулынан бер эш килмәһә лә, байырға ынтыла. Маҡсатһыҙ, ике йөҙлө Өйрәнсек – һаранлыҡ, ҡомһоҙлоҡ, һөмһөҙлөктөң өлгөһө ул. Яратҡан яҙыусым ошо ике образ аша изгелек һәм яуызлыҡ темаһын бик оҫта аса. Уларҙың икеһе лә – Һөнәрсе лә, Өйрәнсек тә – был фани донъянан баҡыйлыҡҡа күсеп тиҫтәләгән йылдар үтһә лә, барыбер дөрөҫлөктөң өҫкә сығыуын, ғәҙеллек тантана итеүен күрһәтә. Һөнәрсе һәм Өйрәнсек кеүек кешеләр әле лә бар арабыҙҙа. Изге күңеллеләр менән йәнәш йылғырҙар, ҡомһоҙҙар йөрөй. Был әҫәрҙе уҡып сыҡҡандар, Зәйнәб Биишева әйтергә теләгән фекер күңеленә үтеп ингәндәр бер ҡасан да Өйрәнсек юлынан китмәҫ, тип уйлайым. Ә Һөнәрсе ысын мәғәнәһендә халҡының һөйөүенә лайыҡ.

“Дуҫ булайыҡ” повесының төп геройҙары – бер тиҫтер Юлдаш менән Ҡыҙрас

образдары аша тирә яҡ мөхитте, тәбиғәтте, ҡоштарҙы тыңларға өйрәндем. Беҙҙе уратып алған бөтә нәмәнең йәнле булыуына инандым. Дуҫ булыу, дуҫлыҡ тигән төшөнсәләрҙең шул тиклем бөйөк, изге икәнлегенә төшөндөм. Был әҫәрҙе уҡығанға тиклем юҡ-барға үсегеп, дуҫтарымдан ситләшә инем, “Дуҫ булайыҡ”тан һуң дуҫлыҡҡа икенсе төрлөрәк ҡарай башланым. Уның ҡәҙерен, бөйөк көскә эйә булыуын белдем. Мин Юлдаштың Оло йөрәкле кеше була алыуына һоҡландым. Шулай булмаһа, ямғырлы-дауыллы көндә һорамай алып киткән кәмәнең хужаһы янында бер үҙен ҡалдырып киткән Ҡыҙрасты ғәфү итә алмаҫ ине. Үҙем уҡып сыҡҡан әҫәрҙәрҙәге хәлгә оҡшаш ваҡиғаға осраһам, Зәйнәб Биишеваның геройҙары ни эшләр ине икән? – тигән уй килә башҡа. Һәм мин теге йәки был осраҡта Һөнәрсе, Юлдаш, Байрас, Емеш нимә эшләр ине, шуны эшләйем, шуны эшләргә тырышам.

Уйлап сығарылған образдарға табынаһың тип, минән көлөүселәр юҡ түгел. Ә кемгә табынырға һуң улайһа? Бөгөнгө заман геройҙары кемдәр? Беҙ кемгә тиңләшергә тейеш? Кем бөгөн идеал? Тиҫтерҙәрем генә түгел, атай-әсәйем дә, уҡытыусыларым да яуап бирә алмай хатта. Салауат батыр, тиер кемдер. Эйе, ул маҡтауға, данға лайыҡ. Унан мин тыуған еремде яратырға өйрәнәм. Тыуған еренә һөйөү хисе, көслө булыуы уны залимдарға ҡаршы күтәргән дә инде. Зәки Вәлиди ҙә минең өсөн – яҡты образ. Тәржемәләре булған осраҡта ла мин башҡортса, үҙ туған телемдә уҡырға тырышам.

Ысын тормош һабағын биргән әҙәбиәт дәрестәре киләсәктә лә булһын ине. Әҙәби әҫәр геройҙары тағы ла сағыуыраҡ, белемлерәк, тәүәккәлерәк, ҡыйыуыраҡ, мөғжизәгә генә түгел, ә юғары көскә ышаныусаныраҡ булһын ине. Йәш быуын иһә уларҙан өлгө алып үҫһен ине. Юғиһә, иртәгәһе көнгә лә ышанысы булмаған, бер көн менән йәшәгән, вайымһыҙ, битараф, маҡсатһыҙҙар күбәйеп бара арабыҙҙа. Заман әҙәби әҫәрҙәренең күбеһенең геройҙары ла шулар бит хәҙер (***Ренита КӘРИМОВА, Мәләүез районы***).

...Бына өс көн, өс төн инде бер туҡтауһыҙ ямғыр яуа. Хас Мостай Кәримдең “Өсөнсө көн тоташ ҡар яуа”һындағы шикелле. Бөтә күк йөҙөн илаҡ болоттар ҡаплап алған да ямғыр түгелә лә түгелә, әле генә энә күҙеләй кескәй генә тамсылар һибелә, ул да булмай эре борсаҡ кеүектәре тып-тып тама башлай.

Бына шундай саҡта Мостай ағайҙың “Ғүмер миҙгелдәре” китабын ҡулыма алам да инде мин. 2002 йылда Башҡортостан “Китап” нәшриәтендә иҫ киткес матур, зауыҡлы итеп сығарылған был иман китабына ҡағылыуым була, эс бошоуым әллә ҡайҙа иреп юғала, ғәмем уяна, йөрәгем талпына башлай. Иң башта мине Мостай ағайҙың китап тышындағы фотоһүрәте әсир итә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, мин был фотоның – ысын сәнғәт эше – авторын белмәйем, әммә уға ҡат-ҡат рәхмәт уҡыйым. Ул йөрәгендә күтәрә алмаҫлыҡ ил ғәме, халыҡ яҙмышы өсөн яуаплылыҡ, йәшәүгә, кешеләргә, донъяға ҡарата оло һөйөү йөрөткән, рухына тәрән моң һеңгән аҡыл эйәһе Мостай ағайҙың ғүмере көҙөндә йәшәү миҙгелдәрен барлап ултырыуын шул ҡәҙәр нескә һәм тәрән тойоп “тотоп” алған. Миңә ҡалһа, халыҡ шағирының ижады менән бик үк танышып бармаған, фото эшенең нимә икәнен белмәгән кешелә лә “О-о, был китапты мотлаҡ уҡырға кәрәк” тигән теләк уянасаҡ. Ана ул, сал сәсле башын эйеп, ҡулдарын һалындырып ултырып алған да нәҡ бына ямғырлы көҙгө көндө әкрен генә, ипле генә һинең менән һөйләшә, хикмәтле әкиәтен һөйләй, фәһемле һүҙен әйтә: аң менән йән хәтерен эшкә егеп, ғүмер миҙгелдәрен барлай ғына түгел, ә йәшәүҙең мәғәнәһен төшөндөрә кеүек. Китапҡа баш һүҙендә ул: “Ил тарҡала, тормоштан йәм китте.

Бәндәләрҙең сыҙамлығы көрсөккә килеп терәлде. Кешеләр араһында яуызлыҡ һәм усаллыҡ хөкөм һөрә...

Йыуаныс, таяныс эҙләп, берәүҙәр дингә мөкиббән китте, икенселәр им-томға һуғылды, өсөнсөләр боҙоҡлоҡҡа бирелде. Әммә быларҙың береһендә лә ҡотолоу сараһы юҡ. Сөнки иманһыҙҙарҙың саждәгә ултырыуынан, зәғиф рухлы ғәриптәрҙе ырымлауҙан, ырыуҙан ҡалған кәрһеҙҙәрҙең мөхәббәт уйыны уйнауынан ни фәтеүә?” – тип һорау ҡуя ла болғансыҡ заманда үҙең булып ҡалыу, йәшәүҙең асыл ҡиммәттәрен юғалтмау өсөн йәнен тетрәткән, күңелен ҡыуандырған, йөрәген әрнеткән эреле-ваҡлы мөғжизәле донъяһына әйҙәй. “Мөғжизәләр генә тормош усағының ҡүҙҙәрын һыуытмай. Йәнә өмөт. Өмөт – фәҡирҙәр аллаһы”, – ти ул.

...Мин шул донъяға сумам. Әйткәнемсә, был китапты, гүйә, уҡымайым, ә Мостай үҙе һөйләй төҫлө. Ашыҡмайынса, ҡабаланмайынса ғына, хикмәтле һүҙе һәм ғәжәйеп бай образлы теле менән. Үҙе күргәндәрен, үҙе кисергәндәрен. Ә һин бар донъяны онотоп, йотлоғоп тыңлайһың. Мостай ағай менән бергә һинең дә уйҙар диңгеҙең урғыла, хистәр дауылың ҡотора, йәнең өҙгөләнә – илай, йырлай, рухың балҡый... Һағыш һәм һағыныу, моң һәм хис, һөйөү һәм ихтирам, әхлаҡ һәм әҙәп, ихласлыҡ һәм эскерһеҙлек, намыҫ һәм выждан, ғәм һәм яуаплылыҡ... Йөрәк ҡәләме менән яҙылған был китап бына нимә хаҡында. Күңелде сафландыра торған китабының бите һайын олпат яҙыусы ихласлығы һәм ябайлығы, эскерһеҙлеге һәм сабый йәнле булыуы; ғибрәт алырлыҡ хикәйәттәре; яҡындары, замандаштары, ижадтары хаҡында яҡшы һүҙе менән аҡлыҡҡа һәм яҡтылыҡҡа, яҡшылыҡҡа һәм мәрхәмәтлеккә саҡыра, өндәй.

“Камил аҡыллылар хатта ахмаҡтарға ҡарата ла мәрхәмәтле, рәхимле булалар”, “Аштың да олоһо бар, кесеһе бар”, “Кеше ҡулы менән кеше туҡмамағыҙ”, ”Бар һыйҙы үҙебеҙҙән үҙебеҙ ҡыҙғанмайыҡ”, “Аштан оло, һыйҙан өҫтөн ҡылаһыу – әҙәпһеҙлек”, “Кешеләр бер-береһен йышыраҡ күтәрешһәләр, үкенестәре аҙыраҡ булыр ине...” Бындай тормош һабаҡтары китапта бик күп, ал да күңелеңә һалып ҡуй, тормошта ҡуллан...

Бына шулай, Мостай ағайҙы иҫән сағында күреү шатлығы кисермәһәм дә, уның үлемһеҙ ижадын йөрәгем менән уҡып, күңелемә һеңдереп, үҙе менән һөйләшкән төҫлө булам мин (***Альмира НУРЕТДИНОВА, Борай районы***).

Бөгөн, 15 сентябрь, мин көндәлек яҙа башланым. Эш, хеҙмәт тураһында дәрес булды. Башҡорт теленән уҡытыусы апай хеҙмәт тураһында нимә уҡыһаҡ та көндәлеккә яҙа барырға ҡушты.

Ун көндән эш хаҡындағы көндәлекте уҡытыусыма бирәсәкмен. Дәрестәр күп булды. Өйҙә әсәйемә йорт эштәрендә ярҙамлаштым, ҡустымды ҡараштым, балалар менән уйнарға урамға алып сыҡтым. “Йәншишмә” гәзитен уҡыйым.

Бөгөн хеҙмәт тураһындағы яҙыуҙарымды уҡытыусыма тапшырҙым. Минең яҙыуҙарымдан “Йәншишмә” гәзитендәге Гүзәл тураһындағы мәҡәләне уҡытыусым ҡысҡырып уҡыуымды һораны. Шунан Фәрит Иҫәнғоловтың “Хәмит күпере”н ҡабатланыҡ. Хәмиттең атаһын дөрөҫ аңлауы, уның кешеләргә йылға аша сығырға күпер эшләй башлауы беҙҙең барыбыҙға ла оҡшағайны. Шуға ул әҫәрҙе һәр беребеҙ һөйләргә тырыштыҡ. Ә бына үткән йылда уҡыған Зәйнәб Биишеваның “Һөнәрсе менән Өйрәнсек” хикәйәтенән өҙөктө рус теленә тәржемә итеүе ҡыҙыҡлы эш булды, сөнки ике төркөм ярышып эшләнек.

Минең әсәйем бик-бик егәрле кеше. Әсәйем, уның менән бергә эшләгән кешеләр тураһында инша яҙырға ҡарар иттем, сөнки Фәрит Иҫәнғоловтың

Хәмите, башҡорт халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның Һөнәрсеһе кеүек, әсәйем кешеләргә хеҙмәт итә.

Халҡымдың эш тураһында матур бер мәҡәле бар: ҡалған эшкә ҡар яуа. Иншамды бөгөн үк яҙып ҡуйайым. Әҙәби геройҙар, гәзит мәғлүмәттәре миңә нисек ярҙам иткәнен дә яҙырмын: Гүзәлгә ҡарап бәйләргә өйрәндем, класташтарыма, Хәмит һымаҡ, ярҙамлашырға ғына торам. Шуны ла оноторға ярамай: тырышҡан табыр, ташҡа ҡаҙаҡ ҡағыр ( ***Әлиә ИЛЬЯСОВА, Ишембай районы***).

Замандың үҙенә күрә ауырлығы-ауырыуы була. Бөгөнгө көндә, йәғни, хәҙерге заман ауырыуы – ул кешеләрҙең күңел ярлылығы. Шуға күрә кешенең йәнен дауаларға кәрәк. Халыҡ рухи яҡтан ярлылана бара. Шуға ауылдарҙа эскелек сәскә ата. Эшһеҙлек, аҡса юҡлыҡ кешене төшөнкөлөккә этәрә һәм был инде эскелеккә килтерә. Бөгөн, минең уйлауымса, әҫәрҙәр насарлыҡты бик үк һүрәтләп бармайҙар, сөнки былай ҙа балалар – киләсәк быуын телевизор аша үлтереш-ҡырылышты ҡарап, ҡаты күңелле булып үҫәләр.

Тормош дөрөҫлөгөн һүрәтләмәгәс, әҙәбиәт заман талаптарына бик үк яуап бирмәйҙер, тип уйлайым. Беҙҙең тормош ауыр, беҙ матди яҡтан бик ауыр хәлдә йәшәйбеҙ. Ауылдарҙа эш юҡ. “Аманат”, “Йәншишмә”, “Аҡбуҙат” журналдарын да алдырып уҡый алмайбыҙ, сөнки аҡса юҡ – атайҙарыбыҙ эшләмәй. Уҡымаған кеше үҙ халҡының тарихын да, уның данлы улдарын, ҡыҙҙарын да белмәй үҫә. Ә бит ысын башҡорт булыр өсөн, башҡортлоғоң менән ғорурланыу өсөн эстән башҡорт булыу кәрәк, күңелең таҙа булыу кәрәк. Әҙәбиәттең тормош талаптарына яуап бирмәүе – заман бәләһе ул. Беҙҙең йәмғиәт үҫешмәгән, беҙҙең ил иң артта ҡалған илдәрҙең береһе. Ни өсөн беҙ ярлы йәшәйбеҙ? Сөнки беҙ үҙ еребеҙгә үҙебеҙ хужа түгелбеҙ. Йыраҡ китмәй, шуны әйтергә була: мәҫәлән, беҙҙең ауыл тирәһендәге ҡарағай урманын сит-яттар килеп ҡырҡып бөттө, ә ауыл халҡына ағас юҡ. Шул турала журналистар гәзит биттәренә яҙырға ҡурҡалар, күрәһең...

Бөгөн әҙәбиәт уҡып ҡына бай, матур йәшәп булһа ине лә... Матур әҙәбиәт һәм беҙҙең тормош араһында бик ҙур яр тора.

Шулай ҙа әҙәбиәт яҡты нур булып, кешеләрҙе алға саҡырыусы көс булып ҡалыр тип уйлайым ( ***Рәмил ӘҒЗӘМОВ, Белорет районы***).

Мин бейек тау үренә менеп еттем. Минең алда һоҡланып туя алмаҫлыҡ күренеш... Тирә яҡ тып-тын. Ниндәй һоҡланғыс ул беҙҙең яҡтар!.. Ҡапыл ошо тынлыҡтан селтер-селтер килгән тауыш ишетелде. Был бит беҙҙең Изге шишмәбеҙ. Ул тау-таштарҙы ярып, кешелеккә ҡояш нурын һипкәндәй урғылып сыҡҡан. Ҡолаҡ һалып, оҙаҡ тыңлап торҙом. Ниндәй илаһи моң! Был бит Тереһыу шишмәһе, мин үҙемде Урал батыр ерендә кеүек хис иттем. Әйтерһең дә, Изге шишмә Йәншишмәнең бер өлөшө. Шул саҡ мин ошо шишмәне оло Ағиҙел, илемдең төньяҡ-көнбайышында иңләп-буйлап аҡҡан Ҡариҙелгә, үҙебеҙҙең Төй менән Сарс йылғаһына тиңләнем. Күңелем тулып китте. Һыу тамсыһындай уйҙарым һикерешә-бейей... Тереһыу шишмәһе селтер-селтер килеп әле лә халҡына хеҙмәт итә. Ошо шишмә Урал батырҙың әмере менән әлегесә аға ла аға. Бөтә донъяға тереклек һибеп, һыуһаған юлсыларға һыу эсереп, ҡороған, үлеп барған ергә йәм өҫтәп, мәңге аға. Мин, һис шикһеҙ, Урал тауҙарын еребеҙҙең мөғжизәле бер урыны, тип иҫәпләр инем. Урал батыр үҙе ошо мөғжизәне тыуҙырған бит, ә бындай ерҙәргә һаҡсыл булырға кәрәк!

Әҙәбиәт тормош дәреслегеме бөгөн? Кеше был донъяла терәкһеҙ йәшәй алмай. Уға ниндәй ҙә булһа терәк кәрәк. Әҙәбиәт тә донъяны танып белеүҙә ҙур роль уйнайҙыр, тип уйлайым. Әҙәби китаптарҙы күберәк уҡыған һайын тормош, йәшәйеш тураһында күп уйланаһың. Халҡыбыҙҙың аҫыл ҡомартҡыһы – эпостарҙың бөгөнгө көнгә тиклем һаҡланып килеп етеүе лә үҙе бер мөғжизә. Боронғолоҡто белгән һайын йәшәйештең бик күп серҙәре асыла бара, әҙәбиәт донъяһына сумған һайын ғүмерҙең ни тиклем ҡиммәт икәнен беләһең (***Роза БАҘАЛБАЕВА, Аҫҡын районы***).

Әҙәбиәт тормош дәреслегеме бөгөн? Эйе, тормош дәреслегелер, сөнки төрлө әҙәби китаптар уҡып беҙ йәшәү, донъя нимә икәнен аңлайбыҙ... Һорауға яуап табылды. Бик күп эҙләнгәс, китап геройҙары менән әңгәмәләшкәс, таптым мин дә һорауға яуапты. Был миңә ғүмерлек дәрес булып ҡалды. Үҫкәс, мин үҙемдең балаларыма ла аңлатырмын. Дөрөҫ йәшәргә ынтылыш – эҙләнеүҙәр, китаптар, гәзит-журналдар уҡыу аша аңыбыҙға һеңә, ә уҡымаған кешенең барыбер тормошҡа ҡарашы тар ( ***Гөлфиә ҒӘФҮРЙӘНОВА, Аҫҡын районы***).

“Оҙон-оҙаҡ бала саҡ”тағы Оло инәй образы үҙемдең өләсәйем кеүек. Алдағы ғүмеремдә лә күп ялғыштарҙан һаҡлар, күп ауырлыҡтарҙы еңергә ярҙам итер, тормошомдоң һуңғы көндәренә тиклем маяҡ булып торор, тип уйлайым. Тормош ауырлыҡтарына бирешмәй йәшәргә рухи ныҡлығы еткән ҡатын-ҡыҙ образына дан йырлай автор. Рухи яҡтан сыныҡҡан, тормош ваҡлыҡтарынан азат, тормоштоң асылын аңлап йәшәгән Оло инәйҙәргә тере һәйкәл.

“Оҙон-оҙаҡ бала саҡ”та Мостай Кәрим, яраланғас, үҙенең ғүмерен ике яр араһы менән сағыштыра. Уларҙың береһе – фанилыҡ, икенсеһе – мәңгелек икән. Ә шул ярҙар араһынан Замана үҙе аға. Кеше ғүмер баҡый ярҙы тоташтырмаҡсы булып, ағастан, таштан, тимерҙән, фекерҙән, хыялдан күпер һала.

Ошо юлдар мине тормошҡа бөтөнләй башҡа яҡтан ҡарарға, ғүмерҙең кешегә бирелгән иң ҡиммәтле бүләк икәнен, ә тормошта осраған ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығыу кешене сыныҡтырға, рухи яҡтан үҫергә булышлыҡ итеүен аңларға ярҙам итте ( ***Лиана ӘХӘТОВА, Нефтекама ҡалаһы***).

Класстан тыш уҡыу ваҡытында Гөлсирә Ғиззәтуллинаның “Бары яҙмыш булған...” тигән хикәйәһе менән танышҡандан һуң әҙибәнең ижады ныҡ ҡыҙыҡһындырҙы. Ҡала китапханаһынан уның “Тормош шау сәскәлә” тигән китабын барып алдым. Ул тиҙ арала уҡылды. Әҫәр геройҙарына ҡарап мин дә саф күңелле, кешелекле, ниндәй генә ауырлыҡтар булһа ла, көслө рухлы булып ҡалырға өйрәндем.

Бәхет... Был төшөнсәне һәр кем үҙенсә аңлай. Берәүҙәр өсөн ул аҡса менән үлсәнһә, икенселәр өсөн атай-әсәйҙең, туғандарҙың иҫән-һау булыуы. “Бәхетле булырға теләйем”, – тип әйтеүе еңелдер, моғайын. Бәхетле булыу өсөн дә өйрәнергә кәрәк бит! Көс тә, теләк тә, алымдар ҙа, дөрөҫ маҡсат та кәрәк. Әҫәрҙәге героинялар теләһә ниндәй тормош ҡатмарлыҡтарынан үҙҙәре сығыу юлын эҙләй, таба. Улар түбән тәгәрәмәй, эскесе булып урамда йөрөмәй, улар тик юғарыға үрмәләй, көслө рухлы – бына шуның менән генә лә улар бәхетле.

Гөлсирә Ғиззәтуллинаның әҫәрҙәрендәге геройҙар минең дә тормошомдағы ҡыйынлыҡтарҙы еңергә ярҙам итте. Минең өсөн дә бәхет – ата-әсәйемдең иҫән-һау, таҙа булыуында ине. Ләкин күп нәмә беҙ теләгәнсә генә килеп сыҡмай шул. Атайым кинәт кенә ауырыуҙан вафат булды, ә әсәйем ҡайғыһынан инвалид

булып ҡалды. Әсәйемде ҡарау минең елкәгә төштө. Был саҡта минең әллә ҡайҙарға китеп юғалғым, аҙашҡым килә ине. Тиҫтерҙәремдең бәхетле, ата-әсәле булыуҙарына көнләшеп ҡарай инем.

Юҡ, мин аҙашманым, юғалманым, түбәнгә лә тәгәрәмәнем. Гөлсирә Ғиззәтуллина әҫәрҙәрендәге героинялар кеүек үҙемде ҡулға алдым, бәхетле булырға ынтылдым. Бөгөн мин яҡшы билгеләренә генә уҡып йөрөйөм, дуҫтарым да күп. Тормош та минең өсөн еңеләйгән, тормоштоң “яңы биттәре” асылған кеүек тойола. Сөнки тормошта мин үҙ юлымды таптым (***Лилиә САМАТОВА, Нефтекама ҡалаһы***).

М. Кәрим әйтмешләй: “Бар тормош, һәммәһе бала саҡтан башлана. Тәүге ғүмер миҙгелендә бала ни алған, шул ғүмер буйы китә”. Мин дә, “Оҙон-оҙаҡ бала саҡ”ты уҡып, Кендек менән бергә Оло инәйҙән – кешелеклек, кеселеклелек, Әсғәттән – эскерһеҙлек, Аҡйондоҙ менән Мәрәһимдән мөхәббәткә тоғролоҡ сифаттарын үҙ иттем төҫлө.

“Ташлама утты, Прометей!” трагедияһын уҡығанда күңелгә: “Прометей, бәлки, утты әле килтермәгәндер”, – тигән уй килә. Сөнки кешеләр бер-береһенең тышҡы ҡиәфәтен күрә, тик күңелдәренең ғәриплеген һиҙмәй. Ә Мостай ағай, бәлки, ул утты ипләп кенә әҫәрҙәре аша беҙҙең күңелебеҙгә һибәлер? Донъяға баҡһаң, яңы тормош төҙөлә кеүек, тик шул уҡ сүп-сар, шул уҡ этеш-төртөш, илау-ҡыуаныстар, мөхәббәт...

Ә ни өсөн шулай һуң? Сөнки Ер шарында ниндәй генә техник прогрестар булмаһын, ниндәй генә машиналар уйлап сығарылмаһын, кеше шул уҡ кеше булып ҡала. Һаман да уйламай эш итә, ултырған ботағын быса. Эсәр һыуыбыҙ, һулар һауабыҙ ағыулана. Кеше нимә өсөн йәшәгәнен аңламай, араҡы менән ҡайғыһын йыуа, төпһөҙ өмөтһөҙлөк һаҙлығына бата. Минең уйымса, ошондай кешеләрҙе ҡотҡарыр өсөн кәрәк беҙгә Мостай Кәримдеке кеүек әҫәрҙәр (***Айгөл СӘЛӘХОВА, Нефтекама ҡалаһы***).

Әҙәбиәт бөгөн дә тормош дәреслеге булып ҡала, тип, һис икеләнеүһеҙ әйтә алам. Мәҫәлән, Н. Мусиндың “Йыртҡыс тиреһе” әҫәре. Ул йәшәү мәғәнәһе, кеше һәм кешелек яҙмышы, шәхес һәм йәмғиәт тураһында фәлсәфәүи уйланыуҙарға ҡоролған. Ғүмере буйы үҙ көсө менән йәшәгән Һолтанбай, Кинйәбайын уҡырға индереү өсөн, түрә Булашовҡа айыу тиреһе артынан йөрөп үлеп ҡала.

Талантлы яҙыусы ҙур фекерҙе, ғибрәт һәм аҡылды һиҙҙермәйенсә, “дилбегә буйы” өгөт-нәсихәт һөйләмәйенсә генә беҙҙең күңелдәргә һалып ҡуя. Әҙәбиәтте яратҡан кеше бер ваҡытта ла күңеленә насар уй килтерә алмауына ышанам (***Гүзәл ҒӘЗЕТДИНОВА, Краснокама районы***).

Әҙәбиәт беҙҙе дөрөҫ юлдан барырға, яҡшыны ямандан айырырға, бер һүҙ менән әйткәндә, йәшәргә өйрәтә (***Гөлназ БАЯНОВА, Краснокама районы***).

Минең, кескәй баланың, күңелендә “Беҙҙең өйҙөң йәме” повесындағы Йәмил исемле малайҙың эскерһеҙлеге, ихласлығы уйылып ҡалған. Йәмил һеңлеһе Оксананы шул тиклем ярата, уны бер ҡасан да йәберләмәй, ауыр һүҙ әйтмәй. Был повесть мине һеңлемә булған мөнәсәбәттәрем тураһында уйланырға мәжбүр итте. Мин үҙемә: “Мин дә һеңлемә Йәмил һымаҡ яҡшы туғанмы? Беҙҙең мөнәсәбәттәр Йәмил менән Оксананыҡы кеүек йылымы? Мин дә Йәмил һымаҡ һеңлемде һәр саҡ яҡлайыммы? Йәмил һымаҡ кәңәштәр бирә беләмме?” – тигән һорау бирҙем. Туғандар араһындағы йылылыҡ, ихласлыҡ менән һуғарылған

был әҫәр туғанлыҡтың ҡәҙерен белергә, үҙ-ара берҙәм, дуҫ булырға өндәй (***Айгөл ҒӘНИЕВА, Краснокама районы***).

Дуҫтарыма (ғөмүмән, кешелек донъяһына) шуны әйтер инем: беҙҙең әҙәби зауығыбыҙ түбән. Әйҙәгеҙ, уны үҫтерәйек. Был эштә төп сара – әҙәбиәткә ҡайтыу, уға иғтибар итеү, уның ҡәҙерен белеү (***Алһыу ВӘЛИЕВА, Краснокама районы***).

Мостай Кәрим минең өсөн Мөғжизә, тотош бер донъя. Ғалимдар, тел белгестәре уның биографияһын, ижадын өйрәнеп монографиялар, очерктар яҙҙы. Ә минең өсөн ул һәр ваҡыт сер булып ҡала. Уның әҫәрҙәрендә нисә быуын кешеләр тәрбиәләнде. Аҡйондоҙ менән мөхәббәт утында янды. Салауат менән ирек өсөн көрәште, Прометей менән ут таратты, Тәңкәбикә менән йола ҡанундарына буйһондо, Любомир менән ғәҙелһеҙлек өсөн көрәште, Оло инәй күҙҙәре менән донъяға баҡты... Һәр герой үҙе бер тарих, улар уйлап сығарылмаған, беҙҙең арала йәшәй кеүек тойола миңә. Мин улар менән бергә хисләнәм, юҡһынам, һоҡланам, кисерәм, шатланам, хатта илайым.

Көнөм төнгә әйләнгәндә, күңелем ҡояшы һүнеп барғанда миңә һәр саҡ ярҙамға килеүселәр – Оло инәй, Кесе инәй, Аҡйондоҙ, Кендек.

Оло йөрәкле Оло инәй ҡулының йылыһы һәм ҡөҙрәте кескәй Кендекте генә түгел, мине лә бөтә ғүмерем буйы тормоштоң әсе ел-ямғырҙарынан һаҡлар, ғәҙелһеҙлектәрҙән яҡлар. Хатта уның тылсымлы кеҫәһенән миңә лә кескәй генә өлөш сығыр ҙа һәм ул донъялағы иң ҡиммәтле, иң затлы, иң изге аманатҡа әйләнер кеүек. Мәрхәмәтле, зирәк, күңеленә бөтә донъя һыйған, бар нәмәне алдан тойоп һиҙгән ябай ауыл ҡатыны образында мин үҙемдең Кешемде тоям. Оло инәйҙең фатихаһынан башҡа башҡарған эштәрем уңмаҫ төҫлө. Гүйә, боронғо гректарҙың ғашиҡтарҙы яҡлаусы, ҡурсалаусы Афродита исемле илаһиәһе ул. Мәрәһим менән Аҡйондоҙҙоң һөйөүен генә һаҡламай, Кесе инәй менән үҙенең яҙмышын бүлешә. Оло инәй кеүек шәхестәр генә бөйөк Мостайҙы тәрбиәләй алалыр. Уның ябайлығы, тормошҡа ҡарашы, күңел йылыһы, аҡылы, хис-тойғолары, йәшәү тәжрибәһен кешегә бер ниндәй ҙә юғары уҡыу йорто бирә алмай. Тормоштоң ҡатмарлы, сетерекле ауыр минуттарында мосолман ҡатын-ҡыҙҙарына хас сабырлыҡ, тәрән аҡыл, йола ҡушҡанса хәл итә.

Бәләкәй Кендектең донъяһы икһеҙ-сикһеҙ, ул уны үҙенсә аңлай, кисерә, тоя, һығымта яһай. Уны йылытҡан ҡояш яҡтыраҡ, күк зәңгәрерәк, ел-ямғыр йылыраҡ, кешеләр ябайыраҡ һәм изгерәк, урамдағы малайҙар ғәҙелерәк, донъя ҡыҙығыраҡ.

Минең Аҡйондоҙға ғына арналып яҙылған хатым да бар.

“Һаумы, серҙәшем Аҡйондоҙ! Күңелемдең төбөнә, уйҙарымдың тәрәненә, йөрәгемдең түренә йәшерелгән уй-тойғоларымды, хистәремде һин генә аңлайһың кеүек. Аҡйондоҙ, мөрәжәғәтемдең сәбәбе лә шунда: Һин, Оло инәй, Мария Тереза, Зөбәржәт минең кәңәшселәрем. Рәхмәт һеҙгә.

Аҡйондоҙ! Күңелемдә, сәскә бөрөләнгән гөл кеүек, мөхәббәт яралып килә. Ул мине яңы үрҙәргә әйҙәй, быға тиклем кисермәгән тойғоларға ымһындыра, күктәргә, йондоҙҙарға саҡыра. Был хистәр һиңә лә ят түгел бит, Аҡйондоҙ! Ҡыҙҙар тауына бәйлеүән Мәрәһим һине, бәпес тотҡан шикелле күтәреп, юлһыҙ текә үргә алып менгән кеүек, минең батырым да үҙ тауыбыҙға үрләтһә ине. Сөнки, Мостай ағай әйтмешләй, “менер тауыңа үҙ ваҡытында менеп ҡалырға кәрәк”.

Аҡйондоҙҡайым! Төҫ-башың, торош-йөрөшөң, күҙ ҡарашың, хатта тауышың да серле, тылсымлы һинең. Һыуҙан ҡайтҡанда халыҡ тамаша ҡылып ҡарай, атлағанда үксәләрең ергә теймәй, Леонардо да Винчиҙың хыялынан яралған үлемһеҙ Джаконданың серле йылмайыуы кеүек йылмайыуың.

Һинең сибәрлегеңә, һылыулығыңа һоҡланып, уңғанлығыңа хайран ҡалалар. Киҫкән туҡмасың – ҡылдан нескә, иләгән йөнөң – ебәк кеүек. Бесән йыйған, ураҡ урғанда һиңә битараф ҡалған кеше юҡ. “Усыңа ҡош ҡундырып һайратыр, тының менән өрөп сәскә бөрөләре астырыр ҡатын” – һин. Был сифаттарға йөрәгендә оло мөхәббәт йөрөткән кеше генә эйә була, минеңсә.

Усман төбәгендә бесән йыйған Аҡйондоҙ менән Мәрәһимде күҙ алдыма килтерәм. Мәрәһимдең зәңгәр күҙҙәре нур сәсә, һәнәге менән бер сәнскәндә ярты сүмәләне килтереп һала. Дәртенә, ашҡыныуына сыҙай алмай ғәйрәтләнә. Ә Аҡйондоҙҙоң матур ирендәренән сихри йылмайыу китмәй.

Матурлыҡ һәм Көс, Сибәрлек һәм Ғәйрәт, Ышаныс һәм Өмөт, мөхәббәт һәм яҙмыш алыша.

Былдай хис-тойғоларҙы йөрәк түрендә йөрөткән кешеләрҙең мөхәббәте мәңгелек, бөтә ауырлыҡтарҙы еңеп, хатта әжәлдән дә өҫтөн булырға тейештәр. Минең мөхәббәтем йөрәгемде өтөп, бөтә рухымды әсир итә. Уның эргәһендә миңә ышыҡ та, йылы ла, ышаныслы ла, рәхәт тә.

Аҡйондоҙ! Һиңә мин серҙәремде астым. “Ғүмеренең аҙағына тиклем мөхәббәтенә тоғролоҡ һаҡлаған кеше иң бәхетлеһе”, – тиһең. Мин ризамын. Тик һеҙҙе айырған ҡара көстәр, хәтәр ваҡиғалар, көтөлмәгән фажиғәләр, ғәҙәттән тыш хәлдәр беҙҙе айырмаһын ине. Мәрәһимдең гармунының моңо өҙөлдө, йырланмаған йыры ҡалды. Әммә ул тоҡандырған саҡты һиңә йәшәргә көс, донъяға яҡтылыҡ ҡалдырҙы.

Һоҡланам мин һиңә, Аҡйондоҙ! Күпме ташҡындар аша, өйөрмәләр үтеп, үҙ юлыңдан бараһың! Әлбиттә, күңелең көткән, йәнең теләгән юлың ул булмаған-дыр. Хәйер, ҡайһы тарафта ниндәй һикәлтәләр көткәнен алдан белергә кешенең ҡөҙрәтенән килмәй.

Тик уға Өмөт, Ышаныс һәм Мөхәббәттән айырылырға яҙмаһын.

Һиңә ихтирам менән, Сулпан (***Сулпан ҒӘЗИЗОВА, Нефтекама ҡалаһы***).

“Әҙәбиәт тормош дәреслегеме?” тигән һорау мине тәрән уйҙарға һалды. Мин бөтә әҫәрҙәрҙе лә яратып уҡыйым, ә шулай ҙа Талха Ғиниәтуллиндың әҫәрҙәре мине нығыраҡ уйланырға мәжбүр итә. “Әсә һәм бала” хикәйәһендәге Сафия апай ҡайҙа, ниндәй хата ебәрҙе һуң? Ни өсөн уның улы Себерҙә эшләп, ауылға ялға ҡайтҡан саҡтарында ла әсәһенә ярҙам итмәй, тик эсеү менән була. Әсәһен ерләү өсөн күршеһенә аҡса ҡалдыра. Бар ғүмерен, көсөн балаһына бағышлаған әсәнең ғүмере ни өсөн шулай бөтә? Һорауҙар, һорауҙар... Тотош класс менән дөрөҫ яуап табырға тырыштыҡ. Ә минең күңелем “Эй, Хоҙайым, беҙҙең арала, минең класташтарым араһында ундай бәғерһеҙ кешеләр булмаһын ине” тип бер туҡтауһыҙ теләнө.

Талха ағай Ғиниәтуллиндың “Йонсоу көндәр” повесы бигерәк тә күңелемә шом һалды. Ике сабыйға өйҙә ашарға ризыҡ юҡ. Ҡыҙҙар ас, сөнки әсәләре фажиғәле үлгәндән һуң, аталары эскелеккә һалыша. Нимәлер табып ашау теләге ҡыҙҙарҙы еләккә барырға мәжбүр итә, һәм олоһо – биш йәшлек Гөлнара урманда аҙаша. Был нимә? Ауылдаштары был хәлде күрмәйҙәрме, әллә күрмәмешкә һалышалармы? Сабыйҙарға ҡарата ниндәй битарафлыҡ!

Гөлнараны табыу өсөн “Министр” ҡушаматлы Хафиз ҡарт ауыл буйлап кеше йыя. Ә ауылдаштары өсөн ул – “аҡылға бер төрлө” ҡарт. Ә аҡыллы ауылдаштарының ҡыҙҙы эҙләргә ваҡыты юҡ. Эйе, бөтәһенә лә Гөлнара йәл, бер кем дә уның үлемен теләмәй, ләкин уны ҡотҡарыу өсөн дә бер нимә лә эшләмәй. Был хәлде нисек аңлатырға? Кеше яҙмышына битарафлыҡмы, әллә ялҡаулыҡмы?

Беҙҙең ауылда ла шундай хәл ҡабатланһа, ярҙам итергә кешеләр табылыр инеме? Һис шикһеҙ табылыр ине! Ләкин, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, имтиханға әҙерләнгәне лә, ҡунаҡ килгәне лә, ятраҡан сериалын ҡарағаны ла булыр ине. Һуңғы ваҡытта шундай “эштән бушамаған” кешеләрҙең беҙҙең арала күбәйеүе эсте бошора, уйландыра. Бер-беребеҙгә ярҙам ҡулы һуҙырға ваҡыт тапмаһаҡ, был тормош нимә менән бөтөр? Әҫәрҙең һуңғы юлдарын уҡығас, күҙ йәштәре атылып сыҡты, йөрәгем туланы. Үҙем өсөн шундай һығымта яһаным: хәлемдән килгәнсә кешеләргә ярҙам итәсәкмен!

Әҫәр уҡығас, мин һорау артынан һорауға яуап эҙләйем икән, йөрәгем әрней, күҙ йәштәрем түгелә икән, халҡымдың тарихын өйрәнәм икән, Ҡараһаҡал, Батырша, Салауат кеүек батырҙарыбыҙға, милләтемә ҡарата ғорурлыҡ, ихтирам тойғоһо уяна икән, үҙемә аҡыл алам икән – минең өсөн әҙәбиәт – тормош дәреслеге ул. Эйе, тормош дәреслеге! (***Юлиә ҒӘЛИМОВА, Учалы районы***).

Художестволы әҙәбиәтте ҡабул итеү – әҫәрҙе уҡыуҙан алған тәү тәьҫораттарҙы аҡыл менән иңләргә тырышыу, үҙ-үҙеңә “аңлатырға” ынтылыуҙан торалыр. “Оҡшаны”, “оҡшаманы” кеүек баһалар янына “Ни өсөн оҡшаны?” һәм “Ни өсөн оҡшаманы?” һымағыраҡ һорауҙар ҡуйыла. Бында мин, тормош тәжрибәһенән сығып, тәбиғәт тарафынан бирелгән һәләтемә ҡарап фекер йөрөтә алам (***Гөлсәсәк ХӘБИБУЛЛИНА, Ғафури районы***).

Бөгөнгө кис, һәр көндәге кеүек, балалар йортонда тыныс, әйтерһең дә, улар бер-береһенән бер нимәһе менән дә айырылмайҙар. Бүлмәмдә мин яңғыҙым, бәлки, шуға ла тыныслыҡ хөкөм итәлер. Ҡулымда Мостай Кәримдең “Айгөл иле” драмаһы. Был әҫәрҙең һуңғы биттәрен уҡыйым, күҙемдән йәш бөртөктәре тама, тамағымда ниндәйҙер төйөр барлыҡҡа килгән кеүек. Үҙемә үҙем һорау бирәм: “Ниңә, Зөлхәбирә Иҙрисова, үҙ ҡыҙыңды тағы оҙаҡ йылдарға ҡалдырып китәһең, тағы ла яңы ғазаптарға һалаһың?” Юҡ, мин риза түгел, был әҫәрҙең аҙағы былай тамаланырға, Айгөл үҙ әсәһен бөтөнләйгә юғалтырға тейеш түгел.

Күҙ алдымда ниндәйҙер ҡараңғылыҡ, еңелсә башым әйләнеүен һиҙәм. Эстән үҙемә: “Юҡ, былай булырға тейеш түгел”, – тигән һүҙҙәрҙе ҡабатлайым. Ошо һүҙҙәр менән бер нисә йыл элек үткән ваҡиғаларҙы иҫкә төшөрәм.

Ҡояшлы йәйге иртә ине. Тирә-яҡта ҡоштар һайрауы, хуш еҫле сәскәләрҙең танауға бәрелеүе мине йоҡонан уятты. Бүлмәм ишеге әкрен генә асылды ла унда зифа буйлы, көләс йөҙлө һыны күренде.

“Мин шатмын, мин бәхетле, минең әсәйем бар!” – тип ҡысҡырғым килде. Тик барлыҡ был өмөттәрем тиҙ арала һүрелде. Юҡ, ул әсәйем түгел, тик тәрбиәсе апай ғына. Минең тормошомда бындай ваҡиғалар бик йыш ҡабатланды. Балалар йортона мин кескәй йәштән үк эләктем. Унда миңә тик өс йәш самаһы булғандыр. Шуға ла был йәштә әсәйһеҙ ҡалыу минең өсөн иң ауыр мәлдәрҙең береһе булды. Йылдар үтә торҙо, әсәйемде көтмәгән көндәр, төндәр булманы тиерлек. Ҡайһы саҡ әсәйемде төшөмдә лә саҡырған саҡтарым булды.

“Әсәй, әсәйем! Әсәкәйем! Һин ҡайҙа?” Әле булһа ул һүҙҙәр ҡолағымда яңғырайҙар, әсәйемде саҡыралар.

“Эй был яҙмыш, кешеләргә ниңә шундай һынауҙар ҡуя икән? Ниңә уларға еңел тормош бирмәй икән?” тигән һорауҙар башыма бер-бер артлы киләләр.

Хәҙер инде миңә 17 йәш. Мин дә, Айгөл һымаҡ, әсәйемде күрергә, уның күҙҙәренә ҡарарға, ҡосағында иркәләнергә теләйем. Етем күңеле ете ҡат тиһәләр ҙә, етемдәр ҙә бик нескә күңелле. Ни бары бер йылы һүҙ етә. Ә мин әсәйем бар көйө етем. Шулай уйлағандан һуң, әҫәрҙәге Айгөл минән күпкә бәхетлерәк тигән һығымтаға киләм. Ни өсөн тиһәң, ул әсәһен эҙләп табып, уның менән күрешеү маҡсатына ирешкән. Әсәһенең ҡайҙа икәнен дә, нисек йәшәгәнен дә һәйбәт белә. Хатта башҡа үҙен етем итеп тә тоймайҙыр, тип уйлайым. Уның туғандары ла, эске кисерештәре менән уртаҡлашыр тоғро дуҫы ла бар. Ә минең ул кешеләрем юҡ тиһәң дә була.

Минең дә балалар йортон ташлап китер ваҡытым етеп килә. Был донъяла ниҙәр көтә, нимәләр булыр, юлымда ниндәй кешеләр осрар – быларҙың береһе лә билдәле түгел. Тик мин шуны беләм: тормошта миңә бик күп һикәлтәләр аша үтергә тура киләсәк. Бары түҙемлек, тырышлыҡ менән генә мин быларҙы үтеп сыға аласаҡмын. Шуға ла мин Айгөл кеүек көслө рухлы, алдынғы ҡарашлы ҡыҙ булырға һәм үҙ хыялдарымды тормошҡа ашырырға тырышасаҡмын.

Ә хыялдарым минең тормошҡа ашасаҡ, быға мин бөтә йөрәгем менән ышанам! (***Фидалиә ШӘРИПОВА, Дәүләкән районы***).

Учалы ла, әсәкәйең дә, дуҫтарың-ауылдаштарың да, ауыл янындағы тауҙар ҙа, шишмәләр ҙә, йылға ла шағирәне юҡһына, һағына.

Ләкин Рәмзилә Хисаметдинованың шиғырҙарын уҡыған һайын, аҙыусы беҙҙең арала һымаҡ: ана Һөтләкәйҙән, усына тултырып, шишмә һыуы эсеп тора, ана Ҡалмаҡарҙың иң бейек нөктәһенә менгән дә Ирәмәлгә күҙ һалған, ана Һағынбайға еләккә китеп бара...

Рәмзилә Хисаметдинованың шиғырҙары һыуһынды ҡандыра, тыуған яҡҡа һөйөү арттыра, йәшәүгә көс-дәрт өҫтәй (***Илсур СОЛТАНОВ, Учалы районы***).

Әгәр алдыма ауырлыҡтар килеп баҫһа, Мостай Кәримдең һүҙҙәре минең өсөн йыуаныс та, таяныс та, терәк тә...

Эйе, мин дә әсәйем, атайым менән ҡай саҡ бәхәсләшеп китәм, тик мин шунда уҡ улар менән килешергә тырышам.

Бында ла М. Кәрим әҫәрҙәренең әһәмиәте барҙыр. Әсәйҙе яратҡан кеүек үк, ул Ватан-Әсәне лә яратырға өйрәтте.

*Тупраҕымдан уңдым, Башҡортостан!*
*Һин иманым минең, ҡәҙерем,*
*Күк сымылдыҡ ҡорған сәңгелдәгем,*
*Һиндә булһын йылы ҡәберем, –*

тип яҙа ул.

Мостай Кәримдең геройҙары намыҫ ҡанундары буйынса йәшәй.

“Өс таған” повесын ғына алып ҡарайыҡ. Вәзир дуҫтарын юғалтҡандан һуң, уны намыҫы менән көрәштә таба: ҡырын эштәре өсөн үкенеп йөрөй торғас, дөрөҫ юлға баҫа. Был әҫәрҙә намыҫ хөкөмө ярылып ята.

Намыҫ тураһында тағы ошондай һүҙҙәр яҙған Мостай Кәрим:

*Мин инсафлы, кеселекле булһам,*
*Намыҫымдың башы юҕары.*

*Мин маһайып, һауаланып китһәм,*
*Ул бөтөнләй ҡала юъалып.*

Шулай итеп, тормошта ниндәй генә хәлдәр булмай, тик беҙ һәр саҡ изге күңелле, әҙәпле, мәрхәмәтле булып, илебеҙ өсөн хеҙмәт итеп йәшәргә һәм ауырлыҡтарға бирешмәҫкә тейешбеҙ. Кешелек сифаттары: дуҫлыҡ, мөхәббәт, бер-береңә ярҙам, ата-әсәгә мөнәсәбәт, патриотик тойғоларға дан йырлап, Мостай Кәрим беҙҙе шуға өйрәтә лә инде.

Рәхмәт тормош дәресенә,
Рәхмәт йылы һүҙҙәргә!
Онотмабыҙ бер ҡасан да –
Һин күңелдә мәңгегә! (***Әлфирә ИСКӘНДӘРОВА, Өфө ҡалаһы, Калинин районы***).

Мөхәббәт кешене ҡанатландыра, илһамландыра, юғарыға өндәй, ваҡлыҡтарҙан азат итә.

Мин әлеге көндә 9-сы синыфта уҡыйым. Минең мөхәббәтем Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының беренсе курсында уҡый. Мостай Кәримдең әҫәрҙәренең геройҙары мине тормошомда икенсе яртымды табырға ярҙам итте һәм был мөхәббәт мине тормошта ҡанатландыра, йәшәргә көс бирә. Мин уҡыуымда алдынғылар рәтендә барам. Район буйынса үткәрелгән бөтә олимпиадаларҙа ҡатнашып, гел дә маҡтаулы урын яулайым. Мәктәптә үткәрелгән бөтә сараларҙа ла актив ҡатнашам. Яңыраҡ фольклор байрамында беҙҙең мәктәп командаһы беренселекте яуланы. Өйҙә әсәйем менән генә йәшәһәм дә, уға оло терәкмен. Мәктәптән ҡайтҡас, йүгерә-йүгерә бөтә йорт эштәрен башҡарам. Мин үҙемдең мөхәббәтем менән көн дә һөйләшеп торам, берберебеҙгә терәк булып, бер-беребеҙҙең яртыһы булып, бөтә ауырлыҡтарҙы ла еңәбеҙ. Ошондалыр мөхәббәттең мөғжизәле көсө. Мөхәббәттән өҫтөн ҡөҙрәт юҡ, унан тыш бөтә донъя, кеше үҙе юҡ. Мөхәббәт ауырлыҡтарға бирешмәҫ бер наҙлы ҡеүәт кеүек. Кешеләр! Һеҙгә лә түбәнлектәрҙән өҫтөн ҡала белгән саф оло мөхәббәт теләйем (***Фәриҙә ИБРАҺИМОВА, Миәкә районы***).

Әҙәбиәт ул, минеңсә, икенсе әсә! Эйе, икенсе әсә, сөнки ул, әсәләр беҙгә нисек итеп тәүге өндө, хәрефте, һүҙҙе әйтергә, нисек итеп яҡшыны ямандан, дөрөҫтө ялғандан айырырға өйрәтһә, әҙәбиәт тә ошо төшөнсәләрҙе беҙҙең аңыбыҙға, ҡаныбыҙға һеңдереүҙе дауам итә. Ниндәй генә ҡыйынлыҡтарға, ауыр тормош хәлдәренә эләккәндә лә уларҙы еңеп сығырға, үҙеңдә көс табырға, һәм, киреһенсә, баш әйләндергес шатлыҡтарҙы кешеләр менән уртаҡлаша белергә, бейеклектәргә күтәрелеп тә, унан нисек ҡолап төшмәҫкә икәнлекте асып бирә, аң-белем өләшә.

Бәләкәй синыфтарҙа уҡығанда уҡ Мостай Кәримдең әҫәрҙәрен яраттым. Бигерәк тә “Өс таған” повесын уҡығандан һуң, ошондағы малайҙар кеүек, үҙебеҙҙе уратып алған тәбиғәткә ниндәйҙер яҡшылыҡ эшләү ниәте менән янғанымды, нимә эшләргә тип баш ватҡанымды күрһәгеҙ. Һуңынан барыбер уйлап таптым бит, әй. Үҙемдең тыуған ауылымдағы тау аҫтында ғына сылтырап сығып ятҡан шишмәне тәрәнәйтеп, таштарын таҙартып, кәртәләп ебәргәс, ауылдаштарымдың нисек шатланыуын күреүе үҙе бер бәхет булды. Ауылдаштарым араһында абруйым артып китте, улар миңә күпләп рәхмәттәр яуҙырҙы. Ошо ваҡытта минән дә бәхетлерәк кеше юҡ ине донъяла. Ә бит эш башы Мостай Кәримдең әҫәренә барып тоташа.

“Оҙон-оҙаҡ бала саҡ” әҫәрен уҡығандан һуң, мин кеше ғүмер буйы һынала, ләкин ғүмер буйы һыналыуҙа һынатмау үҙе бер батырлыҡ тигән һығымтаға килдем. Төп геройға эйәреп, тормош юлымда ниндәй генә ҡаршылыҡтар осраһа ла баш эймәй, ауырлыҡтарҙан сығыу юлдарын эҙләп, һынатмай гел алға барырға үҙ-үҙемә һүҙ бирҙем.

Әлфиә исемле ҡыҙ тураһында хикәйәләрҙе уҡып сыҡҡас инде, бөтөнләйе менән хайран ҡалдым. Яҙыусы нисек оҫта итеп ҡыҙҙарҙы, уларҙың характерын асып биргән. Хәс тә минең игеҙәк һеңлеләрем, ҡылыҡтары, үҙ-үҙҙәрен тотоштары ла тап уларҙыҡы тиерһең, тик исемдәре генә башҡа. Был әҫәр ҙә шул тиклем оҡшаны, хатта Ләлә менән Ләйләгә ҡысҡырып уҡып та сыҡтым. Улар ҙа бер ни тиклем ҡылыҡтарын үҙгәртеп ебәрҙе. Бына ниндәй тылсымлы көскә эйә минең яратҡан яҙыусыларымдың әҫәрҙәре (***Рәмил ХӘЖИЕВ, Мәсетле районы***).

Күңелде ҡырған әйберҙәр тураһында ла әйтеп үтеү кәрәктер. Һуңғы ваҡытта “БСТ” каналынан ҡарап, “Тамаша” журналын уҡып йәки башҡа сығанаҡтарҙан драма әҫәрҙәре менән танышҡас, күңел ҡырыла.

Миҫал өсөн “Эй, ағай, мине тереләй үлтермә!” тигәнсе, бәлки: “Эй, ағай, мине тереләй ҡәбергә күммә” тиһәк, дөрөҫтөр?

Күңелде ҡырған һүҙҙәр күберәк халыҡты көлдөрөү, иғтибар йәлеп итеү өсөн (бысраҡ әрләшеү, варваризмдар), бәлки, кәрәктер (әгәр пьеса, драма әҫәре башҡа юл менән күңелде яулай алмаһа), ләкин сама ла булырға тейештер. Геройҙарҙың һүҙ байлығы ярлыланған, һүрәтләү саралары әҙ ҡулланылған, күберәк хәрәкәт ярҙамында, жаргон һүҙҙәр менән тулған драма әҫәрҙәре әлбиттә, мине, уҡыусыны, ҡәнәғәтләндермәй. Беҙ һүҙ сәнғәте аша һөйләшергә, яҙырға ғына түгел, күңел матурлығына, кешеләр күңеленә иғтибарлы булырға, үҙебеҙ менән булған хәлдәрҙе анализларға өйрәнәбеҙ түгелме?

Минеңсә, тик художестволы әҙәбиәт аша ғына һүҙ сәнғәтенә өйрәнә, телебеҙҙең бәҫен күтәрә алабыҙ. Тимәк, художестволы әҙәбиәт тә юғары кимәлдә, беҙ өйрәнерлек, өлгө алырлыҡ булырға тейеш (***И. БАЙҒУСҠАРОВА, Миәкә районы***).

Һәр әҙәби әҫәр тәрбиә сығанағы булған кеүек, туған тел һәм әҙәбиәт дәрестәре лә – тәрбиә мәктәбе ул.

Мифтахетдин Аҡмулланың “Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!” шиғырын бәләкәй саҡтан уҡ яттан беләм. Шиғыр бөтә башҡорттарға өндәмә рәүешендә яҙылған. Әммә мин уны тик үҙемә төбәп яҙылғандай ҡабул итәм, һәр һүҙенә оло мәғәнә һалам. Һәр һүҙен ҡат-ҡат ҡабатлайым һәм яңынан-яңы кәңәш асылдарын аңлай барам. “Наҙанлыҡтан ҡурҡыу кәрәк”, “уҡығандар күктә осор”, “ырыҫ, дәүләт шишмәһе асылыр”, “белемлелек – арыҫландай көслө батыр...” Ҡайһылай хаҡ һүҙҙәр! Күңел һалып уҡыһаң, һәр һүҙенән шағир кәңәше моң булып түгелә.

Әҙәбиәт – тормош дәреслеге, тәрбиә мәктәбе икәнлегенә ышанысыбыҙҙы юғалтмайыҡ, милләттәштәрем. Китап – белем шишмәһе, тигән ҡанатлы һүҙҙәрҙе онотмайыҡ! Китапта, әҙәби әҫәрҙәрҙә тупланған рухи йәдкәрҙәребеҙҙе өйрәнәйек. Киләсәк быуындарға тулы һәм саф килеш еткерәйек! Юғары зауыҡлы, алдынғы ҡарашлы булып үҫәйек, дуҫтар! (***Илүзә ШӘРИПОВА, Йылайыр районы***).

Мөхәббәт... Был илаһи тойғоно данлап ер йөҙөндә ниндәй генә әҫәрҙәр ижад ителмәгән? Мостай Кәрим ижады, мөхәббәте минең өсөн үҙе бер донъя.

Мәрәним һәм Аҡйондоҙ, Аҡйегет һәм Зөбәржәт, Прометей һәм Агазия, Любомир

һәм Тереза... Мостай менән Рауза. Эйе, эйе. Шағирҙың үҙенең мөхәббәте, ихлас һөйөүе...

Шулай ярата алған кеше генә шундай мөхәббәтле образдар тыуҙыра алған, ҡатын-ҡыҙҙың гүзәллеген данлаған. Аҡйегет менән Зөбәржәттең фажиғәле һөйөүе мөхәббәткә тоғролоҡто, азатлыҡҡа ынтылышты данлай. Улар – ғорур, батыр заттар, рухтары көслө һәм һуңғы һулышҡа тиклем бер-береһен өҙөлөп яраталар (***Фәзинур АЛҒЫШАЕВ, Йылайыр районы***).

Милләт яҙмышы тураһында яҙмаған яҙыусы юҡтыр, бәлки. Минең уйлауымса, был тема һәр ваҡыт үҙәктә торҙо. Һәр әҫәрҙең тәрбиәүи әһәмиәте бар. Әҙәбиәт ул кеше тәрбиәләүҙә бик ҙур роль уйнай.

Әҙәби китаптар бик аҙ уҡыла. Шуның өсөндөр инде “яңы быуат йәштәре”нең ҡараштары ла икенсе, ҡылыҡтары ла элекке менән сағыштырғанда бик үҙгәргән. Йәштәр үҙҙәренең әҙәби тәрбиәһен Интернет селтәренә алмаштыра. Минең уйлауымса, һәр кеше үҙенең тормошон үҙе төҙөй, шул уҡ ваҡытта ул үҙ фекере менән генә йәшәмәй, ә тирә яҡты, яңылыҡтарҙы, үҙгәрештәрҙе ҡабул итеп йәшәй. Бында инде әҙәбиәтебеҙҙең роле лә бик ҙур.

Уйланыуҙарымдан ошондай һығымта яһайым: әҙәбиәт – ул беҙҙең төп рухи байлығыбыҙ. Беҙ уны яратырға, һаҡларға тейешбеҙ. Ул беҙҙе тәрбиәләй, тормошҡа ҡараш тыуҙыра, барлыҡ кәрәк нәмәләргә өйрәтә. Әҙәбиәт беҙҙең тормош һабағыбыҙ. Мин үҙемдең тормошомдо әҙәбиәтһеҙ күҙ алдына килтерә алмайым. Шуның өсөн әҙәбиәтте тормош дәреслеге тип әйтә алам (***Я. ЙӘҒӘФӘРОВА, Миәкә районы***).

Аҡмулла... Был исем күптән инде башҡорт шиғриәтенең сағыу йондоҙҙарының береһенә әүерелгән. Халҡыбыҙ аңында ул иң яҡты идеалдарға, юғары шиғриәткә тоғролоҡ символы дәрәжәһенә күтәрелгән. Шуға ла беҙ Аҡмулла тигәнде ысын шиғриәт тип ҡабул итәбеҙ. Аҡмулла башҡорт шиғриәтенә генә түгел, ә илебеҙҙең төрки телле әҙәбиәттәренә, бигерәк тә ҡаҙаҡ, татар һәм башҡа халыҡтар поэзияһы үҫешенә лә һиҙелерлек йоғонто яһаған. Шуға ла Салауатан һуңғы XIX быуат дәүерендә иң элек һәм иң беренсе ошо һоҡланғыс гуманист шағирҙы бөтмәҫ-төкәнмәҫ мөхәббәт тойғоһо менән иҫкә алалар.

*Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк,*
*Арабыҙҙа наҙандар күп, уҡыу һирәк.*
*Аңъыра айыуҙан Уралдағы ҡурҡҡандай,*
*Эй туғандар, наҙанлыҡтан ҡурҡыу кәрәк!*

Ни тиклем көслө психологизм һәм тәрән драматизм был һүҙҙәрҙә! Уҡыусы күңелендә ҡурҡыныс ассоциация тыуҙырыла, аңғыра айыуҙан ҡурҡып, тетрәнеп киткән уҡыусы аңына наҙанлыҡтың яһиллыҡҡа, афәткә алып киләсәген теҙеп әйтеп бирә лә, кешелек шишмәһен асырға теләүселәргә берҙән-бер әмәл бар, ул да булһа – ғилем-һөнәр тип ныҡлы итеп раҫлап ҡуя. Ә әҫәрҙең һуңғы строфаһы – ысын мәғәнәһендә афористик ижад, классик шиғриәт өлгөһө:

*Алтыға берҙе ҡушып, һан ун булмай,*
*Сәғәтте алға бороп, төн көн булмай.*
*Белемлелек – арыҫландай көслө батыр,*
*Шуға атланмай, һинең төшөң һис өн булмай.*

(***Ләйсән ФӘХРЕТДИНОВА, Учалы районы***).

Һаумы, Мостафа олатай! Олатай тимен, сөнки һеҙ миңә был гүзәл тәбиғәтле Башҡортостанды, уның ғорур тауҙарын, сылтырап аҡҡан шишмәләрен бүләк

итеүсе иң яҡын кешем. Һеҙгә хат яҙа һеҙҙең героиняғыҙ, Айгөл. Аптырап ҡалдығыҙмы? Был мин бит, Һеҙ иркәләп, наҙлап-һөйөп ижад иткән Айгөл. “Айгөл иле” драмаһының төп героиняһы мин. Әгәр миңә әсәйем яҡты донъяны бүләк итһә, һеҙ мине китап биттәрендә тыуҙырҙығыҙ, бөтә донъяға таныттығыҙ. Миндә кешелек хистәрен уяттығыҙ. Миңә йән өрөүегеҙ, тәүге саф тойғоларҙы, хатта илау-ярһыуҙарҙы бүләк иткәнегеҙ өсөн оло рәхмәтемде белдерәм.

Мостафа олатай, ни өсөн һеҙ мине һәм “Беҙҙең өйҙөң йәме” повесынан Оксананы йәшләй генә етем ҡалдырҙығыҙ? Ни өсөн әсә наҙынан, әсә һөйөүенән айырҙығыҙ? Әгәр Оксананың әсәһе ваҡытһыҙ һәләк булған икән, ул артабан яҡшы башҡорт ғаиләһенә килеп юлыға. Бында ул үҙенә икенсе әсәй таба. Ә минең әсәйем, Зөлхәбирә, һуғыш ваҡытында ғәйеп була. Мин унының ҡайҙа икәнлеген дә белмәнем. Ни өсөн һеҙ мине әсәнән айырҙығыҙ, ниңә минең яҙмышымды ҡайғыға, һағышҡа төрҙөгөҙ? Минең яҙмышым бит һеҙҙең ҡулда ине, һеҙ бөтәһен дә үҙгәртә ала инегеҙ…

Әсәйем бер нисә тапҡыр фашист ҡоллоғонан ҡасҡандан һуң Пиккионы осрата... Шунан алып минең күңелем тынғы тапманы. Пиккиолы булғас, ул мине онотҡандыр, иҫенә лә төшөрмәйҙер әле, тип уйлағайным. Ләкин әсәйем ҡайтып төшкәс, шатлығымдың сиге булманы. Әсәйем үҙгәргән ине. Сит илдә яҡшы итеп йәшәп яталар икән. Италияла ике балам бар тигәс, йөрәгем тағы ла әрнене, тағы ла әсенде. Пиккио менән әсәйем мине сит илгә, Италияға, бөтөнләй таныш булмаған ят илгә, ғүмерлеккә алып ҡайтырға килгәнен ишеткәс, йөрәгем уртаға ярылырҙай булды. Мин ике ут араһында ҡалдым. Нисек кенә мин үҙемдең тыуған йортомдо, ауылдаштарымды, тыуған илкәйемде, Йәғәфәр олатайымды һәм Ричардты ташлап китәйем? Нисек кенә мин ул илдә тыныс йәшәрмен инде? Әсәйемде Башҡортостанға күсеп килеүҙәрен өгөтләргә иткәйнем дә, ләкин өлгөрә алманым. Һеҙ минең яҙмышты икенсе яҡҡа бороп ебәрҙегеҙ. Әсәйем менән Пиккио Италияға ҡайттылар. Ә мин күҙ йәштәрен йота-йота тороп ҡалдым. Бейек тау башына менеп, улар күҙҙән юғалғансы ҡараным да ҡараным... Әсәйһеҙ йәшәүҙәре бигерәк ҡыйын шул... (***Илүсә БИКМӨХӘМӘТОВА, Йылайыр районы***).

Мостай Кәрим... Бөйөк шағир үҙ әҫәрҙәре менән заманыбыҙҙың Талант символына әүерелде. Унының ижады менән таныш булмаған кеше юҡтыр. “Те яҡҡамы, бы яҡҡамы?” тип, аптырап ҡалған Әлфиә, үҙ тыуған ерен әсә наҙынан өҫтөн күргән саф күңелле Айгөл, украин ҡыҙын өй йәменә тиңләгән Йәмил, үлгәндә лә мөхәббәттәренә тоғро ҡалған Аҡйегет менән Зөбәржәт, ергә ут килтереүсе Прометей – ҡайһы образды алһаң да, уларҙан һибелгән нурлы изгелек тулҡындары һәр кемдең күңеленә үтеп инә (***Гөлназ ҒӘҘЕЛШИНА, Ғафури районы***).

Оксана ла, бала ғына булһа ла, түҙемле, сабыр ҡыҙ. Ул йәшәгән йортон, әсәһен юғалтыуға ҡарамаҫтан, Йәмилдең әсәһен илап йонсотмай, ә тыныс ҡына ят ғаиләлә йәшәүен дауам итә.

Мин дә 12 генә йәшемдә атайымды юғалттым. Минең ҡайғыларымды әйтеп тә бөтөрөрлөк түгел ине. Ләкин мин, үҙемдә ниндәйҙер эске көс табып, әсәйемә терәк булырға, уны бушҡа ғына ҡайғыртмаҫҡа, борсомаҫҡа тырышам.

Ғөмүмән, был донъяла рух ныҡлығы, түҙемле, сабыр булырға кәрәк. Шул ваҡытта ғына кеше бәхетле ғүмер итәсәк һәм йәшәйеш алға китәсәк (***Ләйсән БАЯЗИТОВА, Ғафури районы***).

Мостай Кәримдең ҡайһы ғына әҫәрен алып уҡый башлаһам да, минең алда яңы тормош асыла. Мин инде уның ижад донъяһына барып инәм: унда бөтөнләй икенсе тормош, икенсе һулыш, образдар икенсе... Сөнки мин үҙем дә шул донъяға инеп китәм һәм улар менән бергә йәшәй башлайым, шуға күрә мин уларҙы аңлайым. Әҫәрҙе уҡып бөткәс, мин үҙемде тормоштоң ниндәйҙер бер баҫҡысына күтәрелгәнлегемде, бер башҡа үҫкәнлегемде тоям. Тормошҡа ла икенсерәк ҡарай башлайым. Ундағы көндәлек мәшәҡәттәр, ығы-зығы һәм башҡа проблемалар бәләкәсәйеп ҡалғандай була, кеше араһындағы мөнәсәбәттәрҙең мөһимлеген аңлайым. Сөнки мин өләсәйемдең һабаҡтарын тыңлап йә телевизор экранына текәлеп кенә ултырмайым, ә уның әҫәрҙәренең геройҙары менән бергә булам, улар кисергәнде кисерәм, улар тойғанды тоям, күп нәмәне аңлайым, тәжрибә туплайым. Мине инде тормош ауырлыҡтары ҡурҡытмай, сөнки уларҙы нисек еңергә, һикәлтәләр аша үтергә, кемдәрҙән ярҙам һорарға, ә кемдәргәлер ярҙам ҡулы һуҙырға кәрәклегенә төшөнәм.

“Һәр яҙыусы – халҡының пәйғәмбәре”, – тигән Мостай Кәрим. Мин уның менән килешәм, сөнки ул үҙе миңә пәйғәмбәр кеүек. Уның геройҙары минең яҙмышымды билдәләйҙәр, миңә маяҡ булып торалар.

“Күкрәгемдән ҡоштар осорам”, – тип яҙа ул бер шиғырында. Уның ҡоштары – күкрәгенән ҡанатланып сыҡҡан әйтер һүҙҙәре. Ул һүҙҙәр көсһөҙҙәргә көс, өмөтһөҙҙәргә өмөт өҫтәй, яңғыҙҙарға иптәш, ғашиҡтарға мөхәббәт алып килә, әсәләргә түҙемлек, ирҙәргә рух ныҡлығы бирә.

Былдай әҫәрҙәрҙе тик тормоштоң әсеһен-сөсөһөн татыған, ғүмерҙең ҡәҙерен белгән, ләкин башҡалар өсөн үҙ ғүмерен йәлләмәгән яҙыусы ғына ижад итә ала (***Миңһылыу ЯХИНА, Ғафури районы***).

Әҙәби әҫәрҙәр беҙҙең киләсәктә була торған бәлә-ҡазаларҙан да, насар ғәҙәттәрҙән дә аралай, беҙҙе йәшәргә өйрәтә. Юҡ, ул беҙгә ҡоро өгөт-нәсихәт кенә бирмәй, ә ҡыя атып, тура тигеҙә (***М. АЛҒОШАЕВА, Йылайыр районы***).

Оло инәй образында мин үҙемдең өләсәйемде күрҙем. Минең дә кескәй саҡтан тормош көмбәҙендә нур һибеп тороусы ҡояшым – өләсәйем булды. Ғүмеремдә мине беренсе тапҡыр етәкләп алған ҡул – уның ҡулы булды, тәүге әйткән һүҙем – “өләсәйем” ине. Ул мине үҙенең аҡылы, сабырлығы, һүҙен үлсәп кенә һөйләүе, барыһына ла тигеҙ ҡарауы, тыныс холҡо менән һаман да таң ҡалдыра.

Кескәй ваҡытта булған бер ваҡиға хәтерҙә ҡалған. Беҙ, бер төркөм бала-саға, нимәгәлер пыр туҙышып һуғышабыҙ. Шул саҡ өләсәйем килеп сығып беҙҙе айырҙы ла:

– Бер ваҡытта ла үҙ-ара туҙышмағыҙ. Һеҙ – туғандар. Ә бер-берегеҙҙе үҙ туғандарығыҙ яҡлашмаһа, яттарға һеҙ ниңә кәрәк? – тигәйне. Бер ҡараһаң, ябай ғына һүҙҙәр, ә бит беҙҙең шунан һуң хатта үпкәләшкәнебеҙ ҙә юҡ!

Мостай Кәримдең Оло инәһе лә бит ошондай уҡ тормош дәресен кескәй балаларға ғына түгел, ә йәшәрен йәшәгән ил ағаһына, Искәндәр ҡартҡа, ҡарата бирә. Әсғәт менән Ибрай үгеҙҙең ҡойроғон өҙҙәрөп, Искәндәр ҡарттан туҡмалғас, Оло инәй түҙеп тормай:

“– Иманың бармы һинең?! – Ул Әсғәттең буй-буй булып ҡан һауған арҡаһын асып күрһәтте. – Йыртҡыс һин. Улай тиһәң, йыртҡыс та үҙ балаһын был тиклем үк иҙеп, имгәтеп ташламаҫ. Һин унан да ҡанһыҙыраҡ. Хоҙайҙан ҡурҡмаһаң, әҙәмдән оялыр инең. Былай булғас, һинең мәсеттән сыҡмай намаҙ уҡыуың ҡороһон!”

Бер ваҡиға иҫкә төштө. Мин ул саҡта яңы ғына уҡырға төшкән инем. Беҙҙең күршеләрҙең уҫал, ажғырып торған эттәре бар ине. Беҙ, түбән ос балалары, барыбыҙ ҙа унан шул тиклем ҡурҡа торғайныҡ. Тик бер осор уның лауылдап өрөүе лә, ажарланып сыйнауы ла ишетелмәй башланы. Мин күршеләрҙең ишек алдына күҙ һалдым. Ә унда, ҡояш йылыһына иркәләнеп кенә, бәләкәй генә көсөктәр ята. Ә эт үҙе, барлыҡ яуызлыҡтарын юҡҡа сығарып, уларға шул тиклем яратып текләгән. Мин оҙаҡ күҙәттем уларҙы. Аҙаҡ төштөм дә өләсәйемә ошо турала һөйләнем. Ә ул миңә:

– Ҡыҙым, эскерһеҙ һөйөү – ул бөтә яуызлыҡты юҡҡа сығара, – тине (***Наҙгөл ҒӘЛИЕВА, Мәләүез районы***).

Беҙҙең ауылда иң ҙур урам Динис Бүләков исемен йөрөтә, мин дә шул урамда йәшәйем. Өйөмдөң тәҙрәләре көнсығышҡа сыға. Ҡояштың тәүге нурҙары иң беренсе ошо тәҙрәләргә төшә. Өй эсенә яҡтылыҡ, йылылыҡ тарала. Иртә таңда мине наҙлаған кеүек, ҡояш нурҙары, моғайын, Динис ағайҙы ла иркәләп уятҡандыр. Яҙ миҙгелендә булған бар матурлыкты, йәшеллекте, сафлыҡты, күҙ еткәс, ҡойолған тәңкә-тәңкә япраҡтар алтынынан ул да, минең һымаҡ, һоҡланғандыр, ҡыуанғандыр. Тап ошо матурлыҡ буласаҡ яҙыусыны хисләндергәндер, илһамландырғандыр. Мин көн дә ул йөрөгән урамдан, һуҡмаҡтан ғорур атлап үтәм, донъяға Динис ағайҙың күҙҙәре менән ҡарайым, ул күргән, һоҡланған хозурлыҡҡа табынам... (***Гүзәлиә ҠОТЛОБАЕВА, Мәләүез районы***).

Беҙ 8-се синыфта Талха Ғиниәтуллиндың “Әсә һәм бала”, “Мәтрүшкә еҫе” кеүек әҫәрҙәре менән таныштыҡ. Был әҫәрҙәрҙә әсә һәм бала мөнәсәбәте яҡтыртыла. Икеһендә лә әсәләрҙең балалары өсөн өҙөлөп, улар өсөн йәнен бирергә әҙер тороуы һүрәтләнә. Ә балалары ни менән яуап бирә һуң? “Мәтрүшкә еҫе”ндәге Хәйбулла әсәһен үҙ өйөндә тәрбиәләп ҡарай, ә “Әсә һәм бала”лағы Сафия апайҙың берҙән-бер улы әсәһен үҙе ҡарау түгел, эргәһенә лә бик һирәк ҡайта. Ҡайтҡан саҡта ла ярҙам итеү урынына, ауыл ҡыҙырып, аҙаҡҡы тиненә тиклем эсеп йөрөй ҙә, әсәһенең пенсия аҡсаһына кире китә. Шулай булһа ла, әсә ғүмеренең һуңына тиклем тәҙрә төбөндә ултырып улын көтә. Уға ошо улын аяҡҡа баҫтырыу өсөн ниҙәр генә күрергә тура килмәй... Шуның өсөн Сафия ла бәхетле ҡартлыҡҡа хаҡлы, бик хаҡлы. Үкенескә ҡаршы, беҙҙең арала ла ошондай күренештәр осрап тора. Хан һарайындай, ике ҡатлы өйҙәрҙә йәшәп тә, әсәләренә бер мөйөш йәлләгәндәр бар әле арабыҙҙа. Бәләкәй генә, ҡыҫыҡ өйҙә йәшәһәләр ҙә, әсәләренең урыны һәр саҡ түрҙә булып, уларҙы хөрмәтләп тәрбиәләгәндәр ҙә бар, әлбиттә. Халыҡ: “Ни сәсһәң, шуны урырһың”,– тип бик дөрөҫ әйткән. Иманым камил: тәүгеләрен ҡартлыҡ көндәрендә шундай уҡ ауыр ҡартлыҡ, икенселәрен – балалары менән сөкөрҙәшеп, бергә-бергә ҡыуанышып йәшәү көтә (***Гөлназ СӘҒИТОВА, Мәләүез районы***).

Мин туған телемдә һәм рус телендә яҡшы итеп һөйләшә, аралаша белеүемде китап уҡырға яратыуыма ла бәйләйем. Китап уҡыған һайын, кешенең һүҙ байлығы арта, һөйләшеү-аралашыуы еңелләшә. Улай ғына ла түгел, яҙыуындағы, һөйләмендәге хаталары бөтә.

Күп ваҡыт, кешеләр араһында булғанда, уларҙың һөйләшеүенә иғтибар итергә тура килә. Туған телендә лә дөрөҫ итеп һөйләшә алмайынса, руссаһын күпләп ҡыҫтырып “һөйләшергә тырышҡан” заттарға тап булаһың. Был күренештән

берсә ҡыҙыҡ, берсә ҡыҙғаныс булып китә. Ә нимәнән килә һуң былдай һөйләш? Яуап ҡыҫҡа: әҙәбиәт менән дуҫ булмағанлыҡтан.

Һүҙ сәнғәтенә өйрәнеүҙең башҡа юлдары ла бар бит. Мин ауыл клубы сәхнәһендә яңынан, бынан ете-һигеҙ йыл элек ҡуйылыуҙан туҡтаған сәхнә әҫәрҙәре тергеҙелһен ине тип теләйем. Минең әле лә хәтеремдә (ул саҡта бәләкәй ҙә булғанмын инде), байрам һайын, беҙ ғаилә менән клубҡа пьесалар, концерттар ҡарарға йөрөй инек. Ул үҙе бер байрам була ине – бөтә ауыл кешеһе клубта, хатта баҫып ҡарағандары ла күп ине. Ә ҡайтҡас, бөтә һүҙ шул турала ғына...

Эйе, ауылда минән бәләкәйерәктәр былдай күренештәрҙе бөтөнләй күргәне юҡ. Ярай әле мәктәптәрҙә беҙ төрлө байрамдар уҙғарабыҙ, концерттар, пьесалар ҡуябыҙ. Шиғыр бәйгеләре үткәрәбеҙ, төрлө осрашыуҙарҙа ҡатнашабыҙ... (***Рәдиф ФӘТХИЕВ, Борай районы***).

“Хәтирәләр” китабын уҡығас, минең тормошомда өр-яңы дәүер башланды, донъяға ҡарашым үҙгәрҙе. Өлгө алырлыҡ шәхестәр булыуы ла бәхет бит ул аңлаған кешегә. Мин үҙемдең дөрөҫ юлдан барғанымды күңелем менән тойғанмын. Бәләкәй генә ауылда тыуып үҫһәм дә минең ҙурыраҡ мәктәптә яҡшыраҡ уҡытыусыларҙан төплө белем алғым килгәйне. Шуға ла мин 9-сы класҡа Үрге Йәркәйҙәге гимназияға уҡырға килдем. Киләсәктә хыялым – күп телдәр өйрәнеү, үҙ туған халҡымдың телен, мәҙәниәтен, тарихын өйрәнеүҙе камиллаштырыу, ныҡлап инглиз телен өйрәнеп, юғары уҡыу йортонда ла шул телде өйрәнеүҙе дауам итеү. Миңә бер ниндәй ҡаршылыҡтар, ҡыйынлыҡтар ҡурҡыныс түгел. Сөнки Ә. Вәлидиҙең тормошо, белемгә ынтылышы, кешеләр менән мөнәсәбәте минең киләсәктәге хыялдарымдың тормошҡа ашырына өмөттәр уята. Бәлки, миңә лә сит илдәрҙә йәшәргә тура килер, шуға инглиз телен һыу кеүек эсергә кәрәк. Әммә тыуған йортомдо, үҙем уҡыған мәктәбемде, Башҡортостанымды бер ҡасан да онотмаясаҡмын.

Сит илдәргә сыҡһам, үҙемде халҡымдың лайыҡлы ҡыҙы итеп күрһәтәсәкмен. Халҡымдың матур йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре, йырҙары, тарихы менән таныштырасаҡмын. Әхмәтзәки Вәлиди Туған нисек үҙенең ҡурайын ташламаған, йырҙарын һәр саҡ иҫтә тотҡан, мин дә шулай буласаҡмын. Шуға ла исеме тыуған илебеҙгә әйләнеп ҡайтты. Йәштәр белем алһын тип васыят әйткән ул. Йәштәрҙең уҡыуын, уларҙан ғилем һәм техника белгестәрен әҙерләү менән шөғөлләнеүҙе, дин һәм телебеҙҙе һаҡларға ғәйрәт сарыф итеү кәрәклеген әйтеп ҡалдырған (***Ленара САФИНА, Илеш районы***).

Илгизәр Бураҡаевтың “Башҡорт көсө” әҫәре бала саҡтан туғанлыҡ ептәрен өҙмәй, фәҡәт нығытырға, үҙ-ара татыу һәм берҙәм, ауырлыҡтар килгәндә таяныс һәм терәк булырға өйрәтә. Туғанлыҡ көсө ҙур ҡөҙрәткә эйә. Беҙҙең атай-олатайҙарыбыҙ туғанлыҡ ептәрен тоташтырыусы шәжәрәне иң изге ҡомартҡы итеп һанауы, күҙ ҡараһылай һаҡлауы, быуындан-быуынға аманат итеп тапшырыуы юҡҡа түгел ***(Эльвина ШӘЙМӨХӘМӘТОВА, Балтас районы).***

## «МИН КӨСӨМДӨ АҠТЫҒЫНА ТИКЛЕМ БИРЕР ИНЕМ ҒӘЗИЗ ХАЛҠЫМА»

*(Әкрәм Бейештең тыуыуына 85 йыл)*



1976 йылда ижад иткән «Нишләр инем икән булһа миндә…» тигән шиғырында Әкрәм Бейеш шулай тип яҙа. Тәү нәүбәттә телсе-ғалим булыу менән бер рәттән, ул башҡорттарҙың боронғо тарихын өйрәнеп, ҡағыҙға төшөрҙө, шиғырҙар яҙҙы, теҙмә әҫәр жанрында ла әүҙем эшләне. Ағайымдың халҡыбыҙға, башҡорт тел ғилеменә ҡалдырған төп мираҫы булып милли донъябыҙҙа XX быуатҡа тиклем булмаған «Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге»н атарға кәрәк. Уның ике томы 1993 йылда Мәскәүҙә донъя күрҙе. Был эшкә башҡорт телселәренән беренсе булып тотонған Әкрәм Бейеш тәүҙә һүҙлектең картотекаһын төҙөй, принциптарын, фәнни нигеҙҙәрен эшләй. Шулай итеп, ул өр-яңы хеҙмәттең етәксеһе, идеологы һәм тәүге мөхәррире лә була.

Арҙаҡлы ғалим Әкрәм Ғибаҙулла улы Бейешев 1926 йылдың 16 апрелендә хәҙерге Күгәрсен районының Туйөмбәт (Байулы) ауылында уҡытыусы ғаиләһендә тыуа. Атайым Ғибаҙулла Бейешев – заманының алдынғы уҡытыусыһы, тынғыһыҙ йәмәғәт эшмәкәре, тарихсы һәм крайҙы өйрәнеүсе. Ул үҙенең биш балаһына ғына түгел, үҙе мәғрифәт нуры өләшкән ауыл йәштәренә лә арымаҫ-талмаҫ тәрбиәсе дәрәжәһенә күтәрелгән шәхес. Беҙгә юғары белем биреү өсөн атайым күп көс һалды, аранан икебеҙ күренекле ғалим булып китте. Әкрәм ағайым үҙенең өр-яңы ҡараштан сығып яҙылған хеҙмәттәре менән халҡыбыҙ алдында танылыу яуланы.

Кешенең ғүмере оҙонлоғо менән түгел, ә фани донъяла башҡарған эштәре менән баһалана. Ул халҡына ысын күңелдән хеҙмәт иткәнме, әллә ғүмере буйы хыянат-яуызлыҡ ҡылғанмы – бөтәһенә лә халыҡ шаһит. Шуға ла яуызлыҡ ҡылһаң да, изге ғәмәл башҡарһаң да халыҡ үҙ фекерен әйтә: йә рәхмәт уҡый, йә нәфрәтен белдерә. 1986 йылда ижад иткән бер шиғырында Әкрәм ағай:

*«Башҡорт шәме бысҡып һүнмәҫ борон,*
*Балҡып китһен өсөн яңынан*
*Мин башланым яңғыҙ көрәш йырын,*
*Көс алып ҡорбандар ҡанынан», –*

тип яҙа. Ул үҙенең бөтә аңлы ғүмерен халҡына хеҙмәт итеүгә бағышланы, тиһәм, һис кенә лә арттырыу булмаҫ. Ағайым башҡорт халҡының тарихын барлыҡ сығанаҡтар аръҡылы ныҡлап өйрәнеү һөҙөмтәһендә батша, большевиктар фирҡәһе сәйәсәтенә ҡарата үҙенең ҡарашын ҡыйыу әйтеүҙән өркмәгән сәйәсмән дә. 1991 йылда «Йәшлек» гәзитендә уның «Милләт һәм милли сәйәсәт» тигән бөтөнләй икенсе принциптан, мәкерле колонизация ҡорбаны булған халыҡ улы күҙлегенән яҙылған тәрән фекерле, үткер йөкмәткеле хеҙмәтенән өҙөк, ә 1995 йылда

Мәскәүҙә ул күләмле хеҙмәт урыҫ телендә донъя күрҙе. Рәсәйҙә милли телдәр өлкәһендә ныҡлы урынлашҡан сәйәсәткә ҡарата ҡарашын автор түбәндәгесә белдерә: «Береһе урыҫ булған ике телде белеү халыҡтар араһында дуҫлыҡты үҫтереүгә булышлыҡ итә һәм милли телдәрҙең ирекле үҫешен, уларҙың урыҫ теле менән килешеп йәшәүен тәьмин итә, тигән фәлсәфә һатыуҙарҙың бер ниндәй ҙә нигеҙе юҡ. Ҡәтғи сикләнгән шарттарҙа эш иткән, ҡулланыу даирәһен тарайта барырға мәжбүр булған милли телдәр бөтә матди етештереү һәм ижтимағи өлкәләрҙе баҫып алған урыҫ теле менән тигеҙ шарттарҙа йәшәү һәм үҫеүгә һәләтһеҙ». Миҫал эҙләп әллә ҡайҙа мөрәжәғәт итергә кәрәкмәй. 2000 йылда Башҡортостан Республикаһы Конституцияһында урыҫ теле менән бергә дәүләт теле итеп нығытылған башҡорт теленең һаман да үҙ статусы дәрәжәһенә күтәрелмәүен, тимәк, конституцион бурыстарын үтәй алмауын башҡаса аңлатыу мөмкин түгел.

Артабан ошо уҡ хеҙмәтендә Әкрәм Бейеш тағы ла ҡыйыуыраҡ, быға са рәсми даирәләрҙә яңғырамаған фекер үткәрә: «Халыҡтарҙы «бөйөк һәм бүленмәҫ» Рәсәй составында көсләп тотоуҙан баш тартыу урыҫ халҡына мәҙәни йәһәттән генә түгел, ә ысын-ысындан ирекле, тулы ҡанлы үҫеш өсөн шарттар тыуҙырып, ҙур файҙа килтерәсәк.

Милләттәрҙең донъяуи үҫеш ҡанундарын инҡар итеү мөмкин түгел. 1986 йыл аҙаҡтарында СССР халыҡтары араһында башланған милли ҡуҙғалыштар был өлкәлә хәлдең артабан ҡырҡыулашасағына бер сигнал ғына. Халыҡтарҙың ысын-ысындан уянасағы алда, тип уйларға кәрәк. Милләтселектә, дәүләттең һәм ижтимағи ҡоролоштоң нигеҙҙәрен ҡаҡшатырға тырышыуҙа һәм башҡа төрлө эшмәкәрлектә ғәйепләп кенә милли хәрәкәтте туҡтатып булмаясаҡ. Киләсәк һәр ваҡыт азатлыҡ өсөн көрәшеүселәр яғында».

Был китап үҙенең быға са күҙәтелмәгән дәрәжәлә ҡыйыулығы һәм нигеҙлелеге менән Рамазан Абдулатипов кеүек Рәсәй кимәлендәге милли сәйәсәт белгестәренең дә иғтибарын йәлеп итте. Татарстан республикаһының тәүге президенты Минзәлә башҡорто Минтимер Шәймиев та 2000 йылда ағайымдың милли сәйәсәт өлкәһендәге хеҙмәтен түбәндәгесә баһаланы: «Әкрәм Бейеш үҙенең ғалим ғына түгел, ә тәрән белемле сәйәсмән, ғалим-политолог икәнен дә иҫбатланы».

1993 йылда баҫылып сыҡҡан «Башҡорт халҡының тарихы һәм азатлыҡ көрәше» исемле китабында ағайым беренселәрҙән булып башҡорт халҡының тарихына, уның азатлыҡ өсөн көрәшенә ошо халыҡ улы булараҡ күҙ ташлай, милли үҙбилдәләнешкә хоҡуғын тергеҙеүҙә үҙен-үҙе аямаған халҡыбыҙҙың батырлығын ысынбарлығында һүрәтләй. «Ваҡиғалар теҙемен белеү менән генә тарихты белеп булмай, – ти ул китаптың «Баш һүҙ»ендә. – Уны белер өсөн бөтә булған хәл-ваҡиғаға дөрөҫ күҙлектән ҡарап, ғәҙел баһа биреү кәрәк. Быныһы – иң мөһиме. Ошоғаса беҙ үҙ тарихыбыҙға үҙебеҙсә баһа биреү хоҡуғынан мәхрүм булдыҡ. Элек-электән беҙҙең тарихҡа урыҫ хакимдары хөкөм сығарған, уларҙың һүҙе өҫтөн булған. Илде ҡан илатҡан залимдар халыҡтың изге азатлыҡ көрәшен «бунт», «воровство» тип, көрәш башындағы батырҙарҙы «вор» тигән. Шул атама менән улар рәсми тарих фәнендә йөрөгән. Революциянан һуң, бигерәк тә 1945 йылдың 25 ғинуарында «ВКП(б) Үҙәк Комитетының Башҡортостан партия ойошмаһындағы агитацион-пропагандистик эштең торошо һәм уны яҡшыртыу саралары хаҡында ҡарары» сыҡҡас, тарих фәненә тотош партия етәкселеге йүнәлеш бирә башланы. Башҡорт тарихын дөрөҫ яҡтыртыу, дөрөҫ баһалау бөттө, тик урыҫ колонизаторҙарын күккә сөйөп маҡтау, башҡортто кәмһетеү, ғәйепләү генә тороп ҡалды. Үҙ тарихсыларыбыҙ, үҙ яҙыусыларыбыҙ ҙа башҡорт тарихын партия башындағы урыҫ шовинистарының талабына яраҡлаштырып яҙырға мәжбүр булды».

80-се йылдарҙың аҙағында халҡыбыҙ тарихын хәҡиҡәт күҙлегенән сығып яҡтыртыу мөмкинлеге асылыу менән Әкрәм Бейеш был эшкә беренсе булып

тотондо. «Инде фекер ҡоллоғонан, аҡыл ҡоллоғонан ҡотолорға ваҡыт, – тип дауам итә автор аталған хеҙмәтендә. – Күренекле башҡорт ғалимы Ризаитдин Фәхретдиновтың: «Һәр халыҡ үҙ тарихын үҙе яҙырға бурыслы», – тигән һүҙе бар. Беҙгә лә үҙ тарихыбыҙҙы үҙебеҙ белгәнсә, үҙебеҙ аңлағанса яҙырға кәрәк». Башҡорт йәмәғәтселегендә бындай ҡыйыу фекерҙең ишетелгәне юҡ ине әле. Әкрәм ағай ошо ике хеҙмәтендә башҡорт халҡының йылъяҙмаһы ғазап һәм аяуһыҙ көрәш тарихынан ғибәрәт икәнлеген күрһәтә. Ләкин был хеҙмәттәр тарих өсөн генә түгел, ә хәҙерге йәштәргә мөрәжәғәт, бурыс, хатта оран булып яңғырай.

Ауыр һуғыш йылдарында ул да ил кисергәнде иңенән үткәрә. 1943 йылда Әкрәм ағай армияға алына һәм ете йыл ғүмерен шунда үткәрә. Хеҙмәт итеп кенә йөрөмәй, киләсәктә уҡыу тураһында пландар ҙа ҡора. 1950 йылда хәрби хеҙмәттән ҡайтышлай Мәскәү дәүләт университетына һуғыла һәм алдағы йылда ошонда уҡырға инергә теләп, имтихандар биреү тәртибе менән таныша. Ағайым филология факультетында белем алыу, туған телен тәрән өйрәнеү, уны ғилми яҡтан үҫтереү тураһында хыял йөрөтә. Өфөгә килеп төшкәс, Әкрәм ағай «Совет Башҡортостаны» гәзитенә эшкә урынлашты. Мин ул саҡта педагогия институтында уҡый инем. Икебеҙгә бер бүлмә табып, шунда йәшәй башланыҡ. Ул төндәр буйы МДУ-ға уҡырға инер өсөн имтихандарға әҙерләнә торғайны. Шулай ҡыш, яҙ һәм йәйҙең ике айы артта ҡалды. Августа Әкрәм ағай, отпуск алып, Мәскәүгә имтихан тоторға юлланды һәм бөтә предметтар буйынса имтихандарҙы «бик яҡшы»ға тапшырып, ҡайтып төштө. Ләкин уны эшенән ебәрмәй яфаланылар, сөнки уның кеүек бирелеп, эшен еренә еткереп башҡарыусылар һирәк бит.

1951 йылдан 1956 йылға тиклем Әкрәм Бейешев филология факультетының көнсығыш телдәре бүлегендә белем ала. Ул телдәрҙе бөтә тәрәнлегендә өйрәнә, туған башҡорт теле менән уларҙы сағыштырып, һәр милли телдең үҙ халҡы өсөн ни тиклем ҡиммәт икәнлеген иҫбатлай. Университетты ҡыҙыл дипломға тамамлағас, уны шунда уҡ эшкә ҡалырға – уҡытырға димләйҙәр. Ләкин үҙ илен, халҡын ныҡ яратҡан Әкрәм ағай, тәҡдимдән баш тартып, Өфөгә ҡайта һәм Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына эшкә урынлаша. Институтта ул үҙен телсе-ғалим, һүҙлек төҙөүсе (һүҙлексе), төркиәтсе итеп танытып, исемен бөтә донъя кимәленә күтәргән илленән ашыу фәнни хеҙмәт ижад итә. Үрҙә телгә алыныуынса, «Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге» өҫтөндә эшләү уның 25 йыллыҡ ғүмеренә торош итеп, ағайыма тел буйынса башҡа ғилми эштәрен, докторлыҡ диссертацияһын ситкәрәк ҡуйып торорға мәжбүр итә. Һүҙлектең халҡына ни тиклем кәрәк икәнен төшөнә һәм халҡы өсөн ауыр эшкә тотоноуҙы үҙ мәнфәғәтенән өҫтөн ҡуя. Әгәр күңеленә яҡын тел проблемалары менән генә шөғөлләнһә, Әкрәм ағай, һис шикһеҙ, фән докторы, профессор, хатта академик дәрәжәһенә саҡлы күтәрелә алыр ине. Етмәһә, коллективҡа түбән кимәлле, үҙе өсөн генә йәшәргә яратҡан хеҙмәткәрҙәр килеп инеп, улар менән көрәшеп эшләүе ғалимға, билдәле, еңел булмай. Тап ошо осорҙа, 1966 йылда, ул бер шиғырында былай тип яҙа:

*«Арыным мин, шул хәтле арыным,*
*Ятып үлер инем хәҙерҙән.*
*Эшләп бөтөп китер эшем генә*
*Һаҡлап тота тыныс ҡәберҙән».*

Әммә үҙенең эскерһеҙ, эшкә мөкиббән китеп тотоноуы, ғилми хеҙмәттең халҡына кәрәклеген тойоуы бөтә был ауырлыҡтарҙы еңеп сығырға булышлыҡ итә. «Әкрәм ағай был һүҙлеге менән телебеҙгә һәйкәл ҡойҙо, халҡыбыҙҙың быуаттар төпкөлөнән килгән рухи байлығын киләсәк быуындарға тапшырыу миссияһын үтәне», – тип баһаланы уны Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры Фирҙәүес Хисаметдинова.

Шул дәүерҙә тел ғилемендә килеп тыуған етешһеҙлектәргә ҡарата ағайым үҙ

һүҙен әйтә килә, аңлатмалар яҙа. 1999 йылда уның «Тел хикмәттәре» тигән төплө аналитик хеҙмәте донъя күрә. Китаптың «Баш һүҙ»ендәге түбәндәге юлдарҙы тыныс күңел менән уҡыу мөмкин түгел: «Әйләнгән һайын урыҫ телен ҡыҫтырып һөйләү күпселек кешенең ғәҙәтенә инеп китте… Яҙышҡан кешеләрҙең күбеһе хәҙер урыҫ телендә уйлап, башҡортлаштырылған урыҫ телендә яҙыуға күсеп бара. Айырым шәхестәрҙең шундай теленән дөйөм башҡорт әҙәби теле хасил булып, шул «әҙәби» тел барған һайын милли мәҙәниәт кимәлен күрһәткән бер билгегә әйләнә башланы… Халыҡ үҙенең телен, туплаған мәҙәни байлығын иҫ киткес ауыр ғазаптар аша алып килә, үлемесле көсөргәнеш менән милли үҙенсәлектәрен тапатмай һаҡларға тырыша. Һаҡларға тырышҡан һайын халыҡтың милли тойғоһо көсәйә һәм шул тойғо рухын үҫтереп, берҙәмлеген нығытып, уны милли азатлыҡ көрәшенә күтәрә… Донъя гел шулай булмаҫ. Кешелек донъяһында бер империя ла мәңге йәшәй алмаған. Заманында ниндәй дәһшәтле империялар ҡитғаларҙы биләп, дер ҡалтыратып тотҡан. Улар, ҡаҡшамаҫтай булып, быуаттар буйы хөкөм һөрһә лә, бара-бара барыбер ҡыйралған. Урыҫ империяһы ла күҙгә күренеп тарҡала башланы. Уның аҙаҡҡы көнө, бәлки, алыҫ та түгелдер. Шул көнгә хәтле телебеҙҙе ҡурсалап, кер тейҙермәй һаҡлап тора алһаҡ, милли азатлыҡ алырға, милли дәүләт ҡороуға ла өмөт тота алырбыҙ. Дәүләт ҡорғас, ысын милләт булып, үҙ яйыбыҙға йәшәргә һәм үҫергә тулы мөмкинлек асылыр». Китаптың төп өлөшөндә автор ваҡытлы матбуғат әһелдәре ижадында йыш күҙәтелгән ҡайһы бер хаталарҙы төҙәтеп, туған тел сафлығын һаҡлау буйынса тәҡдимдәр индерә. «Тел хикмәттәре» – бөгөн дә бик актуаль, телен камиллаштырырға теләүселәргә әҙер ҡулланма.

Әкрәм Бейештең туған телен яратыуы ижади әҫәрҙәрендә генә түгел, айырым ғилми китаптарында ла ярылып ята. Әйтергә кәрәк, үткән быуаттың 80-се йылдар башына тиклем башҡорт теленең орфографияһы бер ниндәй ҡалыпҡа ла һыймаҫлыҡ, йәмһеҙ яңғырашлы була торғайны. Ул ваҡытта КПСС өлкә комитеты аппаратында эшләгән Әхмәр Аҙнабаевтың тәҡдиме менән Әкрәм ағай күптән эсен ҡырып йөрөгән тема – башҡорт теленең яңы орфографияһын төҙөүгә тотона. Әхмәр ағайҙың иҫкә алыуынса, «Әйтеүем булды, Әкрәм ағай ике айҙан башҡорт теленең яңы орфографияһын өҫтәлемә килтереп тә һалды». Шулай итеп, Әкрәм Бейешев башҡорт орфографияһының яңы, һуңғы вариантын эшләп китте. «Беҙҙең орфография ҡәрҙәш төрки телдәр араһында иң еңеле, камиллашҡаны, ысын мәғәнәһендә фәнни нигеҙҙә эшләнгәне», – ти торғайны ул.

Хаҡлы ялға сыҡҡас та Әкрәм ағай ҡул ҡаушырып ултырманы, ғилми эҙләнеүҙәрен, әҙәби эшмәкәрлеген дауам итте. Ғилемдең бер юҫығында ғына эшләмәне ул: һәр өлкәлә уның иленә, халҡына, теленә тоғролоғо ярылып ята:

*«Башҡортҡа мин аҡыл бирер инем*
*Кеше аҡылына һыймаҫлыҡ,*
*Башҡортҡа мин илһам бирер инем*
*Мәңге ижад итеп туймаҫлыҡ», –*

тип яҙа ул 1967 йылда уҡ яҙылған бер шиғырында. Үҙе иҫән саҡта, 2002 йылда, донъя күргән «Көл аҫтындағы ҡуҙ», 2003 йылда нәшер ителгән «Эйек бөрйәндәре һәм Туйөмбәт менән Ҡотлөмбәт» исемле китаптары баҫылып сыҡты. Уларҙы күреп, ағайым сикһеҙ шатланды, сөнки уның шиғыр һәм шәжәрәгә бәйле китаптары быға тиклем баҫылғаны булманы. «Күк томан ҡалҡа» исемле хикәйәһендә Әкрәм Бейеш һуғыштан һуңғы ауылда башҡорт ҡыҙы Саниәның үҙенән күпкә өлкән иргә кейәүгә сығып, күңел һәм тән ғазаптары кисереүен үҙ башынан үткәргән кешеләй оҫта һүрәтләһә, «Зая ғүмер»ҙә тыуған ауылының саф тәбиғәтен ҡоротмаҫ, байлығын тәләфләтмәҫ өсөн бар көсөн биреп ҡаршы торған Йософтоң халыҡтың вайымһыҙлығы арҡаһында барлыҡ тырышлығы юҡҡа сығыуын бәйән итә. Авторҙың «Пожар», «Юғалған хөрмәт», «Хәсрәтле төн» хикәйәләре 1978 йылда яҙылған:

*«Сараһыҙ мин. Тарау меҫкен халыҡ*
*Ирек хисен тамам онотҡан,*
*Иҙеп тапап, ситлекләнгән йәнен*
*Араҡыға йыуып ойотҡан»,–*

тигән юлдарға ауаздаш булып, башҡорт халҡына ҡот осҡос афәт килтергән эскелек проблемаһына мөрәжәғәт итә. «Меҫкендәр» хикәйәһендә Әкрәм Бейеш ғилем өлкәһендә эшләп осон-оска саҡ ялғап йәшәгән Хәлит менән уның класташы, бер етәксенең водителе булып эшләгән Солтандың әйләнеп сыҡҡыһыҙ бай тормошон сағыштырып, әсе һыҙланыу кисерә.

Әкрәм ағай оҫталығын тәржемә өлкәһендә лә һынап ҡараны. Уның «Ҡытай хикәйәләре», әйтерһең дә, башҡорт телендә яҙылған. А. Пушкин, И. Бунин шиғырҙарын да ул башҡорт уҡыусыһына еткерҙе. Ә инде башҡортса «Ҡөрьән Кәрим» аңлайышлы, сүрәләрҙең мәғәнәһе үҙебеҙсә асып бирелгән. «Китап» нәшриәте уны 2009 йылда ташҡа баҫып, халыҡты ҡыуандырҙы. Әкрәм Бейештең ҙур күләмле «Ил аҙабы» романы 2008 йылда донъя күрҙе. Түбәндәге юлдарҙан авторҙың халҡы өсөн ниндәй дәрәжәлә йәне әсеүе күренеп тора:

«Ҡайтҡан саҡта Байдәүләт менән Йәнгилде, саҡ аяҡ шылдырып, бик яй ҡайтты. Ауыр эштән бигерәк ҡара таш булып йөрәктәрен баҫып ятҡан ҡайғы уларҙың һуңғы хәлен алды.

– Өйҙә саҡта ауыл хәсрәте генә күренә ине, мында ил хәсрәте күренде, – тине Йәнгилде.

– Ил хәсрәтен күп күрҙем инде мин, – тип Байдәүләт ауыр итеп көрһөндө. – Яу белән йөрөгәндә, күп ерҙә булдым. Башҡорттоң хәле бөтә ерҙә лә бер.

– Беҙҙең бөтөүебеҙ ошолор инде, былай булғас.

– Бәлки, тотош бөтмәбеҙ, ҡалырбыҙ әҙерәк. Әммә ил күрке булған, иң аҫыл, иң шәп ирләрҙе бөтөрҙөләр. Беҙ соҡорға күмгәннәр араһында ла, моғайын, булған алар. Башҡорттоң билен һындырҙылар. Биле һынғас, ул зәғиф хәҙер. Аяғына баҫып, ҡалҡып тора алмаҫ инде мынан һуң.

– Һеҙ, мына, яуҙа йөрөнөгөҙ. Шул саҡта урыҫты талап, башҡорттоң хәлен нығытып йөрөмәгәнһегеҙ. Алар беҙҙе талап нығыны бит.

– Беҙ талар өсөн йөрөмәнек. Азатлыҡ өсөн көрәштек.

– А-ай, азатлыҡ! Мәңгелек хыял! Нисәмә быуын башҡорт ирләре аның өсөн баш һалған!»

Был китапты халыҡ яратып уҡый һәм йыш ҡына уға ҡарата рәхмәт һүҙҙәре ишетелә. Шуныһы ҡыҙғаныс: был әҫәрҙәренең халыҡҡа барып етеүен Әкрәм ағай үҙе күрә алманы. Әле уның балалар өсөн яҙған шиғырҙар ҡулъяҙмаһы, төрлө ғилми мәҡәләләре нәшриәттә сират көтөп ята.

Эйе, ағайым ҙур ғалим, оло хеҙмәттәр авторы, үтә лә ябай, инсафлы, саф күңелле, ярҙамсыл кеше булып хәтерҙә һаҡлана. Бигерәк тә эшлекле, үҙенә талапсан, эшенә бик яуаплы ҡараштa ине. Уның өсөн ваҡ йәки эре эш булманы, бөтәһенә лә ул бик етди һәм түҙемлелек менән тотондо. Шуға ла ул алһыҙ-ялһыҙ эшләне лә эшләне. 1964 йылда үҙенең дүрт юллыҡ ҡына шиғырында :

*«Нисек «үҙем» тип йәшәмәк кәрәк,*
*Үҙеңдән ҙур халҡың бар була?*
*Үҙең өсөн йәшәү – аҙ ғүмерҙе*
*Һыуға һалыу менән бер була», –*

тип яҙа. 90-сы йылдарҙағы һынылыш йылдарында халҡыбыҙҙың милли хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашып, Әкрәм ағай уның уртаһында ҡайнаны. Башҡорт халыҡ фирҡәһенең уставын, положениеларын эшләп бирҙе. Ҡулъяҙмалар уның шәхси архивында һаҡлана, әммә фирҡә генә ваҡыт һынауын күтәрә алманы. Халҡыбыҙ тарихы тураһында яҙғанда уның ниҙәр кисереүен түбәндәге юлдарҙан да асыҡ күрергә мөмкин: «Башҡорт халҡы ете быуат ярым буйы сит баҫҡынсыларҙың,

тәүҙә татарҙарҙың, шунан һуң урыҫтарҙың аяуһыҙ иҙгенлегенә ҡаршы азатлыҡ, милли суверенитет яулап көрәшкән, – тип яҙа ул «Башҡорт халҡының тарихы һәм азатлыҡ көрәше» китабында. – Был көрәш иҫ киткес ҡанлы, ҡот осҡос фажиғәле булған. Изге көрәштә халыҡ икһеҙ-сикһеҙ михнәт күргән, йөҙ меңләгән иң аҫыл ир-егеттең йәне ҡыйылған. Халыҡтың ирекҡә ынтылышы шул хәтле көслө булған, хатта уны иҫәпһеҙ ҡорбан да, һис бер ғазап та баҫа алмаған. Шул ынтылыш һәм теләк залимдарға ҡаршы көрәштә халыҡҡа ҡеүәт биргән, милли берҙәмлекте нығытҡан. Халыҡ шуның менән йәшәгән, бер ваҡытта ла азатлыҡ өмөтөн юғалтмаған. Халыҡтың быуаттар буйы һаҡлаған ныҡлығын, ҡаҡшамаҫ рухын мәкер һәм тоталитар режим менән большевиктар ғына һындырған. Улар, бер яҡтан, тигеҙлек һәм азатлыҡ хаҡында шаулы декларациялар сығарып, ялҡынлы телмәрҙәр һөйләп, халыҡ йөрәгендә яҡты өмөт, ҙур ышаныс уятҡан; икенсе яҡтан, шул вәғәҙә иткән азатлыҡтың аҙ ғына өлөшөнән файҙаланырға теләгән өсөн ҡаты эҙәрләгән, аяуһыҙ яфалаған». Былдай фекер оло йөрәкле, халҡына бөтә күңеле менән бирелгән кешенең күңелендә генә ярала торғандыр.

Артабан был ҡыйыу фекер тағы ла мөһимерәк һығымта яһалыуға килтерә: «Объектив закон һәр бәләкәй һәм ҙур халыҡтың үҙ аллы бойондороҡһоҙ дәүләткә ойошоуын, милләттең эске йөкмәткеһе менән ойошоу формаһы араһында тулы ярашлыҡ булыуын талап итә. Һәр төрлө башҡа ижтимағи күренештәге кеүек, эстәлек менән форманың ярашлығы халыҡтың ысын мәғәнәле тереклеге өсөн мотлаҡ бер шарт булып хеҙмәт итә. Суверенлы, бойондороҡһоҙ үҙ дәүләтен төҙөгәс кенә халыҡ, милләткә әйләнеп, иркен үҫеш юлына сыға, шунһыҙ ул бер милли тойғо йөрөткән тарҡау ялпы булып ҡала һәм, ахыр сиктә, бөтөүгә дусар була. Шуға күрә башҡорт халҡы, әгәр ул азатлыҡ көрәшендә түккән ҡаны бушҡа булмаһын тиһә, артабан өмөт менән йәшәргә теләһә, ялған вәғәҙә һәм еңеллектәргә өмөт бәйләргә түгел, ә ете быуат ярым элек татар яуы ҡыйратҡан милли дәүләтен ҡабаттан тергеҙергә бурыслы».

Әкрәм Бейеш бер ҡасан да байлыҡ, аҡса артынан ҡыуманы, һәр ерҙә дөрөҫлөктө яҡланы. Ялғанға, ялағайлыҡҡа ҡарата нәфрәтле булды. Ялағайҙар алдында баш эймәне, намыҫына кер төшөрмәне. Иленә, теленә, халҡына тел тейҙергәндәргә ул аяуһыҙ ине. Шуға ла уға был донъяла йәшәүе еңел булманы. Ғүмер буйы бер кемгә лә зыяны теймәгән кеүек, фани донъянан да ул тыныс, берәүгә лә ыҙа килтермәй 2003 йылдың 1 октябрендә ҡапыл ғына китеп барҙы. Хатта вафаты алдынан «Башҡортостан энциклопедияһы» редакцияһына шылтыратып:

– Мин бөгөн был донъянан китәм. Һорауҙарығыҙ булһа, килеп хәл итеп өлгөрөгөҙ, – тигән. Уны үҙе васыят әйтеп ҡалдырған тыуған тупрағына – Туйөмбәт ауылы зыяратындағы Бейешевтар мәңгелек төйәк тапҡан ергә ерләнеләр.

*«Мин халҡымдың ҡара ҡоло булып,*
*эшләр өсөн үҫтем бишектән», –*

тип яҙҙы Әкрәм ағай бер шиғырында. Уның хеҙмәттәре генә түгел, исеме лә башҡорт халҡы тарихында уйылып ҡалды. Был уның ихлас эш емеше, ғүмеренең мәғәнәһе ине. Ағайым телебеҙҙе үлемһеҙ итте, уға йәдкәр ҡойҙо. Иҫән булһа, уға быйыл 85 йәш тулыр ине. Был юбилейҙы унһыҙ уҙғарыу беҙҙең – башҡорт халҡының бурысы. Изгеләрҙән-изге эш кенә ҡала.

**Ләлә БЕЙЕШЕВА.**
**Өфө ҡалаһы.**

**Мәжит**
**ҒАФУРИ**

## Уҡыйыҡ, шәкерттәр![*]

*Был нурлы мәктәп,*
*Уҡыйыҡ күмәкләп,*
*Булайыҡ беҙ шәп,*
*Уҡыйыҡ, шәкерттәр!*

*Беҙ йәш булһаҡ та,*
*Уҡыйыҡ йәш саҡта.*
*Ҡалмайыҡ артта,*
*Уҡыйыҡ, шәкерттәр!*

*Ғүмерҙәр ҡыҫҡа,–*
*Ятмайыҡ беҙ бушҡа,*
*Көҙ ҙә һәм ҡыш та*
*Уҡыйыҡ, шәкерттәр!*

*Йөрөмәйек уйнап,*
*Урамды буйлап,*
*Киләсәкте уйлап,*
*Уҡыйыҡ, шәкерттәр!*

*Уҡымағандар*
*Наҙандар улар,*
*Бушҡа ҡалғандар,*
*Уҡыйыҡ, шәкерттәр!*

## Балалар һәм китап

*Дүрт-биш бала йыйылғандар бер урынға,*
*Тап уртала береһе китап тотҡан ҡулға.*
*Һәммәһе лә ҡолаҡтарын торғоҙғандар,*
*Береһе уҡый. Башҡалары тыңлай шунда,*

*Ултыралар китап уҡып, күңел асып,*
*Шатлыҡтарын бергә-бергә уртаҡлашып.*

---

*[*]Башҡортостандың халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың хәҙерге заман уҡыусыларына мәғлүм түгел шиғырҙары.*

*Ҡай ваҡытта тыңлай былар тып-тын ғына.*
*Ҡай сағында көлөшәләр шырҡылдашып.*

*Ҡай сағында әллә кемде ҡыҙғаналар,*
*Уфылдап, әкрен генә ҡуҙғалалар.*
*Ахырыһы был китап бик күңеллелер,*
*Күҙ ҙә алмай уҡый уны был балалар.*

## Ҡыш

*Балалар, беләһегеҙме – ҡыш күңелһеҙ?*
*Көн һалҡын, ул етмәһә буран була,*
*Уҡыуҙан башҡа һәр бер эш күңелһеҙ,*
*Көн һайын булып тора буран, һалҡын.*
*Ялан, урман ҡыш буйынса тора тып-тын,*
*Ауыл халҡы юл буйынса йөрөп тора,*
*Шағыр-шоғор ташып бесән менән утын.*

## Буяулы йомортҡа

*Бер күңелле яҙғы көндә – йома көндөң иртәһе*
*Төрлө төҫтәргә йомортҡалар буятты әсәһе.*
*Ялтырап сыҡҡан ҡояш бер йылмайып көлгәс кенә:*
*– Тор, Ғәли, тор, йома көн бит! – тип уятты әсәһе:*
*Бар, балам, йәшел сиҙәмдә тәгәрәтеп уйнат, – тейеп!*
*Өс йомортҡа бирҙе лә һөйөп оҙатты әсәһе.*
*Их, күңелле һуң Ғәлигә! Шатланып уйнап йөрөй,*
*Әлдә әсәм яҡшы, тип эсенән уйлап йөрөй.*

## Ҡоштарға

*Ник ҡасаһың, әй, матур ҡоштар?*
*Улай һеҙ ҡасмағыҙ!*
*Һеҙҙе беҙ ҡурҡытмайбыҙ һәм*
*Таш, ағас та атмайбыҙ!*
*Уйнағыҙ шул баҡсаларҙа,*
*Кис вә иртән һайрағыҙ!*
*Тик кенә тыңлап торорбоҙ,*
*Һеҙгә беҙ һүҙ ҡатмабыҙ.*
*Шул ағастарҙың араһында*
*Осарһығыҙ пар ҙа пар!*
*Һеҙ осоп йөрөгән урындар*
*Бик күңелле, бик матур.*
*Дуҫ булайыҡ һеҙҙең менән беҙ,*
*Һеҙҙе беҙ ҡурҡытмайбыҙ.*
*Уйнағыҙ ҙа һайрағыҙ һеҙ,*
*Бында беҙҙән ҡурҡмағыҙ!*

## *Йәйге эштәр*

*Етте бесән ваҡыты,*
*Халыҡ сыҡты болонға,*
*Салғы ла тырма, һәнәк*
*Һәр бер кеше ҡулында.*
*Бер урында сабалар.*
*Бер урында йыялар.*
*Икенсе бер урында*
*Ҙур-ҙур кәбән ҡоялар.*
*Бесән етер-етмәҫтән*
*Баҫыуҙарҙа беште арыш.*
*Игендәр ниндәй уңған –*
*Арыш башы бер ҡарыш.*
*Эш тиҙерәк бөтһөн тип,*
*Кешеләр иртә торалар.*
*Баҫыуҙа халыҡ сып-сыуар,*
*Ашығып ураҡ уралар.*
*Сикһеҙ үҫкән игендәр,*
*Ниндәйен матур көндәр,*
*Уйнап, көлөп уралар*
*Егеттәр, ҡыҙҙар, килендәр.*
*Һәр кем үҙ ерен ура,*
*Иген сайҡалып тора,*
*Арыш, һоло, тары менән*
*Туп-тулы булыр бура.*

## *Бер кәлимә аңлатма*

Әле бынан бер-ике ай элгәре генә ҡасандыр үҙемә тапшырылған архив ҡағыҙҙарын ҡараштырып тәртипкә килтереп уларҙы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ҡарамағындағы минең исемде йөрөткән ҡулъяҙмалар, иҫке баҫмалар, шәжәрәләр бүлегенә үҙ китапханамды, төрлө яҙмаларымды бүләк итеп тапшырырға әҙерләгәндә, үҙ ваҡытында иғтибар ителмәгәнме йәки ҡулваҡыт етмәгәнме, башҡа бик әһәмиәтле ҡулъяҙмалар килеп сыҡҡылананы. Улар Мифтахетдин Аҡмулла һәм Мәжит Ғафури яҙмалары, автографтары булыуы менән айырыуса ҡиммәтле һәм баһалы.

Уларҙы тикшереп, аңлатмалар яҙып “Ватандаш” журналында баҫтырырға бирҙем. Башҡортостан Фәндәр академияһының архив фондында һаҡланған Вәлиулла сәсән Ҡоломбәтов шәхси архивын өйрәнеп, инеш һүҙ менән шиғыр, эпос үрнәктәрен тапшырҙым.

Мәжит Ғафури ижадына ҡарар яңы өлгөләрҙе белгестәр күҙенән дә ситтә ҡалған “Азат мәктәп. I бүлем, Өфө, 1920 йыл” китабынан алып әҙәбиәтсе, ғалимдарыбыҙ һәм журнал уҡыусыларыбыҙ иғтибарына “Ағиҙел”гә тәҡдим итәм.

**Академик һәм республикабыҙҙың халыҡ яҙыусыһы**
**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**

# ӘЙЛЕ БАШҠОРТТАРЫ: КИСӘ, БӨГӨН, ИРТӘГӘ

*Бер нисә йыл элек Өфөлә Әйле ҡәбиләһе башҡорттарының йыйыны уҙғарылғайны. Уның эшендә төньяҡ-көнсығыш Башҡортостандың һигеҙ районында, Свердловск һәм Силәбе өлкәләрендә йәшәгән Әйле башҡорттары вәкилдәре ҡатнашты.*

*Пленар ултырышта доклад менән журналист Ризван Хажиев сығыш яһаны. Әйле башҡорттарының тарихы тураһында ентекләп һөйләү менән бергә, ул иғтибарҙы ғалимдарҙың ҡайһы бер факттарҙы боҙоп күрһәтеүенә лә йүнәлтте, төньяҡ-көнсығыш төбәктең социаль-иҡтисади үҫеш мәсьәләләренә туҡталды. Ризван Хажиевтың шундағы докладын тәҡдим итәбеҙ.*

Әйле ҡәбиләһе 11 ырыуҙан тора: Әй, Көҙәй, Дыуан, Ҡошсо, Һарт, Мырҙалар, Тырнаҡлы, Түбәләс, Өпәй, Һыҙғы, Ҡаратаулы.

Академик-этнолог Раил Кузеев фекеренсә, әйлеләр этник яҡтан борон Арал диңгеҙе ярҙарында йәшәгән бәшнәк-уғыҙ ҡәбиләләренә, икенсе ғалимдар әйтеүенсә, фин-уғырҙарға, йә булмаһа Себер төркиҙәренә барып тоташа. VII – IX быуаттарҙа әйлеләрҙең ата-бабалары Һыр-Даръя һәм Арал яны далаларын төйәк иткән. IX – XII быуаттарҙа улар Көньяҡ Уралға күсә һәм Әй, Ағиҙел, Мейәс, Уй, Яйыҡ йылғалары баштарына таралып ултыра. Әммә XIII – XIV быуаттарҙа Табын ҡәбиләһе баҫымы аҫтында Әй, Мейәс, Йүрүҙән буйлап түбәнгә төшә. XVI – XVIII быуаттарҙа уларҙың күп өлөшө Урал аръяғына һәм Көнбайыш Башҡортостанға китә. Урал аръяғына күскән әйлеләр Мейәстең үрге яғындағы, Мейәс менән Исәт йылғаларының ҡушылдығы Тинес (Теча) йылғалары араһындағы үҙәнгә урынлаша. XVI быуатта Башҡортостан Рус дәүләтенә ҡушылғас, Әйле башҡорттары Себер даруғаһына ҡараған Әй һәм Көҙәй волостарына ойоша. 1726 йылдан иһә улар Әй, Түбәләс, Дыуан, Ҡошсо, Мырҙалар волостарын тәшкил итә. 1798 йылда Башҡортостан кантондарға бүленгәс, әйле ҡәбиләһе II, IV, V, VIII кантондарға инә. 1865 йылда кантон системаһы бөтөрөлгәс, биш станға бүленә, ә инде 1920 йылда Дыуан-Ҡошсо, 1922 йылдан Мәсәғүт кантонына ҡарай башлай. 1930 йылда иһә Яңы Балаҡатай, Дыуан, Дыуан-Мәсетле, Үрге Ҡыйғы, 1935 йылда Малаяҙ (1940 йылдан – Салауат) райондары барлыҡҡа килә.

Күренекле боронғо башҡорт шағиры һәм ғалимы, сығышы менән Әйле ҡәбиләһенең Көҙәй ырыуы вәкиле Тажетдин Ялсығол-әл-Башҡорди (1768–1838) үҙенең “Тарихнамә-и-булғар” әҫәрендә, боронғо башҡорт һәм татар ырыуҙары, булғар хандары менән бәйле тарихи ваҡиғаларҙы яҡтыртыу менән бергә, үҙ нәҫеленең 84 быуынына тиклем шәжәрәһен төҙөп ҡалдырған.

Тажетдин Ялсығолдың яҙмалары төрки телле шәжәрә жанрына хас мифик Әҙәм һәм Һауанан башлана һәм 39 быуындан һуң Иштәккә, йәғни Башҡортҡа

килеп төртөлә. "Иштәктән Тамъян, Үҫәргән, Күбәләк, Бәкәтун, Һарт, Тырнаҡлы, Түбәләс, Дыуан тыуа, – тип яҙа автор артабан. – Беҙҙең ырыу Бәкәтундан башлана. Ул тыуған яҡтарын, йәғни төп йорто – Аму-Даръя йылғаһы ярҙарын ташлап төньяҡ илдәргә сығып китә һәм Мейәс йылғаһы буйына төпләнә. Улдары – Әйле, Юрмый, Байлар, Байҡы, Ирәкте, Салйот.

Артабан Ҡасур-Соҡрат-Ғофтар-Айҙар-Һәрмүз-Алмас-Мирһашим-Бәбәк-Ҡорнаҡи-Даймас-Мәскәв-Тағйун-Митрофан-Йакав-Мард-Әмлан-Тимерйән-Баҡыйжан-Шәмсүн-Нәүшируан-Боздан-Туҡи йәнә Айҙар-Сәйетхан-Әмирхан-Солтанморат-Сәлимхан-Илһамхан-Ғабдулла-Ғәлимбәк-Мирхажи-Ҡолғәли (1174 –1248 йылдар), боронғо башҡорт шағиры, "Ҡиссаи-Йософ" поэмаһының авторы-Миршәриф-Мирсәйет-Нурсәйет-Сәйҙәш. Сәйҙәш уҫал, аяу белмәҫ була. Ҡарағалпаҡ ханының ҡыҙын урлап, Мейәс ярҙарына алып ҡаса. Унан ике ул тыуа: Тыныш һәм Ҡуштаймаҫ. Тыныштан Көҙәй менән Ҡошсо тыуа. Тажетдин Ялсығол үҙе Көҙәй ырыуынан булғас, артабан Көҙәй тармағын ғына алып китә. Йәғни Көҙәй-Янбаш-Бәбеш-Үлмәҫхан-Ғабдрахманхажи-Янбай-Ҡотлобулат-Ейәнсура-Йәнтимер-Мәмәтҡол-Ялсығол-Тажетдин.

Әйтергә кәрәк, Тажетдин Ялсығолдың шәжәрәһе, ҡайһы бер мифик заттарҙы үҙ эсенә алһа ла, тулылығы, тарихи ваҡиғаларға эйәреп килеүе һәм айырыуса Әйле ҡәбиләһе тәүләп телгә алыныуы менән ҡиммәт. Тимәк, әйлеләр ҙә, – Юрматы, Ҡыпсаҡ, Түңгәүер, Бөрйән, Табын, Тамъян ҡәбиләләре кеүек, боронғо ҡәбилә. Ул да башҡортто халыҡ, милләт итеүгә аҙ көс һалмаған.

Ғалим-энциклопедист, Эске Рәсәй һәм Себер мосолмандарының Үҙәк Диниә назараты мөфтөйө Ризаитдин Фәхретдиновтың (1859 –1936) өлкән улы Абдрахман Фәхретдинов 1925 йылда донъя күргән "Башҡорт тарихы" тигән китабында былай тип яҙған: "Бынан 2 мең йылдар боронораҡ хәҙерге ҡытай мәмләкәтенең төньяғында, хәҙерге Монголия һәм Жунгария тигән өлкәләрҙә һәм Себерҙә, Алтай тауҙары тирәләрендә төрлө исемдә төрк (төрки) ырыуҙары мал аҫрап күсеп йөрөгән. Былар араһында Мең, Там, Табын, Ҡаңлы, Тиләү, Йөрөү, Мәркетле, Туңғатар һәм шундай башҡа исемлеләре булған. Байтаҡ ырыуҙар, үҙҙәре торған тау һәм йылға исеменә бәйләнеп, Дыуан, Түңгәүер, Йылайыр (был тау исемдәре Алтайҙа әле лә һаҡлана), Әй (был йылға исеме Себерҙә хәҙер ҙә бар) ырыуҙары тип йөрөтөлгән." (Мөнир Һаҙыев. Абдрахман Фәхретдинов. Башҡорт тарихы. – Өфө, Китап, 2007. 90-сы бит). Был фараз әйлеләрҙең бер өлөшө Себер һәм Алтай яҡтарынан килгәнлегенә ишаралай булһа кәрәк.

Әйле ҡәбиләһе тураһында тулыраҡ һәм төплөрәк мәғлүмәтте академик Раил Кузеевтың "Происхождение башкирского народа" (М., 1974) монографияһынан да табырға мөмкин. Ләкин ул 11 ырыулы ҡәбиләне етегә ҡалдыра. Улар – Әй, Көҙәй, Мырҙалар, Дыуан, Ҡошсо, Өпәй, Һыҙғы. Ә Тырнаҡлы, һарт, Түбәләс, ҡаратаулы кеүек үҙ аллы ырыуҙарҙы Әй ырыуына аймаҡ итеп кенә төркәгән. Беҙҙеңсә, улар айырым ырыу булырға тейеш. Һүҙ ыңғайында әйтергә кәрәк: беҙ "ҡәбилә" һәм "ырыу" төшөнсәләрен бутап йөрөтәбеҙ.

Халыҡ – философтарҙың билдәләүенсә, кешеләр, илдәр һәм дәүләттәрҙең тарихи яҡтан берләшкән ойошмаһы. Уға ул йәшәгән биләмә, бер үк иҡтисади мөхит, тел, характер, бер үк мәҙәниәт, сәнғәт һәм әҙәбиәт, тормош-көнкүреш шарттарының уртаҡлығы хас. Ҡәбилә – халыҡтан ҡала, ошо уҡ ойошмаға ингән кешеләр берлегенең бәләкәйерәк төркөмө, һәм уның нигеҙендә уртаҡ биләмә, тел, мәҙәниәт мөнәсәбәттәре ята. Шәхестең теге йәки был ҡәбиләгә

ҡарауы, уны дөйөм мөлкәт һәм етештерелгән тауарға милектәшлек, йәмғиәт тормошонда ҡатнашыу хоҡуғы бирә. Ырыу – тәүтормош общиналарындағы иҡтисади мөнәсәбәттәр ҡан-ҡәрҙәшлек нигеҙендә ойошторолған берләшмә. Ырыу мөнәсәбәттәре уның ағзаларының тиң хоҡуҡлылығын, ырыу башлыҡтарының һайланып ҡуйылыуын, күсәгилешлекте тәьмин иткән. Тәүтормош община ҡоролошоноң артабан үҫеүе менән ырыуҙар – ҡәбиләләргә, ҡәбиләләр – ҡәбиләләр союзына, аҙаҡ килеп бер халыҡҡа берләшкән. Бөгөнгө ҡәбилә бер нисә административ районды үҙ эсенә алһа, ырыу ойошмаһына бер нисә, хатта тиҫтәләрсә ауыл инә.

1997 йылда донъя күргән "Башҡортостан. Ҡыҫҡаса энциклопедия" тигән йыйынтыҡта ла байтаҡ хаталарға юл ҡуйылған. Әйле ҡәбиләһенә ҡағылышлы хәбәрнамәлә, мәҫәлән, әйле ҡәбиләһе "Әйле, Тырнаҡлы, Ҡаратаулы, Һарт-Әйле, Төрөкмән, Мырҙа, Түбә ырыуҙарынан тора...", "Әйле ҡәбиләһе биләгән ерҙәрҙә хәҙер Башҡортостан Республикаһының Салауат, Мәсетле, Нуриман, Иглин райондары, Силәбе өлкәһенең Арғаяш районы урынлашҡан", – тип әйтелә. Был мәҡәләне кем яҙғандыр, сөнки авторы күрһәтелмәгән, әммә шуныһы хаҡ: Әйле ҡәбиләһендә төрөкмән, түбә, мырҙа ырыуҙары юҡ. "Төрөкмән" тигәндәре – Көҙәй ырыуының бер аймағы ғына, ә "мырҙа" – "Мырҙалар", "түбә" – "Түбәләҫ" булырға тейеш. Дыуан, Ҡошсо, Өпәй, Һыҙғы, Көҙәй кеүек ҙур ырыуҙар йөкмәткенән бөтөнләй төшөп ҡалған. Әйлеләр Салауат, Мәсетле, Иглин, Нуриман, Арғаяш райондарында ғына йәшәмәй. Уға йәнә Ҡыйғы, Дыуан, Балаҡатай, Туймазы райондары, Свердловск өлкәһенең Красноуфимск, Әртә, Түбәнге Сергин, Силәбе өлкәһенең Ҡатау-Ивановск, Һатҡы, Златоуст, Күҫә, Сыбаркүл, Нәзе-Петровск, Сосновка, Красногвардийск, Юғары Өфәле райондарындағы, Ҡурған өлкәһенең ҡайһы бер ауылдары ла инә.

Сал тарих ҡуйынынан беҙҙең көндәргәсә оҙайлы һәм урау-урау юлдар үткән Әйле ҡәбиләһен тулыраҡ күҙ алдына баҫтырыу өсөн, уның ырыуҙарына бер аҙ туҡталып китәйек. Улар, үрҙә әйтелеүенсә, ун бер. Халҡының һаны буйынса иң ҙуры – **Көҙәй**. Көҙәйҙәрҙең Шайтан-Көҙәй, Ҡыр-Көҙәй тармаҡтары Салауат районының – 15, Урман-Көҙәй, Төрөкмән-Көҙәй тармаҡтары Иглин районының – 8, Бүләкәй-Көҙәй тармағы Нуриман районының 13 ауылында йәшәй. Бөтәһе – 36 ауыл.

Тажетдин Ялсығолдың "Тарихнамә-и-булғар" әҫәрендә, Урта Азиянан Мейәс буйына Сәйҙәш хан килеп ултырған, тип яҙыла. Уның Әйле ҡәбиләһе ҡыҙынан Тыныш һәм Ҡуштаймаҫ исемле улдары тыуа. Урлап ҡасҡан ҡарағалпаҡ ханы ҡыҙынан ул да тыумай, ҡыҙ ҙа тыумай. Тыныштан Көҙәй һәм Ҡошсо атлы улдар тыуа. "Беҙҙең ата-баба Көҙәй булған, – ти Ялсығол. – Шулай ҙа көҙәйҙәрҙең этногенетик риүәйәттәрендә өс сығанаҡ төҫмөрләнә. Тәүгеһе – Салауат Юлаевтың нәҫелдәре – шайтан-көҙәйҙәрҙең Кавказ яҡтарынан килеүенә ишара яһаһа; икенсеһе – төрөкмән-көҙәйҙәр үҙҙәрен Урта Азиянан сыҡҡан тип иҫәпләй; өсөнсөһө – көҙәйҙәрҙе көнбайыштан, йәғни Бәләбәй йә иһә Минзәлә төбәгенән күскән",– тип раҫлай. Тәүҙә был яҡтарға Тәкәш (хәҙерге Иглин районы Тәкәй ауылының ата-бабаһы), Туйыш һәм Ҡотош (шул уҡ райондағы Ҡаҙаяҡ ауылының тәүге атамаһы) тигән өс бер туған килеп сыға һәм Урман-Көҙәй аймағына нигеҙ һала. Төп көҙәйҙәр боронғо төрки донъяһына ҡарай, һәм һөйләштәре Мең башҡорттарының Дим һөйләшенә тартым. Шайтан-Көҙәй, Ҡыр-Көҙәй тармаҡтарының теле иһә, филология фәндәре

докторы Нәжибә Мәксүтова фекеренсә, көнсығыш диалекттың Әй һөйләшенә ҡарай. Ваҡыт үтеү менән көнсығыш һәм көнбайыш көҙәйҙәр араһындағы бәйләнеш һирәгәйә. Беҙҙең ҡарашҡа, был хәл, бөтәһенән элек, Өфө губернаһының Златоуст һәм Өфө өйәҙҙәренең ҡайһы бер биләмәләрен, шул иҫәптән Бирҙәүеш, Сулея, Кропачево, Вязовая тимер юл станцияларын, Эҫем, Минйәр, Әшә, Усть-Ҡатау, Ҡатау-Ивановск, Йүрүҙән ҡалаларын Силәбе өлкәһенә ҡушыу, элекке кантон һәм волостарҙы районлаштырыу сәйәсәте арҡаһында килеп тыуған. Башҡортостан картаһына ҡарағыҙ әле: Силәбе өлкәһе боронғо башҡорт ерҙәренә һуҡыр эсәк кеүек килеп кергән бит. Әйткәндәй, шул уҡ күрше өлкә Әбйәлил районының периметры буйлап 40 метрға Башҡортостан еренә үткән, ә Магнитогорск аэропорты тотошлайы менән Башҡортостан ерендә ултыра.

Әйле ҡәбиләһенең **Әй** ырыуына Балаҡатай районының – 5, Ҡыйғының – 9, Арғаяштың – 20, Юғары Өфәләнең – 1, Красногвардейскийҙың – 2, Күҫәнең – 3, Сосновканың – 1, Сыбаркүлдең 4 ауылы инә. Бөтәһе 45 ауыл. XIII быуатта йәшәгән Иран ғалимы Рәшид-әд-дин төҙөгән боронғо уғыҙ шәжәрәһендә яраҙ, дүкән, яйырлы, дүргә тоҡомдары берләшеп, уға Уғыҙҙың икенсе улы Әйҙең исеме ҡушыла. Тимәк, Әй ырыуы менән уғыҙҙар араһында ниндәйҙер бәйләнеш булһа ла, ул бөтә ҡәбиләгә лә таралмаған. Әйҙәрҙең бер төркөмө беҙҙең эраның I меңенсе йылдар урталарында йәйҙәрен Яйыҡ башында йәйләһә, ҡыштарын Һыр-Дарья ярҙарына күсә торған булған. Әйҙәр һуңынан төньяҡтағы күршеләре уғырҙар менән дә аралашҡан, һәм был осор VIII – IX быуаттарға тап килә.

**Мырҙалар** ырыуы ла, әйҙәр менән бергә, тәүҙә Көньяҡ Уралдың Ағиҙел, Әй, Яйыҡ, Мейәс буйҙарына килеп ултыра. Ырыу башлығы Мырҙабәк етәкселегендә VII быуатта бәшнәк-уғыҙ-ҡыпсаҡ ҡәбиләләре менән аралашып, Һыр-Дарья йылғаһы һәм Арал диңгеҙе эргәһендәге киң далаларҙа көн иткән. Унан ырыу Көньяҡ Уралға – Әй, Уй, Мейәс, Яйыҡ, Ағиҙел ярҙарына күсеп килә, әммә көслөрәк Табын башҡорттары уларҙы төньяҡҡа ҡыуып ебәрә, һәм бөгөн Мырҙалар ырыуы Салауат районының 15 ауылында йәшәй.

**Дыуан** ырыуына Ҡыйғы районының – 4, Мәсетленең – 14, Балаҡатай районының 4, бөтәһе – 22 ауыл ҡарай. Уның этнонимы монголдарҙың "дурбэн" ырыуына барып тоташып, кәңәш-төңәш урыны, йыйынды аңлатҡан. Бөгөнгө Төркиә парламенты ла "диуан" тип атала. Ошондай уҡ ырыу төркөмдәре ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, үзбәктәрҙә лә осраған. Дыуандарҙың Алтай тауҙарынан көнбайышҡа юлланыуы монгол яуы менән бәйле, һәм улар үҙҙәре менән Ҡошсо ырыуын да эйәртә. Әй ырыуы кеүек, был ике ырыу ҙа Урта Азия аша Бөгөлмә ҡалҡыулығына килеп сыға, Һамар, Ағиҙел буйҙарына тарала. Бөгөн дә Бөрө һәм Благовар райондарында Дыуан ырыуына ҡараған ауылдар бар. Әй үҙәненә улар XIV быуатта килеп ултыра. Дыуан районында бер генә Дыуан ырыулы ауыл да булмауын үткән быуаттың 30-сы йылдарындағы районлаштырыу сәйәсәте менән аңлатырға кәрәк.

Беренсе башҡорт диалектологы Таһир Байышев 20-се йылдарҙа Дыуан-Мәсетле ауылы фельдшеры Закир исемле аҡһаҡалдан ауылдың боронғо шәжәрәһен табып алып, уны тирә-яҡ ауылдарҙан мәғлүмәт йыйып тулыландыра һәм яңы шәжәрә төҙөй. Шәжәрә буйынса, ауылға Ҡармыш менән Батыр исемле уҙамандар нигеҙ һалған икән. Ошо ике кешенән тыуған ир-аттар күрше ауылдарҙың ата-бабалары булып китә. Ҡармыштан Сүнсәләй тыуған.

Унының алты улы була. Аҡбай исемлеһе Ясин һәм Иҫәнбай ауылдарына нигеҙ һала. Аҡбулат – Дыуан-Мәсетле һәм Ғүмәр; Бирҙекәй – Йосоп; Тимербулат – Ҡаранай, Туҡбай һәм Әпшән; Бикбулат – Бурансы; Кинйәбулат Исмәғил ауылдарын нигеҙләй. Батырҙан иһә Үтәмеш тыуа. Унның оло улы Сырбулат – Мишәр; Сынбулат Яңыбай һәм Миҙәт ауылдарына нигеҙ һалһа, Жейәнбайҙан таралған тоҡомдар Тайыш, Аҡкын, Аҙанғол, Төрөпкилде, Яуыш, Көршәле, Мәсәк, Абзай (уны Уртауыл, Мәсетле тип тә йөрөткәндәр), Алағуҙ (икенсе атамаһы – Ҡабыл), Йосоп (Шүрәле) ауылдарын барлыҡҡа килтергән.

**Ҡошсо** ырыуы Оло һәм Бәләкәй ҡошсоларҙан тора. Ҡош менән һунарға йөрөүсене аңлатҡан был ырыу вәкилдәре бөгөн Мәсетле районының – 18, Балаҡатай районының – 3, Сверловск өлкәһенең 12 ауылында көн күрә. Бөтәһе – 33 ауыл.

Үрҙә әйтелеүенсә, ҡошсолар XIII быуатта, дыуандарға эйәреп, Алтайҙан Урта Азияға, артабан Бөгөлмә һәм Бәләбәй ҡалҡыулыҡтары аша хәҙерге Ульяновск өлкәһенә йүнәлә. Бында улар Мәләкәҫ ауылына нигеҙ һала. Бөйөк Октябрь революцияһынан һуң Мәләкәҫкә ҡала статусы бирелә. Әммә 50-се йылдарҙа ҡала болгар революционеры Георгий Димитров иҫтәлегенә Димитровград тип үҙгәртелә. Йылдар, быуаттар үтеү менән, ҡошсолар Кама, Ыҡ ярҙарына, артабан Танып йылғаһы аша Әй йылғаһына килеп сыға. Төп ауылдарын исемһеҙ йылға буйына һалалар. Ауылға ла, йылғаға ла Мәләкәҫ тигән исем ҡушыла. Мәләкәҫте ҡарттар бөгөн дә "Төп ауыл" тип йөрөтә. Бында ғәжәпләнергә урын юҡ, сөнки "Төп ауыл" тигән төшөнсә башҡа ырыу-ҡәбиләләрҙә лә күҙәтелә. Түңгәүерҙәрҙең "төп ауылы", мәҫәлән, – Иҫке Аҫкар, бөрйәндәрҙеке – Ғәлиәкбәр, ҡатайҙарҙыҡы – Сермән, әйҙәрҙеке – хәҙерге Силәбе өлкәһе Һатҡы районының Айлино ауылы, көҙәйҙәрҙеке – Тәкәй. Улар икәү: беренсеһе – хәҙерге Иглин, икенсеһе – Салауат районында, әммә уныһы, Салауат яуы баҫтырылғас, яндырылған. Һарттарҙың "төп ауылы" – Һарт (хәҙер Сарты исемле урыҫ ауылы), мырҙаларҙыҡы – Мырҙалар Мәсетлеһе, тырнаҡлыларҙыҡы – Лағыр ауылы.

Ҡошсоларҙың тәүләп килеп ултырған төп йорто урынында хәҙер Дыуан районының Ябраҫтау (Ярославка) ауылы. Рус батшалығының колонизаторлыҡ сәйәсәте нигеҙендә XVIII быуат урталарында Ҡошсо һәм Дыуан ырыуҙары биләмәләренә Пермь губернаһынан урыҫтар тула башлай. Көнгөр крәҫтиәндәре Павел Токарев, Динис Ширяев һәм Савватий Швалев етәкселегендә 1760 йылда Ҡошсо ырыуы аҡһаҡалдары менән 20 йылға тигән булып ҡуртым (аренда) килешеүе төҙөлә һәм Дыуан ауылына нигеҙ һалына. Салауат яуы баҫтырылғас, башҡорт ерҙәрен туранан-тура талау башланып, урыҫтарҙың ағымы тағы ла көсәйә. Иғтибар иткәнегеҙ бармы икән, Дыуан районының хәҙерге Мәтәле (ул "мәте балсыҡ"ты аңлата), Сальевка "сал ташлы тау", Ярославка (яр аҫты), Вознесенка (Хиуа), Таҙтүбә, Дыуан, Рухтин (борон Исхаҡ тип аталған), Ҡыйғы районының Ләүзә (ләүәл), Мәсетле районының Оло һәм Бәләкәй Устьикин, Үрге һәм Түбәнге Баба, Балаҡатай районының Ямаш, Нөгөш, Ҡарлыхан, Искуш ауылдары тәүҙә бер генә оҙон урам булып ултырған. Был хәйлә урам арттарындағы ерҙәрҙе мөмкин тиклем күберәк эләктереү өсөн эшләнгән. Вознесенканың, мәҫәлән, оҙонлоғо – туғыҙ, Ярославканың – ете, Дыуандың – биш, Ләүзәнең 12 саҡрымға еткән.

Ҡошсоларҙың төп ауылы – Мәләкәҫ эргәһенә урыҫтар килеп төпләнгәс, башҡорттарҙың бер өлөшө таулы-ташлы ҡалҡыулыҡҡа ҡыуыла, икенселәре Ләмәҙтамаҡ ауылына нигеҙ һала. Ике ауылда ла Мәтәй һәм Туғыҙ тоҡомдарынан

алынған урам атмаларының булыуы – бының асыҡ дәлиле. Тик үткән быуаттың 70-се йылдарында Мәсетле районы етәкселәре тарафынан был исемдәр алып ташлана һәм Мәләкәҫтәге Мәтәй һәм Туғыҙ урамдарына Революция һәм Совет, Ләмәҙтамаҡта Карл Маркс һәм Фрунзе исемдәре тағыла. Күрше Һөләймән ауылы ла был баш-баштаҡлыҡтан ситтә ҡалмай. Ундағы боронғо Төлкөсуҡ (тоҡом башлығы Төлкөсураның исеменән алынған, ә суҡ "урам" тигәнде аңлата), Уртасуҡ, Арҡырысуҡ, Йырмаҡ аръяғы урамдарына Әй, Комаров, Гагарин, Революция атамалары ҡушыла. 1998 йылда үткән "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" йыйынында уларҙың боронғо исемдәрен кире ҡайтарыу, ә яңы үҫеп сыҡҡан урамдарға ауылдың тәүге мөғәллиме, Сталин золомо ҡорбаны Абдулла Таһиров һәм Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Чехословакияла "Бөйөк Татр" партизан отряды командиры, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Вафа Әхмәҙуллиндың исемдәрен ҡушыу тураһында бер тауыштан ҡарар ҡабул ителһә лә, район, хатта республика матбуғаты ул турала күп тапҡырҙар сығыш яһаһа ла, ҡарар үтәлмәй.

**Һарт** ырыуы башлыса Дыуан районының алты ауылын үҙ эсенә алған. Шуға ла уларҙы шаяртып "алтауҙар" тип тә йөрөтөр булғандар. Хәҙер һарттар туғыҙ ауылда йәшәй. Был ырыу Урта Азиянан килгән һәм унда көслө генә ырыуҙарҙан иҫәпләнгән. Ләкин Алтын Урҙа хандарының береһе Үзбәк уларҙы (1312 – 1340) баҫып алып, халыҡтарға үҙ исемен ҡуша. Донъя халыҡтары араһында, шулай итеп, берҙән-бер милләткә кеше исеме тағыла. Үҙ һүҙле хандың был ҡылығы менән риза булмағандарҙы Үзбәк юҡ итә йә иһә илдән ҡыуа. Улар араһында Һарт ырыуы ла була. Был – бер фараз. Икенсеһе тураһында шул уҡ Таһир Байышев яҙып ҡалдырған. Тарихтан билдәле булыуынса, Багдад хәлифе Мөхтәсирҙең ҡушыуы буйынса, Волга буйындағы Болғар батшалығына Сүсән-әл-Расси етәкселегендә илселек килә. Уның сәркәтибе Әхмәт ибн Фаҙлан була. Ул бер йылға яҡын юлда күргәндәрен ҡуйын дәфтәренә теркәп бара. Әлбиттә, ғәрәптәрҙең төрки телле халыҡтарға ислам динен таратыу миссияһы һуңынан да туҡталмай. Шундай миссионерҙарҙың береһе Сәйет ибн-Куйден тигән үзбәк муллаһы Әй буйҙарына йүнәлә. Үҙенең йөҙгә яҡын мөрите менән ул кире ҡайтмай, бында төпләнеп ҡала. Улар башҡорт ҡыҙҙарына өйләнә һәм йәшәр ер һорап Тырнаҡлы, Дыуан, Мырҙалар ырыуҙарының аҡһаҡалдарына мөрәжәғәт итә. Ырыу башлыҡтары Төрөпкилде ауылы (Мәсетле районы. Хәҙер ул ауыл юҡ инде) ҡаршыһындағы Хөкөм тауға йыйыла. Оҙаҡҡа һуҙылған кәңәш, бәхәстән һуң үҙҙәрен һарттар тип атаған һәм хәҙер башҡортлаша башлаған ырыуға хәҙерге Мәсетле, Ҡыйғы, Салауат, Дыуан райондары тоташҡан сиктән ҙур ғына майҙандан ер бүлеп бирелә. Әлбиттә, һарттар Әй, Әнйәк, Тәндәк, Шиҙәле йылғалары ярҙарын ғына төйәк итмәгән. Уларҙың сыбыҡ остары Салауат, Балаҡатай, Ғафури, Ҡырмыҫҡалы, Иглин, Әбйәлил, Баймаҡ, Ейәнсура, Бөрйән, Учалы, Шишмә, Дәүләкән, Миәкә яҡтарына, хатта Силәбе, Ҡурған өлкәләренә лә барып тоташа.

Ҡайһы бер ғалимдар Тырнаҡлы, Ҡаратаулы, Түбәләҫ ырыуҙарын да, Алтайҙан сыҡҡан, тип фараз итә. Бәлки, шулайҙыр ҙа. Әммә тарих фәндәре докторы, Башҡорт дәүләт университеты профессоры Диас Йәнтүрин икенсерәк фекерҙә. "Тырнаҡлы ырыуы хаҡындағы легенда- хикәйәттәргә ҡарағанда, – ти ул, – уларҙың ата-бабалары Уралға Һыр-Даръя буйынан йәки Бохара эргәһендәге Башҡорт тауҙары һырттарынан килгән булырға тейеш... Быларҙан тыш, тырнаҡлыларҙың этник тарихы боронғо башҡорт шәжәрәләрендә лә

сағылыш таба. Уларҙың береһендә Тырнаҡлы ырыуына нигеҙ һалыусы итеп Иштәк тигән башҡорт ханы күрһәтелә. Уның һигеҙ улы була: Тамъян, Үҫәргән, Күбәләк, Бәкәтун, Һарт, Тырнаҡлы, Түбәләҫ, Дыуан. Шәжәрәлә әйтелгәнсә, Бәкәтундың улы Әйле була. Ул Мейәс буйында 50 йыл бей булып тора. Х. Д. Ҡолмөхәмәтовтан яҙып алынған икенсе бер шәжәрәлә Үәскәй (Лағыр) ауылы хаҡында шул әйтелә: XIV быуатта унда үҙенең улдары Ҡамай, Аҡжан, Ҡутраш, Сыуаш менән Бүкманды тигән бей йәшәгән. Был уландар Майҡыбей һәм уның улдары Юлбуға, Күсәбә, Имсаҙиға хеҙмәт итә. XIX быуат башында тырнаҡлылар Әй буйының ике ярында урынлашҡан туғыҙ ауылда йәшәгән: Лағыр, Шәрәк, Сағыр, Яуын, Иҫке Мөхәммәт, Ибрай, Яңы Мөхәммәт, Йүкәлеҡул, Әнйәк".

Һуңғы мәғлүмәттәр буйынса, тырнаҡлылар Дыуан, Ҡыйғы, Салауат райондарының – 11, ҡаратауҙар Салауат районының – 2, түбәләҫтәр шул уҡ районды 6 ауылында көн күрә. Күрше Силәбе өлкәһенең Ҡатау-Ивановск районында Түбәләҫ тигән ҡасаба ла бар.

**Өпәй** ырыуына Мәсетле районының Тәкә, Теләш, Ишәле, Свердловск өлкәһенең Аҡбаш, Шәкүр, Араҡай, Үрмәкәй ауылдары инә. Этник яҡтан уларҙы фин-уғырҙарға ла, төркиҙәргә лә тарткылайҙар. Берәүҙәр уның этимологияһын Балтик буйы телдәрендәге "йылға" һүҙенә бәйләй. Крайҙы өйрәнеүсе Марат Ғафаровтың яҙмаһында был ырыу тураһында байтаҡ материадар бар. Өпәйҙәрҙе Әйле берләшмәһенән башҡа ҡарау мөмкин түгел, сөнки ырыу атамаһы этимологиһының Әйгә барып тоташыуын иҫтән сығармайыҡ. Һәр бер атаманы ошо төбәктәге кешеләр ҡуша бит. Әйле ҡәбиләһе үҙе Ялан-әйлеләргә бүленгән, ә Өфө йылғаһы буйындағы әйлеләр "Өфө-Әйле" исемен алған. Ваҡыт үтеү менән әйлеләр мәғәнәһе онотолоп, хәҙерге форма – "өфө плюс әй" (өпәй) килеп сыҡкан була түгелме?" Ҡыҙыҡ фекер, иғтибарға лайыҡ фараз! "Өпәйҙәр, – тигән этнолог ғалим Рим Янғужин, – XVIII быуатҡа үҙҙәренең ойҡашып ултырыуын юғалтҡан. Шуға ла улар утрау-утрау булып рус һәм татар халыҡтары араһына урынлашҡан. Уларҙың бөр өлөшө татар телен ҡабул иткән... Күрәһең, улар был төбәктә бик борондан йәшәгән һәм сығышы буйынса фин-уғырҙарға барып тоташа. Артабан башҡорт мөхитендә улар төркиләшә."

Эйе, Свердловск өлкәһендәге өпәйҙәр урыҫ, татар мөхите тарафынан йотолоуға дусар ителһә лә, Мәсетле районы өпәйҙәренә ул хәүеф янамай, һәм Марат Ғафаров күрше өлкәләрҙәге Өпәй һәм Һыҙғы ырыуҙары менән бәйләнеш булдырыу, уларҙы үҙебеҙгә тартыу мәсьәләһен юҡҡа ғына күтәрмәй. Ул саҡта Боғалыш һыҙғылары ла, Шәкүр өпәйҙәре лә, үҙҙәренең боронғо башҡорт телдәрен, ата-бабаларының ғөрөф-ғәҙәттәрен онотоп, диссимиляцияға бирелмәҫ. Уларҙы үҙ мөхитебеҙгә ҡайтарыу – изге бурысыбыҙ.

Бөгөн Свердловск өлкәһе Красноуфимск районының Боғалыштамаҡ, Урта һәм Үрге Боғалыш, Табанлыкүл (Озерки), Сыҫҡы (Сызги), Иҫкауыл, Ҙур Торош ауылдарында йәшәүсе **Һыҙғылар** – фини-уғыр сығышлы башҡорт ырыуы. Раил Кузеевтың фекеренсә, I мең йыллыҡ аҙағында һыҙғылар ҙа башҡорт ҡәүемен барлыҡҡа килтереүҙә әүҙем ҡатнашҡан. II мең йыллыҡта улар хәҙерге Башҡортостандың көньяҡ-көнбайышынан төньяҡ һәм төньяҡ-көнсығышына, Әй буйына, һуңынан тағы ла төньяҡҡараҡ күсә. XVIII быуатта урыҫ колонизаторҙары Һыҙғы биләмәләрен тартып ала һәм 1735 йылда Красноуфимск ҡәлғәһен һала. Уның тирә-яғына урыҫ, татар, мари һибелеп ултыра.

Шул уҡ Раил Кузеев әйтеүенсә, Әйле ҡәбиләһенең 215-тән ашыу тамғаһы бар. Тамға – мөлкәт, милек билдәһе булараҡ – һәр башҡорт нәҫеленең әйберенә ҡуйылған. Ырыу урманында үҙенә тейешле солоҡ ҡарағайына, малтыуарына, һунар һәм эш ҡоралына, хатта зыяраттағы нәҫел ҡәберҙәре эргәһендә үҫкән ағасҡа ла тамға һуғылған. Һуңынан ул һәр төрлө рәсми ҡағыҙ, документ, килешеү, хат, ғаризаларға ла ҡуйыла башлай. Әйеләрҙең дөйөм ҡәбилә тамғаһы – ярым ай, ҡошо – шоңҡар (икенсе төрлө был яҡтарҙа уны ҡыйғыр тип тә йөрөтәләр), ағасы – тирәк, ораны – һандал, йәғни әйеләр үҙҙәре атағанса, "түш", "түштимер" – тимерлектә тимер сүкей торған ҡорамал.

Шулай ҙа икенсе сығанаҡтарға ла иғтибарҙы йүнәлтеү кәрәктер. Сөнки улар башҡорт халҡының, шул иҫәптән Әйле ҡәбиләһенең дә, килеп сығыуына бөтөнләй икенсе күҙлектән ҡарай һәм быға тиклем йәшәгән концепцияны пыран-заран килтерә.

"Байтаҡ көндәр үткәс, беҙгә башта Жаха (Яйыҡтың уң ҡушылдығы) йылғаһын, унан Ырғыҙ, Моча, Һамар, Кинел, Сок, унан һуң Ҡондорса тигән һыуҙарҙы кисеп сығырға тура килде, – тип яҙа үҙенең ҡуйын дәфтәренә ғәрәп сәйәхәтсеһе Әхмәт ибн Фаҙлан. Был хәл 922 йылда, йәғни X быуат баштарында була. – Был йылғаларҙы үткәндән һуң, беҙ төрки ҡәүемдәренә ингән **Башҡорттар иленә** килеп еттек." Туҡта! "Башҡорттар иленә", ти түгелме Фаҙлан? Нәҡ үҙе! Тимәк, X быуатта уҡ башҡорттарҙың үҙ дәүләтселеге, үҙ иле булғас, улар был төбәктә тәүге йыл, тәүге быуат ҡына йәшәмәгән, тимәк, улар ҡайҙандыр Себер яҡтарынан да, Урта Азия сүллектәренән дә, Кавказ тауҙарынан да күсеп килмәгән, ә шунда яралып, ғүмер баҡый шул ерҙә йәшәгән.

Башҡорттарҙың Уралдың боронғо халҡы булыуы, уларҙың күскенселәр түгеллеген тыуған яҡты өйрәнеүсе ғалим, техник фәндәр кандидаты, тыумышы менән Салауат районы егете Радик Вахитов тағы ла сағыуыраҡ буяуҙар менән раҫлай. Уның 2007 йылдың майында Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә сыҡҡан "Под крыло двухглавого орла" тигән китабына күҙ һалайыҡ. Философия фәндәре кандидаты Зөфәр Тимербулатовтың "Баш һүҙ"ендә әйтелеүенсә, был – көтөлмәгән концепцияларға нигеҙләнгән ғилми тикшеренеү һөҙөмтәһе, һәм ул элеккесә абстракциялы фекерләүгә түгел, бәлки, бай фактик материалға нигеҙләнгән. Хеҙмәттең көтөлмәгәнлеге абруйлы һәм хөрмәтле ғалимдар килтергән мәғлүмәттәргә бөтөнләй яңыса аңлатма биреү, улар менән туранан-тура, кемдең кемлегенә ҡарамай, бәхәскә инеүенән дә тора.

Радик Вахитов үҙе лә – бик үҙенсәлекле һәм ҡаршылыҡлы, көтөлмәгән яҙмышлы, ябай, шул уҡ ваҡытта ҡатмарлы холоҡло шәхес, тип әйтһәм, хаталанмамдыр. Ул тәүҙә Өфө авиация институтын тамамлап, техник фәндәр кандидаты ғилми дәрәжәһенә диссертация яҡлай, хатта 1992 йылда "Пчелы и люди" исемле китап та яҙа. Етмәһә, ат спорты мастеры ла. "Янғантау" шифаханаһындағы ат спорты базаһы Радиктың туранан-тура ҡатнашлығы һәм ярҙамы менән төҙөлгән. Йәнә яҡташы Салауат Юлаевтың тормошо һәм көрәше тураһында мәҡәләләр яҙып, республика матбуғатында йыш сығыш яһай.

Көтөлмәгән теорияға ҡоролған фекер йөрөтөүсе Радик Вахитовтың еңел ҡулы менән башҡорттарҙың сығышы, уларҙың күсмә халыҡ булыуы тураһында быға тиклем йәшәп килгән ҡараштар шик аҫтына ҡуйылып, яңы концепция күтәрелә. Башҡорттарҙың борон-борондан солоҡсолоҡ менән шөғөлләнеүе, башҡорт балының бар донъяла дан тотоуы һәр кемгә билдәле.

Әммә Радик Вахитов был тәү ҡарашҡа ябай күренешкә икенсе яҡтан килә. “Солоҡ, – ти ул, – күсмәй торған мөлкәт, ә солоҡсолоҡ урыҫ, Балтик буйы халыҡтары, сирмеш, Волга булғарҙары кеүек ултыраҡ тормош менән йәшәгән халыҡтарға ғына хас. Тик башҡорттарҙы ғына тарихсылар бер төрлө нигеҙһеҙ рәүештә дала күскенселәренә ҡайтарып ҡалдырҙы. Был – “миҙалдың бер яғы ғына”, уның икенсе, төп һәм ҡыйыныраҡ яғы ла бар. Башҡорт халҡының күсмә тормошта йәшәүе тураһындағы концепция башҡорттарҙы тыуған иленән мәхрүм итә, уларға тыуған Уралында сираттағы күскенселәр итеп кенә ҡарай. Йәнәһе, тыуған илдәре лә булмаған ниндәйҙер төрки ҡәбиләләре ҡайҙалыр йөрөгән-йөрөгән дә Уралға килеп төпләнгән. “Урал батыр” эпосына күҙ һалайыҡ. Нимә хаҡында һөйләй ул? Урал тауҙары – башҡорт халҡының данлы улы Урал батырҙың исемен йөрөтә. Эпос шиғри тел менән башҡорттарҙың бик боронғо замандарҙан уҡ Урал тауҙары менән айырылғыһыҙ берлеге тураһында һөйләй. Уның бөтә геройҙары ла Урал ере менән бәйле. Шүлгән – уның исемен күренекле Шүлгәнташ мәмерйәһе йөрөтә; Йайыҡ, Иҙел, Нөгөш, Һаҡмар – Уралдан баш алыусы йылғалар; Ямантау һәм Ирәмәл – Уралтау түбәләре. Эпоста Алтай, Урта Азия, Ҡара диңгеҙ тураһында бер һүҙ ҙә юҡ. Кавказ тауҙары, Ҡафтау – башҡорттар өсөн бик алыҫ мифик тауҙар. Улар артында йөҙ йәшкә етеп аждаһаға әйләнгән йыландар ғына йәшәй. “Урал батыр”ҙа башҡорттарҙың күсмә тормош алып барыуы, икһеҙ-сикһеҙ далаларҙа оҙон-оҙаҡ ил гиҙеп йөрөүҙәренә лә ишара юҡ... Былар бөтәһе лә үҙ тарихының башында уҡ башҡорттарҙың Уралда яралғаны, ошонда йәшәүе, урман кешеләре булыуы, йылҡысылыҡ, һунар, солоҡсолоҡ менән шөғөлләнеүе, миҙгеленә ҡарап, яҙлауға, йәйләүгә сығып ҡына ярым күсмә тормош алып барыуы тураһында һөйләй.”

Ошондай ябай, көн кеүек асыҡ, ләкин төплө фекер йөрөтөүе менән Радик Вахитов әлегә тиклем ҡалыплашҡан бөтә теорияларҙы, фән донъяһында нығынған концепцияларҙы юҡҡа сығара, хатта ҡайһы бер шәжәрәләрҙең нигеҙен емерә түгелме? Башҡорт тарих ғилемендә был күренеште революция, әллә контрреволюция тип аңлатырғамы? Эйе, бында уйланырға, бәхәскә урын бар. Кем белә, бәлки, был – өр-яңы фәнни асыштыр ҙа!

Әйле ҡәбиләһе тарихы буйлап артабан китәйек. Урыҫ батшаһы Иван Грозный 1552 йылдың октябрендә Ҡазан ханлығын баҫып алғас, башҡорт ҡәбиләләре “Аҡ батша”ға баш һалырға мәжбүр була. Иң беренсе булып 1554 йылдың ҡышында Ғәйнә башҡорттарының башлығы Айсыуаҡ бей Ҡазанға барып, Рус дәүләтенә инеүе тураһында килешеү төҙөй һәм “Жалованный грамота” алып ҡайта. Артабан Мең ҡәбиләһенән Ҡәнзәфәр бей, Тамъяндан – Шәғәли Шаҡман, Юрматынан – Тәтегәс бей, Үҫәргәндән – Бикбау бей, Бөрйәндән – Иҫке бей, Ҡыпсаҡтан – Мәтәүле Ҡарағужа бей, Уран ырыуҙарынан, йәғни хәҙерге Баҡалы, Илеш, Туймазы, Шаран яҡтарынан – Ҡошоҡ бей Ҡазанға юллана. Шулай итеп, 1557 йылда башҡорт ҡәбиләләренең күпселеге үҙ ирке менән Рус дәүләтенә ҡушылһа ла, Әйле, Ҡатай, Табын, Һалйот ҡәбиләләре Себер ханлығы ҡулында ҡала һәм Күсем хан – 1585 йылда, улдары һәм ярандары 1598 йылда урыҫ ғәскәрҙәре тарафынан ҡыйратылғас ҡына, яуланып алына.

Ирек һәм азатлыҡ һөйөүсе яҡташыбыҙ Рәми Ғарипов һүҙҙәре менән әйткәндә, “батшаларға башын эймәгәнде, башҡаларға ла баш эймәҫ” әйлеләр үҙ

араларынан Батырша һәм Салауаттарҙы сығара, урыҫ колонизаторҙарына ҡаршы яуға беренсе булып күтәрелә. Әгәр, мәҫәлән, XVIII быуаттың икенсе яртыһында Башҡортостанда бөтәһе 280 олоҫ старшинаһы булһа, шуларҙың 200-ө Пугачев ихтилалында ҡатнаша. Шул иҫәптән, Нуғай даруғаһынан – 67, Ҡазандан – 41, Усанан – 11, Себерҙән – 29, Исәт провинцияһындағы Әйле ҡәбиләһенә ҡараған 9 старшинаны ла ҡушһаҡ, улар 32-гә етә.

Бөтә башҡорт ҡәбиләләре кеүек, әйлеләр ҙә Рәсәй алып барған поход һәм һуғыштарҙа, шул иҫәптән, Ливон, Польша, Пруссия, Ҡырым, Һыр-Даръя походтарында, 1812 йылғы Ватан һуғышында үҙ аты, үҙ ҡоралы менән әүҙем ҡатнаша. Алыштарҙа ҡаһарманлыҡ күрһәткәндәре тарханлыҡ дәрәжәһенә грамота алып ҡайта. “ 1775 йылда, – тип әйтелә, мәҫәлән, Ҡошсо ырыуына ҡараған Һөләймән ауылы шәжәрәһендә, – Ҡырым походына барғандар, дворян чины биргән грамота алғандар. Дворянлыҡ чины бәрәбәренә бәгзе берәүҙәр сар олуғ кенәз Алексей уғлынан ер хаҡында Жалованный грамота алғандар.” Был миҫалдар үҙе үк Әйле башҡорттарының Рәсәй һәм Башҡортостан тормошонда әүҙем ҡатнашыуы, хатта ҡайһы бер сараларҙы үҙҙәре башлап йөрөүҙәре хаҡында һөйләй.

Үҙ төбәген генә түгел, бәлки, бөтә Башҡортостанды данлаған шәхестәр ҙә аҙ сыҡмаған Әйле ҡәбиләһенән. Уларҙың исем-шәрифтәрен һанап сығыу өсөн генә лә байтаҡ ҡағыҙ, ваҡыт кәрәк булыр ине. Шулай ҙа Ҡол Ғәли, Салауат Юлаев, Байыҡ сәсән, башҡорттарҙан РСФСР-ҙың тәүге халыҡ артисы Ғималетдин Минһажев, тәүге архитектор Барый Кәлимуллин, тәүге ғалим-диалектолог Таһир Байышев, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Башҡортостан хөкүмәтен етәкләгән, һуңынан КПСС өлкә комитетының беренсе секретары булып эшләгән Сабир Ваһапов, 1950 –1967 йылдарҙа БАССР Юғары Советы Президиумы Рәйесе Фәйзрахман Зағафуранов, Башҡортостандан беренсе булып “СССР-ҙың халыҡ уҡытыусыһы” исемен алған Социалистик Хеҙмәт Геройы, ике саҡырылыш (1970 – 1978йй.) СССР Юғары Советы депутаты Хәнифә Искәндәрова, Башҡортостандың халыҡ шағирҙары Рәми Ғарипов менән Тимер Йосопов, башҡорт телен яңы үрҙәргә күтәргән профессор Нәжибә Мәксүтова, академиктар Юлай Байрамғолов, Морат Ғөзәйеров, Ильяс Вәлиев, Башҡортостанда ғына түгел, бәлки, бөтә Рәсәйҙә күренекле селекционер, ауыл хужалығы фәндәре докторы, профессор Вәкил Ғирфанов, классик, милли һәм ирекле көрәш, самбо буйынса СССР-ҙың спорт мастеры, Урал дәүләт физик культура академияһы (Силәбе) профессоры Харис Йосопов, Башҡортостандың халыҡ артистары Ратмир Бәҙретдинов, Хәмит Яруллин, Мулланур Ниғмәтуллин, дәүләт эшмәкәре Энгельс Ҡолмөхәмәтов, I ранг капитандары Мансур Ахунов, Фларит Ғәләүев, әҙиптәр Низам Ҡәрипов, Сафуан Әлибай, Ринат Камал, Рәшит Әхтәри, журналистар Гәүһәр Батталова, Сәлимйән Бәҙретдиновтарҙың исемдәрен әйтмәй булмай. Улар һәм башҡа бик күптәр – әйлеләрҙең мәртәбәһен күтәргән күренекле шәхестәр, тип әйтер инем мин.

Эҫем артылыштары артында ятҡан Әйле ҡәбиләһе биләмәләре – Өфөнән иң алыҫ төбәктәрҙең береһе. Бында бер генә сәнәғәт предприятиеһы ла, төҙөлөш тресы ла, бер генә юғары уҡыу йорто ла, профессиональ театр ҙа, спорт комплексы ла юҡ.

Күп йыллыҡ геология эҙләнеүҙәре һөҙөмтәһендә урта һәм юғары карбон ҡатламдарының Мәтәле, Ҡыҙылбай, Әләгәҙ, Ыҡтамаҡ, Мөслим, Яңыбай, Апут,

Ҡаракүл ауылдары эргәһендә 10-ға яҡын нефть һәм газ ятҡылығы асылған. Ләкин уларҙы сәнәғәт юлы менән сығарыу тыйылған, тәрән консервацияланған һәм киләсәккә стратегик запас итеп тотола. Шул уҡ ваҡытта типһә тимер өҙөрҙәй меңдәрсә башҡорт егеттәре, башлыса Әйле ҡәбиләһенән, Көнбайыш Себер тарафтарындағы тундра һәм батҡыл һаҙлыҡтарҙа, ғүмерҙәрен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып, ярты хаҡҡа нефть һәм газ сығара, Екатеринбург һәм Силәбе төҙөлөштәрендә, Первоуральск, Түбәнге Тагил, Златоуст заводтарының иң зарарлы цехтарында, Коми Республикаһында бил бөгә. Юҡ, “оҙон аҡса” артынан сапмай улар ете-ят ерҙәргә, ә эш юҡлыҡтан, ғаиләләрен аҫырау, балаларын ас-яланғас итмәү, уларҙы уҡытыу, кеше итеү өсөн китә, ә үҙебеҙҙең байлыҡ аяҡ аҫтында стратегик запас булып ята.

Тағы ла бер байлыҡ тураһында. Салауат районының Күсәләр ауылы аръяғында ғына көкөртлө кислородтан торған шифалы батҡаҡ һәм Луганск тибындағы минераль һыу сығанағы ташландыҡ хәлдә ята һәм яҙғы ташҡын ваҡытында Йүрүҙәнгә аға. Урындағы халыҡ уны бар тип тә белмәй, ә күрше Силәбе өлкәһенән машиналар менән ташыйҙар. Дыуан районының элекке Петуховка, Валишовка, Кошелевка, Яңы Михайловка, Балаҡатай районының Иҫке Маҫкары ауылдары янында ла үҙәк Рәсәйҙәге ҡайһы бер минераль һыу сығанаҡтарына торошло ятҡылыҡтар табылған. Әммә уларҙы тикшереп, халыҡ файҙаһына эшләтергә уйлаған кеше юҡ. Дыуан, Балаҡатай, Салауат урмандары, ҡырҡылып, ситкә күпме оҙатыла?! Ағасты урында эшкәртеү өсөн комбинат, мебель, целлюлоза-ҡағыҙ фабрикалары асҡанда, был тиклем байлығыбыҙ эсебеҙҙә тишер инеме? Халыҡҡа ла эш урыны булыр, өҫкә ауырға торған байлығыбыҙ ҙа янда ҡалыр ине бит?

Төбәктә дауалау учреждениеларының заман талаптарына яуап бирмәүе лә шом тыуҙырмай ҡалмай. Оло Ыҡтамаҡтағы үҙәк район дауаханаһын 2006 йылда уҡ, Өфөнән оло ҡунаҡтар саҡырып, тантаналы рәүештә асһалар ҙа, медицина йыһаздары, ҡорамалдар етешмәү арҡаһында, тыштан ғына тауҙай ултыра. Дыуан районы үҙәге Мәсәғүттәге үҙәк район дауаханаһы ике тиҫтә йыл “төҙөлә”, ҡалҡкан стеналары емерелә лә башлап, ике быуат араһындағы “һаҡаллы” төҙөлөштөң осо-ҡырыйы ла күренмәй. Мәҙәниәт учреждениеларының да күбеһе “хан”заманындағы биналарҙа көн күрә, уларҙың матди техник базаһы ярлы.

Бөгөн төньяҡ-көнсығыш райондарҙың береһендә лә башня крандары ла, күтәргес механизмдар ҙа, бетоновоздар ҙа юҡ, төҙөлөш өсөн кирбес, таш, таҡта ташыусы машиналарҙы ла, “майна”, “вира” тип ҡысҡырыусы мастерҙарҙы, ташсыларҙы, малярҙарҙы ла күрмәҫһең. Улар бөтәһе лә дүрт орденлы республиканың баш ҡалаһында, өфөләрҙе генә хеҙмәтләндерә... Уйламаған ереңдән уйлап ҡуяһың: әгәр баш ҡалаға һалынған капиталдың бер өлөшөн генә лә төньяҡ-көнсығыш кеүек артта ҡалған төбәктәрҙе үҫтереүгә ебәргәндә, беҙҙең яҡ та сәскә атмаҫ инеме икән? Башҡортостан бит Өфө ҡалаһынан ғына тормай, ә 4 миллиондан ашыу халҡы менән 143,6 мең квадрат километр майҙанды биләгән ҙур Башҡортостанды ла үҙ эсенә ала, һәм уның ҡала, райондары тураһында ла ҡайғыртырға, хәстәрлек күрергә кәрәктер. Бының менән мин бер кемдең дә баҡсаһына таш ырғытырға, кемгәлер күрһәтмә, кәңәш бирергә йыйынмайым, әммә әсе хәҡикәттән, дөрөҫлөктән ҡасып та, уны урап үтеп тә булмай.

Төньяҡ-көнсығыш – ауыл хужалығы продукцияларын етештереүсе төбәк,

һәм бында ауыл хужалығы белгестәрен әҙерләүгә төп иғтибар йүнәлтелергә тейеш ине һымаҡ. Әммә уртасыл ғына ғүмер кисереүсе Дыуан ауыл хужалығы техникумынан башҡа юғары уҡыу йорто юҡ. Урта махсус белемле педагогтар тик Мәсәғүт педагогия колледжында ғына уҡытыла. Ауыл хужалығы һәм мәғариф менән бәйле юғары уҡыу йорттарын асыу көн үҙәгендә торған проблема икәнлеген һәр кем белә, ләкин уны ыңғай хәл итеү өсөн бик ашығып бармайҙар.

Әй-Йүрүҙән буйҙарындағы районлар – Башҡортостанда үҙәк ҡалаһы булмаған, индустриализацияны ауырлаштырған, урындағы тәбиғи ресурстарҙы файҙалана алмаған берҙән-бер социаль-иҡтисади төбәк. Дөрөҫ, 1922 йылда Мәсәғүт кантоны ойошторолғас, уның үҙәге Мәсәғүткә ҡала исеме бирелгән-бирелеүен, ләкин 1930 йылда районлаштырыуҙар башланғас, был статус алып ташланған. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Мәсәғүт бөгөн дә төньяҡ-көнсығыштың үҙәге тип иҫәпләнә. Әгәр был мәсьәләгә кире ҡайтып, ышаныслы һәм ныҡлы төҙөлөш базаһы менән ауыл һәм урман хужалыҡтары продукцияһын эшкәртеүсе ит һәм икмәк комбинаттарын, целлюлоза-ҡағыҙ фабрикаһын, автомобиль һәм трактор ремонтлау, башҡа төр предприятиелар асып, Мәсәғүтте ҡалаға әйләндергәндә, бөгөн эшһеҙ хафаланған урындағы халыҡҡа эш урындары ла булыр, йәштәр ҙә ете ят ерҙәргә китмәҫ ине. Юғиһә, ҡыҙыҡ һәм ҡыҙғаныс хәлдәргә лә осрайһың. Төньяҡ-көнсығыш райондарға терәлеп ятҡан Силәбе өлкәһенең Һатҡы районы бер гектар ҙа иген сәсмәй, әммә уның икмәк комбинаты бөтөн регионды үҙ икмәге менән туйындыра. Парадокс түгелме ни был? Беҙҙең Сибай һәм Туймазы, Мәләүез һәм Яңауылдан ни еребеҙ кәм? Әммә бөгөн ул яҡ райондарға ғына күберәк иғтибар бүленеп, төньяҡ-көнсығыш төбәк менән артыҡ иҫәпләшеп бармайҙар. Беҙгә күп тә кәрәкмәй: матди-техник базаны нығытырға финанс ярҙамы һәм иғтибар булғанда, Әй-Йүрүҙән буйҙары ла алға китергә тора.

Эйе, типһә тимер өҙөрлөк һылыу башҡорт егеттәре эш эҙләп ситкә китә, ә улар урынына төньяҡ-көнсығыш төбәк кенә түгел, бәлки, бөтә Башҡортостан иммигранттар менән тула бара. Әрмән һәм грузин, үзбәк һәм тажиҡ, хатта ҡытай, корея һәм вьетнам милләтле килмешәктәр ҡунаҡҡа тип килмәй, бәлки, хужа булырға килә. Улар сауҙа, төҙөлөш, ауыл хужалығы продукцияһы, ағас эшкәртеү предприятиелары аса, коммуналь хужалыҡтарҙы үҙ ҡулдарына ала бара, ә беҙ, башҡорттар, үҙ илебеҙҙә уларға бил бөгөргә мәжбүрбеҙ. Эш артабан да шулай дауам итһә, үҙ этносыбыҙҙы ла юғалтасаҡбыҙ.

***

Эҫем артылыштары аръяғында айырым ярымутрау булып ятҡан төньяҡ-көнсығыш төбәкте алға ебәреүгә ҡамаусалаусы башҡа факторҙар ҙа, шул иҫәптән кеше факторы ла, бар. Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы шул: Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш райондары проблемалары буйынса махсус Дәүләт программаһы әҙерләп, Республика Президенты кимәлендә ҡабул итергә һәм һис кисекмәҫтән эшкә ҡушырға кәрәк.

Башҡа юлды мин күрмәйем.

**Ризван ХАЖИЕВ,**
**филология фәндәре кандидаты.**

# УЛ МИҢӘ АРҠАЙЫМДЫ АСТЫ



*Әлим Барый улы Зарипов (1954 — 2008) Учалы районының Рысай ауылында тыуған. Рысай, Илсе урта мәктәптәрендә уҡый. Башҡорт дәүләт университетының тарих факультетын тамамлағандан һуң, райондың төрлө мәктәптәрендә уҡыта, завуч, директор вазифаларын башҡара. 1998 йылдан БДУ-ның Сибай институтында өлкән уҡытыусы, доцент булып эшләй. Ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем ғалим шунда, тарих кафедраһында, уҡытты һәм фән менән шөғөлләнде.*

*Әлим Зарипов — РФ мәғариф отличнигы, БР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы, тарих фәндәре кандидаты, «Эй, Яйыҡ йорт, Яйыҡ йорт» (1997), "Юго-Восточный Башкортостан. 1917 — 1921 годы" (2001) китаптарының, бер нисә монографияның, байтаҡ ғилми хеҙмәттәрҙең авторы. Ташҡа баҫылған һәр хеҙмәтендә тыуған яғының, бигерәк тә Учалы төбәгенең этномәҙәниәтен — үҙенсәлекле тарихын, төрлө ҡәүем-ҡәбиләләрҙең ғөрөф-ғәҙәтен, тел-лөғәтен дәлилле яҡтыртты, шул мираҫты һаҡларға саҡырҙы.*

*Энциклопедик белемле ғалим-педагогтың республика матбуғатында, шул иҫәптән «Ағиҙел» журналында, мәғлүмәткә бай мәҡәләләре донъя күрҙе. Уларҙың һәр ҡайһыһына төпсөрлө эҙләнеүҙәр, ҡыҙыҡлы һығымталар, мөһим асыштар хас ине. Белеүемсә, докторлыҡ диссертацияһы өҫтөндә лә ныҡышмалы эшләне. Һәр хәлдә, ҙур пландар менән йәшәне. Мөләйем йөҙлө, асыҡ күңелле, итәғәтле иптәш, иғтибарлы әңгәмәсе ине. Бер йәй ул беҙҙе — дуҫ-иш биш ғаиләне — Арҡайымға алып барып, көнө буйы Тәгәрмәс-ҡаланы күрһәтеп, һөйләп, тулы экскурсия ойошторҙо. Беҙ ошо егетлеге өсөн уға һаман да рәхмәтлебеҙ.*

*Редакцияға һуңғы килгәнендә ул журналға бер нисә мәҡәлә ҡалдырғайны, әммә үҙе иҫән саҡта бөгзеләрен сығарырға өлгөрә алманыҡ. Бөгөн уҡыусыларыбыҙ иғтибарына шуларҙың береһен тәҡдим итәбеҙ.*

**Әмир ӘМИНЕВ.**

**Әлим**
**ЗАРИПОВ**

# ТАБЫН ИЛЕ

## Башҡорттар — Рәсәй Федерацияһы биләмәләрендә бик боронғо һәм бик ҙур халыҡ

Тимер быуаттан уҡ боронғо башҡорт ырыуҙары Урал тауҙарының ике яғын да биләп йәшәгән. Халыҡ ныҡ артып киткән мәлдәрҙә улар Иҙелдән (Волга) Алтай тауҙарына тиклем ерҙәрҙә көн иткән. Сыңғыҙ хан дәүеренән XX быуат баштарына тиклем башҡорттарҙың ергә аҫабалыҡ хоҡуғы була. Башҡорттарҙың тәүҙә Сыңғыҙ хан мәмләкәтендә, унан Алтын Урҙала, аҙаҡ килеп Рәсәй империяһы составында булыуының төп үҙенсәлеге — аҫабалыҡ хоҡуғында. Уның урыҫтар тарафынан уйлап сығарылмағанлығына, ә XIII быуатта уҡ барлыҡҡа килгән юридик норма икәнлегенә баҫым яһап әйтергә кәрәк.

Сыңғыҙ хан империяһы барлыҡҡа килгән осорҙа (1206 йыл) башҡорттарҙың ырыу һәм ҡәбиләләре 450 мең квадрат километр самаһы ер биләп йәшәгән. 1735 —1917 йылдарҙа дауам иткән башҡорт ерҙәрен баҫып алыу осоронда, йәғни 1917 йылғы Февраль инҡилабынаса, аҫабалар ҡулында ни бары 97 мең квадрат километр ер ҡала. Башҡорт үҙаңының ҡабатланмаҫлығы шунда: тарихи үткәндәрҙе, ҡайһы ырыу-ҡәбиләгә ҡарауҙарын белеү, боронғо ата-бабаларының ҡаһарманлыҡтарын хәтерҙә тотоу әле лә көслө. Әгәр ҙә башҡорттар тарихи Ватанында борон-борондан йәшәмәһә, бындай хәтер һаҡлана алмаҫ ине. Төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүм булыуынса, башҡорт этносының ойошоуында антропологик, тел, дини инаныуҙары һәм мәҙәниәте буйынса төрлө булған 30 — 40 ырыу һәм ҡәбилә ҡатнашҡан. Байтаҡ тарихсылар, башҡорттар бер халыҡ булып VIII—IX быуаттарҙа ойоша, тип иҫәпләй. Ғәрәп яҙмалары, башҡа сығанаҡтар авторҙары ҙур һәм көслө халыҡ булараҡ башҡорттар тураһында тап IX—X быуаттарҙа телгә ала башлай. Башҡорт ханлығы барлыҡҡа килгән осор була ул. Ханлыҡ, беҙҙеңсә әйткәндә, тиҫтәләрсә ырыуҙарҙы үҙ эсенә алған Көнсығыш конфедерацияһы булғандыр. Әммә ханлыҡ оҙаҡ йәшәмәй, бер нисә илгә тарҡала.

*Һуңғы йылдарҙа тарихҡа мөнәсәбәт ныҡ ҡына үҙгәрҙе. Археология, лингвистика, топонимика һ.б. сығанаҡтарға таянып, көтөлмәгән фараздар барлыҡҡа килә. Журнал уҡыусыларына тәҡдим ителгән түбәндәге хеҙмәттә мин башҡорт ҡәбиләләренең иң ҡеүәтләләренән булған Табын ырыуының тулы тарихын күҙ алдына баҫтырырға тырыштым.*

Автор.

Прабашҡорт этносының иң боронғо ҡатламын хәҙерге венгр, манси, хант халыҡтарының ата-бабалары, фин-уғыр сығышлы ырыу-ҡәбиләләр тәшкил иткән. Икенсе ҡатлам —Арҡайым заманынан ҡалған һәм һуңыраҡ күсеп килгән иран телле халыҡтар. Башҡорт этносының иң йәш — өсөнсө ҡатламы — төрки халыҡтар. Был ҡатлам көслөрәк йоғонто яһағанғалыр инде, ғалимдар башҡорттарҙы телдәрҙең төрки-алтай төркөмөнә индерә. Беҙҙең эраға тиклем Алтайҙан алып Дон йылғаһына тиклемге дала, урманлы далаларҙа көн иткән төрки халыҡтар һәм ҡәбиләләр һуғышсан төрки-һундар хакимлығы аҫтында була. Тимәк, тап ошо дәүерҙә уғыр һәм иран телле ҡәбиләләрҙең теле төркиләшә башлай. Һундарҙың биләмәләре көньяҡта Һинд океанына терәлһә, көнбайышта — Атлантик, ә көнсығыш сиге Тымыҡ океан ярҙарына барып етә. Беҙҙең эраның тәүге мең ярым йыллығы Тымыҡ һәм Атлантик океандар араһындағы ғәйәт киң ерҙәрҙә төрки мәҙәниәте, төрки дине (Тәңрелек) һәм төрки теле тантана иткән осор була. Бөтә донъяға та-нылған төрки тарихсыһы Зәки Вәлиди башҡорттарҙы һундарҙың туранан-тура вариҫтары тип иҫәпләгән. Был иң элек Табын ырыуына ҡағыла, тип тә өҫтәйек. VI быуаттың урталарына саҡлы тарихи Башҡортостан һундарҙың мәҙәни һәм социаль-иҡтисади йоғонтоһон кисерә. Шулай итеп, Урта һәм Көньяк Уралда I — V быуаттарҙа этносәйәси хәл ҡырҡа үҙгәрә. Уғыр һәм иран телле ҡәбиләләрҙең бер өлөшө, һундарға эйәреп, Көнбайыш походтарына ҡуҙғала, ә уларҙың ерҙәрен Алтай, Монголиянан, Байкал яры буйҙарынан, Урта Азиянан күсенгән төрки телле ҡәбиләләр биләй.

## Башҡорт ырыу-ҡәбиләләренең иң боронғо тарихы

Алтай, Монголия һәм Көнсығыш Ҡытайҙың күп һанлы төрки (шулай уҡ монгол) ҡәбиләләренән беҙҙе иң элек динлиндар ҡыҙыҡһындыра, сөнки уларҙан сир-илтер, киби, уйғыр, тува, ҡурыҡан, теленгит, бугу, байырку, тонгра, кун (әйткәндәй, ҡыпсаҡтар үҙҙәрен «ҡоман» йәки «ҡун» тип атаған. —**Ә.З.**) ҡәбиләләре ингән Теле халҡына нигеҙ биргән. V быуатта телелар Иртыш йылғаһы үҙәненә килеп төпләнә. Иртыш менән Или йылғалары араһы прабашҡорт ҡәбиләһенең Ватанына әүерелә. Улар оғуз телендә аралаша. VI—VII быуаттарҙа торҡот-төрки ҡәбиләләренең һөжүме арҡаһында тарҡалған телеларҙан ике эре этнос — оғуздар (хәҙерге төркмәндәрҙең боронғо ата-бабалары. — **Ә.З.**) һәм башҡорттар ойоша башлай. VII—IX быуаттарҙа Урта Азия менән Ҡаҙағстан киңлектәрендә төрки телле һундар, иран телле мөйтән-үҫәргән, бөрйәндәрҙе берләштергән Башҡорт Урҙаһы тип аталған дәүләт булыуы билдәле.

VI быуатта тағы ла бер Урҙа Алтайҙы ташлап китә. Дизауыл хан етәкселегендәге Авар Урҙаһы була ул. Ҡайһы бер төрки ҡәбиләләр ҙә уға эйәрә. Аварҙарҙың көнбайышҡа күсенеүе Көньяҡ Уралда йәшәгән ҡәбиләләргә лә йоғонто яһай. Йөҙ йылдан һуң, йәғни VII быуат урталарында Дон йылғаһынан Эльбаға тиклемге ерҙәр авар ханы Баян ҡулы аҫтында ҡала. Төрки ҡәбиләләрҙең көнбайышҡа күсенеүе, шулай уҡ Урта һәм Көньяҡ Уралдың далаларын, урманлы далаларын үҙләштереүе туҡталмай. 546—745 йылдарҙа көнсығышта Һары диңгеҙ менән көнбайышта Ҡара диңгеҙгә тиклем киңлектәрҙә ҡеүәтле төрки дәүләте — Бөйөк Төрки ҡағанаты ныҡына. Уның бөйөклөгө һәм ҙурлығына ишара итеп, ҡағанатты «Ун уҡлы ил» тип тә атайҙар. Был уның ун провинцияға бүленеүен аңлата. Империяға нигеҙ һалыусы, уның беренсе ҡағаны Бумын (Төмән) тигән кеше була. Башҡорт

шәжәрәләре аша был шәхестең төрки телле Табын ҡәбиләһенең бейе булғанлығы билдәле. Һуңыраҡ табындар Бумындың тәүбабалары икәнлеген таный. Ә беҙ, табындар, 1460 йыл элек ата-бабаларыбыҙҙың донъяла иң ҙур дәүләттәрҙең береһенә нигеҙ һалыуы менән ғорурланырға хаҡлыбыҙ. Эйе, Табын ҡәбиләһе тормошонда сағыу һәм таң ҡалырлыҡ осорҙар булып, табындар үҙ дәүләтен ҡороу, унда хакимлыҡ итеү бәхетенә өлгәшкән.

Табын башҡорт ҡәбиләһенең тәүтөйәге Алтай булыуына һис кенә лә ғәжәпләнергә ярамай, сөнки башҡорт ҡәбиләләренең кәм тигәндә яртыһы Алтай-Монгол йәки Урта Азия тарафтарынан сығыуы киң билдәле. Улар I — XIV быуаттарҙа Урта һәм Көньяҡ Уралға төрлө яҡтан килеп, башҡорт халҡына үҙенең тормош рәүеше, ғөрөф-ғәҙәттәре, теле һәм мәҙәниәте менән килеп ҡушылып, уны байытҡан. Әйткәндәй, тикшеренеүселәр табындарҙы антропологик яҡтан Урта Азия тибына индерә. Башҡорт этносының йәҙрәһе Көньяҡ Себерҙән сыҡҡанлығын иҫбатлаусы Нияз Мәжитов менән Әлфиә Солтанова йөҙ тапҡыр хаҡлы.

## VIII – XIII быуаттың башында табындар

745 йылда Бөйөк Төрки ҡағанаты башҡа төркиҙәр — Уйғыр ҡағанаты һөжүменән юҡҡа сыға. Тәүге мең йыллыҡтың һуңғы сирегендә табындар тураһында мәғлүмәттәр һаҡланмау сәбәпле, беҙ был осорҙа уларҙың ҡайҙа тупланып көн итеүен белә алмайбыҙ. Уҙған быуаттың 70-се йылдарында йәшәгән оло быуын вәкилдәренән мәғлүм булыуынса, Алтайҙан тыш, Күксәтау тигән урын да билдәле. Минеңсә, был хәҙерге Ҡаҙағстандың Кокшетау өлкәһе тирәһе булырға тейеш. Фекерҙе дәлилләү өсөн милли башҡорт гимны «Урал»ды килтерергә мөмкин. Табын башҡорттары араһында таралған вариантта башҡорт далаһының Урал тауҙарынан Алтайғаса йәйрәп ятыуы тураһында йырлана. Күксәтау иһә тап шул араның уртаһында урынлашҡан.

Билдәле сығанаҡтарҙан күренеүенсә, VIII — IX быуаттарҙа бәжнәктәр һәм уларҙың союздаштары башҡорттар ҡот осҡос еңелеүгә дусар булғандан һуң, башҡорт ырыу-ҡәбиләләренең бер өлөшө Урал менән Арал араһындағы даланы ташлап, Көньяк һәм Урта Уралдың урманлы, урман-далалы ерҙәренә килеп урынлаша. Еңелеүгә дусар ителгән башҡорттарҙың бер өлөшө, IX быуаттың 40 — 50-се йылдарындағы яҙма мәғлүмәттәргә ярашлы, бәжнәктәргә эйәреп, Түбәнге Дон далаларына йүнәлә. Бында Ҡырым да яҡын. Әйткәндәй, Ҡырым татарҙары араһында «хакимлыҡ» итеүсе ҡәбиләләрҙең береһе «барын» исеме йөрөткән. Табын ҡәбиләһендә лә Барын тип аталған эре ырыу булыуы билдәле. Башҡорттарҙан беренсе тарихсыларҙың береһе Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев та, табындарҙың тәүге Ватаны Ҡырым һәм Ҡубан булған, тип иҫәпләй. Ғалим фекеренсә, ана шунан табындар Иртыш, Яйыҡ буйҙарына күсенгән. Ҡыпсаҡтар менән XI быуаттағы алышта уңышһыҙлыҡҡа осрағандан һуң, бәжнәктәр менән башҡорттар Венгрия менән Византияла төйәк таба. Византия императорында хәрби хеҙмәттә булған башҡорттар, 1204 йылда империяның пайтәхете Константинополь тәре йөрөтөүселәр тарафынан баҫып алынып таланғандан һуң, Кесе Азияны (хәҙерге Төркиә) ҡалдыра ла Көньяҡ Урал менән Алтай тауҙары араһындағы далаға килеп урынлаша. Был осорҙа Табын ханлығының хәрби-сәйәси йәһәттән ҡеүәте көсәйгән була. Минең уйымса, Кесе Азиянан килгән башҡорттар сығышы буйынса табындар йәки уларға ҡәрҙәш ырыуҙан булыуы ихтимал. Ҡаф тауҙары тураһында һөйләгән оло быуын вәкилдәре, моғайын, Табын ҡәбиләһенең ана шул осорҙарҙағы тарихын иҫкә ала булһа кәрәк.

## Табын ханлығы тарихы

Тарихи Ватанына әйләнеп ҡайтҡан башҡорттарҙы бер кем дә ҡосаҡ йәйеп ҡаршыламай, ер бүлешергә лә теләмәй. Көслө хаким ҡулы аҫтына инергә кәрәк була. Ундай шәхесте Табын ханы Майҡы бей йөҙөндә табалар. Тик Майҡы бей бөтә башҡорттарҙың ханы түгел бит. Яҙма сығанаҡтар булмау сәбәпле, пассионарийҙар — табындар тарафынан ҡоролған тәүге башҡорт дәүләттәренең береһе — Табын ханлығы тураһында фаразларға ғына ҡала.

Минеңсә, ханлыҡ Алтай менән Урал тауҙары араһындағы далаларҙа, Ҡырғыҙ ҡағанатынан көнбайышта барлыҡҡа килә. Ул сама менән X быуатта булғандыр. Табын ханлығын (Табын ҡәбиләһе аҫтындағы ырыу-ҡәбиләләр конференцияһы. — **Ә.З.**) үҙ составына индереп, Йәнәсәй ҡырғыҙҙары үҙ ҡағанаты сиктәрен X быуатта уҡ Урал тауҙарына саҡлы киңәйтә. Ҡырғыҙҙарҙың хәрби уңышын башҡаса аңлатырға мөмкин түгел. Ә бына Табын ханлығының ни өсөн быңдай юлға баҫҡанын аңлатыуы ҡыйын. Бәлки, Алтайҙан Волгаға тиклемге ерҙәрҙе биләп алған ҡоролоҡ мәжбүр иткәндер.

XI—XII быуаттарҙа Табын ханлығы биләмәләре йәйрәп ятҡан дәүләткә әүерелеп, уның составында төрки һәм монгол ҡәбиләләре була. Барын ырыуы, мәҫәлән, монгол ҡәбиләләренә ҡараған. Ғәрәп географы Иҙрисиҙең XII быуатта төҙөгән картаһында Иҙел буйы Болғарияһынан көнсығышта Табын иле лә күренә. Табын — һәр ырыу һәм ҡәбиләнең үҙ теле, үҙ йөҙө, дине, ғөрөф-ғәҙәте, традициялары булған дәүләт берләшмәһе. Башҡа башҡорттар ише, табындар ҙа, төньяҡ манси, хант халыҡтары кеүек, немецтар, тажиҡтар, Дағстандағы ҡара нуғайҙар, төркмәндәр, үзбәктәр һәм Себер татарҙары менән уртаҡ сифаттарға ла эйә. X—XIV быуаттарҙа башҡорт халҡы составына ҡасандыр булып та tарҡалған дәүләттәрҙең тиҫтә ярымлап төрки һәм монгол ҡәбиләләре ҡушыла.

Сыңғыҙ хан империяһына килешеү нигеҙендә ҡушылыу Табын ханлығының абруйын күтәреп ебәрә. Монгол империяһының хәрби-сәйәси ҡеүәтенә таянып, Табын иле хандары үҙ хакимлығын башҡа халыҡтарға ла көсләп тағыу өсөн барлыҡ сараларҙы ла ҡуллана. XIII—XIV быуаттарҙа Үҙәк, Көньяҡ-Көнбайыш һәм Көнбайыш Башҡортостан Табын ханы ҡулы аҫтында була. Табындарҙың ырыу-ҡәбиләләре, ошонан файҙаланып, киң ерҙәргә күсеп ултыра. Ул осорҙарҙа хәҙерге Асылыкүл «Ҡара табын күле» исеме менән йөрөтөлә. Ыҡ, Сәрмәсән, Туҡ, Соран, Ырғыҙ, Кәмәлек йылғалары буйҙарында табын ауылдары барлыҡҡа килә, туғайҙарҙа уларҙың көтөүҙәре утлап йөрөй. Мәшһүр тарихсыбыҙ Зәки Вәлидиҙең хеҙмәттәре буйынса беҙгә Табын ханлығының Сыңғыҙ хан державаһына ҡушылыу йылы ла билдәле. Был 1207 йылда була. Башҡорт халҡының тарихи һәм әҙәби ҡомартҡыһы, 1610—1612 йылдарҙан билдәле «Сыңғыҙнамә»лә был хаҡта ошолай әйтелә: «Туғыҙ ырыуҙың бейҙәрен эйәртеп, Майҡы бей Сыңғыҙ ханды эҙләп китә. Тапҡандан һуң Майҡы бей туғыҙ бейҙе арбаға егә лә, эргәһенә Сыңғыҙ ханды ултыртып, монголдарҙың ставкаһына йүнәлә. Килеп еткәс, Майҡы бей Сыңғыҙ хандың уң яғына баҫып хан һарайына инә. Бейҙәрҙең һәр береһенә Сыңғыҙ хан үҙ тамғаһын, ҡошон, ағасын һәм оранын (саҡырыу) әйтә. Ә Майҡы бейгә ул былай ти: «Эй, уйшын Майҡы бей! Әйҙә, һинең ағасың — ҡарағас, ҡошоң — ҡарағош, ораның — Салауат, тамғаң һепертке булһын!»

Әлбиттә, быларҙың бөтәһе лә —оҫта ижад ителгән легенда. Ә бына Монгол-Табын союзы барлыҡҡа килеү, табын ғәскәренең монгол армияһының бер өлөшөнә әүерелеүе иһә— булған хәл. Майҡы бей үҙе эре монгол хәрби етәксеһе булып китә. Ошо сифатта ул 1236 йылда Иҙел буйы Болғарияһына, 1237—1240 йылдарҙа урыҫ кенәзлектәренә, 1241-1242 йылдарҙа католиктар

Европаһына походтарҙа ҡатнаша. Яуҙарҙан ҡайтҡас та, ханлыҡҡа етәкселек итеп, донъя ҡуя. Монгол империяһына Табын ханлығы протекторат шарттарында ҡушылып, уның башлыҡтары Сыңғыҙ ханға һәм уның вариҫтарына тоғро хеҙмәт итә. Табын ханлығы 1391 йылда Сәмәрҡәнд әмире Аҡһаҡ Тимер (Тамерлан) ғәскәре тарафынан ҡыйратыла һәм ҡабат тергеҙелмәй.

Тарихтан мәғлүм булыуынса, 1359—1379 йылдарҙа Алтын Урҙаны «Бөйөк сыуалыш» биләп ала: егерме йылда егермендән ашыу батша алмашына. Урҙа тәхетенә дәғүә итеүселәрҙең сираттағыһы Туҡтамыш 1379 йылда дәүләттең баш ҡалаһы Һарай-Беркене баҫып ала ла Алтын Урҙаның барлыҡ олоҫтарын да үҙенә буйһондора. Был маҡсатҡа өлгәшеүҙә Туҡтамышҡа Аҡһаҡ Тимер үҙенең күп һанлы ғәскәре менән ярҙам итә. Алтын Урҙаның элекке ҡеүәте аяҡҡа баҫтырылды, тип уйлап, Туҡтамыш үҙен еңелмәҫ полководец тип хис итә һәм, Аҡһаҡ Тимерҙең ҙур ғәскәр менән Кесе Азияға яу менән китеүенән файҙаланып, уның биләмәләренә баҫып инә һәм Урта Азияның күп кенә ҡалаларын, шул иҫәптән Сәмәрҡәндте лә, талай.

Алтын Урҙа тәхетен ҡайтарыуҙа Туҡтамышҡа ҙур ғәскәр менән ярҙам иткән Аҡһаҡ Тимерҙең асыуының сиге булмай. Ул Алтын Урҙаны баҫып алыу ғына түгел, ә бөтөнләй ер йөҙөнән юҡ итеү маҡсатын ҡуя. 1391 йылдың яҙында 200 меңлек ғәскәр башында Аҡһаҡ Тимер, төньяҡҡа табан хәрәкәт итеп, Тубыл йылғаһына килеп сыға. Майҙа әмирҙең ғәйәт ҙур армияһы хәҙерге Силәбе өлкәһенең Ҡарталы ҡалаһы тирәһенә, йәғни Табын ханлығының көньяҡ сигенә етә. Туҡтамыштың ышаныслы тылы һәм терәге — Табын ханлығы ҡыйратыла. Әйткәндәй, ошо урындан йыраҡ түгел, Николаевка ауылы янында, Аҡһаҡ Тимерҙең бойороғо буйынса уның үлгән ҡыҙына мавзолей төҙөлгән — уны бөгөн дә күрергә була. Сәмәрҡәнд әмиренең ҡот осҡос армияһы бер юлдан түгел, ә йөҙҙәрсә саҡрым ерҙе иңләп, юлында осраған барлыҡ тереклекте юҡ итеп, ҡала-ауылдарҙы талап, яндырып килә. Тере ҡалған кешеләрҙе ҡоллоҡҡа алалар, малдарҙы ҡыуып алып китәләр. Аҡһаҡ Тимер ғәскәре артынан сүллек кенә тороп ҡала. Хәҙерге Силәбе, Ырымбур, Һамар өлкәләре һәм Башҡортостанда емереклектәр генә тороп ҡала, ә кешеләр иһә юҡҡа сыға. Сәмәрҡәнд әмире армияһының Табын ханлығы ғәскәре менән ҡаты һуғышы хәҙерге Учалы районындағы Асыуҙы күле янында була. Өлкән быуын вәкилдәре хәтерләүенсә, түгелгән ҡандан хатта күл һыуы ҡыҙара.

Аҡһаҡ Тимер яуы Табын ханлығын ер йөҙөнән һепереп түгә. Башҡорттарҙың элитаһы юҡ ителә, генофонды төҙәлмәҫлек зыян кисерә. Башҡорт ерҙәре, шул иҫәптән табындарҙыҡы ла, Алтын Урҙа емереклектәрендә хасил булған «татар» хандары һәм Нуғай Урҙаһы, һуңыраҡ ҡалмыҡтар өсөн дә ымһындырғыс ем булып ҡала. Тамам хәлһеҙләнгән халыҡ уларға ҡаршылыҡ күрһәтә алмай. 1391 йылдың августа Ҡандыболаҡ һәм Ҡондорса йылғалары ҡушылған ерҙәге (хәҙерге Һамар өлкәһе. — **Ә.З.**) ҡанлы һуғышта ике яҡтан да икешәр йөҙ мең кеше ҡатнашып, ул Урта быуаттарҙа күҙәтелгән иң эре һуғыш була һәм Алтын Урҙаның тарҡалыуы менән тамамлана. Ҡондорса йылғаһы буйындағы алышта, моғайын, тиҫтәләрсә мең башҡорт яугиры ҡатнаша, йә башын һала, йә әсирлеккә алына.

Данлыҡлы Ҡуңыр буға юлы Табын ханлығы ерҙәре аша үтә. Ул Ҡара диңгеҙ ярынан башланып, Һарытау ҡалаһы янында Иҙелде аша сыға һәм Һаҡмар йылғаһының көнбайышын киҫеп үтеп, хәҙерге Хәйбулла, Йылайыр, Баймаҡ, Әбйәлил, Учалы райондары аша Екатеринбург, Төмән яҡтарына китеп юғала. Урта быуат тарихында киң билдәле икенсе юл — Ҡәнифә юлы Урта Азия тарафтарынан башланып, Өс йорт үҙәне аша төньяҡҡа йүнәлә. Гөбөрлө Яйыҡ (Урал) йылғаһына ҡойған урында уны аша сығып, Һырт буйлап

Ҡуңыр буға юлына ҡушыла. Ошондай уңайлылыҡ табындарға юлдарҙы күҙәтеү аҫтында тоторға мөмкинлек бирә.

Ил — бойондороҡһоҙ (суверенлы) дәүләт. Беренсе мең йыллыҡта башҡорт ҡәбиләләре биләгән ерҙәрҙә тик бер генә ил — Башҡорт иле була. XIII—XIV быуаттарҙа иһә улар күбәйә. Илдәр IX—XII быуатта тарихи Башҡортостандың состав өлөшө булған ырыу-ҡәбиләләр нигеҙендә формалаша. Табын ханлығы, йәғни Табынстан (башҡортса Табын иле. — **Ә.З.**) башҡорт биләмәләрендә барлыҡҡа килгән икенсе ил була.

## Тарихи этнографияла – Табын башҡорттары

XIV быуаттың киң билдәле ғәрәп авторы ибн Халдун «Мөҡәддимә» тип аталған китабында башҡорт ырыуҙарын иҫәпләп сыға һәм шулар араһында «иң ҡеүәтлеһе» тип Табын менән Дыуанды күрһәтә. Этнографик мәғлүмәттәр буйынса, Табын ҡәбиләһе төрлө дәүерҙәрҙә үҙ эсенә 13—18 ырыуҙы берләштергән. «Очерки исторической этнографии башкир» (Өфө, 1957 йыл) тигән китабында Р. Г. Кузеев, Табын ҡәбиләһе 13 ырыуҙан тора, тип раҫлай. Көнбайыш табындарҙан был исемлеккә һигеҙ ырыу: Кесе табын, Йомран-табын, Кәлсер-табын, Дыуан-табын, Ҡумырыҡ-табын, Курпәс-табын, Бишауыл-уңғар һәм Баҙраҡ индерелгән. Кузеев фекеренсә, Йомран-табын Кесе табындан бүленеп сыҡҡан. Көнсығыш табындар алты: Ҡара табын, Барын-табын, Теләү, Күбәләк, Дыуан-табын, Ҡыуаҡан ырыуҙарынан торған.

Тарихсы Р. З. Янғужиндың мәғлүмәттәренә ҡарағанда, башҡорттар араһында табындар иҫәбе буйынса берләшмә һаналған. Автор фекеренсә, берләшмәгә алты ҡәбилә: Табын, Ҡыуаҡан, Ҡырҙы, Бишул, Баҙраҡ, Ҡумырыҡ ингән. Табын конференцияһына ҡараған ҡәбиләләрҙең ырыуҙар составын асыҡлап, Р. Янғужин, Табын ҡәбиләһендә туғыҙ ырыу: Ҡара табын, Барын, Тиләү, Күбәләк, Кесе, Йомран, Кәлсер, Дыуан һәм Һарт булған, тип бара. «Ҡыуаҡан ҡәбиләһендә,— ти тарихсы,— алты ырыу булған. Бына улар: Йылан, Сәғит, Тау ҡыуаҡан, Һатҡы, Ҡырҡөйлө, Түбәләҫ. Бишул ҡәбиләһе, Янғужин раҫлауынса, ике — Бишул һәм Бишул-уңғар ырыуҙарынан торған Табын конфедерацияһының башҡа ҡәбиләләре ырыуҙарға бүленмәгән йәки бүленеп тә, улар тураһындағы мәғлүмәттәр беҙҙең көндәргә килеп етмәгән.

1726 йылда Башҡортостанда булып киткән Көнгөр бургомистры Юхнев үҙ яҙмаларында Себер даруғаһына ҡараған Ҡара табын, Ҡыуаҡан, Нуғай даруғаһындағы Йомран-табын, Питер(?)-табын, Күбәләк, Кесе табын, Кәлсер-табын, Ҡумырыҡ-табын, Дыуан-табын, Бишул олоҫтарын атап үткән. «Пелевец» тип аталғаны ла бар, ул, моғайын, Түбәләҫтең боҙолоп яҙылған исемелер. Башҡорттарҙың дөйөм иҫәбен Юхнев 50 меңләп тип билдәләгән. 1755 йылда нәшер ителгән «Топография Оренбургской губернии» тигән хеҙмәтендә башҡорт крайын өйрәнеүсе П. И. Рычков ырыуҙарҙың түбәләре, аймаҡтары, шулай уҡ йорттар исемлеген килтерә. Нуғай даруғаһының Табын олоҫо (ырыуы), мәҫәлән, Бишул, Кесе табын, Йомран-табын, Кәлсер-табын, Ҡумырыҡ, Дыуан-табын, Мәллә-табын түбәләре һәм аймаҡтарын эсенә алған 387 йорттан торған. 472 йортлоҡ икенсе Табын олоҫонда түбәндәге аймаҡ һәм түбәләр күрһәтелә: Күбәләк, Тиләү, Ҡарағай, Кесе, Йомрантай. Ҡыуаҡан олоҫо тураһында яҙғанда П. И. Рычков йорттар иҫәбен күрһәтмәй, уға ҡараған Ялан ҡыуаҡан, Тау ҡыуаҡан, Һатҡы ҡыуаҡан, Сәғит ҡыуаҡан, Ҡырҡөйлө ҡыуаҡан түбәләрен генә атап үтә. Барын-табын олоҫонда иһә ырыуҙар исеме лә телгә алынмаған. Автор Ҡара табын олоҫоноң Әйле-табын, Күкйөрәк-табын, Ҡыпсаҡ-табын, Мөсөл-табын, Аҡшураз-табын түбәләрен һәм аймаҡтарын атай. П. И. Рычковтың хеҙмәтендә Ҡазан даруғаһының биш түбәһе һәм аймағы булған Дыуан олоҫо ғына телгә алына.

1804-1805 йылдарҙа нәшер ителгән «Тарихнамә-и Болғар» тигән китабында башҡорт уҡымышлыһы Тажетдин Ялсығол, «Раузат-ас-сафа» исемле фарсы китабына һылтанып, легендар Кинйәнән дүрт этнос: татар, мишәр, нуғай һәм иштәк таралып китә, тип хәбәр итә. Иштәктең ватаны итеп Ялсығол Аму-Дарья буйын күрһәтә. Иштәктән Тамъян, Үҫәргән, Күбәләк, Бәкәтин тыуа. Бәкәтиндән Һарт, Түбәләҫ, Дыуан айырылып сыға. Ҡыпсаҡ, Ҡатай, Тамъян, Түңгәүер, Үҫәргән, Бөрйән кеүек ете башҡорт ырыуҙары менән бергә, танылған мәғрифәтсе М. Өмөтбаев Табын ҡәбиләһен дә атай, Урта табын, — тип яҙа ғалим, — ете ҙур ырыуҙы: Йомран, Кесе, Кәлсер, Дыуан, Ҡумырыҡ, Бишул-табын, Тәкөн-табындарҙы берләштергән. Табын халҡының бер өлөшө XV быуаттың икенсе яртыһында Асаҙы һәм Шәкәрле бейҙәр етәкселегендә Башҡортостандың көнсығышынан Ағиҙел йылғаһының урта ағымына, йәғни бөгөнгө Ватанына күсенә. Күренеүенсә, авторҙарҙың ҡарашы айырыла, сөнки улар үҙҙәренә генә билдәле сығанаҡтар менән эш итә. Был да ғәжәп түгел: ҡәбиләләр тарихы тураһында мәғлүмәттәр бик аҙ, ҡайһы саҡ уларҙа бер яҡлылыҡ күҙәтелә.

## XVI–XVIII быуаттарҙа табындарҙың этник тарихы

Табын башҡорттары икегә: көнбайышҡа һәм көнсығышҡа бүленә. Башҡа башҡорт ҡәбиләләре кеүек, Көнбайыш табындар Мәскәү батшалығына XVI быуаттың 50-се йылдарында ҡушыла. Шәжәрәнән күренеүенсә, Асаҙы бейҙең варисы Күрпәс бей Кесе табын ырыуының урыҫ батшалығын таныуының башында тороп, ошо хаҡта батшанан Жалованная грамота алған. Шул осорҙағы урыҫ яҙмаларында ул «Күрпәс бей» тип иҫкә алына. Ә. Вәлиди Туғандың «Башҡорттар тарихы»нда билдәләнеүенсә, Көнсығыш табын халҡы, Себер ханы Күсемгә тоғролоҡ һаҡлап, уның яғында Мәскәү батшаһына ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаша. Себер ханлығы тамам тар-мар ителеп, 1608 йылда Ғәли солтан әсир алынғандан һуң ғына Көнсығыш табындар урыҫ батшалығы хакимлығын танырға мәжбүр була.

Ә. Вәлиди Туғандың фекеренсә, ҡара табындар урыҫ батшалығына ҡаршы көрәштә Күсем улдарының тоғро союздашы булмай. 1608 йылдан һуң ҡара табындар Рәсәй батшаһы яғын тота башлай. Алтын Урҙала хакимлыҡ итеүсе ырыу булыуҙарын иҫәпкә алып, улар Мәскәү батшалығында ла ошондай ролгә иҫәп тота. Шул мәлдән алып ҡоралллы ҡара табындар Күсем улдарына һәм улар яғында торған нуғай, ҡалмыҡ һәм башҡорт старшиналарына ҡаршы урыҫтар яғында һуғыша. Ғәли солтан (1598—1608) ғәскәренең төп өлөшөн Барын-табын һуғышсылары тәшкил итә. 1608 йылда Ғәли солтан ошо ғәскәре менән Өфө ҡалаһына һөжүм итеп ҡарай. Ғәли солтанды алмаштырған Ишем солтан да табын ғәскәренә таяна. 1616 йылда ул Өфөнө баҫып алыуға ирешә. Ишем солтандың ставкаһы Тубыл йылғаһы буйындағы Амалҡарағай тигән урында, Барын-табын башҡорттары ерендә, була. 1630—1636 йылдарҙа урыҫтарҙы Себерҙән ҡыуып сығарыу өсөн көрәшкә Абылай солтан етәкселек итә. Уның ставкаһы Ишем йылғаһының Ҡуш ҡарағай тип аталған ерендә урынлаша. Батша яҡлыларҙың хөсөтөнә бирелеп, Ҡара табын бейҙәре 1635 йылда халҡы менән Башҡортостандың Урал алды яғына күсенергә тотона. Ҡалмыҡтар менән берләшкән Абылай солтан уларға көнбайышҡа юлды бүлә. Урыҫ хакимлығы яҡлы бейҙәр юҡ ителә. Ҡара табындар үҙ ауылдарына ҡайтып китергә мәжбүр була.

1636 йылда Абылай солтан ҡалмыҡтарҙан торған бәләкәй генә отряд менән Өфөгә һөжүм яһай. Ҡаланан 15 саҡрым ситтә, Ҡариҙел йылғаһы буйында, ул, ҡаты еңелеүгә дусар булып, әсирлеккә эләгә. Абылай солтандың еңелеүенә батша ғәскәрҙәренә ярҙамға ҡара табындарҙың хәрби көстәре хәл

иткес өлөш индерә. Батша хакимдары алдында бейҙәрҙең абруйы күтәрелеп китә. 1636 йылда урыҫтарҙың Себерҙә хөкөм йөрөтөүенә ҡаршы көрәш башына Күсем улдарының сираттағыһы — Дәүләтгәрәй килә, һәм ул да Табын башҡорттарына таянып эш итә. Башҡортостандың урыҫтар тарафынан колонизацияланыуына ҡаршы көрәш 1646—1648 йылдарҙа үҙенең иң юғары нөктәһенә етә. Рәсәй яғынан баҫымдың йылдан-йыл көсәйеүе уға ҡаршы көрәшеүселәрҙең сафы көсһеҙләнеү менән бергә бара. Ярты быуатҡа һуҙылған ҡоралды көрәш бик күп кешеләрҙең һәләк булыуына, хужалыҡтарҙың бөлөүенә килтереп, XVI быуаттың 40-сы йылдарында һүнә башлай. 1646 йылда бер туҡтауһыҙ барған ҡоралды бәрелештәрҙән, хәрби уңышһыҙлыҡтарҙан арыған нуғайҙарҙың күпселеге ҡалмыҡтар менән табындарҙан айырылып, Уй һәм Исәт йылғалары араһынан Иҙелдең түбәнге ағымына күсенеп китә.

Үрҙә телгә алынғандар Р. Г. Кузеевтың, Урал аръяғы башҡорттар тарафынан бик һуң үҙләштерелгән, тигән фекерен ҡырҡа кире ҡаға. Был төбәктәге этносәйәси хәл төрлө сәбәптәр, шул иҫәптән халыҡтарҙың күсеп йөрөүе, арҡаһында үҙгәрә. Мәҫәлән, 1502 йылда тиҫтәләрсә мең кеше Урал аръяғы Башҡортостанын һәм Көньяҡ Себерҙе ҡалдырып китә. Көньяҡ тарафтарына тотош Урҙа ҡуҙғала. Йөҙҙәрсә ауылдар, шул иҫәптән Табын ауылдары ла, бушап ҡала. Һөҙөмтәлә Себер ханлығының халҡы ҡырҡа кәмей һәм Ермак етәкселегендәге юлбаҫар казактар килеүгә ул бик аҙ кеше йәшәгән, хәрби-иҡтисади яҡтан хәлһеҙ төбәккә әйләнә. 1598 йылдың августындағы Себерҙе яулап алыу буйынса «бөйөк һуғыш»та ике яҡтан меңгә лә тулмаған кеше ҡатнаша. Воевода Воейковтың 404 кешелек отрядына ҡаршы Күсем ни бары 500 һыбайлы ҡуя һәм тар-мар ителә.

Көньяҡҡа күсенгән себерҙәр Аҡһаҡ Тимерҙең державаһын ҡыйрата, Сәмәрҡәнд менән Бохараны яулап алғандан һуң, урындағы халыҡ менән буталышып, буласаҡ үзбәк халҡына нигеҙ һала. Аҡһаҡ Тимерҙең Бабур етәкселегендәге вариҫтары, көньяҡҡа сигенеп, Һиндостанды баҫып ала һәм унда XIX быуат урталарына тиклем йәшәгән Бөйөк моголдар империяһын иғлан итә. Шулай итеп, себерҙәр һәм табындар Аҡһаҡ Тимер яуынан һуң бер быуат үткәс, уның иленә килеп, тимуридтар хакимлығын юҡҡа сығарып, үҙҙәрен ҡыуып ебәрә. 1391 йылда Табын ханлығын ҡыйратҡан Аҡһаҡ Тимер, моғайын, бындай хәлде иң яман төшөндә лә күрә алмағандыр.

Рәсәйгә ҡаршы көрәштә еңелеүгә дусар ителгән ҡалмыҡтар хәҙер башҡорттар менән һыйышмай башлай. Дәүләтгәрәй солтанға ике яҡ: урыҫтар һәм ҡалмыҡтар менән көрәшергә тура килә. 1655 йылда урыҫ хакимлығын таныған ҡалмыҡтарҙың Ишем йылғаһы менән Урал тауҙары араһындағы ерҙәрҙе ҡалдырып, Иҙел түбәненә күсенеүен, моғайын, солтан яҡлылар өсөн уңышлы булған, тип атарға кәрәктер. Барын-табындар артабан да Күсем улдары — Кесе һәм Абуға солтандарға тоғро ҡала һәм XVII быуаттың 60—70-се йылдарына тиклем урыҫтарға ҡаршы көрәште дауам итә. 1679 йылда улар Башҡортостандың төньяғындағы Көнгөр ҡалаһын баҫып алып, яндыра.

Рәсәй хакимдарына ҡаршы көсәйә барған көрәш ваҡытында, 1707 йылда, Яйыҡ йылғаһының үрге ағымына Морат солтан килә. «Был ерҙәр атайымдыҡы» тип иҫәпләй ул һәм, өс ай ошонда булып, хан сифатында башҡорт крайына идара ҡыла. Ете башҡорт олоҫо, шул иҫәптән табындар ҙа, Морат солтандың хакимлығын ҡабул итә. 1709 йылдың яҙында, табындарҙың саҡырыуы буйынса, Ҡәйеп хандың улы Ырыҫмөхәмәт Башҡортостанға килә. Уның ставкаһы Ирәмәл тауы итәгендә урынлаша. Ғәмәлдә Ырыҫмөхәмәт Табын олоҫо старшинаһы Ураҡай баһадир ярҙамына таяна. Ырыҫмөхәмәт менән Башҡортостанға 400 ҡарағалпаҡ һуғышсыһы ла килә. 8000 башҡорт һыбайлыһы (250-һе — ҡара табындар), яңы хан ҡарамағына күсеп, Исәт йылғаһы буйлап хәрби хәрәкәттәр йәйелдерә.

XVIII быуаттың 20-се йылдарында ҡалмыҡтар христиан динен ҡабул итә. Православный Мәскәүҙә был хәл ҡалмыҡтарҙың урыҫтарға ҡарата дуҫтарса мөнәсәбәте кеүек баһалана. Батша хөкүмәте ҡалмыҡтарға үҙенсәлекле бүләк әҙерләй: мосолман башҡорттар менән ҡаҙаҡтар араһында «санитар кордон» булдырыу маҡсатында һәм, әлбиттә, ҡалмыҡтар менән башҡорттарҙы ыҙғыштырыу өсөн дә, уларға Кинәле, Суҡ, Туҡ, Ҡондорса, Ыҡ йылғалары буйҙарындағы аҫаба башҡорт ерҙәренә күсенергә рөхсәт итә. Ләкин 1735—1740 йылдарҙа ҡубып киткән башҡорт ихтилалы был ниәттең ғәмәлгә ашырылыуына ҡамасаулай, ошонан ҡото алынған ҡалмыҡтар яңы ерҙәргә күсеп ултырыуҙан баш тарта.

Башҡорттарҙың һуңғы ханы Ҡараһаҡал да — Күсем улдарынан. Уның ысын исеме Бейбулат. Солтан 12 йәшенә тиклем башҡорттар араһында йәшәгәнлектән, башҡортса таҙа һөйләшә, ҡалмыҡ, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ телдәрендә лә иркен аралаша. Ҡараһаҡал ғәскәренең төп өлөшө барын-табындарҙан һәм ҡыуаҡандарҙан торған. 1771 йылғы бөтә даланы ҡуҙғытып ебәргән «Ҡалмыҡ боҫоуы» башҡорт тарихында ла сағылыш таба. 169 мең ҡалмыҡ ғаиләһе, мал-тыуары, башҡа мөлкәте менән Иҙел һәм Яйыҡтың түбәнге ағымындағы ерҙәрҙе ҡалдырып, тарихи Ватаны — Монголияға юлға сыға. Күсенеү һигеҙ ай дауам итә. Ҡалмыҡтар артынан башҡорттар 10 меңлек һыбайлы ғәскәр ебәрә. Араларында табындар ҙа була. Башҡорттар һәм ҡаҙаҡтар ҡалмыҡтарҙы Ҡытай сигенә тиклем баҫымлап бара. Тарихи Ватанына ҡалмыҡтарҙың ни бары 70 меңләбе генә ҡайтып етә. Улары ла малһыҙ, мөлкәтһеҙ ҡалған бала-саға һәм ҡарт-ҡоро ғына була.

Башҡортостандың Өфө өйәҙе аҫабаларынан яһаҡты батша хөкүмәте еренә ҡарап түләтһә, көнсығыш башҡорттарҙан иһә йән башына биш һыуһар йәки шәшке иҫәбенән алған, һәм был, әлбиттә, ауырыраҡ булған. 1692 йылда Ҡара табын башҡорттарына бирелгән Жалованная грамота Ҡара табын олоҫоноң сиктәрен билдәләгән. Хәҙерге Әбйәлил районындағы Ҡыҙыл йылғаһынан башланып, ул көнбайышҡа Анкар тауының түбәһенә ҡәҙәр һуҙылып, унда Бөрйән олоҫо башҡорттарының ырыу тамғаһы ҡуйылған. Артабан олоҫ сиге төньяҡҡа боролоп, Ағиҙел йылғаһы буйлап Әй йылғаһына саҡлы бара. Ары көнсығыш тарафтарына — Мейәс йылғаһына табан китеп, Тубылға етә, унан һәм көньяҡҡа боролоп, Уй йылғаһының Тубылға ҡойған еренә тиклем һуҙыла. Артабан сик Уй йылғаһы буйлап көнбайышҡа китә һәм Ҡыҙыл (Олоһолор, моғайын. — **Ә.З.**) йылғаһының үрге ағымына тоташа. Яҡынса алғанда ла, Табын башҡорттарының ере 63 мең квадрат километрға еткән. Был хәҙерге Литва йәки Латвия республикаһы территорияһына тиңдәш. Ә Бельгиянықынан иһә ике тапҡыр ҙурыраҡ. Бөгөн был ерҙәрҙә Силәбе өлкәһенең Силәбе, Златоуст, Мейәс, Сыбаркүл, Верхнеуральск, Южноуральск, Троицк, Пласт, Еманжелинск, Коркино, Копейск; Курган өлкәһенең Шучье, Шумиха һәм Курган ҡалалары урынлашҡан.

XVIII быуаттың аҙағында башҡорттар аҫаба ерҙәренең яртыһынан мәхрүм ителһә, көнсығыш башҡорттарында ул 90 процентҡа етә. Әлбиттә, һүҙ тотош биләмәләр тураһында түгел, ә Табын башҡорттары йәшәгән ауылдар хаҡында бара.

**Әлим ЗАРИПОВ.**

## ЮЛҒА БӘЙЛЕ ЫРЫМ-ЫШАНЫУҘАР, ТЫЙЫУҘАР

Юл борон замандан кешелек тормошонда мөһим роль уйнай. Айырым кеше, милләт, дәүләттәргә юл – аралашыу, алыш-биреш итеү, йәғни сәйәси, мәҙәни, иҡтисади яҡтан үҫеү өсөн ярҙамсы ла.

Халҡыбыҙҙа юлға бәйле топонимик атамалар ҙа бихисап: Себер юлы, Ятап (Этап) юлы, Катаржандар юлы, Каруан юлы, Ебәк юл, Ҡәнифә юлы, Ҡуңыр буға юлы, Яу юлы һ.б. Дөйөм алғанда, башҡорттарҙа арауыҡты, юлды билдәләүсе һүҙҙәр: сәфәр, сәйәхәт, оло юл, йыраҡ ара, ҡыҫҡа юл, сана юлы, арба юлы, ат юлы, ҡош юлы, кәмә юлы, һыу юлы, йәйәүле юлы, урман юлы, һуҡмаҡ һ.б. тип исемләнеп йөрөтөлә. Һәр төбәктең, ауылдың үҙенең юл атамалары бар. Һуңғы быуатта тимер юл, машина юлы, һауа юлы тип әйтеү ҡулланышҡа ингән. Шулай уҡ һауа торошона, юлдың бысраҡлығына, миҙгелгә ҡарап ҡышҡы юл, яҙғы, көҙгө юл, төнгө юл һ.б., ә юлдың ҡатмарлылығын йәки еңеллеген әйткәндә, “соҡор-саҡыр, дөбөр-шатыр, тигеҙ, таҫмалай, ебәктәй” тиҙәр.

Борон юл сәхифәләренә бәйле сәйәхәтселәр тарафынан ижад ителгән сәйәхәтнамә, сәфәрнамә, хажнамә кеүек әҫәрҙәр әле лә һаҡлана һәм хәҙер ҙә яҙылыуын дауам итә. Барлыҡ халыҡтарҙа ла элек-электән юлға бәйле үҙенсәлекле мәҡәл-әйтемдәр, йомаҡтар, ырым-ышаныуҙар, һынамыштар, алғыш-ҡарғыштар, тыйыуҙар йәшәп килә.

Башҡорттарҙа юлдан килгән кешене матур итеп ҡаршы алыу, юлға сыҡҡанда изге теләктәр теләп, алғышлап оҙатып ҡалыу йолаһы бар. Былар барыһы ла фольклорҙың төрлө жанрҙарында: эпостарҙа, әкиәттәрҙә, легенда-риүәйәттәрҙә, йырҙарҙа сағылыш тапҡан. “Башҡорт халыҡ ижады”ның “Йола фольклоры” томында сәфәр сығыусыға бәйле **алғыштар** айырым билдәләнелә (1995).

Сәфәргә сыға торған кеше әҙерләнеп бөткәс, берәй нәмә онотолоп ҡалманы микән, тип әйберҙәрен барлап, бер ни тиклем ултырып ала, юл доғаһы уҡығандан һуң, туғандары менән хушлашып, өйөнән сыға. Юлсы артынан: “Хуш! Һау бул! Ете һаның теүәл булып, имен-аман ғына йөрөп ҡайт. Аллаһы Тәғәлә һине үҙе ҡурсалап йөрөтһөн”, “Юлдарың еңел булһын! Һаулыҡта күрешергә яҙһын!”, “Аллаһы Тәғәлә һине бәлә-ҡазаларҙан һаҡлаһын, яуыз юлдаштарға, ҡош-ҡортҡа тарыма! Юлдарың уң булһын! Изге юлдаштар насип булһын!”, “Иҫән-һау ғына барып ет. Барыр юлдарыңда

фәрештәләр ҡанат ҡағып торһон! Хызыр Ильяс юлдаш булһын!” тип изге теләктәр теләп ҡалалар.

Юлдан ҡайтҡан кешене “Әссәләмүғәләйкүм. Һаумы! Иҫән-һау ғына йөрөп ҡайттыңмы? Әйҙүк! Әйҙә, түрҙән уҙ!” тип әйҙүкләп йылы ҡаршы алалар. Башҡорттарҙа сәйәхәтсе сәфәргә китер алдынан оҙатырға, ҡайтҡас күрешергә тип күршеләрҙе, ауылдаштарҙы саҡырып ҡунаҡ итеү кеүек матур йола бар.

Кеше тыуған илендә, туғандары араһында, йәшәгән йортонда ғына үҙен тыныс, ҡурсаулы, терәкле һәм кәрәкле тоя. Өйөнән сит-яттар араһына сығып киткәндәрҙең был йәһәттән һаулығы, ғүмере хәүеф аҫтында ҡала, һәм юлсы психологик ауырлыҡ тоя. Сит ер, алыҫ ара һәр ваҡыт һағыш, моң-зар менән күҙаллана, шуға ла “Сит ерҙә солтан булғансы, үҙ ереңдә олтан бул” ти халыҡ мәҡәле.

Борон юлға сыҡҡан кешегә иҫтәлек-бүләк биреү ғөрөф-ғәҙәте булған, тыуған өйҙө, ерҙе хәтерләтеп, күңелдәренә йылылыҡ биреп торһон өсөн, әрмегә, һуғышҡа киткән егеттәргә иҫтәлеккә ҡулъяулыҡ, янсыҡ бүләк иткәндәр.

Юлға бәйле башҡа **мәҡәл-әйтемдәргә** килгәндә, “Юл ғазабы – гүр ғазабы”, “Юл ғазабы – тамуҡ ыҙаһының береһе ул” тигән боронғолар. “Өйөнән сығып киткән әҙәм – мосафир һанала, уның доғаһы ҡабул була” тигән ышаныу йәшәй. Шуның өсөн дә ҡунаҡсыл башҡорттарҙа юлсыға һәр ваҡыт ярҙам күрһәтеү, уның доғаһын алып ҡалыу ғөрөф-ғәҙәте бар. Барлыҡ юлға бәйле мәҡәл-әйтемдәр ҙә халыҡтың аҡылынан, тәжрибәһенән сығып әйтелгән: “Аяғың тартмаған ергә барма”, “Яманға юлдаш булма”, “Иртә сыҡҡандың юлы уңыр”, “Йөрөгән таш шымарыр, тик ятҡан таш мүкләнер”, “Урау булһа ла юл яҡшы”, “Күп йәшәгән түгел, күп йөрөгән белер” тиҙәр. “Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр” томдарында юл-сәфәргә бәйле айырым бүлектәр ҙә бар (1980, 2006).

Халыҡ юлға бәйле **йомаҡтар** ҙа ижад иткән: “Арҡа арҡыры арҡан һуҙылған”, “Оҙон дилбегәне йыйып булмай”, “Тау аша таяҡ ташланым”, “Тауым арҡыры таҫма һуҙылған”, “Бер тауға менеп китә, бер түбән төшөп китә, донъяны киҫеп үтә”, “Оҙон таҫма ята, күтәреп булмай” кеүектәрҙе миҫал өсөн билдәләп китергә мөмкин (2007).

Тормош-көнкүрешебеҙҙә **юлға бәйле тыйыуҙар** ҙа бихисап. Сәйәхәткә сығыр алдынан юлсы һәр яҡлап алдан әҙерләнә, уңайлы көн һайлана, юлының еңел үтеүен хәстәрләп, ҡайһы бер ҡағиҙәләрҙе үтәй: “Шишәмбе көндө юлға сығырға ярамай – ҡоро көн”, “Юлға сығыр алдынан тегенергә ярамай, юлың уңмай”, “Юлға сығыр алдынан төймә текмәйҙәр, энә тотмайҙар” тигәнде иҫендә тота. Сөнки бында еп – юлдың оҙонлоғо, ә төйөн-төймә – юлда осраясаҡ ауырлыҡтар менән ауаздаш (символлаштырыла).

Шулай уҡ “Юлға сыҡҡас, артҡа боролоп ҡарарға ярамай”, “Юлға сыҡҡас, өйгә кире инергә ярамай, керһәң, көҙгөгә ҡарап сығыр кәрәк” тигәндә, юл – көҙгө һымаҡ ялтырап ятһын, тигеҙ булһын, тип ырымлап, юл уңһын өсөн әйтелә.

Ҡайһы бер тыйыуҙарҙа ислам дине йоғонтоһо ла тойола: “Тәһәрәтһеҙ, жөнөп хәлендә юлға, урамға сығырға ярамай, бысраҡ килеш ҡапыл вафат булыуың ихтимал” тиҙәр. Сөнки, мосолман һәр ваҡыт тәһәрәтле булырға

тейеш, тигәндән әйтелә, тәһәрәтһеҙ йөрөһәң, аяҡ аҫтындағы үләндәр ҡорой, тигән ышаныу бар.

“Йома ваҡытында юлға сыҡмайҙар” тигән тыйыуҙың мәғәнәһенән күренеүенсә, дин буйынса йома көн – изге көн, йоманың өйлә намаҙы осоро ла изге ваҡыт иҫәпләнеп, фәҡәт өйләлә намаҙҙы уҡымай сәфәр башларға ярамағанлығы хаҡында иҫкәртелә. Хәүефле ваҡыт булараҡ, буранда, кис, эңер мәлендә, төнгә ҡарай ҙа юл башламау хәйерле һанала. Сәфәр айында, ай өҙөгөндә, ай һуңында ла эш, юл башларға ярамай.

Сәйәхәтсенең юлы уң булһын өсөн шулай уҡ оҙатыусы ла бер нисә ҡағиҙәне иҫендә тота: “Юлға сыҡҡан кеше артынан иҙән йыуып, һепереп, сүп түгеп ҡалмайҙар, юлы уңмай”, “Юлға сыҡҡан кешенең артынан буш кермәйҙәр. Өйгә һыу, утын булһа ла тотоп керергә”, “Юлға сыҡҡан кешенең юлына буш биҙрә менән сыҡмайҙар, юлын ҡыймайҙар” тиҙәр. Бында буш ҡул, буш биҙрә – юлдың да бушҡа-юҡҡа булыуына, уңмауына ишара. Халыҡта “Кеше юлын ҡыйырға ярамай” тигән тыйыу киң таралған, шуға ла урамда осраған оло бабай, әбейҙең, бигерәк тә ир кешенең юлын ҡыйыу әҙәпһеҙлек һанала, ололарға ихтирам менән ҡарау, уларҙың дәрәжәһе, хоҡуғы иҫәпкә алына.

Халыҡта юл саты, сүплек-соҡорҙар, иҫке буш өйҙәр – ен-зәхмәттең йөрөгән ере, тыныс булмаған, сакраль мәғәнәлә бысраҡ ер иҫәпләнә. Имтомда кеше йөрөмәгән ерҙәргә, юл саттарына, сүплеккә осоҡ ташлау ғәҙәте бар. Бер һауытҡа ете төрлө әйбер һалып, шуның менән сирлене биленән уратып алып, юл саттарына йәки соҡорға алып барып ташлайҙар. Ен йәки сир, теге һауыттың эсендә нимә бар икән, тип ҡарап, шул юл сатында ултырып ҡала, имеш. Осоҡ ташлап ҡайтҡанда артҡа боролоп ҡарарға ярамай. Сир арттан эйәрмәһен, уға кәртә булһын өсөн, юл буйына бер нисә арҡыры сыбыҡ һалып китәләр: улар ен юлын бүлә, йәнәһе. Ҡайтып етмәҫ борон, ендәр юлды тапмаһын, ике яҡҡа айырылып китһен өсөн, буй итеп айыры, саталы сыбыҡ һалына. Шуға ла “Юл сатына ултырырға ярамай, сир табырһың”, “Ике, ете юл сатына ятып йоҡларға ярамай” тиҙәр.

Барлыҡ ауылдарҙа, тирә-яғында, юлдарҙа “аҙаштыра торған ер”, “ен юлы”, “насар урын” йәки, киреһенсә, “тыныс ер”, “яҡшы урын” тигән төшөнсәләр бар. Шул насар ерҙәргә, йәғни һуҡмаҡ, тыҡрыҡ, юл өҫтөнә йорт та һалыу ҡәтғи тыйыла килгән: “Өйҙө һуҡмаҡ өҫтөнә, тыҡрыҡҡа һалырға ярамай, тыныс булмай”, “Өйҙө яңынан һалғанда элекке ҡапҡа урынына, тапалған ергә, юл өҫтөнә һалырға ярамай, сирле булаһың”, “Йөрөгән ҡапҡа урынына өй һалырға ярамай. Ҡапҡа шығырлаған һайын шығырлап йәшәйһең” тиҙәр.

Төрлө йолаларҙы атҡарырға сыҡҡанда ла, мәҫәлән, туй оҙатыу, мәрхүмде ерләргә алып китеүҙә махсус тыйыуҙар бар. Туй йолаһында “Килгән туйҙың, килендең юлын ҡыйырға ярамай”, “Килен төшөргәндә ҡыҙҙы егет өйөнә тура алып барырға ярамай, ҡыҙ ғүмере оҙон булһын өсөн, урау юлдан алып баралар” тиҙәр. Туйҙы оҙатҡанда ҡыҙ артына боролоп ҡарарға тейеш түгел. Ғөмүмән, фольклорҙа артҡа боролоп ҡарарға ярамау мотивын өйрәнеп, Р.Г. Назиров “Запрет оглядываться” тигән ғилми мәҡәлә менән сығыш яһаған ине (1987).

Ерләү йолаһында ла “Мәйеттең юлын ҡыйырға ярамай”, “Мәйетте

күмергә алып барғанда, ҡатын-ҡыҙ алдан барырға тейеш түгел", "Ҡатын-ҡыҙға мәйет артынан эйәреп барырға ярамай" тигән тыйыуҙар бар. Былар ҡатындарҙың йомшаҡ, нескә күңелен иҫәпкә алып, уларҙы ҡурҡыуҙан, артыҡ ҡайғырыуҙан һаулығына зарар килеүе ихтималлығынан ҡурсалап әйтелгәндер, күрәһең. "Зыяраттан ҡайтҡанда тура өйгә инергә ярамай, урау юлдан ҡайтып, унда-бында ингәндән һуң ғына мөмкин" тигәндә, ҡайтҡанда сир эйәреп килеүенән һаҡланыр өсөн әйтәләр.

Әкиәттәрҙә "Ете ҡат ер аҫтына, ете ҡат диңгеҙ аръяғына китте", "Ете ҡат күккә менде" йәки юл арауығы, юлға киткән ваҡыт донъя ҡатламы, ҡат (пространство), йыл, ай, көн менән билдәләнә. Элек халыҡ йәйәү, ат йәки дөйә менеп йөрөгәс, юл оҙон һымаҡ күренгән. Боронғолар: "Заман ахырына ҡаршы юл ҡыҫҡарыр",– тигәндәр, ысынлап та, техника үҫешеп, халыҡ тиҙ йөрөшлө транспорт менән йөрөй башлағас, хәҙер күбеһенсә биш минутлыҡ юл, ике сәғәтлек юл тип юл оҙонлоғон минут, сәғәт, ваҡыт йәки конкрет километр менән генә әйтәләр.

Рус һәм башҡа милләт ғалимдары, фольклорсылары, этнографтары (Т.Б. Щепанская, Т.Г. Владыкина, Е. Алексева һ.б.) тарафынан, фәнни хеҙмәттәрҙән күренеүенсә, юлға бәйле ырым-ышаныуҙар ғилми яҡтан тикшерелгән. Башҡорт ғалимдары араһында иһә был тема менән ҡыҙыҡһыныусылар ғына бар, ә айырым алып, ентекле өйрәнелмәгән. Шулай итеп, киләсәктә юл мотивының кеше тормошонда, фольклор жанрҙарында, топонимикала сағылышы ғилми мәсьәләләрҙең береһе булып ҡала.

**Фәнирә ҒАЙСИНА,**
**Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының**
**ғилми хеҙмәткәре.**

**Ҡулланылған әҙәбиәт:**

1. Авторҙың 1998 – 2009 йылдарҙа Башҡортостандың төрлө райондарында экспедицияларҙа яҙып алған материалдары.

2. Башҡорт халыҡ ижады: Йола фольклоры. 1 том. – Өфө: Башҡ. "Китап" нәшр. 1995. – 166 –168-се б.

3. Башҡорт халыҡ ижады. 9 том. Йомаҡтар. – 2007. – 82-83-сө б.

4. Башҡорт халыҡ ижады. 10-сы том. 1-се китап. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр. – Өфө: Китап. – 2006. – 292 – 300-сө б.

6. Назиров Р.Г. Запрет оглядываться (К происхождению фольклорного мотива) // Фольклор народов РСФСР. Межэтнические фольк. связи.- Уфа: БашГУ, 1987. – С.31 – 38.

7. Щепанская Т.Б. Культура дороги в русской мифоритуальной традиции XIX – XX вв.// Обычаи, обряды, традиции. – М.: 2008.

## ҠАТЫ ҺЫНАУҘАР АША

1945 йылда Сүлте ете йыллыҡ мәктәбен тамамлап, мин белем алыуымды Иҫке Дөмәй урта мәктәбендә дауам иттем. Беҙ, һигеҙенсе класҡа килеүселәр, Базы-Ҡуян, Сүлте, Яңы Аташ, Әхмәт, Мәскәү, Тайнаш, Балаҡ, Туҡтағол, Тыпый, Үрмәт, Рсай, Иҫке һәм Яңы Дөмәй, Йәнтуған, йәғни Илеш, Баҡалы, Саҡмағош районДарының шул тирәләге ауылдарынан инек. Беҙҙе дүрт класҡа бүлеп, бәләкәй генә бүлмәләргә ултырттылар. Рус теле һәм әҙәбиәтенән – Мария Пискунова, татар теле һәм әҙәбиәтенән – Р. Фазлыева, химия һәм биологиянан – Әғзибә Ғәлиева, физиканан – Зәжиһә Бәҙәмшина, тарих һәм географиянан – мәктәп директоры Р. Әхмәҙуллин, математиканан Зәйнәп Хәмиҙуллина уҡытты.

Мин Иҫке Дөмәй ауылынан Рәфҡәт Зарипов менән бер партала ултырам. Мин уның менән бик тиҙ дуҫлашып киттем. Рәфҡәт көн дә кеҫәләренә тултырып ҡыҙҙырылған эре көнбағыш алып килә, миңә лә өлөш сығара. Рәфҡәт, минән бер йәшкә кесерәк булыуға ҡарамаҫтан, буйға ҡалҡыуыраҡ. Интегеп йәшәмәгәнлеген йөҙө лә күрһәтеп тора: унан сәләмәт ҡыҙыллыҡ китмәй. Малай беҙҙең кеүек һарыға ҡатып йөрөмәй, сөнки һуғыштан ҡайтҡан атаһы арыу ғына урында эшләй.

…Бына алгебра дәресе. Зәйнәп апай, һәр ваҡыттағыса, шәп-шәп атлап килеп инде лә тирә яғына күҙ йүгертеп сыҡты. Рәфҡәт менән мин көнбағыш ҡабығы буялған ауыҙыбыҙҙы һөртөп өлгөрә лә алмай ҡалдыҡ. Быны күреп, уҡытыусы мине таҡта янына саҡырҙы. Миҫал ауыр ғына булыуға ҡарамаҫтан, мин тиҙ генә эшләп бөтөрҙөм. Зәйнәп апай тикшереп сыҡты һәм ҡәнәғәт ҡалды: «Үҙең математиканы һәйбәт беләһең, үҙең көнбағыш яраһың», – тип, бер яҡтан, үҙенең шатлығын белдерһә, икенсе яҡтан, математиканы яҡшы белгән кешенең көнбағыш ярырға тейеш түгеллеген һиҙҙереп ҡуйҙы. Мин башҡаса ундай сетеркле хәлдә ҡалмаҫҡа тырыштым. Тик ни эшләмәк кәрәк: аслыҡ. Ҡайһы саҡ көнбағыш ашау ҙа күңелдә күтәрә шул.

Беҙҙең аяҡта – сабата, өҫтә – ямаулы фуфайка. Ҙур тәнәфестә тамаҡ ялғарға өс-дүрт эре генә бәрәңге ҡуйында йылынып тора. Бөтә байлыҡ шул. Ә бына дуҫым, X класс уҡыусыһы Фәһим Әйүповтың сепрәк сумкаһындағы биш-алты бәрәңге күгәрсен йомортҡаһынан да ҙур булмаҫтыр. Мин мәктәпкә иртән йә ыуыслы аш, йә сөсө икмәк менән ҡатыҡ эсеп килһәм, Фәһимдең туҡланғаны – шул бәрәңге. Аслы-туҡлы йөрөһә лә, барлыҡ фәндәрҙән дә бик яҡшы өлгәште ул. Беренсе ярты йыллыҡ уҡыу йомғаҡтары буйынса Фәһимде ботинка менән бүләкләнеләр. Өҫтөндә йүнле кейем булмаһа ла, сабаталы Йәнтуған малайы ғорур атлап сығып директорыбыҙ ҡулынан бүләк алғанда, уҡыусыларҙың, шул иҫәптән минең дә, йөҙөндә көнләшеү сатҡыһы сағыла ине. Фәһим урта мәктәпте уңышлы тамамлап, Өфө нефть институтына уҡырға инде. Артабан ул нефть сығарыу тармағында эшләне, төрлө вазифалар, шул иҫәптән юғарыларын да, башҡарҙы.

Беренсе ярты йыллыктан һуң беҙгә математиканан Солтанғужин ағай (беҙ уның исемен бик әйтеп барманыҡ. – **М.F.**) дәрес бирҙе. Ул һуғышҡа тиклем уҡ

педагогия институты тамамлаған, армияға тиклем үк өйләнгән, юғары белемле математик. Ҡатыны Илеш районының Теләпән ауылы ҡыҙы Хисмәтуллина апай (беҙҙе уҡытмағас, исеме хәтерҙә ҡалмаған. – **М.F.**) ине. Ул да Бөрө педагогия училищеһын тамамлап, һуғыш ваҡытында Илеш районында башланғыс кластарҙа уҡытты. Ап-аҡ йөҙлө, сибәр, яғымлы ҡарашы менән үҙенә тартып торған һөйкөмлө ҡатын булды ул. Солтанғужин ағай фронтта ротаға командалыҡ итә, ҡаты бәрелештәрҙә ҡатнашып ҡамауҙа ҡала һәм, контузия алып, әсирлеккә төшә. Хисмәтуллина апайға «Ирегеҙ һуғышта батырҙарса һәләк булды» тигән «ҡара» ҡағыҙ килә. Бер нисә йылдан ҡатын үҙе менән бергә эшләгән элекке яугир, математика уҡытыусыһына кейәүгә сығып, ул таба.

Солтанғужин ағай, хәтерем яңылышмаһа, Боҙаяҙ (хәҙерге Ҡырмыҫҡалы) районынан булып, әсирлектән ҡотолғас, туп-тура Теләпәнгә килә. Алдан хатмаҙар яҙып тормай, ҡатынының көтөүенә ышана. Осрашалар, өсәүләп мәсьәләне уртаға һалып һөйләшкәндән һуң, ир менән ҡатын яңынан ҡушыла. Икәүләп район мәғариф бүлеге юлламаһы менән Иҫке Дөмәй урта мәктәбенә эшкә киләләр. Бында уларға мәктәп ҡаршыһындағы ике квартиралы йорттан бер бүлмә бирелә. Яратышып, бер-береһен аңлап, матур йәшәне улар. Солтанғужин ағай үҙенсәлекле холоҡло булып хәтерҙә ҡалған. Бөхтә кейенеп йөрөй, атлауҙары ла хәрбиҙәрсә – офицерҙарса. Ул ваҡыттарҙа әсирлектә булған кешеләрҙе тикшерәләр, – ә был уның холҡоноң боҙолоуына ла тәьҫир итмәй ҡалмағандыр – тиҙ ҡыҙа торған ғәҙәте бар ине. Юғары белемле педагог булараҡ, Солтанғужин ағай дәресте оҫта ойоштороусы, аңлайышлы итеп һөйләүсе уҡытыусы булды. Ләкин уның шаян һүҙ күтәрмәүе, юғары класс уҡыусыларына юғарынан ҡарауы һиҙелә ине. Уның ошо холҡо ауылдашым Әбүзәр Гәрәйшин менән мөғәмәлә лә сағылды.

...Геометрия дәресендә таҡтаға саҡырылған ҡыҙҙың ирмәк тәртибенән Әбүзәр пырхылдап көлөп ебәрҙе. Кем көлгәнен белеп алғас, Солтанғужин ағайҙың: «Гәрәйшин, һинең танауыңа еҫ кергән икән», – тип әйтеүе булды, шаян һүҙле Әбүзәр: «Минең танау иҫкермәгән, ә бына Һеҙҙең танауығыҙ иҫкергән», – тип уның танауы өҫтөндәге һытҡыларға ишараламаһынмы! Малай үҙенең артығын ысҡындырғанын аңлап өлгөрөүгә, уҡытыусы унан бер нисә теорема, ҡағиҙәләр һорап, теңкәһенә тейә башланы. Шунан китте үҙ-ара күрә алмаусанлыҡ. Тәртипле һәм яҡшы уҡыусы Әбүзәр уҡыуын ташланы ла Йәнтуған бригадаһының һөтсөлөк фермаһына эшкә инде. Армия хеҙмәтенән ҡайтҡас, шоферҙар курсын тамамлап, автобустар ҙа йөрөттө. Өфө төҙөлөш техникумында ситтән тороп уҡып, ҡыҙыл дипломға тамамлағас, төҙөлөштә мастер, прораб, участка начальнигына ҡәҙәр үҫте.

Ауылға ҡайтҡанда осрашһаҡ, Әбүзәр: – Их, Мәғсүм йәштәш, мин математика уҡытыусыһы булырға хыялланғайным да, Солтанғужин ағай ҡамасауланы, – тип көләмһерәп иҫкә ала торғайны.

Һигеҙенсе класта староста булған кеүек, мин туғыҙынсыла ла шул вазифамды дауам иттем. Саҡмағош районы Тайнаш ауылынан Рафаил Йосопов менән дуҫ булдыҡ. Был дуҫлашыу класс уҡыусыларының комсомол йыйылышынан һуң башланды. Рафаил эшлекле генә тәҡдимдәр әйтеп ташлай, инициативалы, әүҙем уҡыусы. Йыш ҡына Сүлте ауылынан йөрөп уҡыған егеттәр һәм ҡыҙҙарға эйәреп киткеләй. Уны класташтар үҙ итә, шаяралар, уйын һүҙҙәр һөйләшеп көлөшөп тә алалар. Мин бер ҡайтҡанда дуҫымдан һорай ҡуйҙым: «Рафаил, һин нишләп Сүлтегә йыш бараһың? Унда кемдәрең бар?» Ул был ауылда олатаһы һәм өләсәһе йәшәүен, әсәһенең Сүлте ҡыҙы булыуын әйтте. – Ололар бит, йыш ҡына ауырыйҙар, – тине. – Мин уларға ял көндәрендә ярҙам итәм, утын әҙерләйем, мунса яғам, башҡа ваҡ-төйәк эштәр башҡарам.

Ҡарттарҙың кәзәнән башҡа малы ла юҡ икән. Яндарында балалары ла ҡалмаған. Бер аҙнала ҡарттарға ҡустыһы ярҙамға килһә, икенсеһендә Рафаил үҙе

бара икән. Мин уға инәйемдең дә Сүлте ҡыҙы булыуын әйткәс, тағы ла ныҒыраҡ яҡынайып киттек. Рафаилдың атаһы, һуғыштан яраланып ҡайтҡас, һыу тирмәненә тирмәнсе булып урынлаша. Шуға күрә уларҙың өҫтәлендә икмәк тә күренә ине. Ләкин Рафаил да Солтанғужин ағай менән һүҙгә килеп, уҡыуын ташланы, хатта документтарын алырға ла килмәне. Һуңыраҡ был фронтовик-уҡытыусының ауыр холҡон үҙемдең елкәлә лә татырға тура килде. Бер көндө ҙур тәнәфестә – ә ул 20 минутҡа һуҙыла – мәктәп бәҙрәфендә тәмәке тартып торғанда, беҙҙе, IX һәм X класс уҡыусыларын, Солтанғужин ағай эләктереп алды. Һәр беребеҙҙең ҡулына көрәк тотторҙо ла өс сәғәт эсендә ике метр тәрәнлегендә соҡор ҡаҙып, бәҙрәфте шунда күсереп ултыртырға ҡушты. Эште тамамлағас, X класс уҡыусыһы Әғләм Батыев уҡытыусылар бүлмәһенә инеп, был хаҡта үҙенә әйтергә тейеш булды. Батыев һуңынан Өфө нефть институтын тамамлап, юғары вазифалы эштәр башҡарҙы.

…1947 йылдың майы. Беҙҙе, Иҫке Дөмәй урта мәктәбенең X класс уҡыусыларын, Үрге Йәркәй урта мәктәбенә рус теле һәм әҙәбиәтенән имтихан тапшырырға ебәрҙеләр. Ләкин иншаны уҡыусыларҙың бөтәһе лә тиерлек «насар» билдәһенә яҙҙы. Был, улар башҡа фәндәр буйынса имтиханға индерелмәй, тигән һүҙ ине. Йәштәр, баштарын эйеп, ауылдарына таралышты. Белемде етерлек бирмәгән өсөн Иҫке Дөмәй урта мәктәбе директорын, завучын ғәйепләп, эштән сығарҙылар. Солтанғужин ағай ғаиләһе менән үҙенең тыуған яғына ҡайтып киткән. Оҙаҡ йылдар үткәс, мин Бөрө дәүләт педагогия институтында уҡығанда уның менән «Өфө – Молотов» (хәҙер – “Пермь”) пароходында осраштым. Ағай ғаиләһе менән Илеш районына ҡунаҡҡа китеп бара ине. Үҙҙәренең инде өс-дүрт балалары бар. Туғыҙ йыл үтеүгә ҡарамаҫтан, төҫ-башҡа әллә ни үҙгәрмәгәндәр. Элекке уҡытыусым кәүҙәгә бер аҙ тулыланған, үҙен тынысыраҡ тота. Күрәһең, йыш тикшеренеүҙәр, соҡсоноуҙар кәмегәндер. Беҙ уның менән байтаҡ һөйләшеп барҙыҡ, институтта уҡыуыма, математика уҡытыусыһы буласағыма ул бик шатланды. Ҡатынының уҡытыуы, үҙенең мәктәп директоры булып эшләүе тураһында әйтте. «Былай насар эшләмәйем кеүек. Эшемде лә, үҙемде лә баһалайҙар», – тип һүҙен бөтөрҙө.

Рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Мария апай Пискунованы, Баҡалы районынан, тинеләр. Керәшен татары булдымы, урыҫ ҡыҙымы – теүәл генә белмәйем. Ләкин татарса бик оҫта һөйләшә торғайны. Апайыбыҙҙың иренән айырылғанлығы, ике улының ла аталары менән йәшәүе, әсәләре янына каникулда ғына килеп йөрөүҙәре асыҡланды. Һуңынан Мария апай немец теле уҡытыусыһы Ғайсин ағайға кейәүгә сыҡты. Ҡыҫҡа буйлы, матур ғына, заманына күрә яҡшы кейенеп йөрөгән уҡытыусы ине апайыбыҙ. Балаларға ҡарата талапсан, дәрестәре лә тыныс, эшлекле үтә. Бер саҡ ул беҙгә «Слово о полку Игореве» әҫәре буйынса өйҙә инша яҙып килергә ҡушты. Был китап – бөтә класҡа бер дана, уныһы ла Мария апайҙа ғына. Дөрөҫ, әҫәрҙе өйрәнә башлағас та, ул һәр беребеҙгә берәр көнгә ул китапты биреп ебәрә торғайны. Ә бына инша яҙырға тура киләсәген әйтмәне. Мин дә китапты уҡып ҡына сыҡтым, бер ниндәй яҙма яһаманым. Дәфтәре лә юҡ ине. Бер-ике көндән мин иншаны тамамлап, апайға тапшырҙым. Ул эшемде яҡшы баһаланы. «Иншаң һәйбәт яҙылған, тик бер хата ебәргәнһең: «все таки» «всю таки» тип яҙылмай»,– тине. Класташтарым миңә «Всютәки Гәрәев» тигән ҡушамат таға ала ине, ләкин улар был турала уйлап та бирмәне шикелле.

Һигеҙенсе класта уҡығанда мин Рәфҡәт дуҫымдың өйөнә йыш йөрөнөм. Бер барғанда һеңлеһе Гәүһәриәнең класташы Фәниә менән таныштым. Уны бер күреүҙән оҡшатһам да, үлеп ғашиҡ булыуҙы белмәй инем әле. Йәнтуғанда дуҫлашып йөрөгән ҡыҙым да бар: Рәжетдин ҡарттың төпсөк ҡыҙы Нәфисә. Ул мине оҡшата, ахырыһы, саҡырғанда килә, мин дә уны бик яҡын күрәм.

14 йәштә генә булыуға ҡарамаҫтан, Фәниә бик һөйкөмлө, күҙ ҡарашы менән дә үҙенә тартып тора. Мәктәптә лә мин уны йыш осрата башланым. Гәүһәриә янымa йомош менән килгәндә, Фәниәне лә эйәртә. Күп ваҡыт үҙҙәре сисә алмаған мәсьәләне тотоп киләләр. Йыш осрашыуҙар беҙҙе яҡынайтты, дуҫлашып киттек. Һуңынан дуҫлыҡ яратышыуға әүерелеп, бер-беребеҙҙе һағына башланыҡ. Дәрестән сығыуға Фәниә мине көтөп ала. Сүҙәм йылғаһы буйлап фермаға саҡлы етәкләшеп барабыҙ ҙа, ул үҙ урамдары Ҡарабайға инеп киткәнсе, мин артынан ҡарап торам да Йәнтуғанға ашығам. Фәниә менән йыл ярымдан күберәк яратышып йөрөнөк. Йәйге каникулда мин, ат менеп, яратҡан ҡыҙым янына алты-ете саҡрымға саба торған булдым.

Көҙ етте. Колхоз эшенән айырылып, беҙ унынсы класҡа килдек. Уҡыуҙан башҡаны белмәһәк тә, кистәрен йәшлек үҙенекен итә: һөйгән ҡыҙҙарыбыҙ менән осрашабыҙ. Октябрь аҙаҡтарында мәктәптә комсомол йыйылыштары үтте. Дөйөм йыйылыш оҙаҡҡа һуҙылып, мин ул кисте Рәфҡәттәрҙә ҡунырға ҡалдым. Аулаҡта Фәниә менән осраштыҡ, һәм шунда бер яҡтан да көтөлмәгән хәл булды. Төндә Фәниәнең әсәһе килеп, тәҙрә аша ҡыҙын яман һүҙҙәр менән әрләргә керешә. Ошо хәлдән һуң арабыҙ һыуынды, Фәниә мине дәрестән һуң көтөп алмай башланы. Осрашыуға саҡырһам да, килмәне. Гәүһәриә аша уның миңә күренергә ғәрләнеүен ишеттем. «Мәғсүм мине онотһон», – тигән. Ташлашыуҙы мин бик ауыр кисерҙем. Тик нишләйһең, яҙмыштан уҙмыш юҡ, тиҙәр бит.

Киләһе уҡыу йылын башлағанда мәктәпкә бик күп уҡытыусы ҡыҙҙар килде. Араларында беҙгә класс етәксеһе итеп тәғәйенләнгән Рәйсә Һаҙыева апай ҙа бар. Беҙ, малайҙар, класыбыҙ менән уға ғашиҡ булдыҡ. Бик матур кәүҙәле, ап-аҡ түңәрәк йөҙлө, Бөрө уҡытыусылар институтының татар теле факультетын тамамлаған. Матур кейенә, татарса таҙа һөйләшә. Кластағы күп эштәрҙе, тәрбиә сараларын, комсомол ойошмаһының эштәрен ойоштороуҙа көн тәртибенә ҡуйып тикшерерҙәй мәсьәләләрҙе бергә һайлай инек. Мин сираттағы уҡыу йылын йәшем буйынса ла, физик һәм әхлаҡи яҡтан да үҫеберәк ҡаршыланым, сөнки бер айҙан ашыу хәрби лагерҙа булыу мине һәр яҡлап нығытты. Тағы бер шатлығым: Магнитогорск ҡалаһына барҙым. Атайым һуғыштан ҡайтҡас, шунда эшкә урынлашып, беҙҙе лә күсереп алырға ниәтләнә ине, ләкин инәйем генә ризалашманы: «Ауылдан китмәйем», – тине.

Мин, ҡалала геология техникумына уҡырға инергә дәртләнеп, документтар әҙерләп юлға сыҡтым. Минең менән Магнитҡа эшкә барыусы күрше ауыл егеттәре лә бар ине. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, юлда беҙҙе Силәбе жуликтары таланы. Сумаҙандағы атайға тип алған бөтә күстәнәстәрем менән бергә документтарым да юҡҡа сыҡты. Кире ауылға ҡайтырға тура килде. Юлдағы мажараны мин бик ауыр кисерҙем. Әсәйем әҙерләп ебәргән бал, май һәм башҡа күстәнәстәрҙе атайыма ауыҙ иттерә алмаған өсөн йәнем көйҙө. Был хәл ниндәйҙер психик һынылышҡа килтерҙе, мине нығытты, сыныҡтырҙы, тормошҡа етдиерәк ҡарарға этәргес бирҙе, тип иҫәпләйем.

Рәйсә апай Һаҙыева дәрестәргә ныҡлы әҙерлек менән инер, беҙҙе ауыҙына ҡаратып ултыртыр ине. Ул бигерәк тә әҙәбиәт дәрестәрен бик ҡыҙыҡлы үткәрә, беҙҙә әҙәби ижадҡа мөхәббәт тәрбиәләй ине. Һуңыраҡ минең яҙышып китеүемә лә уҡытыусымдың йоғонтоһо булғандыр, тим. Рәйсә апай һуңыраҡ тормошон Ғәлим ағай Хисмәтуллин менән бәйләне.

Ғәлим ағай Иҫке Дөмәй урта мәктәбенә 1946/47 уҡыу йылында эшкә килде. Оҙон буйлы, һомғол кәүҙәле артиллерия лейтенанты дәрәжәһендәге егет ине ул. Унынсыла Хисмәтуллин ағай беҙҙең класс етәксеһе булды. Класс старостаһы булараҡ, ул миңә йыйылыштарҙа, тәрбиә сәғәттәрендә төрлө темаларға сығыш яһарға, информация әҙерләргә ҡуша ине. «Париж коммунаһы» көнөндә лә миңә

класс алдында сығыш яһарға тура килде. Карл Маркс, Фридрих Энгельстың эшмәкәрлеге хаҡында һөйләгәнем хәтерҙә.

Хисмәтуллин ағай математика, физика һәм астрономия дәрестәрен алып барҙы. Үҙ фәнен яҡшы белгән, дәресте оҫта ойошторған уҡытыусы булып хәтерҙә ҡалған. Һуғышҡа алынғансы Уҡытыусылар институтын тамамлаған, һуңынан уға «Башҡортостан мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы» исеме лә бирелде. Математиканан имтиханға Ғәлим ағай беҙҙе яҡшы әҙерләне, тип әйтә алам, сөнки Үрге Йәркәйҙә өлгөргәнлек аттестатына имтихан тапшырғанда – унда Андреевка, Үрге Маншыр, Үрге Йәркәй һәм Иҫке Дөмәй урта мәктәптәре уҡыусылары ҡатнаша – башҡалар араһында насар иҫәптә торманыҡ. 1948 йылдың июнендә мине райондың «Сталинсы» гәзитенә маҡтап яҙып та сыҡтылар.

Туғыҙынсы класты мин гел «бик яҡшы»ға ғына тамамланым. Шатлана-шатлана Йәнтуғанға ҡайтһам, бригадир, әйтерһең, көтөп кенә торған: «Мәғсүм ҡустым, бер һабансы ауырыған. Иртәгәнән уның аттарын егеп, Сатра баҫыуына ер һөрөргә барырһың, йәме», – тине. Егерме көнләп һабанда йөрөгәс, мине Бүләк ауылы янындағы урмандан ағас ташырға ҡуштылар. Мәктәпкә утынға Иштирәк урманынан әрҙәнә лә ташыным. Ул арала ураҡ та килеп етте. Өфөнән ебәрелгән ЗИС-5 машинаһына мине йөксө итеп тәғәйенләнеләр. Һәр көн машинаға арыш тейәп йә Груздевка иген әҙерләү пунктына, йә Дүртөйлөгә ташыйбыҙ.

... Ҡулыма 13 центнер арыш етмәгәнен күрһәткән квитанция тотоп Дүртөйлө иген ҡабул итеү пункты янында торам. Баш китерлек эш бит. 13 центнер арыш минең өсөн тапшырылған 5 тоннанан ауырыраҡ кеүек. «Ни эшләргә?» Баш ни уйлап, ҡайҙа барырға белмәй. Эс боша, йөрәк яна, ярылырҙай булып, дөп-дөп тибә. Ваҡыты ла ниндәй бит: 1947 йыл. Бер килограмм ашлыҡ өсөн Июнь указы буйынса һигеҙ йылға тиклем хөкөм итә торған ваҡыт. Йөктө тейәгәндә өс кеше иҫәпләп барҙыҡ: мин – өлкән йөк бушатыусы, келәт мөдире һәм водитель. Элеваторға килгәндә бер ергә һуғылманыҡ, бер тапҡыр ҙа туҡтаманыҡ. Бер мәл башты күтәреп, ҡараһам, 30 – 40 метрлап ситтә милиция капитанының баҫып торғанын күрҙем. Башымдан секунд эсендә: «Ҡотҡарһа, шул милиционер ғына ҡотҡара ала»,– тигән уй йүгереп үтте. Капитан янына барып, хәлде аңлатып бирҙем. Ул иғтибар менән тыңланы ла, бер аҙ уйланып торғандан һуң, миңә артынан эйәрергә ҡушты. Беҙ ашлыҡ үлсәүсе янына килдек. Хәҙер капитан хәлде уға аңлатты ла бер нисә һорау бирҙе. Үлсәүсенең яуабы бер: «Белмәйем». Бындай яуап милиция капитанында ниндәйҙер шик тыуҙырҙы, ахырыһы. Ул, хәҙергәсә әйтһәк, тәфтиш саралары үткәрергә булды. Шоферҙы һәм башҡа йөксөләрҙе ситкәрәк китергә ҡушып, миңә һәм үлсәүсегә машина кузовына менергә бойорҙо. Артабан, миңә боролоп:

– Егет, йә, күрһәт әле, ашлығың кузовтың ҡайһы тирәһенән ине? – тип һораны.

Игендең кузовта биләгән өҫкө өлөшөн ҡул менән һыҙып күрһәттем. Капитан уны тиҙ генә ҡәләм менән билдәләп ҡуйҙы. Йөктөң күпмелеген ул башҡаларҙан да белеште. Бынан һуң капитан менән үлсәүсе бер ҡарарға килде: арышты машинаға беҙ күрһәткән тәңгәлгә тиклем тейәргә лә һуңынан үлсәп ҡарарға. Янып-бешеп ашлыҡты машинаға кире тейәргә тура килде. Үлсәп ҡараһаҡ, 5030 килограмм! Йәғни – теп-теүәл. Яңы квитанцияны ҡулға тотоп сыҡҡанда, аяҡтар атларлыҡ хәлдә түгел ине. Һанаулы сәғәттәрҙә ун тонна йөк тейәп-бушатыу еңел эш түгел. «Милиция капитаны осрамаһа, беҙ бәләгә тарый инек», – тип һөйләшеп барабыҙ. Ярай әле, донъяла игелекле кешеләр бар.

Мин барлыҡ уҡытыусыларымды ла ярата инем. Берҙән, гел «бик яҡшы»ға ғына өлгәшкәнгә булһа; икенсенән, мин һәр ваҡыт уларға ярҙамға килергә әҙер торҙом. Мәҫәлән, дәрескә уҡытыусылар алып инергә тейешле приборҙарҙы ваҡытында класҡа килтерәм. Әғзибә апай Ғәлиева беҙҙе химия һәм биологиянан уҡытты. «Бик яҡшы», «яҡшы» билдәләренә уҡыусылар класта байтаҡ ине.

Уҡытыусы дәрескә ныҡлы әҙерлек менән инер, ҡултығында класс журналы һәм ҡулында аҡбур ғына була торғайны. Хәтере бик яҡшы, шуға күрә ул кемдән һорарға, ҡайһы урында тәжрибә үткәрергә һ.б. барыһын да ентекле уйлаған булыр ине. Иҫке Дөмәй урта мәктәбенең 60 йыллығын билдәләгәндә, мин Әғзибә апайҙы Башҡортостан ауыл хужалығы институты уҡытыусыһы, биология фәндәре кандидаты Тайчинова менән сағыштырып, уның да шулай уҡ оҫта уҡытыусы, тәжрибәле педагог һәм тәрбиәсе булыуына мәҙхиә юллағайным. Дөйөм биология дәрестәрендә беҙ һорауҙарҙы, ғәҙәттә, яҙма рәүештә бирә инек. 18 йәшлек егеттәрбеҙ бит, дәрт ингән саҡ. Апайыбыҙ былай тиер ине: «Малайҙар, бөгөн дәрестән һуң ҡалығыҙ. Бер сәғәт буйына һорауҙарығыҙға яуап бирермен. Ә ҡыҙҙар менән аҙнаның ошо көнөндә шулай уҡ дәрестән һуң һөйләшербеҙ». Бындай осрашыуҙар бик йыш булмаһа ла, һорауҙар күбәйгәс, ойошторола ине.

Өлгөргәнлек аттестатына имтихан тапшырғанда мин химиянан да «бик яҡшы» билдәһе алдым. Әғзибә апайҙың шундай белем биреүенә ысын күңелемдән рәхмәтлемен. Колхозда партком секретары булып эшләгәндә КПСС-тың район комитеты ҡарары менән Башҡортостан ауыл хужалығы институтында ситтән тороп уҡыным. Шунда үҙемдең химияны яҡшы үҙләштергәнемә, ятраҡан уҡытыусымдың белемде төплө биргәненә тағы ла инандым.

Әғзибә апай – Үрмәт ауылы ҡыҙы. Үҙе лә элек ошо Иҫке Дөмәй мәктәбендә белем алған. Тарих дәрестәрен уның бер туған ағаһы Мәғрүф ағай Ғәлиев алып барҙы. Армиянан запасҡа сығып, майор дәрәжәһе алып ҡайтҡан ир ине ул. Ҡайтыуының сәбәбе лә билдәле: ауырыу ҡатынына ауыл һауаһы кәрәк, һөт, ҡатыҡ, бигерәк тә кәзә һөтө эсергә ҡушҡандар. Бик сибәр, ҡыҫҡа ғына буйлы, бер аҙ ябығыраҡ был апай рус теле һәм әҙәбиәтенән дәрес бирҙе. Мәғрүф ағай сәйәси академия тамамлаған, сәйәсәтте, тарихты, бер һүҙ менән әйткәндә, һыу кеүек эсә. Үткән материалды русса һөйләйһеңме, татарсамы – тыңлай, тейешле билдәне лә ҡуя. Ҡайһы саҡта: «Атаң урыҫ булмаған, Наташанан тыумаған, булмай икән булмаған»,– тип шаярта ла торғайны. «Ҡайһы телдә тыңлағыҙ килә», – тип һорар ине. Ғәлиев ағай миңә, X класта тарихтан гел «бик яҡшы»ға уҡып йөрөгән уҡыусыһына, «насар» билдәһе сәпәне.

Ваҡиға былай булды. Дәрестән һуң фермала инәйемә ярҙамлашып йөрөп, унан мин бик ныҡ арып ҡайттым. Китап уҡырлыҡ та хәл ҡалмағайны. Унан-бынан тамаҡ ялғап алғас, ятып йоҡланым. Тарих дәресендә Ғәлиев ағай миңә ҡараны ла: «Әйҙә, Гәрәев, үткән дәрес материалын һөйләп ебәр. Һинең тарихты ла систематик уҡып барыуыңды беләйек әле», – тип мине таҡта янына саҡырҙы. Мин яуап биреүҙән баш тарттым, бына шулай журналда «насар» билдәһе барлыҡҡа килде. Дөрөҫ, мин уны һуңынан төҙәттем.

Ғәлиев ағайыбыҙ дүртенсе сирек башында КПСС район комитеты бюроһы ҡарары менән пропаганда һәм агитация бүлегенә эшкә алынды. Беҙгә тарих уҡытырға Рсай ете йыллыҡ мәктәбе директоры булып эшләп, ниндәйҙер етешһеҙлеге өсөн вазифаһынан алынған Әлтәф Сәлимов килде. Әлбиттә, Мәғрүф ағай менән сағыштырғанда ул күпкә ҡайтыш ине. Ғәлиев ағайҙы бер айҙан райкомда бүлек мөдире итеп үрләткәндәр. Ул ысынлап та талантлы ойоштороусы, оҫта оратор, халыҡ менән эшләй белгән кеше булды. Артабан беҙҙең «Базы» колхозына райком вәкиле итеп тәғәйенләнгәс, коммунистар, комсомолдар, колхозсылар араһында ойоштороу эшен юғары кимәлгә күтәрҙе. Мине колхоздың комсомол ойошмаһы секретары итеп һайланылар.

Үгәй атаһы Әхиәр Ғабдуллин ете тоҡ бойҙай урлап тотолғандан һуң, Мәғрүф ағай, ғариза яҙып, эшенән киткән. Хәрби комиссариатҡа барып, армияға ебәреүҙәрен һораған, тинеләр. Уны батальон командирының сәйәси эш буйынса урынбаҫары итеп ебәргәндәр. Оставкаға сыҡҡас, Мәғрүф ағай Дүртөйлө

ҡалаһына килеп урынлашҡан. Мин уны бер тапҡыр алыҫтан ғына күрҙем, әммә һөйләшергә насип булманы. Яҙмыштыр инде, талантлы партия эшмәкәре бына шулай юғалып ҡалды.

Ғөмүмән, был Йәнтуған ауылы өсөн ауыр осор булды. Колхоз рәйесе Миһран Ғәбдрәшитов, иҫәпсе Әлтәф Әкрәмов, келәт мөдире Әхнәф Сабитовтар ҡулға алынды. Дәүләткә етерлек күләмдә иген тапшырмай тороп, колхозсыларға он тараҡан һәм башҡа «хаталары» өсөн уларҙы 10 – 13 йылға төрмәгә оҙаттылар. Ул ваҡытта 1947 йылдың 8 июнь указы бик ҡаты эш итә ине шул.

Немец теленән X класта беҙҙе Ғайсин ағай уҡытты. Ул Мәскәүҙә Сит телдәр институтын тамамлаған, немецса бик оҫта һөйләшә, фронтта тәржемәсе булып хеҙмәт иткән. Был ят телде яратып уҡымаһам да, мин «яҡшы» билдәһенән түбәнен алманым. Имтиханды иһә «бик яҡшы»ға тапшырҙым. Ғайсин ағай бик сабыр холоҡло, әкрен ҡуҙғалған кеүек күренһә лә, күп эшләр уҡытыусы булып иҫемдә ҡалған. Һуңынан ул Мария Пискунова апайға өйләнде. Бик татыу, берберенен ихтирам итеп йәшәнеләр.

Хәрби эш буйынса беҙҙе өс йыл буйы Ғосманов ағай уҡытты. Ул Илеш районының 5-6-сы участка тип аталып, элекке немец баяры утары булған ауылда тыуған. Иҫке Дөмәй урта мәктәбенә килгәндә ул өйләнгәйне. Һуғышта лейтенант дәрәжәһендә рота командирына саҡлы үрләтелеп, ныҡ яраланып ҡайтҡан. Бер аяғы икенсеһенән саҡ ҡына ҡыҫҡараҡ булғандыр, күрәһең, йөрөүендә һиҙелә ине. Бик талапсан, әйткән һүҙенән ҡайтмай, үҙен бик бөхтә тотҡан һәм матур кейенеп йөрөгән кеше булды. 1946 йылда ул беҙҙе Бөрө хәрби лагерына алып барҙы, бер аҙнаға яҡын беҙҙең взвод командиры булды. Ғосманов ағайҙың хәрби эшкә теүәл өйрәтеүе арҡаһында миңә хәрби лагерҙа ла, Совет Армияһында өс йыл ярым хеҙмәт иткәндә лә еңел булды.

Иҫке Дөмәй урта мәктәбендә уҡыған йылдарҙа «Биш партизан» колхозы рәйесе булып – Саҡмағош районы Рапат ауылынан булһа кәрәк – Мөкәтев ағай эшләне. Ветеринария участкаһы врачы булып эшләгән еренән уны колхоз рәйесе итеп һайлағайнылар. Колхозда эш яҡшы бара, дәүләт алдындағы бурыстар ваҡытында үтәлә, хужалыҡ алдынғылар иҫәбендә йөрөй. Мөкәтев ағай хәтеремдә түбәндәге ваҡиға буйынса ныҡ һаҡланған. Беренсенән, уның арҡаһында IX кластан уҡыу отличнигы Ирек Баһауетдинов аслыҡтан аҫылынып үлде. Әсәһе бәләкәй ҡул арбаһы тартып, Груздевка пристаненән сәсеү ашлығы алып ҡайтырға киткәс, Ирек, аслыҡҡа сыҙай алмай, колхоз рәйесенә барып, үҙҙәренең хәлен һөйләп бирә, тик Мөкәтев уның үтенесен кире ҡаға, он алыу өсөн ҡағыҙ бирмәй. Бәлки, колхоздың мөмкинлеге лә булмағандыр. (Беҙҙең «Базы» колхозы рәйесе булып эшләгән Әхәт Хурамшиндың атаһы Ваһап ҡарт та ҡарсығы менән һикелә ятып асҡа үлде. Мин Әхәт ағайҙы Йәғәфәр ҡулы баҫыуынан эҙләп табып, уға ата-әсәһенең асҡа үлеүен еткерҙем. Әгәр колхоздың мөмкинлеге булһа, ул да ата-әсәһен астан үлтертмәҫ ине). Ирек үлер алдынан әсәһенә ҡалдырған яҙыуында колхоз рәйесенә барыуын, тегеһенең ярҙам итмәүен әйткән. Был ҡағыҙ һуңынан ауыл Советына, унан һуң районға еткерелгәс, тикшереү үткәрҙеләр. Мөкәтевты ныҡ ҡына йөрәткәндәр, ләкин мин мәктәпте тамамлағанда ул колхоз рәйесе булып эшләй ине әле.

Икенсенән, Иҫке Дөмәй урта мәктәбенә йөрөп уҡығанда, Мөкәтев менән мин юлда йыш осраша торғайным. Ул, биргән сәләмемде лә алмай, тире менән тышланған санаға толоп кейеп ултырыр, атын артыҡ ҡыумай, бер көйгә юрттырып үтеп китер ине. Ул ваҡытта минең өҫтә – иҫке генә фуфайка, йоҡа бер ҡат салбар. Эске кейем тигән нәмәне белгән дә, күргән дә юҡ. Мөкәтев үтеп киткәс, йылыныр өсөн мин уның санаһы артынан йүгерәм. Күп ваҡыт Йәнтуған юлы сатына еткәнсе барам. Ләкин бер тапҡыр ҙа уға, «Мине лә ултырт әле, ағай»,– тип әйткәнем булманы.

20 майҙа беҙ рус теле һәм әҙәбиәтенән инша яҙҙыҡ. Мин уҡытыусы булырға хыяллана инем, шуға күрә «Кем булырға?» тигән теманы һайланым. Тик күптәребеҙгә хас «насар» билдәһенә юлыҡманым. Артабан рус теленән һәм әҙәбиәтенән телдән имтиханды ла уңышлы тапшырҙым. Алда алгебра, геометрия, тригонометрия фәндәренең күп өлөшөн эсенә алған яҙма, телдән имтихандар көтөлә. Мәктәп директоры Ғәбиҙуллин ағай бер көн мине:

– Иптәштәреңә лә ярҙам ит, улар ҙа өлгөргәнлек аттестаты алырға тейеш, – тип иҫкәртте.

Әлбиттә, баш тарта алманым, шул арҡала үҙемде имтихан биреүҙән мәхрүм итә яҙҙылар. Парта аҫтарын тикшергәндә ҡағыҙ киҫәге – шпаргалка табылған. Мин яҙғанды асыҡлағас, тотоп әрләнеләр. Ә мин уны иптәштәремә ярҙам итеү өсөн яҙғайным. Бик ныҡ асыуым килде. «Шпаргалканы йыйып ҡуя ла белмәгәс, мин башҡаса ярҙам итмәйәсәкмен»,– тинем. Мәктәп директоры мине һүгеп ташланы, аттестатты үҙе тапшырасағын иҫкәртте.

Геометриянан телдән имтихан тапшырғанда мине беренселәрҙән булып алғы партаға ултырттылар. Үрге Йәркәй урта мәктәбенең математика уҡытыусыһы, имтиханды алып барыусы Аллаяров ағай, миңә мөрәжәғәт итеп:

– Гәрәев, әллә әҙерләнеп тә бөттөңмө? Әйҙә, таҡтаға сыҡ! – тине.

Яуап биргәндән һуң урыныма, арттағы парталарҙың береһенә, ултырырға ынтылдым. Миңә бер иптәшемдең билет һорауына яуапты белмәүен еткерҙеләр. Шпаргалка яҙҙым да алғы партаға сығыусы артынан биреп ебәрҙем. Парта аҫтарын тикшергәндә тағы минең ҡағыҙҙы табып алғандар. Мине ҡаты ғына әрләнеләр, «Ҡалған имтихандарға яҡын ебәрмәҫкә!» тигән фекер ҡолаҡ төбөмдә сыңлап торҙо. Ғилман ағай Ғәбиҙуллиндың тәҡдиме менән генә "Һуңғы иҫкәртеү яһарға!" тигән ҡарар сығарылды. Директорыбыҙҙың районда абруйы ҙур ине. Бөрө уҡытыусылар институтының физика-математика факультетын тамамлап ҡайтҡас, ул тыуған ауылы Үрге Мансар урта мәктәбе директоры, КПСС район комитеты секретары, халыҡ контроле комитеты рәйесе вазифаларында эшләне.

Һуңғы фәндән имтиханды тапшырғас, беҙ Ғәбиҙуллин ағай янына йыйылдыҡ. Ул беҙгә бер ниндәй ҙә хушлашыу кисәһе үткәрелмәйәсәген, сөнки мәктәптең аҡсаһы юҡлығын, халыҡтың да матди хәле мөшкөллөгөн аңлатты. Шуға күрә Иҫке Дөмәй урта мәктәбендә уҡығанда, имтихан тапшырған ваҡытта төшкән бер генә фотоһүрәт тә юҡ. Шул саҡлы хәйерсе булғанбыҙ ки, имтихан ваҡытында ла бар уйыбыҙ тамаҡ туйҙырыу ғына булған. Ниндәй үкенес: иптәштәр менән төшкән бер фотоң да булмаһын әле!

1945 йылда 8-се класҡа 84 уҡыусы йыйылған булһаҡ, өлгөргәнлек аттестатын һигеҙ кеше генә алды. Ә бит быны тигән уҡыусылар, һуңынан юғары белемгә эйә булырҙай егеттәр һәм ҡыҙҙар арабыҙҙа аҙ түгел ине. Үрге Йәркәй урта мәктәбенә имтиханға дүрт мәктәптән шулай уҡ 84 уҡыусы йыйылһаҡ, шуларҙың ҡап яртыһы ғына мәктәпте уңышлы тамамлай алды. Бына ниндәй ауыр заманда, юғары талаптар ҡуйылған ваҡытта уҡып, ҡаты һынауҙар аша үтеп, урта белем алдыҡ беҙ.

**Мәғсүм ГӘРӘЕВ,**
**РСФСР-ҙың халыҡ**
**мәғарифы отличнигы.**
**Илеш районы, Базытамаҡ ауылы.**



Мар. СӘЛИМ

## ЮМОРЕСКАЛАР

### Ҡотолоу

Урынбаҫар йөгөн егелеп тартты Хәләф Хәлитович. Пенсия йәшендәге хужаһын борсоманы, ойошманың бөтә эшен үҙе һөйрәне.

Ҡарт хужа хаҡлы ялға китеп, уның урынына йәш хужа килеп ултырғас та, хәл үҙгәрмәне – яуаплылыҡ урынбаҫар елкәһенән төшмәне. Яңылыҡ бары тик шунда ғына: элекке түрә кабинетына инеп сыҡмаһа ла, телефон аша хәл белешеп тора ине, ә быныһы бүлмәһендә көнө буйы ултырһа ултыра, ойошманың эше менән бөтөнләй ҡыҙыҡһынмай.

Ахырҙа Хәләф Хәлитович үҙе хужаға инеп, уны эштәрҙең барышы менән таныштырырға булды. Шул ниәт менән тейешле ҡағыҙҙарын ҡыҫтырып, тура директор бүлмәһенә үтергә иткәйне, секретарша юлына арҡыры төштө:

– Һеҙ ҡайҙа, Хәләф Хәлитович?

Әлегә саҡлы бындай һорауҙы ишетмәгән урынбаҫар ғәжәпкә ҡалды.

– Нисек “ҡайҙа?” Шефҡа инәм!

– Ә ул һеҙҙе саҡырҙымы һуң?

– Өлгөрмәне әле.

– Улайһа, көтөгөҙ, үҙе саҡырыр, – тине ҡыҙ ҡәтғи генә. – Хәҙер шундай тәртип.

– Яңы хужа – яңы тәртип, – тип мығырҙаны Хәләф Хәлитович, ләкин үпкә белдермәне. – Ярай, һуңынан инермен. – Урынбаҫар ҡабул итеү бүлмәһенән өлтәңләп сығып китте.

– Саҡырғанды көтөгөҙ! – тип ҡалды артынан секретарь ҡыҙыҡай.

Әммә урынбаҫарҙың хужа саҡырғанын көтөргә түҙемлеге етмәне. Икенсе көндө үк йәнә уның янына йүнәлде.

– Шеф мине һораманымы?

– Юҡ.

– Бәлки, мин саҡырыуһыҙ ғына... – Хәләф Хәлитович ауыҙын ғына асҡайны, бүлмәлә ултырыусылар шаулаша башланы.

– Беҙ бында саҡырыу менән килеп тә, иртәнән бирле инә алмайбыҙ, – тине оло йәштәге ағай. – Инергә бик теләһәгеҙ, сиратҡа баҫығыҙ, йәғни ултырығыҙ.

– Рәхмәт, – тип йылмайған булды урынбаҫар, – ултырып торорға ваҡыт юҡ.

– Шулай ҙа сиратҡа яҙылыу кәрәк. Хәҙер тәртип шундай. – Секретарь ҡалын кенәгәһен асып ҡуйҙы ла урынбаҫарға текләне. –Ниндәй мәсьәлә буйынса? Директорға берәй үтенесегеҙ бармы?

– Минең үтенесем юҡ. Бәлки, уныҡы барҙыр.

– Тимәк, һеҙ ошо хаҡта һорарға теләйһегеҙ? Шулай тип яҙайыммы?

– Теләһәң нимә яҙ! – Урынбаҫар, миңә барыбер тигәндәй, ҡул һелтәне. – Ҡасан киләйем?

Секретарь кенәгәһен аҡтарып ҡараны:

– О-о, һеҙҙән алда – утыҙ туғыҙ кеше! Шулай ҙа киләһе аҙнала күренеп китегеҙ.

Хәләф Хәлитович, аҙна үткәс, ҡабул итеү бүлмәһенә инде. Әммә ҡыуаныслы хәбәр ишетмәне: секретарь ҡыҙ бер айҙан һуң килергә ҡушты.

Тик бер айҙан һуң да хәл үҙгәрмәне. Урынбаҫар директорға һаман керә алманы. Шулай көндәр, аҙналар, айҙар үтте...

Байтаҡ ғүмер уҙғас, Хәләф Хәлитович тағы ла хужаһы ултырған бүлмәгә табан атланы. Был юлы ул үҙен ҡыйыуыраҡ тотто.

– Кәнсә лә кәнис, мине ҡабул итәме, юҡмы? – тип мәсьәләне ҡабырғаһы менән ҡуйҙы.

– Эше күп бит, бушай алмай. – Секретарь шефын яҡланы. – Мин дә бына өс аҙна уның янына инә алмайым.

Шул саҡ һаҡаллы ике йәш ир директор бүлмәһенә кереп китте.

– Былар кемдәр? Ниңә уларҙы сиратһыҙ үткәрәһең? – тип һорағайны урынбаҫар, секретарь шундук кәрәкле яуабын тапты:

– Шеф үҙе саҡырҙы. Уның командаһындағы кешеләр бит.

Ләкин былай аңлатыу Хәләф Хәлитовичтың асыуын ғына ҡабартты.

– Ә мин кем командаһында, улайһа?! Ниңә мине шеф ҡабул итмәй?

– Зинһар, борсолмағыҙ, Хәләф Хәлитович. – Секретарь уны нисек тынысландырырға белмәне. – Мөһим эше бөткәс тә, саҡырыр. Һеҙҙе лә, мине лә. Сабыр итәйек, тағы бер аҙ көтәйек.

– Һин көтһәң дә ярай. Һин йәш кеше. Ә мин ундай бюрократтарҙы күреп туйғанмын инде. Әйткәндәй, мин уны хужам булыуҙан бик тиҙ азат итә алам.

Урынбаҫарҙың һуңғы һүҙҙәре бүлмәлә йоҡомһорап ултырыусыларға ҡайнар һыу һипкәндәй тәьҫир итте. Директорға инә алмай теше төшкән ветеран бабайҙың да кәйефе күтәрелде.

– Тейешле урынға шикәйәт яҙырға ла был эшем эйәһенән ҡотолорға кәрәк, – тине.

– Беҙ унан нисек ҡотолорға беләбеҙ! – Хәләф Хәлитович, хужаларса ҡаты баҫып, бүлмәнән сығып китте.

Күп тә үтмәне, ҡулындағы ҡағыҙҙы һелкә-һелкә, директор кабинетының ишеген асты. Ҡабул итеү бүлмәһендә ултырыусыларҙың күҙҙәре шарҙай булды. Бөтәһе лә, ниндәйҙер мөғжизә көтөп, ҡатып ҡалды.

Тиҙҙән ишектә урынбаҫарҙың ҡояштай йөҙө күренде.

– Ниһайәт, ҡотолдом! – тине ул, шатлыҡ нурҙары сәсеп. – Хужам булыуҙан азат иттем!

– Нимә, ҡурҡыуынан урынын ташлап китәме әллә? – тип һораны ветеран ҡарт.

– Юҡ, ул түгел, мин китәм. Бына хәҙер минән башҡа эшләп ҡараһын. Үҙ командаһы менән...

Эшләп ҡарауын-ҡараны йәш түрә, ләкин булдыра алманы. Тағы ла бер нисә әшнәләре менән бергә бүлмәһенән сыҡмай диссертация яҙып ултырҙы ла –

шуның менән вәссәләм. Диссертацияһын яҡлар өсөн икенсе урынға күсеп китте. Әлбиттә, түрә урынына.

Ә банкротҡа әйләнгән ойошманы яптылар. Унда эшләүселәрҙең бөтәһе лә, хатта шефының тыныслығын күҙ ҡараһы кеүек һаҡлаған секретарь ҡыҙ ҙа, эшһеҙ ҡалды.

## Ағас тел

Мәктәпкә йөрөй башлағас, минең малай ҡапыл үҙгәрҙе лә китте. Нимә һөйләгәнен аңлап булмай. Бер көндө унан:

– Нисек уҡыйһың? – тип һорағайным, беләһегеҙме, нимә ти:

– Хәҙер, атай, уҡыу-уҡытыуҙы сифат яғынан яңы баҫҡысҡа күтәреү маҡсатында, мәғариф системаһы камиллашҡан ваҡытта уға айырым ышаныс һалына.

Тыңлап-тыңлап мәғәнәһен аңламағас, һорарға мәжбүр булдым:

– Уҡытыусығыҙ ни хәлдә, һау-сәләмәтме?

– Һәр бер уҡытыусы – физик, математик, биолог, әҙәбиәтсе – үҙенең предметы саралары, инанғанлыҡ көсө менән тәрбиәләнеүселәрен тормошҡа әҙерләргә, үҙенең эсенә реформа ҡаҙаныштарын алған хеҙмәткә өйрәтергә саҡырылған.

– Ҡайҙа саҡырылған? – тинем мин, һаман бер ни ҙә аңламай. – Дәресегеҙ нисек үтте?

– Булғаны менән ҡәнәғәтләнергә кәрәк, тип әйтергә тулы нигеҙ бар. Тик ҡайһы берәүҙәр уҡыуға түбән яуаплылыҡ менән ҡарай.

– “Икеле” эләктерҙеләрме ни?

– Әгәр “икеле” ҡуйыу ҡотолғоһоҙ хәл булһа, һәр кем бының уҡытыусыға хәлде төҙәтеү һәм саралар күреү өсөн сигнал булыуын асыҡ аңлай.

– Бер нәмә лә аңламайым, уф-ф!.. – тинем, башымды тотоп. – Аңлайышлы итеп һөйлә, зинһар.

Ләкин малай хәлемә инергә уйламай ҙа, һаман үҙенсә лығырҙай.

– Зарар юҡ, атай, һинең аңлау-аңламауың аңлы мохтажлыҡҡа әүрелмәгән. Шуға күрә һүҙҙән эшкә күсеү һәм килтерелгән зыянды иҫәпләүҙәр менән шөғөлләнеү маҡсатҡа йүнәлешле булыр.

– Иҫәпләү? Ә-ә, бөгөн иртән мин һиңә аҡса биргәйнем. Шуны әйтәһеңме?

– Аҡсаны тиҙ килем бирергә һәләтле урынға индереү бөтә коммерция структураларының төп хәстәрлеге булып тора.

Малайҙың был һүҙҙәренән һуң йөрәк һикергеләй башланы. Һиҙәм: ҡан баҫымы күтәрелә.

– Көн боҙолорға итә, ахыры...

– Эйе, – тип ҡеүәтләне улым, – беҙҙең иҡтисади киңлектәргә йыл һайын һауа шарттары үҙенең сюрприздарын алып килә, әммә быйыл экстремаль шарттарҙа уңыш йыйыу тәжрибәһе лә ҡотҡарманы.

– Туҡта, зинһар, туҡта! – Мин, улымдың теленән ғәрләнеп, иларҙай булдым. – Ауыҙыңды яп тиҙерәк, ағас тел!

Ә ул көлә генә, шилма малай.

– Минең өсөн, – ти, – үҙемде күтәренке кәйефтә тотоу – ҙур шатлыҡ.

– Кемгә шатлыҡ, кемгә... Көләү ҡайғыһы юҡ миндә. Ошондай телгә өйрәткән мәктәбегеҙҙе әйтер инем!

Шуныһы ғәжәп: малай мәктәпкә һүҙ тейҙермәне.

– Был эшкә ул лайыҡлы өлөш индермәне, – тине. – Гәзит-журнал уҡып ҡына ошолай һөйләшергә өйрәндем.

Ҡара һин уны, еүеш морон, ҡатырҙы бит башымды, ә! Матбуғатта һуңғы ваҡытта баҫылған сейле-бешле бер нисә мәҡәләне уҡыған да – телен тамам үҙгәрткән. Махсус һүҙлекһеҙ аңларлыҡ та түгел.

## Илһам ҡошо

Һикһән йәше тулғанда Мәмәтйән ҡарт ауылына ҡайтҡайны. Юбилейы менән ҡотлап, уға ер бүләк иттеләр.

– Илебеҙ сәскә атҡанда күрһәткән хеҙмәттәрең өсөн бына һиңә, бабай, тыуған ереңдән биш гектар! – Хужалыҡ рәйесе тантаналы итеп әйтте лә иҫкәртеп ҡуйҙы: – Колхозда бүтән бирерҙәй нәмә юҡ.

Көтмәгәйне былдай хөрмәтте Мәмәтйән бабай, аптырап ҡалды.

– Мин ул ерҙе ни эшләтәйем? Ҡала янында баҡсам бар, еткән.

Әммә рәйестең ҡарары ҡәтғи ине:

– Теләһәң, сәскә үҫтер, теләһәң, әрем үҫтер. Ер бөгөндән һинеке! – Шул саҡ башлыҡ аҡыллы кәңәш бирҙе: – Баҡсаңды һат, ауылға ҡайт. Һин бит – ер кешеһе. Атайың да кулак булған.

Башлыҡ һүҙе ҡарттың йөрәген елкендереп ебәрҙе, һуңғы ваҡытта ул үҙе лә тыуған яғын һағыныуға түҙә алмай башлағайны. Ҡарсығын ерләгәс, бигерәк яманһыу. Малай саҡта атаһы баҫыуында ялан аяҡ сабып йөрөгәнен төштәрендә күреп һаташа...

Ниһайәт, ул йәнә йәнтөйәгендә! Бөтөнләйгә ҡайтты. Колхоздың бер нисә йыл һөрөлмәй ятып, сүп-сар баҫҡан баҫыуын бүләк тип ҡабул итеп, кулак атаһының хыялын тормошҡа ашырыу ниәте менән, ең һыҙғанып эшкә тотондо. Ерҙе еренә еткереп эшкәрткәс, пенсия аҡсаһына бынамын тигән орлоҡ алып сәсте. Мул уңыш үҫтереп һатҡас, байтаҡ ҡына табыш керҙе. Шул аҡсаға ауыл хужалығы өсөн кәрәк-яраҡ йүнәтте. Киләһе сәсеүгә ул тейешле техникала ныҡлы әҙерлек менән төштө. Кәрәкле ашламалар ҡулланды. Һөҙөмтәлә һуңғы йылдарҙа яҡынтирә төбәктә күрелмәгән уңышҡа өлгәште.

Мәмәтйән бабайҙың хеҙмәт емештәре колхоздың бер нисә уңған ҡартында дәрт уятты. Улар, йыйылышып килеп, ҡорҙаштарынан үҙҙәрен эшкә алыуҙы үтенде. Мәмәтйән ни ҡушҡуллап риза булды. Шулай итеп, кооператив һымаҡ нәмә ойошто. Есеме булғас, исеме лә кәрәк бит инде. Уны Мәмәтйәндең һөргөнгә оҙатылған атаһы хөрмәтенә “Кулак” тип атанылар. Бына шулай элекке “Большевик” колхозы урынына “Кулак” хужалығы барлыҡҡа килде.

Яңы хужалыҡта эштәр гөрләп бара, сөнки унда яңыса эшләйҙәр. Урлашыу ҙа, алдашыу ҙа юҡ, һәр кем хеҙмәтенә күрә эш хаҡын ала.

Тора-бара ҡарттар ғына түгел, йәштәр ҙә ғариза тотоп килә башланы “Кулак” идараһына. Ә бер көндө элекке “Большевик” рәйесенең секретары Гөлбирә туташ килгән.

– Секретарша булырға хочу! – тип ныҡышыпмы-ныҡыша был.

– Беҙҙә ундай вазифа юҡ, – тигәс, Мәмәтйән әфәнденең алдында бөтөрөлөп:

– Улайһа, мине бүләк итеп алығыҙ! – ти бит, малай, оялмай ҙа.

Мәмәтйән әфәнденең күҙе маңлайына менде.

– Нисек? – тип һораны ул, бер ни ҙә аңламай.

– Мин һеҙгә эшегеҙҙә илһам биреп торормон, һикһән йәшлек Гётены илһамландырған немец һылыуы һымаҡ.

Шунда ғына барып етте Мәмәтйән бабаҡайға хәбәрҙең мәғәнәһе. Шулай ҙа эсендәген тышҡа сығарманы. Бөйөк немец шағирын хөрмәт итһә лә:

– Мин бит, Гёте кеүек, шиғыр яҙмайым, – тине. – Ғүмер буйы партия-совет органдарында эшләнем.

– Яурынығыҙға илһам ҡошо ҡунмаған, тимәк.

Сибәркәйҙең был һүҙҙәре ҡарттың бөтә уй ептәрен сыуалтты...

Ахырҙа “илһам ҡошо” уның яурынына ғына түгел, башына менеп атланды – хан һарайындай кәттижендә хужабикә булып алды.

Мәмәтйән әфәнде хәҙер шиғыр яҙа башлаған, тип һөйләйҙәр. Яҙғандары

матбуғатта күренмәһә лә, был хәбәр ысынбарлыҡҡа оҡшаған. Әле бына тағы, үҙенең ҡошона эйәреп, ҡайҙалыр алыҫ диңгеҙ аръяғына осто. Сәсеү бөткәнен дә көтмәне.

Уңыш йыйыр ваҡыт еткәс кенә әйләнеп ҡайтты ул. Ҡайтты ла... шаҡ ҡатты. Үҙ күҙҙәренә үҙе ышанманы. Ышанырлыҡмы ни: әле ҡасан ғына күкрәп иген үҫкән уңдырышлы баҫыуҙы сүп баҫҡан. Тракторҙарҙың тегендә-бында тәгәрәп ятҡан тимер тәгәрмәстәре генә ҡалған, һарайҙарҙың, келәттәрҙең һөлдәләре генә һерәйеп тора. Ә зиннәтле кәттиж кәзә аҙбарына әйләнгән.

Күҙе аларған Мәмәтйән ишек төбөндә аунап ятҡан ярҙамсыһына абынып саҡ йығылманы. Иҫерек икән дәһә, мәлғүн.

– Нимә эшләнең һин?! – тип екерҙе уға асыуынан шартлар хәлгә еткән хужа.

– М... мин түгел, – тип мөңрәне тегеһе. – Х... халыҡ “Кулак”ты раскулачить итте.

– Был ниндәй халыҡтыр инде, – тип әсенде Мәмәтйән ҡарт. – Ни коммунизм, ни капитализм төҙөргә теләмәйҙәр. Бөтә эштәре ватыу ҙа емереү...

Шул саҡ уның илһам ҡошо ҡанаттарын елпене лә:

– Хуш, ҡартлас, мине эҙләмә! – тип ҡайҙалыр осоп китте. Көньяҡҡа, буғай.

Мәмәтйән бабай иһә төньяҡҡа – Себер яғына атланы. Атаһы юлынан. Тотҡондағы олигарх Ходорковский янына барып, шиғыр яҙып ятырға ине иҫәбе. Илһам ҡошо ныҡ ҡағылғайны шул уға.

## Ялған донъя

Тормош яҡшырҙы, ниһайәт. Юҡ нәмә юҡ. Береһенән-береһе затлы тауарҙар, мине ал да мине ал тигәндәй, үҙҙәренә саҡырып торалар. Ҡайҙа баҡма – ялтыраууыҡ, шалтыраууыҡ, гламур ҙа глазурь... Ҡараһаң, ҡүҙ ҡамаша – шундай матур тамаша!

Тик минең кәйеф юҡ. Әллә ниңә баш әйләнә, күңел болғана. Сит телдә яҙылған ялтыраууыҡ әйберҙәргә ҡараһам, ҡоҫаһым килә. Был – шундай ауырыу икән. Табипҡа барғайным: “Күптәр яфалана быңдай сир менән”, – тине. Сит илдә яһалған ҡиммәтле препаратты эсһәң генә бөтә, имеш.

Дарыу проблема түгел хәҙер. Аҙым һайын аптека. Юлымда осраған береһенә индем дә табип әйткәнде һорап алдым.

Тышына инглизсә яҙылған ялтыраууыҡ ҡапты ентекләберәк ҡарағас, күңелемдә шик тыуҙы: “Ә был ысынлап та миңә кәрәкле дарыумы һуң?”

Уйҙарымды уҡығандай, һатыусы ҡатын:

– Шул! Үҙе! – тине. – Ана бит, шулай тип яҙылған.

– Яҙылыуын яҙылған да ул. Подделка түгелме икән? Кисә гәзиттән уҡыным, һатыуҙағы дарыуҙың алтмыш проценты ялған, тип яҙғандар.

Һатыусының быға иҫе китмәне.

– Ә һеҙ гәзиттә яҙылғандың туҡһан туғыҙ проценты ялған икәнен беләһегеҙме?! – тип кенә ҡуйҙы.

Башҡаса һүҙ ҡуйыртманым, ялтыраууыҡ ҡапты кеҫәгә һалдым да ары киттем. Юл ыңғайында урам сатындағы хәмер кибетенә һуғылдым. Ялған дарыу эсеп ағыуланһам, спирт менән йыуҙырырмын тип, “ярты” алдым.

Спиртлы эсемлектәргә лә ышаныс юҡ. “Палёный” араҡы һемереп, беҙҙең йортта ғына нисәмә ир ауҙы.

Ярай, ни яҙһа, шул булыр. Ике әйберҙең береһе, моғайын, ялған түгелдер әле, тип үҙемде үҙем йыуатып, косметика магазинына индем. Биҙәнгес-төҙәнгестәрҙең ниндәйе генә юҡ! Әле береһен тотоп, әле икенсеһен еҫкәп ҡарайым.

– Бынау француз хушбуйы күпме тора, һылыу?
– Осһоҙ ғына, ағай.
– Подделкамы әллә?
– Юҡ, имитация. Еҫе Францияныҡы, һыуы үҙебеҙҙеке. Алығыҙ, ҡатынығыҙ рәхмәт әйтер.
Ләкин ҡатын бүләгемде оҡшатманы.
– Кәрәкмәй миңә фальшивка! – тип, уны тәҙрәнән осорҙо. – Туйҙым ялған донъянан. Ысын тормош теләйе-е-ем!
– Тыныслан, йәнем, бөтәһе лә һәйбәт булыр. Элекке ялған хыялдар юҡ хәҙер, реформаның реаль емештәрен татыйбыҙ.
– Кит, йолҡош, әҙәм көлдөрмә! – тине бисә, мыҫҡыллы ҡарап. – Реформа емешен һоғоноусыларҙың ысын тормошо сит илдә, уларҙың Рәсәйҙә йәшәүе – имитация ғына. Ана, илебеҙҙең иң бай кешеһе Абрамауыч Чукотка губернаторы булғанда ла Лондонда торҙо.
– Һин, бисәкәй, мине олигарх Абрам ауыҙҙар менән сағыштырма! Мин юғары квалификациялы ысын инженер.
– Төкөрәйем һинең ысын инженерлығыңа! Ысын француз хушбуйы алырлыҡ та аҡсаң булмағас.
– Уның ҡарауы, мин һинең ысын ирең, – тип, шаярып, бисәнең итәгенә үрелгәйнем, ҡулыма һуҡты.
– Ә бына уныһын ысынлап та асыҡларға ваҡыт, – тине ул, күңелгә шом һалып.
– Нимәһен асыҡлайһың? Былай ҙа ап-асыҡ: ЗАГСыбыҙ бар.
– Загс формаль мөнәсәбәттәрҙе генә сағылдыра. Ә ысын мөнәсәбәттәр – икенсе...
– Нисек? Туҡта, туҡта!
– Туҡтатырға һуң инде, мин киттем! – тине бисә, сумаҙанын тотоп. – Бизнесмен Бикбирҙе менән Парижға осабыҙ.
Ысынмы был, түгелме, тип аптырап торғанда, урамда машина ҡысҡыртты. Иномарка эсендә элекке синыфташым, нефть һатып байыған Бикбирҙенең ялтыр башы күренде. Вәт хәсис, кеше ҡатынына йәбешмәһә... Ил байлығын талауы етмәгән... Ярай, өнө тығылһын! Донъяла ҡатындар бөтмәгән. Тик...
– Ә минең улым ҡайҙа?
– Ялған улың. Беҙ уны үҙебеҙ менән алабыҙ. Чао, подделка! – тине лә бисә сығып китте. Бөтөнләйгә.
Уныһы бер хәл, тик бына улымдың фальш булыуы... Йә, Хоҙай! Был ниндәй донъя? Бөтә нәмә яһалма. Ялған. Уф, башым әйләнә, күңел болғана. Иҫке сирем ҡуҙҙы...
Бая аптеканан алған ҡиммәтле дарыуҙы ҡаптым. Тик файҙаһы теймәне, башым оторо ныҡ ауырта башланы. Ялған дарыу булып сыҡты, тимәк. Әгәр ысынлап үлеп ҡуйһам?..
Ҡот осҡос уйҙарҙан арыныр өсөн, хәмер шешәһен астым да эсеп ебәрҙем һәм... Рәсәй кешеләренә генә хас булғанса, ҡапыл айныгандай иттем. Аллаға шөкөр, “палёный” түгел икән, ысын урыҫ араҡыһы!
Ҡайғым шундуҡ таралды. Бисә ташлап китте тип, танау һәлендереп ултырмам инде. Китһен әйҙә, бик һәйбәт! Ялған мөнәсәбәттәрҙең хәжәте юҡ. Ысын мөхәббәтте табырға кәрәк.
Шуны эҙләп, урамға сыҡтым. Ә унда ялған хыялдар менән янып, ялтыраууыҡ әйберҙәр һайлап йөрөүсе ҡатын-ҡыҙ ҡайнаша ине...

# *Башҡортостан Яҙыусылар союзына аъза итеп алындылар*



*Зәки ӘЛИБАЕВ,*
*әҙәбиәт белгесе,*
*тәнҡитсе,*
*БДУ доценты,*
*дүрт китап авторы*



*Эдуард БАЙКОВ,*
*“Истоки” гәзите*
*хеҙмәткәре, проза һәм*
*публицистика буйынса*
*ете китап авторы*



*Салауат ВАХИТОВ,*
*прозаик, публицист,*
*нәшир,*
*өс китап авторы*



*Дилбәр БУЛАТОВА,*
*“Толпар” журналының*
*бүлек мөхәррире,*
*өс проза китабы авторы*



*Түләк ҒИРФАНОВ,*
*Миәкә районының*
*М. Аҡмулла исемендәге*
*әҙәби премияһы*
*лауреаты, өс проза*
*китабы авторы*



*Эдгар ВИЛДАНОВ,*
*Учалы яҙыусылар*
*ойошмаһының яуаплы*
*сәркәтибе,*
*ике шиғри китап авторы*



*Закир*
*ЗИННӘТУЛЛИН,*
*шағир һәм прозаик,*
*“Ватандаш”*
*журналының баш*
*мөхәррир урынбаҫары,*
*ике китап авторы*



*Гөлнара*
*ШӘЙМӨХӘМӘТОВА,*
*“Йәштәр тауышы”*
*серияһында шиғри*
*йыйынтығы сыҡты,*
*шулай уҡ проза яҙа.*
*Балтас районында*
*журналист*



*Рафаэль ХАФИЗОВ,*
*шағир,*
*ике китап авторы,*
*йәмәғәт эшмәкәре,*
*Дүртөйлө ҡалаһында*
*йәшәй*



*Әминә ЯХИНА,*
*драматург,*
*дүрт пьесаһы*
*сәхнәләштерелгән,*
*бишәүһе баҫылды,*
*Сибай ҡалаһында йәшәй*

***Ҡәләмдәш дуҫтарҙы ижади яҙмыштарындағы иҫтәлекле ваҡиға айҡанлы тәбрикләйбеҙ, яңынан-яңы әҙәби уңыштар теләйбеҙ!***

**Башҡортостан Республикаһы**
**Президенты Р. З. Хәмитов,**
**Башҡортостан Яҙыусылар союзы**
**идараһы рәйесе Р.Т. Бикбаев исеменә,**
**“Ағиҙел” журналы редакцияһына**
**Ҡалмыҡстан Республикаһынан**
**ошондай йөкмәткеле хат килде.**

Башҡортостан Республикаһының “Ағиҙел” әҙәби-нәфис һәм ижтимағи-сәйәси журналының (баш мөхәррире Ә. М. Әминев) 2011 йылғы 2-се һанында хәҙерге ҡалмыҡ яҙыусыларының бер төркөм әҫәрҙәре башҡорт теленә тәржемәлә баҫылып сыҡты. Был беҙҙең халыҡтар араһындағы дуҫлыҡ мөнәсәбәттәрендә әһәмиәтле ваҡиға, шулай уҡ Ҡалмыҡстан Яҙыусылар союзы, ҡалмыҡ әҙәби-нәфис журналы “Теегин герл” (“Свет в степи”) һәм башҡорт журналы “Ағиҙел”дең беренсе уртаҡ ижади проекты.

Бөгөн, элек бер ҡасан да булмағанса, халыҡтар араһындағы дуҫлыҡ һәм үҙ-ара аңлашыу тойғоһон нығытыусы әҙиптең үтемле һүҙе бик кәрәк. Һәм “Ағиҙел” журналы мәшһүр шағирҙар Давид Кугультинов менән Мостай Кәрим тарафынан беҙҙең халыҡтар араһындағы туғанлыҡ традицияларын лайыҡлы дауам итә. Үҙ сиратында “Теегин герл” журналы бөгөнгө башҡорт яҙыусылары әҫәрҙәренең ҙур шәлкемен ҡалмыҡ телендә донъя күрһәтеүгә әҙерләй.

“Ағиҙел” журналы – Рәсәйҙә иң өлкән һәм абруйлы милли баҫмаларҙың береһе. Уның редакцияһы туғандаш халыҡтар әҙәбиәттәренең үҙ-ара бәйләнешен һәм бер-береһен тулыландырыуҙы нығытыу йәһәтенән ҙур эш алып бара. Журнал биттәре бөгөнгө заман һулышы, кешегә һөйөү һәм ышаныс, берҙәм мәҙәни майҙан булдырыуға ынтылыш менән һуғарылған.

Ағымдағы йыл Башҡортостанда “Милләт-ара татыулыҡты нығытыу йылы” тип иғлан ителгән һәм, әйтергә кәрәк, милли берҙәмлек, гуманизм, халыҡтар араһында тыныслыҡ һәм дуҫлыҡ идеялары “Ағиҙел” журналының ижади коллективы эшмәкәрлегендә күп милләтле Рәсәйҙең һәм мәҙәниәтебеҙҙең иң төп ҡиммәте һымаҡ раҫлана. Редакция туған телде һаҡлау һәм үҫтереү, йәш быуында үҙ халҡы яҙмышына, үҙ тарихына ҡатнашлыҡ тойғоһо тәрбиәләү буйынса ҙур эш алып бара.

Бойомға ашырылған ижади проект, һис шикһеҙ, беҙҙең халыҡтарыбыҙ араһындағы дуҫлыҡты һәм туғанлыҡты нығытыуға һиҙелерлек өлөш индерәсәк, сөнки әҙәбиәт һәр осорҙа ла кешенең рухи байлығын арттыра, кешеләрҙе берберееһенә яҡынайта, күңелдәрҙә ихлас һәм изге тойғолар тыуҙыра.

**Ихтирам менән Эрдни ЭЛЬДЫШЕВ,**
**Ҡалмыҡстан Республикаһы Яҙыусылар союзы рәйесе,**
**Ҡалмыҡстандың халыҡ шағиры.**

## Көмөш һыулымы Көмөшәй?

Көнсығыштан Аҡанай, Туғыҙаласыҡ, Сорағол йылғаһы (Ҡарағай ҡырҙы) буйҙары Ҡашҡабил ҡыраһы итәге тирәләре Ураҙ ауылы крәҫтиәндәре «Ҡыҙыл Маяҡ» колхозына берләшкәнгә тиклем ҡартатайым Фәхретдиндың атаһы Хәләф Иҙрисовтың ерҙәре булған. Ул унда иген иккән, мал аҫраған, ҡышҡыға мал аҙығы әҙерләгән. Еренең көньяҡ-көнсығыштағы мөйөшөндә землянкаһы – утары ла булған. Утар алдында ғына шишмә сылтыраған. Ул шишмә әле лә бар. Халыҡ уны ҡартатайымдың үгәй әсәһенең исеме менән «Фәғилә шишмәһе» тип атап йөрөтә. Шишмәнән ағып киткән инеш Туғыҙаласыҡ түбәләре араһын йырып, Ураҙ-Сорағол юлы аша Мүкте һаҙға төшөп юғала. Тәпәш кенә түбә-калҡыулыҡтар ҡуйынындағы был һаҙлыҡтың төньяҡ-көнсығыштағы моронона бәләкәй генә йылға сылтыр-сылтыр ағып килеп сыға ла тумарлы ялансыҡ буйлап Күкдин тауы итәген яғалап, Яйыҡ йылғаһына ашыға. Тумарлы ялансыҡ ауылыбыҙҙа тыуып үҫкән Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Талха Ғиниәтуллиндың әсәһенең исеме менән «Минсафа яланы» исемле булып ҡалған. Яҙыусы үҙ әҫәрҙәрендә әсәһенең салғы һелтәп бесән сапҡан ерҙәренән сылтырап ағып үткән был йылғасыҡты «Серебрянка» тип иҫкә ала. Ә ауыл халҡы ул йылғасыҡты «Көмөшәй йылғаһы» тип атап йөрөтә. Көмөшәй атамаһының затлы металл көмөшкә ҡағылышы юҡтыр тип уйлайым мин, сөнки, иғтибар менән ҡараһаң, Урал топонимияһында көмөшкә тартым атамалар байтаҡ ҡына. Мәҫәлән, бер нисәһе: «Үҙебеҙҙең Учалы районындағы Күмәс һырты, уны «Комас», «ҡамас» тип тә атайҙар: «Кумыш» – йылға, Шүсә (Чусовая) йылғаһының һул ҡушылдығы; Гумешки – ҡалҡыулыҡ, Шүсә йылғаһы башланған яҡтарҙағы Полевской ҡалаһы янындағы (Павел Бажовтың «Малахитовая шкатулка» китабында күп телгә алына) ҡалҡыулыҡ, Күмәс күләүеге – Алтынташ ауылы яғынан ағып килгән йылғасыҡ ошо күләүек һыуҙары менән ҡушылып, Мейәс йылғаһына төшә һ.б.

Мейәс йылғаһының исеме менән Күмәс тау һырты исемдәрендә ҡәрҙәшлек бар кеүек тойола миңә. Йылға исеме урыҫ телендә Миасс тип яҙыла. Ул һүҙҙе йәнтөйәктең топонимик һүҙлектәрен төҙөүселәр күҙ уңынан ысҡындырмайҙар. Мәҫәлән, Урал топонимияһының танылған белгесе профессор А. К. Матвеев былай тип яҙа: «Миасс йылғаһының исемен аңлатып биреү еңелдән түгел: әүәлге документтарҙа «по Миесси реке (1610 й.), һуңынан Мияс, Мияз, Миясе тип яҙғандар, ниһайәт, Миасс рәүешендә нығынған».

Морозов үҙенең «Город в золотой долине» китабында ниндәй генә аңлатмаларҙы тупламаған. Манси теленән «Мил-яс- тәрән һыулы йылға үҙәне булһынмы, башҡорт һүҙе ми(мә) – ас (возьми) ас – һыу (вода) ҡушылдығы менән, йәғни ал-һыу (һыу ал – возьми воду), йәнәһе. Тик былар бөтәһе лә дөрөҫлөккә яҡын килмәй, кабинетта ултырып уйлап сығарылған этимологиялар.

Төрки телдәренән аңлатып биреү ни менәндер ышандырырлыҡ кеүек: мий («топь, топкое место», «асс» кесерәйтеү суффиксы менән, малая топь (бәләкәй батҡыл, һаҙ)», ләкин был этимология менән дә эштәр шәптән түгел. Беренсенән, мий «Һаҙлыҡ»(топкое место) мәғәнәһендә күберәк Урта Азия төркиҙәре: ҡаҙаҡтар, ҡырғыҙҙар теленә хас күренеш, ә татар телендә ми, башҡортса мейе – мозг), икенсенән, Мейәс үҙәне ул тиклем үк батҡыл да түгел һәм йылға үҙәнен характерлап бирә алмай. Шулай ҙа төркисә аңлатма дөрөҫлөккә яҡынырaҡ, сөнки башҡортса Миасс – Мейәс (сағыштырығыҙ, мейе – мозг менән). Исемдең

килеп сығышын нисек булһа ла төрки телдәрҙән эҙләргә кәрәктер. Бар бит төрки телендә меес һүҙе – «безлесное отлогое место»,«покатость», «южная сторона горы». Тик әлеге лә баяғы, ул һүҙ Алтай, Саян яҡтарында осрай». (А. К. Матвеев. Географические названия Урала. Свердловск. Ср. Ур. Кн. Изд-во. 1980, стр. 171 – 172).

Н. И. Шувалов бына нимә ти: «Бөгөнгө көндә топоним сығышына ҡағылышлы аңлатмаларҙың икеһе генә иғтибарға лайыҡ (Г. А. Турбин, У. К. Сафиуллин). Уларҙың беренсеһе Миасс исемен төрки һүҙҙәр Мийя, Мейя, Мейе, Мий һүҙҙәре менән бер ҡатарҙан ҡуя, мейә – «моз» топонимияла «топь», «топкое место», «болото», «трясина», «жирная глина» тигәнде аңлата һәм су – «вода, река», мия – «су», тимәк, һаҙлы батҡыл урындарҙан ағып сыҡҡан йылға.

Икенсеһе: Миасс исеме боронғо тарих тапкөлөнән килгән исем, уйлауҙарынса, беҙҙең яҡтарҙа ҡасандыр йәшәп тә, бөгөн юҡҡа сыҡҡан халыҡтан ҡалған. Мейәскә оҡшаш Мийзас, Мазас, Мисас һ.б. (зас, сос – һыуҙы, йылғаны аңлатҡан һүҙҙәр) Обь һәм Иртыш йылғалары бассейндарын төйәк итеп йәшәгән кет халҡы ерҙәрендә осрай. Миасс (Миаз, Мийаз, Мияз) һүҙендә йылға бассейнында йәшәүсе ниндәйҙер боронғо ҡәбиләләр төркөмөнөң исеме һаҡланғандыр, һәм, ниһайәт, боронғо төркиҙәрҙәге ирҙәр исеме Миязды ла күҙ уңында тоторға кәрәк. (А. И. Шувалов. От Парижа до Берлина по карте Челябинской области. Челябинск. Ю.Ц.К.И. 1989, стр.87).

Инде хәҙер Матвеев иҫкә алған Меес һүҙенә әйләнеп бағайыҡ.

Әйткәндәй, Э. М. Мурзаев ул һүҙҙең төрки телдәрҙән мас, мес, мәс (мас), Уралда йәшәүсе уғыр-фин теллеләрҙән булған коми халҡы теленән мыш варианттарын да тапҡан. (Мурзаев, Словарь народных географических терминов. Москва, Мысль, 1984. Стр. 358, 369, 384).

Матвеев ул һүҙҙе Алтай һәм Саян яҡтарында ғына осрай тип яңылыша кеүек. Беҙҙең яҡтарҙа ла Ҡуҫа ҡалаһынан 13–17 километр ерҙә төньяҡтараҡ ике тау «Оло Миасс» һәм «Бәләкәй Миасс» тауҙары тип аталалар. Ул тауҙарҙан бик үк алыҫ та түгел, Әй йылғаһының һул ҡушылдығы Оло Әршә яры буйлап һуҙылған Маскарала һырты ла (гора Маскарали) бар. Мәс һүҙе төрки телдәр бишеге һаналған яҡтарҙа «безлесное отлоговоее место», «покатость», «южная сторона горы» мәғәнәһен белдерә.

Ҡала төҙөүселәрҙең тәүгеләренән булған Мәүлиҙә апай Авзалова хәтерләгәнсә, Учалы ҡалаһының беренсе йорттары ла Мейәс һаҙынан йыраҡ түгел урында һалына башлаған. (“Яйыҡ” гәзите 27.01.2005 й.). Ул һаҙ ҙа үҙ исемен яҡындағы Мейәс (Юшалы) ҡалҡыулығынан алғандыр. Ер аҫтындағы баҡыр ятҡылыҡтарына тимерле мәғдәндәр ҙә эйәреп йөрөй икән. Был эйәрсән мәғдән баҡыр ятҡылығы өҫтөнән урын алып, ер өҫтөнә яҡынығаҡ ятҡанлыҡтан, һауалағы кислород менән ҡушылып тутыға һәм, тарҡалып, Юша, тәбиғи буяу-охра хасил итә. Уны геологтар баҡыр ятҡылығының эшләпәһе (ҡалпағы) тип атайҙар. Мейәс ҡалҡыулығы иң алда үҙенең алтыны менән танылды. Юшалы күле ярында Бәләкәй Учалы руднигы үҫеп сыҡты. Халыҡ рудникты «эшләпә» тип атап алып китте. Бәләкәй Учалы атамаһы күл исеменән алынды. Әүәл замандарҙа Миәсс түбәһенең ике итәгендә ике күл – Асыуҙы һәм Юшалы күлдәре йәйрәп ятҡан. Урыҫ картографтары (1735 – 1740), Асыуҙыны, был яҡтарҙағы халыҡ телендә «Асы һыуҙы» (насар һыулы) мәғәнәһендәге атаманы, Ачулы тип, Юшалыны Учалы тип карталарға төшөрә. Һуңыраҡ икеһен дә Учалы тип атай башлағандар. Асыуҙы Юшалынан ҙур булғас, Учалы, ә Юшалы малые Учалы булып карталарҙа

күрһәтелә башлаған. Бөгөнгө көндә Юшалы түбәһе лә, Мейәс тә, күл дә юҡ. Түбә урынында – карьер, ә күл урынында мәғдәнһеҙ тау тоҡомдары өйөмө. Хәҙер Юша ла юҡ. Элек халыҡ уны орлоҡ майына (көнбағыш, киндер, әлиф) ҡатыштырып, соландарындағы таҡта стеналарҙы буяуҙарын хәтерләйем. Алтын ҡаҙыу эшендәгеләрҙең кейеме лә охраға буялып бөткән була торғайны. Ә эшләпә хәҙер Учалы ҡалаһының бер микрорайоны.

Уралдағы бер Мясной кряж (әлеге Мәс) тауы морононан ағып сыҡҡан йылғаны «Мясная» тип исемләп йөрөйҙәр. Ул йылға, Мясной Кряж тауының көньяҡ битләүе морононан башланып, Ширәгә ҡушылыусы Вильва йылғаһына ағып төшә. Балығы күп булғанға – итле – мясная, имеш, тип аңлаталар. Был осраҡта Мәс һүҙенең мясо – «ит» булып китеүен күрәбеҙ.

Мейҙе йылғаһының исеменә әйләнеп килһәк, шуны әйтергә кәрәктер: йылға башланып киткән Нәрәле тауы ла ҡасандыр «мәс» булғандыр, үҙендә башланған йылғаһына үҙ исемен биреп, «Мейәс һыуы» итеп оҙайлы юлға оҙатҡандыр. Йылға башланған Нәрәле тау һыртының «мәс» булыуына «Челябинский рабочий» гәзите хеҙмәткәре журналист М. С. Фонотовтың Нәрәлелә булып ҡайтҡас яҙып баҫтырған һүрәтләмәһе ишара: «Хребет Нурали – самая первая достопримечательность Миасса. Всякий, кто доберется до Нуралей, будет приворожен... Сопка к сопке, тянется хребет застывшими волнами, плавно спускается в долины, чтобы вновь набрать высоту. В нем почти нет острых углов, весь он округл, сглажен, обтекаем. Словно остриженные наголо торчат из земли «черепа сопок» в логах обросшие «чубами лесов»... ("Чел. раб." гәзите 22.10.2004).

Беҙ белгән «Мәскәрәле тауҙары» исемле һырт үҙ исемен "Мәс ҡырлы", "таҡыр баш ҡыралы" һүҙбәйләнешенән алманымы икән?

«Күмәс» атамаһы «Мәс» һүҙен ҡыу тип тәкрарлауҙан барлыҡҡа килгәндәй була: ҡыумас. Ҡыу, бер нәмәһе булмаған, буп-буш ("Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең аңлатмалы һүҙлеге", Өфө. 2004. 235-се б.). Телебеҙҙең Арғаяш һөйләшендә «Ҡыубаш» һүҙе бар. Ялтырбаш – плешивый мәғәнәһендә йөрөй. Ҡыубаш һүҙенән ҡыумас, ҡомас, күмәс, көмөш яһалыу һис тә булмаҫтай күренеш түгел. Башҡорт һөйләшеүендә бөрлөгәндә мөрлөгән, бөрөнө мөрө, бөтнөктө мөртлөк тип әйтеү бар бит ("Диалект. словарь башк. яз.", Уфа, 2002. стр.235).

Учалы районының Комсомольск ҡасабаһынан Мулдаҡай ауылына тиклем һуҙылған Күмәс (Ҡомас) һырты карталарға Кумач тип урыҫса яҙып күрһәтелә. Ул исем Ҡумиш, Гумешки булып та осрай. Гумешки һүҙен «Таҡыр башлы түбә», «Һыйыр малы тапап ҡатырған, тигеҙләгән ер» тип аңлатырға ынтылыу ҙа күҙәтелә, мәҫәлән, Даль һәм Фасмер һүҙлектәрендә.

Көмөшәй йылғаһы үҙ исемен көмөш һыулы булған өсөн түгел, ә «Мүкше һаҙҙы» уратып алған таҡыр башлы түбәләр «күмәстәр» арауығын йырып юл алған өсөн алғандыр, тигән уйҙамын.

Көмөшәй үҙе бәләкәй йылға. Әммә уйҙарыңды биләп алып осһоҙ-ҡырыйһыҙ телебеҙ даръяһына алып китергә һәләтле.

**Б. ИҘРИСОВ.**
**Силәбе ҡалаһы.**

## Кәрим Хәкимов һәм хәҙерге ислам донъяһы

25-26 мартта Өфөлә яҡташыбыҙ, Советтар исеменән ғәрәп донъяһы менән дипломатик мөнәсәбәттәр урынлаштырыусыларҙың береһе Кәрим Хәкимовтың тыуыуына 120 йыл тулыу менән бәйле «Рәсәй һәм Ислам донъяһы: цивилизациялы бәйләнештәр тарихы һәм киләсәге» тигән халыҡ-ара конференция эшләне. Унда РФ Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Григорий Рапота, БР Президенты Рөстәм Хәмитов, БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев, Рәсәй Мосолмандары Үҙәк диниә назараты рәйесе, юғары мөфтөй Тәлғәт Тажетдин, шулай уҡ Сауд Ғәрәбстанынан, Палестина милли хакимиәтенән вәкилдәр, 40-ҡа яҡын илдән дәрәжәле ғалимдар, күренекле сәйәсмәндәр, дин әһелдәре, ижади интеллигенция вәкилдәре, журналистар һ.б. ҡатнашты.

Конгресс-холда урынлашҡан бай йөкмәткеле күргәҙмә Кәрим Хәкимовтың тормош юлын тулы кәүҙәләндерҙе. Совет-ғәрәп мөнәсәбәттәрен үҫтереүгә тос өлөш индергән башҡорт дипломатының эшмәкәрлеге тураһында Премьер-министр урынбаҫары Зөһрә Рәхмәтуллина бәйән итте. Мысыр, Кувейт, Ливия, Бохара, Һиндостан, Иран, Пакистан, Ираҡ, Төркиә һ. б. илдәрҙәге иман йорттарын, һәр мосолман өсөн изгеләрҙән-изге Мәккәләге Ҡәғбә һүрәтен күптәр ҡыҙыҡһынып ҡараны.

– Башҡортостанда төрлө телдә аралашҡан, төрлө конфессияға ҡараған халыҡтар, шул иҫәптән мосолмандар, быуаттар дауамында татыу ғүмер итә, – тине Григорий Рапота. – Һөйләшеүгә сығарылған мәсьәлә – көнүҙәк һәм бик мөһим, сөнки донъя туҡтауһыҙ үҙгәреү өҫтөндә. Рәсәй ҙә православныйҙар иле генә түгел, сөнки унда ислам динен тотоусылар дөйөм халыҡтың сама менән – 18, ә Волга-Урал буйында хатта 40 процентын тәшкил итә. Ошоноң менән бәйле юғары ҡунаҡ яңыраҡ РФ Дәүләт Советы президиумының йәмғиәтебеҙҙә милләт-ара татыулыҡты нығытыу буйынса ултырышын республикала үткәреүе осраҡлы түгеллегенә баҫым яһаны.

– Кәрим Хәкимов – СССР менән ғәрәп илдәре араһында бәйләнеш урынлаштырыуға, ике ил араһындағы яҡшы мөнәсәбәттәрҙе нығытыуға ҙур көс түккән шәхес, уның сәйәси һәләтен танымау мөмкин түгел, – тине Президент Р. З. Хәмитов. – Исламдың Волга буйында һәм Башҡортостанда мең йыллыҡ тарихы бар, ислам тәғлимәттәренә тоғролоҡто тиҫтәләрсә быуын һаҡлап килә. Шуға күрә лә беҙҙә халыҡтар араһында татыулыҡ көслө. Маҡсатыбыҙ – килешеп йәшәү, дуҫлыҡта ғүмер итеү.

«Ғәрәп илдәре – цивилизация бишеге, улар менән дуҫлыҡ ептәре ныҡлы булырға тейеш», – тине артабан БР Президенты. Бер аҙна элек ул Сәғуд Ғәрәбстанында булыуы, унан ифрат бай тәьҫораттар менән ҡайтыуы тураһында һөйләне һәм халыҡ-ара конференцияны йыл һайын үткәреү зарурлығы хаҡында белдерҙе. «Исламдың тыныслыҡ һөйөүсе дин булыуын халыҡҡа еткереү, кешеләр араһында яҡшы мөнәсәбәттәргә өндәүен аңлатыу – төп бурысыбыҙ», – тине республика башлығы.

Тәлғәт Тажетдин Кәрим Хәкимовтың ысын мосолман булараҡ, иленә һәм Аллаһы Тәғәләгә хеҙмәт итеүенә туҡталды, хаж ҡылыусыларҙың йылдан-йыл күбәйә барыуына һөйөнөс белдерҙе. Фәһемле фекерҙәр ҙә яңғыраны. Мәҫәлән, Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара

итеү академияһы ректоры Сергей Лаврентьев Башҡорт дәүләт университетында Көнсығышты өйрәнеү буйынса үҙәк ойоштороруға кәрәклеген әйтте. Шулай уҡ РФ Фәндәр академияһы Көнсығышты өйрәнеү институтының ғәрәп һәм ислам донъяһын тикшереүҙәр үҙәге етәксеһе Александр Филоник, Сәғуд Ғәрәбстаны короллегенең Мәккәләге сит ил эштәре министрлығының төбәк бүлеге директоры Мөхәммәт Тайып һәм башҡалар исламдың изгелеккә һәм матурлыҡҡа саҡырыуы тураһында һөйләне.

Арҙаҡлы шәхестең юбилейына арналған саралар М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында ла булып үтте. Н. Асанбаевтың «Ҡыҙыл паша» спектакле буйынса театрлаштырылған тамашаны күптәр һоҡланып ҡабул итте. Кәрим Хәкимов ролен башҡарыусы артист Әхтәм Абушаһмановты сәхнәлә күреү конференцияла ҡатнашыусылар өсөн үҙе бер көтөлмәгән ҡыуаныс булды.

«Райт» кинокомпанияһы төшөргән «Карим Хакимов. Аравийский визирь Кремля» исемле бер сәғәттән ашыу барған фильм ошондай юғары интеллектлы, уҡымышлы, һиҙгер күңелле, тәрән зиһенле дипломаттың ғәрәп донъяһында, ғөмүмән, Яҡын көнсығышта бөгөн дә юҡлығына баҫым яһай.

Юбилейға бағышланған сараларҙа БР Үҙәк дәүләт тарих архивы, “Ғилем”, “Башҡортостан энциклопедияһы”, Зәйнәб Биишева исемендәге “Китап” нәшриәттәре, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ла әүҙем ҡатнашып, шәхестең тормошо, эшмәкәрлеге хаҡында һәм дини әҙәбиәт күргәҙмәләре ойоштorҙо.

***

Башҡортостан яҙыусыларының сираттағы съезы алдынан Мәсетле районында Башҡорт әҙәбиәте көндәре үтте. Тойғон, Рәмил Йәнбәк, Ринат Камал, Зөһрә Алтынбаева, Зөфәр Вәлит булған төркөмдө Яҙыусылар союзының әҙәби консультанты Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина етәкләне.

Әҙиптәр Х. Фәтҡуллин исемендәге Дыуан-Мәсетле, Ләмәҙтамаҡ урта мәктәптәрендә уҡыусылар һәм уҡытыусылар менән осрашты. Оло Ыҡтамаҡтағы район мәҙәниәт һарайында үткән төп сарала хакимиәт башлығы урынбаҫары Рушан Ғәлимов яҡташтары исеменән әҙәбиәт көндәрендә ҡатнашыусыларға рәхмәт белдерҙе, ошо райондан сыҡҡан шағирә Зөһрә Алтынбаеваны юбилейы менән тәбрикләне. Өфө ҡунаҡтарының сығыштары концерт номерҙары менән аралашып барҙы.

Әҙиптәрҙе район хакимиәте башлығы И.П. Могильников ҡабул итте.

***

С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ирек Кинйәбулатов, шағир, ветеран-журналист Рәсих Ханнанов, Өфөләге Ҡырмыҫҡалы яҡташтар ойошмаһы рәйесе, “Тамаша” журналының баш мөхәррире Фәнил Ҡоҙаҡаев Ҡырмыҫҡалы районы мәҙәниәт йортонда район китапханалар хеҙмәткәрҙәре менән осрашты. Ихлас аралашыу ваҡытында һүҙ бөгөнгө әҙәбиәт, матбуғат, китап сығарыу, уны уҡыусыға еткереү тураһында барҙы. Ҡунаҡтар район балалар китапханаһына райондан сыҡҡан яҙыусыларҙың автографлы китаптарын бүләк итте.

***

112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы музейында әленән-әле төрлө осрашыу саралары үткәрелеп тора. Уҙған айҙа “Башҡорт аты – хәрби ат та, иптәш тә” тигән әҙәби-музыкаль кисә уҙҙы. Осрашыуға ошо дивизияның ветераны Кинйәкәев Ғәли Хәйретдин улы саҡырылғайны. Ул атлыларҙың батырлыҡтары, башҡорт аттарының яу яланындағы сыҙамлыҡтары тураһында иҫтәлектәр һөйләне. 102-се башҡорт гимназияһы уҡытыусыһы Рита Тимерғәлина Ирек Кинйәбулатовтың легендар генерал Таһир Кусимовҡа арналған “Арғымаҡта” поэмаһынан өҙөк уҡыны. Кисәгә шағир үҙе лә саҡырылғайны, ул шайморатовсыларға арналған йәнә бер әҫәрен уҡып ишеттерҙе.

Осрашыуҙа шулай уҡ Ғ. Сәләм исемендәге республика йәштәр премияһы лауреаты шағир Хисмәт Юлдашев, йырсы Илнур Миһманов, журналист Фәрит Вахитов, “Төньяҡ амурҙары” хәрби-тарих клубы етәксеһе Илдар Шәйәхмәтов, һ.б. ҡатнашты. Осрашыу аҙағында уҡыусы балалар концерт номерҙары күрһәтте.

## Магнитта – әҙәби филиал

Силәбе өлкәһенең Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмә-ағзалары Магнитогорск ҡалаһында үҙҙәренең филиалын ойошторҙо. Сарала ҡала хакимиәтенең мәҙәниәт бүлеге мөдире Александр Логинов, Учалынан Мәүлит Ямалетдин ҡатнашты. Александр Логинов: “Ҡала хакимиәте яғынан әҙәби филиалға ярҙам ҡулы һуҙыласаҡ, киләсәктә уға махсус урын бүленәсәк һәм башҡорт әҙәбиәтен үҫтереүҙә булышасаҡ”, – тип белдерҙе һәм ҡунаҡтарға “Магнитогорск” тигән китап бүләк итте.

М. Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмәнең күсмә ултырышында Әбйәлил районында йәшәүсе Әсхәл Әхмәт-Хужа, филология фәндәре кандидаты Ҡамса Мортазин, “Магнитогорск” китабының текст авторы Миңнихан Ҡотлохужин, шағирҙар Азамат Усманов, Ғабдулхаҡ Әхмәтов, Ҡәҙриә Исхаҡова, Бибикамал Зөбәйерова һ.б. ҡатнашты һәм сығыш яһаны. Филиалдың етәксеһе итеп Магнитогорскиҙа йәшәүсе шағирә, балалар өсөн китап авторы Фаиза Мәғәсүмова һайланды.

Шулай итеп, күптәнге теләк бойомға ашты: Силәбе өлкәһенең Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмәнең Магнитогорск ҡалаһында “Урал ынйылары” филиалы ойошторолдо.

Силәбе өлкәһендә башҡорт әҙәбиәтен пропагандалауға һәм үҫтереүгә арналған сара “Башҡорт сәнғәте йорто” артистары әҙерләгән йөкмәткеле концерт менән тамамланды. Магнитогорск ҡалаһында башҡорт мәҙәниәтен үҫтереүҙә әүҙем ҡатнашҡандары өсөн “Башҡорт сәнғәте йорто” директоры, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Рәшиҙә Мортазинаға, һәүәҫкәр композитор Азамат Усмановҡа, шағирә Фаиза Мәғәсүмоваға, уҡытыусы Гөлсөм Хисмәтоваға Башҡортостан Республикаһының Силәбе өлкәһендәге даими вәкиле Мөхәмәтулла Хафизов исеменән Рәхмәт хаттары тапшырылды.

***

Республика Милли әҙәбиәт музейы М. Ғафуриҙың йорт-музейында быйыл күркәм юбилейҙарын уҙғарасаҡ күренекле шағирәләр Әнисә Таһирова, Тамара Ғәниева менән осрашыу үткәрҙе. Осрашыуға М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты студенттары шағирәләр ижадын өйрәнеп, ентекле әҙерләнеп килгәйне.

Башта шағирәләр әҫәрҙәрен уҡып ишеттерҙе, бөгөнгө тормошҡа һәм әҙәбиәткә ҡарата фекерҙәре менән уртаҡлашты. Уларҙың ижады хаҡында Ҡ. Аралбай, И. Кинйәбулатов, Ф. Ғөбәйҙуллина, филология фәндәре кандидаты З. Әлибаев һәм башҡалар һөйләне.

### Ҡотлайбыҙ!

Башҡортостан Республикаһы Президенты Р.З. Хәмитов Указына ярашлы, балалар һәм үҫмерҙәр өсөн әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендә Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге Башҡортостан Республикаһы дәүләт премияһы “Ҡолонсаҡ”, “Турғайҙар рәхмәте” китаптары өсөн Кинйәбулатова Кәтибә Кәрим ҡыҙына бирелде.

### Иҫкә алабыҙ...

Яҙыусылар союзы бинаһында ғүмере ҡапыл өҙөлгән Ғилман Ишкининдың ижадына арналған Хәтер кисәһе булды. Унының үҙенсәлекле шиғриәте, шәхесе хаҡында Рауил Бикбаев, Ҡәҙим Аралбаев, Ирек Кинйәбулатов, Марс Әхмәтшин, Мөхәммәт Закиров, Лариса Абдуллина, Рита Фәтҡуллина, Зәки Әлибаев, Луиза Сәмситова, Дамир Шәрәфетдинов, яҡташтары Хәсән Назар, Гөлсирә Ғиззәтуллина, Айҙар Хөсәйенов һ.б. тулҡынланып һөйләне. Ошо йылдың февраль башында ғына арабыҙҙан киткән шағирҙың ижади өлгөләрен тулыраҡ баҫтырып сығарыу, иҫтәлектәр туплау хаҡында тәҡдимдәр әйтелде.

Кисәне “Шоңҡар” журналының баш мөхәррире Азамат Юлдашбаев алып барҙы.